Элим Зарипов

# ЭЙ ЯЙЫК ЙОРТ, ЯЙЫК ЙОРТ


БОРОНҒО
ТАБЫН ДӘҮЛӘТЕ
ТАУҙАРЫ
УРАЛ
Казан
Кама
Агизел
Изел
Тобол
Яйык
Обь
Енисей
Барынауыл
Иртыш
Алтай
–Табын иле XII б. – XIII б. башында
–Табын иле XIII б.– XIV б. башында

Әлим Барый улы Зарипов Учалы районының Рысай ауылында тыуып үҫкән. Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетын тамамлай. Әле үҙ яғында мәктәп директоры булып эшләй. Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы.

Әлим Зарипов

# Эй яйык йорт, яйык йорт

*Башҡортостан тарихы буйынса*
*өҫтәлмә мәғлүмәттәр*

Авторзан.
Эшкәҙәҙ уҡытмар теләп
Азар
20.09.1999.
Сибай калаҡ.

ӨФӨ
КИТАП
1998

ББК 63.3(2) БАШ
З 27 З 27

Рецензенты — тарих фәндәре докторы *Рим Янгужин*

З $\frac{4702110300-184}{М\ 121(03)-98}$ 76—98

ББК 63.3(2) БАШ
З 27

ISBN 5-295-022005

© Зарипов Әлим, 1998

***«Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш»***

Ризаитдин Фәхретдинов, XIX б. аҙағында — XX б. башындағы башҡорт халҡының күренекле философы, мәғрифәтсеһе, тарихсыһы, яҙыусыһы һәм педагогы.

## *АВТОРҘАН*

Хөрмәтле уҡыусым! Һин ҡулыңа алған был китап Яйыҡ йорт тарихы буйынса донъя күргән тәүге дөйөмләштерелгән хеҙмәт. Беҙҙең төбәктең иң боронғо замандан алып бөгөнгө көнгә тиклемге тарихын яҡтыртырға тырыштыҡ беҙ унда. Төбәгебеҙ тарихының әлегәсә яҙылмауының төп сәбәбен быға тиклем булған тарихсыларыбыҙҙың ҡулынан эш килмәүҙә түгел, ә был хеҙмәткә тәүәккәлләп тотонорға һәм уны алып барып сығарырға мөмкинлек булмауынан эҙләргә кәрәктер. Икенсенән, тиҫтәләрсә йылдар хакимлыҡ иткән тоталитар режим осоронда тарихыбыҙ тулыһынса тиерлек боҙоп күрһәтелде, оло шәхестәребеҙгә яла яғылды, ваҡиғаларға объектив баһа бирелмәне. Бары тик һуңғы бер нисә йылда, билдәлелек тормошобоҙға үтеп инеп, республикабыҙ үҙаллылыҡ алғандан һуң ғына, тарихыбыҙҙы бөйөк державасылыҡ күҙлегенән сығып яҡтыртыуҙан ҡотола алдыҡ, ваҡиғаларға, шәхестәребеҙгә дөрөҫ баһа бирep, ниһайәт тарихи ысынбарлыҡты сағылдырған китаптарҙы ҡулыбыҙға ала башланыҡ...

Күп йылдар буйына мәктәптәребеҙҙә тырышып-тырышып сит илдәрҙең тарихын өйрәндек, ә үҙ республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың, төбәгебеҙҙең тарихын өйрәнеүҙән балаларыбыҙҙы мәхрүм иттек. «Донъяла йәшәргә теләгән һәм башҡалар рәтендә ғүмер һөрөргә теләгән милләт үҙенең уҡтан көндәрен белһен һәм үҙ тарихы менән дуҫ булһын», — тиҙәр. Бик дөрөҫ һүҙҙәр! Һәр төбәктең үҙ тарихы, үҙенә генә хас тарихи урындары, тарихи ҡомартҡылары, күренекле шәхестәре бар. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙың тамырҙары тыуып үҫкән еребеҙҙә. Бында беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың һөйәктәре ята, был ерҙәр Ҡобағош, Ҡарас, Мәхмүт сәсәндәрҙең, башҡорт ихтилалдары етәкселәре Йосоп Арыҡов, Ҡараһаҡал, Бәпәнә Төрөпбирҙин, Салауат Юлаевтарҙың, кантон башлығы генерал Мөхәмәтйән Буҙыҡаевтың, рус-япон һуғышы геройы, генерал Ғайса Рәсүлевтың, Зәки Вәлидиҙең уң ҡулы Талха Рәсүлевтың, XIX быуаттың бөйөк мәғрифәтселәре Зәйнулла ишан Рәсүлев һәм Мифтахетдин Аҡмулла эҙҙәрен һаҡлай. Үҙ ваҡытында Зәки Вәлидиҙе бик йылы ҡабул иткән Учалы тупрағы граждандар һуғышы геройы Муса Мортазиндың да ватаны. Бер һүҙ менән әйткәндә, тарихыбыҙ бик бай беҙҙең. Ошо данлы һәм шанлы тарихыбыҙҙы белергә бурыслыбыҙ беҙ. Ата-олатайҙарыбыҙҙың бөйөк эштәре алдында баштарыбыҙҙы эйергә тейешбеҙ, үрҙә һанап үтелгән һәм был исемлеккә инмәй тороп ҡалған арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән ғорурланырға хаҡлыбыҙ.

Беҙҙең төбәгебеҙҙең тарихын әҙме-күпме яҡтыртҡан был уҡыу ҡулланмаһы Зәки Вәлиди Туғандың һәм Муса Мортазиндың билдәле китаптарына, Н. А. Мәжитов менән Ә. Н. Солтановаларҙың «Иң боронғо замандан XVI быуатҡа тиклем Башҡортостан тарихы» исемле капиталь хеҙмәтенә таянып

яҙылды. Уларҙан тыш, А. А. Әҙелғужиндың район гәзитендә 80-се йылдар уртаһында баҫылған мәҡәләләре файҙаланылды. Троицк, Силәбе һәм Өфө ҡалаларындағы архивтарҙа эшләү һөҙөмтәһендә тупланған бай һәм үҙенсәлекле материалдар тарихыбыҙға дөрөҫ күҙлектән сығып ҡарарға мөмкинлек бирҙе.

Төбәгебеҙ тарихының системалы курсын булдырыуға йүнәлтелгән был тырышлығыбыҙ, уҡыусыларыбыҙ тарафынан хуплау табыр, уларҙың китапҡа ҡарата булған фекерҙәре киләсәктә унда булған етешһеҙлектәрҙе һәм кәмселектәрҙе бөтөрөргә ярҙам итер, тигән фекерҙә ҡалабыҙ.

I булек

# ИҢ БОРОНҒО ОСОРҘАН УРЫҪ БАТШАЛЫҒЫНА ҠУШЫЛҒАНҒА ТИКЛЕМ

## БОРОНҒО ЗАМАНДА БЕҘҘЕҢ ТӨБӘК

Көньяҡ Уралда кешеләр ҡасандан бирле йәшәй? Һуңғы йылдарҙағы археологик асыштарға нигеҙләнеп, бик боронғо замандан бирле, сама менән бынан 200 мең йыл элек тәүге кешеләр көньяҡ әлкәләрҙән күсеп килеп, Уралда йәшәй башлағандар, тип әйтә алабыҙ. Беҙҙең төбәккә килгәндә, кешеләр бында 100 мең йыл самаһы йәшәйҙәр[1]. Беҙҙең тирәлә шунан да боронғораҡ осорҙа кешеләр йәшәгәнлеген раҫлаған тарихи ҡомартҡылар археологтарыбыҙ тарафынан табылмаған әле. Ул заманда, йәғни палеолит осоронда йәшәгән неандерталецтарҙан беҙҙең заманға бик әҙ генә нәмә килеп еткән: таштан, йәшмәнән яһалған ҡырғыстар, бысаҡтар, тишкестәр һәм башҡа көнкүреш кәрәк-яраҡтары. Хеҙмәт ҡоралдары бик ябай булыуға ҡарамаҫтан, был боронғо кешеләр яһалма рәүештә ут таба, торлаҡ төҙөй, кейем әҙерләй белгән. Тамаҡ аҫырау өсөн эре малдарға (мышы, мамонт, носорог) күмәкләп һунар иткәндәр, еләк-емеш йыйғандар, тамырҙарҙы һайлап ҡаҙып ала белгәндәр.



*Таш бысаҡтар*

Беҙҙең эраға тиклемге 40—10 меңенсе йылдар тарихта һуңҙ таш быуаты тип атап йөрөтөлә. Климат шарттары был осорҙа ныҡ үҙгәрә, һыуыта, һөҙөмтәлә беҙҙең төбәктә йәшәгән кешеләргә еүеш һәм һалҡын климат шарттарына яраҡлашырға тура килә.

Эш ҡоралдарының һаман да әле бик тупаҫ булыуы ошо осорҙа йәшәүселәрҙе ҡыуыштарын ҡалдырып, йылыраҡ урындар эҙләргә мәжбүр итә.

Кешеләр йәшәү өсөн мәмерйәләрҙе яраҡлаштыра. Башҡортостанда шундай урындарҙың береһе — бөтә донъяға билдәле Шүлгәнташ мәмерйәһе.

Ваҡыт үтеү менән хеҙмәт ҡоралдары әкренләп төрлөләнә, камиллаша, яҡшыра бара. Таш менән йәшмәнән тыш, эш ҡоралдары етештереү өсөн һөйәк киң файҙаланыла башлай. Һөйәктән энәләр, тишкестәр,

башҡа осло әйберҙәр эшләнә. Эре хайуандарға һунар итеү төп йәшәү сығанағы булып тора.

ҺУҢ таш быуатында Көньяҡ Уралға, шул иҫәптән беҙ йәшәгән төбәккә лә, бер нисә тулҡын булып, Урта Азиянан кешеләр төркөмө күсенә.

Мезолит (урта таш быуат) осоро Көньяҡ Уралда б.э. тиклем 9—7 меңенсе йыллыҡтарҙы үҙ эсенә ала. һауа торошонда ныҡ үҙгәрештәр була: йылыта, һөҙөмтәлә һыуыҡ һауа һәм боҙлоҡтар төньяҡҡа ҡарай сигенә. Хайуандар донъяһы ла һиҙелерлек үҙгәрә: йөнтәҫ носорогтар, мамонттар юҡҡа сыға. Эре көтөүҙәргә тупланып йәшәгән хайуандарға күмәкләп һунар итеү ҙә бөтә. Ошо заманда һунарсылыҡ яңғыҙаҡ характер ала: һунарсылар ваҡ йәнлектәргә, ҡош-ҡорттарға берәмләп һунар итә. һауа шарттарының йылыныуы һөҙөмтәһендә ағастар, үҫемлектәр донъяһы төрлөләнә, шул осорҙа йәшәгән кешеләрҙең рационы байый: тамыраҙыҡ, емеш-еләк, йәшелсә йыйыу, ҡаҙып алыу хужалыҡтың айырым бер тармағына әүерелә. Балыҡ тотоу киң үҫеш ала. Мезолит осоронда йәшәгән тәүтормош кешеһе уҡ-ян, ау, йылым, төрлө тоҙаҡтарҙы киң ҡуллана. Сана, саңғы эшләргә, уларҙы файҙаланырға өйрәнә.

Һунарсылыҡ менән бер рәттән балыҡсылыҡ (беҙҙең төбәк күлдәргә бай, йылғаларыбыҙ ул заманда күп һыулы булған) хужалыҡтың төп тармағы булып тора. Урта таш быуаты кешеләре мәмерйәләрҙе ташлап күл буйҙарында йорттар төҙөп йәшәй башлай. Шундай урындарҙың береһе — Оҙонкүл буйындағы «Морат» тигән боронғо кешеләр йәшәгән урын. Бынан 10 мең йыл элек йәшәгән кешеләр ҡалдырған уны. Иң хайран ҡалдырғаны — бейеклеге 1 метрға еткән таш плиталарҙан ҡыртылаш ергә ҡаҙып һалынған торлаҡ (өй). Был Уралда ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә иң боронғо торлаҡ. Ошо урында йәшәгән кешеләр ҡалдырған, йәшмәнән эшләнгән бик күп эш ҡоралы, ярымфабрикат, бөтәһе 20000 дана төрлө-төрлө әйбер табылған бында. Йәшмә Ҡушкилде ятҡылығынан (ул Оҙонкүлдән Наурыҙға тиклем һуҙылған) алынған булған. Шулай итеп, иң ҡаты йәшмәнән төрлө кәрәк-яраҡ эшләү ул заманда беҙҙең төбәктә киң таралған.

Мезолит осоронда беҙҙең төбәктә йәшәгән кешеләр ярым күсмә тормош алып барған. Ҡышты ҡыртылаш ергә ҡаҙып эшләнгән таш «өйҙәр»ҙә үткәрһәләр, йәйҙе күлдәребеҙ тирәләй күсенеп йөрөгәндәр.

Этте ҡулға эйәләштереү арҡаһында боронғо кешеләргә һунар итеү күпкә еңелләшкән.

Неолит (б.э.т. VI—IV меңенсе йыллыҡтар) осоронда беҙҙең төбәктә лә ҙур үҙгәрештәр була. Таштан хужалыҡ, көнкүреш әйберҙәре етештереүҙә иҫ китмәле оҫталыҡҡа өлгәшелә. Йәшмә, саҡматаш, гранит, кварц, төрлө биҙәнеү таштары — барыһы ла киң файҙаланыла. Таш эшкәртеү буйынса оҫтаханаларҙың һаны ҡырҡа арта: «Учалы», «Ҡарағайлы I», «Оҙонкүл» һ.б.

Кешеләр күл буйҙарында йәшәүҙе ҡулайыраҡ күрә. Шундай урындарҙың береһе — «Бәләкәй Учалы II». Текә ҡаяны соҡоп эшләнгән, бер юлы йорт та, оҫтахана ла ролен үтәгән был урында бынан 6000



*Таш быуат әйберҙәре. Сакматашлы коралдар.*

йылдан ашыу элек таш әшкәртеү оҫталары йәшәгән. Ер иҙәндә йәшмәнән эшләнгән көнкүреш әйберҙәре, йәшмә ярсыҡтары, төрлө нуклеустар күп табылған.

Беҙҙең төбәктә көн итеүселәр был дәүерҙә балыҡсылыҡ менән һунарсылыҡтан тыш малсылыҡ һәм игенселек һәнәрҙәрен үҙләштерә. Ҡаҙыныуҙар үткәргән ваҡытта йорт хайуандарының һөйәктәренең, таш ҡул тирмәндәренең йыш осрауы быға дәлил.

Беҙҙең төбәк өсөн энеолит осоро — ул б.э.т. IV—III меңенсе йыллыҡтар. Был осорҙа кешеләр күл, йылға буйҙарын ташлап, яландарҙы үҙләштерә. Халыҡ далаға күсенеп, шунда көн итә башлай. Күсмә малсылыҡ формалаша. Далала тәүге ҡурғандар барлыҡҡа килә.

*Ҡул тирмәне*

Был дәүерҙә ҡәбиләләр союздары ойоша. Шуларҙың береһе, беҙҙең төбәкте лә үҙ эсенә алғаны, Суртанды археологик культураһы исеме аҫтында билдәле. Был беҙҙең төбәктәге археология фәненә билдәле булған иң боронғо культура. Ул заманда яҙыу булмағанлыҡтан, был ҡәбиләләр союзының исемен дә, ниндәй телдә һөйләшеүҙәрен дә асыҡ ҡына әйтеп булмай, шуға күрә риүәйәттәргә мөрәжәғәт итергә генә ҡала. Боронғо риүәйәттәрҙә Көньяҡ Уралда, шул иҫәптән беҙҙең төбәктә лә, бик күп йылдар элек, әле баҡыр металлургияһы яңы барлыҡҡа килгән заманда, ниндәйҙер серле «чудь» исемле халыҡтың йәшәүе хаҡында һөйләнә. Боронғо башҡорт легендаларында улар «соҡсон» исеме менән телгә алына. Ошо рудалы ерҙәргә хужа булып, руда сығарып, уны эшкәртеп йәшәгәндәр ҙә инде беҙҙең төбәктә баҡыр металлургияһына нигеҙ һалыусы «соҡсондар».

Иң боронғо баҡыр рудниктары беҙҙең төбәктә Уй йылғаһы буйында, Юшалы күле янында, баҡыр ятҡылыҡтары ер өҫтөнә сыҡҡан урындарҙа археологик эҙләнеүҙәр барышында табылған. Ағас күмеренең етерлек булыуы (Учалы ере борон-борондан урмандарға бай булған) сығарылған руданың шул урында эшкәртелеүенә булышлыҡ иткән. Шулай итеп, энеолит осоронда Баймаҡ, Әбйәлил райондары менән бер рәттән, беҙҙең төбәк тә иң тәүге металлургия усаҡтары барлыҡҡа килгән ер.

Һығымта: Учалы ерендә баҡыр рудаһы сығарыуҙың һәм уны эшкәртеүҙең кәм тигәндә 5 мең йыллыҡ тарихы бар.

Баҡыр металлургияһының барлыҡҡа килеүе һәм киң үҫеш алыуы, күсмә малсылыҡтың барлыҡҡа килеүе йәмғиәт ҡоролошонда ҙур үҙгәрештәргә килтерә. Был үҙгәрештәр беҙҙең төбәкте лә урап үтмәй. Ирҙәр хеҙмәте алғы планға сыға. Әсә ырыуҙарын ата ырыуҙары алмаштыра, патриархат урынлаша. Милек тигеҙһеҙлеге лә күҙгә ташлана: ҡаҙыныуҙар барышында археологтарыбыҙға ябай ҡәберҙәр менән бер рәттән бик бай ҡәберҙәр, ҡурғандар ҙа осрай.

Бронза* быуаты б.э. тиклем III меңенсе йыллыҡтың аҙағында башланып II меңенсе йыллыҡты тулыһы менән үҙ эсенә ала.

Беҙҙең төбәк ҡаҙылма байлыҡтарға элек-электән бик бай булған. Бронза етештереү өсөн кәрәк булған ҡурғаш та күп булған. Шуға ла баҡыр быуаты бөтөп, бронза быуаты башланғас, беҙҙең төбәктә тормош һүнеп ҡалмай, ә яңы көс менән дауам итә. Ҡурғаш менән бәйле ер-һыу атамалары беҙҙең районда әле лә осрай. Мәҫәлән, Юлдаш ауылы эргәһендә Яйыҡҡа ҡойған йылға — Ҡурғаш тип йөрөтөлә.

Яңы ҡәбиләләр союздары ойоша, улар үҙҙәре менән беҙҙең төбәккә яңы археологик культураны алып килә. Тарихҡа улар абаштар исеме менән билдәле (б.э.т. XVII—XIV быуаттар).

Абаштар йылға, күл буйҙарында яртылаш ергә ҡаҙып эшләнгән тура дүртмөйөш формаһындағы ер өйҙәрҙә йәшәгән.

Абаштарҙың хужалығында төп малды һыйыр тәшкил иткән, һарыҡ-кәҙә икенсе урында, ат менән сусҡа бик аҙ аҫыралып, өсөнсө урында торған. Абаштар яҡшы малсылар һәм шәп игенселәр булған. Бынан тыш оҫта металлург булып та дан ҡаҙанғандар. Уй йылғаһы

* Бронза — ҡурғаш ҡушылған баҡыр иретмәһе.

буйындағы Ташҡаҙған ятҡылығынан алынған мышаяҡлы баҡыр рудаһынан эшләнгән ураҡтар беҙҙең төбәктән йөҙәр саҡрым алыҫлыҡта, хатта Ағиҙел буйҙарында ла күп данала табылған.

Андрон культураһы бик ҙур майҙанды биләгән: Урал, Көнбайыш Себер, Ҡаҙағстан. Был ҡәбиләләр союзына ингән ырыуҙар ҙа, абаштар һымаҡ, яртылаш ергә ҡаҙып эшләнгән ер өйҙәрҙә көн иткән. Әммә улар ағастан өй бурау оҫталығына ла эйә булған. Андрондарҙан беҙҙең заманға күп һанлы ҡурғандар килеп еткән. Тик шуныһы: беҙҙең төбәктәге ҡурғандар аҫтында күмелгән кешеләр, үлгәндән һуң тәүҙә яндырылғандар һәм шунлыҡтан ҡәбер төбөнә тик көл өйөмө генә һалынған. Көл өйөмө эргәһенә аҙыҡ-түлек менән тулы һауыт-һабалар ултыртылған. Бынан тыш ҡайһы бер ҡәберҙәрҙә иттән таҙартылған кеше һөйәктәре (өйөм итеп һалынған) осрай. Дини йолаға ярашлы, үлгән кешенең кәүҙәһе ҡалҡыу урынға (тау башына) мендерелеп, шунда ҡалдырылған. Йыртҡыс йәнлектәр, ҡош-ҡорттар уны иттән, тарамыштан, һеңерҙәрҙән таҙартҡас ҡына һөйәктәр йыйып алып ҡайтылып, ҡәбергә күмелгән, ә уның өҫтөнә ҡурған өйөлгән. 1000 йыл үткәс был йола Урта Азия, Иран, һуңынан Себер халыҡтары араһында тарала. Мәғәнәһе: мәйетте соҡоған ҡоштар менән үлгән кешенең йәне күккә — йыһанға күтәрелә, йәнәһе.

Андрондарға малсылыҡ та, игенселек тә берҙәй үк хас. Бынан тыш улар оҫта металлург та булған. Андрон культураһының сәскә атҡан осоро б.э.т. XV—XII быуаттарға тура килә. Яңы металлургия усағы — Андрон усағы — барлыҡҡа килә. һәм ул шул осорҙоң иң ҡеүәтле металлургия усағына әйләнә. Бронза әйберҙәр (хеҙмәт, һуғыш ҡоралдары, көнкүреш кәрәк-ярағы, биҙәнеү әйберҙәре) ҡойоу юлы менән дә, сүкеү юлы менән дә бик күп күләмдә етештерелә. Ошо төбәктең бронза әйберҙәре бик ҙур биләмәлә — Ҡытайҙан алып Днепрғаса тарала.

Андрон культураһына ҡараған ҡәберлектәрҙең береһе Наурыҙ ауылы эргәһендә, Ҡантүбә тауы битләүендә табылған. Ҡәберлек диаметры 18—20 метр, бейеклеге 1 метр булған бер нисә ҡурғандан тора.

Андрондар ҡалдырған ҡомартҡылар араһында иң серлеләре, хайран ҡалдырғандары — ҡәлғә-ҡаласыҡтар. Бөгөнгө көндә 20-нән ашыу шундай ҡомартҡы билдәле, шулар араһында исеме бөтә донъяға билдәлеһе — Арҡайым ҡәлғә-ҡаласығы. Әйтергә кәрәк, 600—800 йыл үткәс ошондай уҡ ҡәлғә-ҡаласыҡтар Урта Азияла ла барлыҡҡа килә.

Донъя күләмендәге әһәмиәткә эйә булған Арҡайым ҡәлғә-ҡаласығы Яйыҡ йылғаһының һул яҡ ярында, Ҡараған тигән бәләкәй генә йылға буйында, Сибай ҡалаһынан сама менән 70 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Тәгәрмәс формаһында, диаметры 180 метр уның. Ҡәлғә-ҡаласыҡ 6—8 метр бейеклегендә һәм 3—4 метр ҡалынлығында стена менән уратып алынған булған.

Арҡайым б.э.т. XVIII—XVII быуаттарҙа сәскә атҡан ҡалаға әүерелә. Кешелек цивилизацияһының башланғысы тип өйрәнелгән Боронғо Грек һәм Боронғо Рим дәүләттәренән кәм тигәндә мең «йәшкә» ҡартыраҡ, йәғни Боронғо Египет, Шумер, Аккад, Вавилон дәүләттәре менән йәштәш ул!

Арҡайым заманы менән бөгөнгө көндө шаҡтай ҙур дәүер айыра. Был ваҡыт эсендә Урал аша тиҫтәләгән миграция үткән, ырыу-

ҡәбиләләр күсенгән. Телдәр үҙгәргән. Әммә был халыҡтың бөтөнләй алмашыныуы тураһында һөйләмәй. Быны антропологтар ҙа раҫлай. Шуға ла Арҡайымды Уралда йәшәгән бар халыҡтарҙың да, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, уртаҡ ҡомартҡыһы тип ҡарау иң дөрөҫө булыр!

Арҡайымды төҙөгән кешеләр телдәре, диндәре буйынса кемдәр булғандар һуң? Боронғо уғырҙар ҙа, боронғо төркиҙәр ҙә түгел, ә фарсы телле ырыу-ҡәбиләләр төҙөгән уны.

Арҡайым ҡәлғә-ҡаласығы ниндәй маҡсаттарға хеҙмәт иткән һуң? Баҡыр рудниктарын һаҡлау өсөн терәк-ҡәлғә ролен үтәгән. Был — беренсенән. Икенсенән, алыҫ илдәрҙән килгән сауҙагәрҙәр өсөн каруанһарай булып торған. Өсөнсөнән, иң һоҡландырғаны: Арҡайымдың феномены — уның ҙур бер обсерватория булғаны. Ер йөҙөндә Британия утрауҙарында урынлашҡан Стоунхендж обсерватория-ҡаласығынан һуң, Арҡайым — икенсе шундай обсерватория.

Шулай итеп, меңәр йылдар элек тә беҙҙең төбәктә тормош ҡайнап торған, иҡтисады ныҡ үҫешкән ырыу-ҡәбиләләр көн иткән: донъя цивилизацияһы ике йылға — Египет, һиндостан, Ҡытай менән бер ҡатарҙан ошо беҙ көн иткән төбәктән дә башланып китеп, тирә-йүнгә таралған!

Андрондарҙың шундай ҙур ерҙә таралып көн итеүҙәре уларҙың һуғыш оҫталығы менән дә аңлатыла. Ғәскәрҙә төп көстө аттарға егелгән ике тәгәрмәсле һуғыш арбалары тәшкил иткән, һуғыштар ваҡытында бик күп мал, башҡа байлыҡ баҫып алынған, һөҙөмтәлә, андрондарҙың ҡәберҙәрендә беренсе тапҡыр үлгән кеше янына күп итеп мал (ат, башҡа йорт хайуандарын) үлтереп һалыу һүрәтен күҙәтәбеҙ. Был йола андрондарҙан башланып XIII—XIV быуаттарға тиклем, йәғни өс меңә йылға яҡын дауам иткән, бары тик ислам диненә күсеү менән генә туҡтаған.

Андрон культураһы составында ғалимдар 3 ҡәбилә төркөмөн күрһәтә. Шуларҙың иң көнбайыштағыһына, беҙҙең төбәкте лә эсенә алғанына, археолог К. В. Сальниковтың еңел ҡулы менән Алакүл культураһы тигән исем бирелгән. Археологтар К. В. Сальников, Н. Г. Рутто Көньяҡ Уралда «бура-алакүл» ҡомартҡылар төркөмөн айырып күрһәтә. Уларға бары тик бура һәм бары тик алакүл культураларына ғына хас элементтарҙың бергә уҡмашыуы хас. «Бура-алакүл» төркөмөнә ингән археологик ҡомартҡылар: Баҙарғол, Өргөнкүл, Яңы Байрамғол ауылсыҡтары. Бик күп факттарҙы өйрәнеп, улар бура һәм андрон (алакүл) ҡәбиләләренең берҙәм этнокультура массив тәшкил итеүҙәрен, оҡшаш телдәрҙә һөйләшеүҙәрен нигеҙләнеләр (һинд-иран телдәр ғаиләһенең төрлө диалекттарында).

Ошо беҙ йәшәгән ерҙәрҙән ҡуҙғалып, б.э.т. II меңенсе йыллыҡтың урталарында, меңәрләгән һуғыш арбаларына ултырған ғәскәр Иран яҫы таулығын баҫып алып, һинд үҙәненә үтеп инә. Легендар арийҙар — бөгөнгө индус һәм иранлыларҙың (фарсыларҙың) ата-бабалары була улар. Бының нигеҙендә ысынбарлыҡ ята, сөнки, антропологтар бура ҡәбиләләренең скифтар менән, ә алакүлдәрҙең — сак-сармат күскенселәре менән генетик туғанлығын иҫбат иттеләр ҙә инде. Бор онғо грек яҙыусылары һәм тарихсылары, үҙ сиратында, сак-сар-

маттарҙың фарсыларға аңлашылған телдә һөйләшеүҙәрен яҙып ҡалдырғандар. Һинд-иран символикаһы тип һаналған свастика бура һәм алакүл ҡәбиләләренән ҡалған һауыттарҙа иң күп ҡулланылған орнаменттарҙың береһе булып тора.

II меңенсе йыллыҡтың икенсе яртыһында ҡәлғә-ҡаласыҡтар урынына иркен ауылсыҡтар барлыҡҡа килә. Халыҡ ултыраҡ, тыныс тормошҡа күсә. Ҡәберҙәрҙә һуғыш арбалары һәм һуғыш ҡоралдары осрамай. Бронза быуатының һуңғы осоронда черкаскүл культураһы барлыҡҡа килә (б.э.т. XVI—XI быуаттар). Был культураға ҡараған комартҡылар Миәс йылғаһы башында осрай һәм артабан төньяҡҡа ҡарай дауам итә. Уғыр этносына ҡараған ҡәбиләләр Урта Урал аръяғының урман зонаһынан ошо ерҙәргә үтеп инә. Уларҙың торлаҡтары ергә һай ғына ҡаҙылыуы, майҙаны 20—25 квадрат метр, дүрткел формала булыуҙары менән башҡа культураларҙан айырылып тора.

Миәс йылғаһының көньяғы б.э.т. XII—IX быуаттарҙа шул уҡ андрон, абаш ҡәбиләләре, нәҫелдәре көн күргән ер булып ҡала бирә. Был ырыу-ҡәбиләләрҙең тормошонда малсылыҡ ҙур урын биләй башлай. Ергә ҡаҙып эшләнгән ер өйҙәр бөтә, бар урында ла кешеләр ағастан бурап эшләнгән өйҙәрҙә йәшәй. Таш эшкәртеү технологияһы тупаҫлана. Бронза металлургияһы көрсөккә терәлә.

## Иртә тимер быуаты осоро (б.э.т. X — б.э. IV б.)

Иртә тимер быуаты осорона, дөйөм алғанда, ике ҡатлы иҡтисад хас. Далала — күсмә малсылыҡ, урман-дала зонаһында — ултыраҡ тормош менән йәшәгән малсылыҡ-игенселек хужалығы.

Б.э.т. X—IX быуаттарҙа Көньяҡ Уралдың урман-дала зонаһында урындағы культуралар нигеҙендә исәт (йылға исеменән) культураһы формалаша. Был ҡәбиләләр союзына ингән ырыуҙар башлыса малсылыҡ менән шөғөлләнә. Улар ултыраҡ тормош менән йәшәй, ә малдары ауыл тирәһендә көтөүҙә йөрөй. Йорт хайуандарынан күп итеп ат, һыйыр, һарыҡ, сусҡа аҫрағандар. Малсылыҡтан ҡала икенсе урында һунарсылыҡ торған.

Ошо уҡ дәүерҙә барлыҡҡа килгән яңы культура — горохово культураһы — беҙҙең төбәкте лә үҙ эсенә алған, тип фараз итергә була. Был культураға ҡараған ырыу-ҡәбиләләр күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Әммә улар үҙҙәренән һуң, майҙаны ун мең квадрат метрға еткән ҡәлғә-ҡаласыҡтар ҡалдырғандар. Был нығытылған ҡаласыҡтарҙы улар йылға йәки күл ярҙарында, морондарҙа, текә урындарҙа төҙөгәндәр. Ә ниндәй дошмандарҙан, кемдәрҙән һаҡланған һуң улар, тигән һорау тыуа. Яуап берәү генә: әлбиттә, савроматтарҙан.

Б.э.т. VIII—VII быуаттарҙа хәҙерге Силәбе әлкәһен индереп, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында савроматтарҙың Көнсығыш Урал төркөмө формалаша. Был культураның нигеҙендә боронғо бура һәм андрон культуралары ята. Савроматтар — күскенселәр, уларҙың төп шөғөлө күсмә малсылыҡ булған. Төп байлыҡтарын — мал: өйөр-өйөр ат, көтөү-көтөү һарыҡ, һыйыр тәшкил иткән.

Б.э.т. VI—V быуаттарҙа улар Урта Азия дәүләттәре, Иран менән киң сауҙа бәйләнештәре урынлаштырған. Тарихтың атаһы Геродот

«амазонкалар» тип тасуирлаған ҡатын-ҡыҙҙар — улар савромат ҡатын-ҡыҙҙары. Савромат ҡатын-ҡыҙҙары юлбашсы ла (хәрби походтарҙа), ҡорбан салыусы ла, ат өҫтөндә оҫта һуғышсы ла булған. Йәғни, савроматтарҙың йәмғиәт тормошонда ҡатын-ҡыҙҙар хәл иткес роль уйнаған.

Савроматтар үҙҙәренән һуң бай ҡурғандар ҡалдырған.

Б.э.т. VII—II быуаттарҙа бик ҙур территорияла, Арал диңгеҙенән Уралға тиклемге арала, дах-массагет культураһы хакимлыҡ итә. Ғалимдарҙың билдәләүенсә, дахтар (даи, даих) һәм массагеттар — улар төрлө исем менән йөрөтөлгән бер үк халыҡ.

Беҙ йәшәгән төбәктә лә сама менән бынан ике мең ярым йыл элек ошо дах-массагеттар йәшәгән. Уларҙан тыш, был яҡтарҙа Геродот (б.э.т. V быуат) иҫкә алған исседондар (Исәт йылғаһына исемде шулар биргән), аргиппейҙар («пеләш башлы аргиппейҙар» — Геродот) көн иткән. Ошо уңай менән: башҡорт ырыуҙарының берене булған «таҙҙар» ырыуы ошо аргиппейҙарҙың нәҫелдәре түгелме икән, тигән урынлы һорау ҙа тыуып' ҡуя. Аргиппейҙар алтынға бай ерҙәрҙә йәшәйҙәр, өйҙәр һалмайҙар, тирмәләрҙә көн итәләр, тип яҙа улар тураһында Геродот. «Риппей» (Урал) тауҙары буйында йәшәгән икенсе бер халыҡ — «аримаспалар» тураһында грек тарихсыһы «күп һанлы халыҡ, батыр һуғышсылар, ҙур мал көтөүҙәренә эйәләр», — тип яҙып ҡалдырған.

Беҙҙең эраға тиклем II быуатта йәшәгән икенсе грек тарихсыһы төҙөгән карта бөгөнгө көнгә тиклем килеп еткән. Унда беҙ «Даих» тигән йылғаны күрәбеҙ. «Риммий» тауҙарын табабыҙ. «Даих» бөгөнгө көндә «Яйыҡ» исеме менән билдәле, ә «Риммий» тауҙары Урал тауҙарын аңлата. Шик тыуа, «Риммий» — боҙоп әйтелгән «Ирәмәл» түгелме икән?

Аримаспалар үҙҙәренән һуң үҙенсәлекле ҡурғандар ҡалдырған. Үлгән кешеләрҙе улар тау башына мендереп ерләгән. Ҡәберҙе тәрән ҡаҙымағандар. Ҡәбер өҫтөнә һуңынан күп итеп таш өйгәндәр.

Дахтарҙан да (даи, даих) бөгөнгө көнгә саҡлы бик күп ҡурғандар килеп еткән. Ҡурғандарҙа тәү башлап оҙон ҡылыстар табыла: ат өҫтөндә ултырып һуғышыр өсөн дахтар оҙон ҡылыс уйлап тапҡан. Урта Азияла формалашҡан зороастра дине был ҡәбиләләргә таныш булған, улар шул динде тотҡандар. Зороастра динен башҡорт халҡының мәшһүр «Урал батыр» эпосы менән сағыштырып, академик Н. А. Мәжитов ҙур фәнни асыш яһай: «Урал батыр» эпосының ижад ителеү ваҡыты — кәм тигәндә беҙҙең эраға тиклем VI быуат, йәғни уға иң кәме ике мең ярым «йәш» булып сыға.

Үрҙә исемдәре һанап үтелгән ҡәбилә союздары — синфи йәмғиәт булған. Уларҙа дәүләттең башланғыс формалары барлыҡҡа килгән була. Дах-массагеттар йәшәгән заман — ул башҡорт халҡының (этносының) формалаша башлау осоро. Улар, йәғни дах-массагеттар, исседон-

**Дар,** аргиппейҙар, бороно төрки телендә аралашҡан.

Дах -массагеттар беҙҙең, төбәккә б.э.т. 519 йылдан Һуң, фарсы батшаһы Дарий I уларҙы Арал буйы оазистарынан ҡыҫырыҡлап сығарған-

дан (һуғышта улар еңелеүгә дусар була) һуң күсеп килә. Был яҡтарҙа улар оҙаҡ ваҡыт йәшәй, хатта үҙҙәренең этнонимдарын иң ҙур йылғабыҙға биреүгә өлгәшә («Яйыҡ» — «Даих» һүҙенән).

Беҙҙең эраға тиклем IV быуатта, Урта Азияны Александр Македонский яулап алыу сәбәпле, беҙҙең төбәктә лә ҙур күсенеүҙәр була: ҡәбиләләрҙең бере̇не̇ китә, икенселәре килә. Тормош хәрбиләшә. Ҡурғандарҙа, ҡәберҙәрҙә бик күп ҡорал табылыуы ошо фекерҙе раҫлай.

Б.э.т. II быуаттан алып б.э. IV быуатына тиклемге осор тарихта һун эпохаһы тип атап йөрөтөлә. Б.э.т. IV быуатта Үҙәк Азияла төрки телле күсмә ҡәбиләләр берләшеп, яңы көслө дәүләт барлыҡҡа килтерә: һундар империяһын. Күп тә үтмәй империя тарҡала, илдә граждандар һуғышы ҡуба, һундарҙың төньяҡ төркөмө, еңелгәндән һуң, һуғыша-һуғыша көнбайышҡа ҡарай хәрәкәт итә башлай. Ошо хәбәрҙе алған саҡ, дах-массагет ҡәбиләләренең төп өлөшө Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйына күсенеп китә, скифтарҙы тар-мар итеп, сармат культураһын барлыҡҡа килтерә. Б.э.т. II—I быуаттарҙа Көньяҡ Уралды, шул иҫәптән беҙ йәшәгән төбәкте лә, һундар баҫып ала. Һуңынан, бик күп ғәскәр туплап, тороп ҡалған дах-массагеттарҙы ла йәлеп итеп, көньяҡҡа ҙур поход яһала. Уның һөҙөмтәһендә Бактрия, башҡа әлкәләр баҫып алына.

Б.э.т. II—I быуаттарҙа Урта Азияла яңы көслө дәүләт — Кангюй дәүләте — барлыҡҡа килә. Беҙҙең эраның IV быуатында ғына йәшәүҙән туҡтаған был дәүләткә Көньяк Урал да, тимәк беҙҙең төбәк тә, буйһона.

Һундар тик далала ғына йәшәмәгән, беҙҙең яҡтарға ла, тау-урман зонаһына ла үтеп ингән, һундар менән бәйле урындар Учалы ерендә әлегә билдәле түгел. Ә бына Сыбаркүл ҡалаһы (Малково ауылы) янында һундарҙан ҡалған 20 ҡәбер, 4 ҡурған табылған. Ҡаҙыныуҙар үткәреү һөҙөмтәһендә археологтар күп кенә әйберҙәргә юлыҡҡан: улар башлыса Урта Азия, Ҡытай сығышлы, фин-уғырҙарға ҡарағандары ла байтаҡ ҡына.

## V быуаттан XIII быуатҡа тиклемге осор.

V быуаттан VIII быуатҡа тиклемге осорҙа беҙҙең төбәктә баҡал культураһына ҡараған ҡәбиләләр көн иткән. Улар Көнбайыш Төрки ҡағанатына бойондороҡло булған. Был осорға ҡараған ҡәберҙәрҙән эйәрҙәр табылыуы һуғыш эшендә ҙур үҙгәреш яһалғанлығына — эйәрле аттарға атланып һуғышыуға күсеүгә — етерлек дәлил булып тора. 546 йылда Үҙәк Азияла донъя әһәмиәтендәге ваҡиға була: төрки кенәзе Бумын 50000 тирмәле ҫеле халҡын буйһондора, ә 551 йылда жужан халҡын тар-мар итә. Һөҙөмтәлә Төрки ҡағанаты исемле ҡеүәтле дәүләт барлыҡҡа килә. VI быуаттың икенсе яртыһында төркиҙәр державаһы Каспий диңгеҙенән һары диңгеҙгә, Себерҙән Һиндостанға тиклем булған араны биләй. Хәҙерге Башҡортостан биләмәһендә улар уғырҙарҙың һәм аварҙарҙың көслө ҡаршылығына ос-



*Һөңгө менән сукмар*

рай (554—558 йылдарҙа Истеми ҡағандың көнбайышҡа походы ваҡытында). 604 йылда ҡағанат ике өлөшкә — 2 айырым дәүләткә: Көнсығыш һәм Көнбайыш Төрки ҡағанаттарына бүленә. 635 йылда Көнбайыш Төрки ҡағанаты составында тәүге тапҡыр «ҡыпсаҡ» ҡәбиләләре союзы тураһында иҫкә алына. 656 йылда иң аҙаҡҡа ҡалып, Көнбайыш Төрки ҡағанаты йәшәүҙән туҡтай.

VII быуат урталарында Каспий диңгеҙе ярҙарында Хазар ҡағанаты барлыҡҡа килә. Ҡағанат Башҡорт илен үҙенә буйһондорор өсөн һуғыш хәрәкәттәренән дә баш тартмай.

694 йылда төркиҙәрҙең ярсыҡтары (70 мең кеше) Ҡытайға күсенә. Ошоноң менән Төркиҙәрҙең тарихы тамамлана. VII быуатта Һырдаръя буйҙарында печенегтар көн иткәндәр (үҙ атамалары: «ҡаңғар», «ҡаңлы»). Ҡыпсаҡтар Ҡара Иртыш менән Һырдаръя араһын биләйҙәр («Ҡыпсаҡ далаһы»). Ошонда йәшәгәндә ҡыпсаҡтар ҡаңғар (ҡаңлылар) менән аралашып, ҡыпсаҡ исемле халыҡты барлыҡҡа килтерә (урыҫса: половцы).

Төркиҙәр 678 йылда Үҙәк Азияла яңы дәүләт — Төрки ҡағанатын төҙөй. Әммә 745 йылда ул уйғырҙар тарафынан юҡ ителә. Яңы дәүләт — Уйғыр ҡағанаты (745—847 йй.) хасил була.

Мадьярҙар V—VI быуаттарҙа Яйыҡ менән Оло Иҙелдең (Волганың) түбәнге ағымында көн иткән, VII—VIII быуаттарҙа хазарҙарҙың хәрби союздаштары булған. Мадьярҙар Көнбайыш Себерҙе ташлап киткәндән һуң, күпмелер ваҡыт Көньяҡ Уралда, йәғни беҙҙең төбәктә лә йәшәп киткән.

VIII быуат башында, ғәрәп яулап алыуҙары менән **бәйле,** төрлө **халыҡтарҙың** Урта Азияны ҡалдырып, Көньяҡ Уралға күсенеүен күҙәтергә мөмкин.

VIII быуат аҙағында — IX быуат башында Иртыш буйында барлыҡҡа килгән Ҡыпсаҡ-Кимаҡ дәүләте Урал тауҙарына тиклемге ерҙе

тулыһынса үҙенә буйһондора. Беҙҙең төбәк халҡы ҡыпсаҡ-ҡимаҡ хакимлығын танырға мәжбүр була.

VIII—IX быуаттарҙа башҡорттар икегә бүленә: бер өлөшө Уралда, икенсе яртыһы — Түбәнге Донда (840—850 йылдар), печенегтар менән конфедерацияға инеп, шунда көн итә.

VIII быуат аҙағында — IX быуат башында Арал диңгеҙе буйында оло һуғыш ҡуба. Тарихҡа ул «уғыз («огуз») — печенег конфликты» исеме менән инеп ҡалған. Башҡорттарҙы һәм печенегтарҙы биләгән ерҙәренән (Арал диңгеҙе буйҙары, Көнбайыш Ҡаҙағстан) ҡыҫырыҡлап сығарыр өсөн 4 халыҡ союз төҙөй: хазарҙар, уғыҙҙар, ҡыпсаҡтар, ҡимаҡтар. Коалиция бик күп ғәскәр туплай, берләшкән башҡорт-печенег көстәре ҡыйратыла. Ошо еңелеүҙән һуң башҡорт халҡы икегә бүленә лә инде: бер өлөшө Уралда ҡала, икенсе өлөшө печенегтар менән көнбайышҡа ҡарай поход башлай.

X быуатта Көньяҡ Уралда яңы төр археологик комартҡылар хасил була: улар таш менән уратып алынған ҡырғыҙ ҡәбиләләренән ҡалған ҡәберҙәр. Мәйеттәр ҡәбергә яндырып һалынған. Ҡырғыҙҙарҙың беҙҙең төбәккә килеп сығыуы шуның менән аңлатыла: IX—X быуаттарҙа Йәнәсәйҙә Ҡырғыҙ дәүләте көсәйә, уларҙың бер өлөшө шул дәүерҙә Көньяҡ Уралға күсенә лә инде. Шуға ла ғәрәп, фарсы сәйәхәтселәренең: «Яйыҡ ҡырғыҙ ерҙәренән башлана», — тигәндәренә бер ҙә аптырарға ярамай.

Беҙҙең төбәктә бер меңенсе йыллыҡта тағы ла бер халыҡ көн иткән булырға тейеш. Топонимикала «Ҡаран» исемле атамалар, мәҫәлән, шишмәләр күп осрай. Академик Н. А. Мәжитовтың әйтеүенсә, «Ҡаран» — ул төрки сығышлы болғар һүҙе. Тимәк, беҙҙең төбәктә үҙенең эҙен ҡалдырмаған ырыу йәки ҡәбилә бик һирәк, күреүебеҙсә, хатта бында болғарҙар ҙа йәшәп киткән.

XI быуатта Иртыштан Дунайғаса Урал, Себер тайғаһынан Һырдаръяғаса бик ҙур ерҙе биләгән яңы империя — Дәшт Ҡыпсаҡ барлыҡҡа килә. Ошо Ҡыпсаҡ иленең иң күренекле ханы Муйнаҡ — сығышы менән башҡорт тармаҡлы булған. Бынан тыш, Буг йылғаһы бассейнында 20 мең кешелек урҙаһы менән Башҡорт исемле хан ғүмер иткән. Үрҙә әйтеп үтеүебеҙсә, печенегтар менән IX быуатта дәүләт төҙөп, башҡорт халҡының бер өлөшө Дондың түбәнге ағымында күсенеп йөрөгән.

Ошоларҙан сығып, ололарҙың «Беҙ Ҡаф тауы яғынан килгәнбеҙ»,— тигәненә һис тә аптырап ҡарарға ярамай. Ысынлап та, ҡасандыр, монгол-татар яуына тиклем, ата-бабаларыбыҙҙың бер өлөшө бик алыҫта, Кавказ тауҙары тирәһендә лә көн итеүҙәре бик ихтимал.

Шулай итеп, беҙҙең гүзәл йәнтөйәгебеҙ, Яйыҡ йылғаһына үҙ исемдәрен биргән дах-массагеттарҙың, легендар һундарҙың, яу яланында аяу белмәгән аварҙарҙың, ғәйрәтле командарҙың, мәшһүр мадьярҙарҙың, данлыҡлы болғарҙарҙың һәм тағы ла әллә күпме башҡа халыҡтарҙың, ырыу-ҡәбиләләрҙең эҙҙәрен һаҡлай.

# ЫРЫУҘАРЫБЫҘҘЫҢ СЫҒЫШЫ ҺӘМ ЭТНИК ТАРИХЫ

**Беҙ үҙебеҙ — табындар.**

Яйыҡ башында XIX быуатта үткәрелгән археологик ҡаҙыныуҙар ваҡытында (Р. Игнатьев) VIII—IX быуаттарға ҡараған башҡорт ҡурғандары тикшерелгән. Әммә XIX быуат аҙағында уларҙың емерелеп бөтөүе сәбәпле, был ҡомартҡыларҙы артабан өйрәнеү мөмкинселеге ҡалмай. Шуға күрә беҙ был ҡурғандарҙың ниндәй ҡәбилә, ырыу тарафынан ҡалдырылғанын әйтә алмайбыҙ. Әммә шуныһы асыҡ: ул алыҫ замандарҙа уҡ был ерҙәр башҡорттоҡо булған.

Учалы ерендәге башҡорт ауылдарының 90 процентын табын ҡәбиләһенә ҡараған халыҡ тәшкил итә. Эйе, Учалы еренең элекке һәм бөгөнгө еренең төп хужалары — табындар, дөрөҫөрәге, көнсығыш табындар. Көнсығыш табын ҡәбиләһе 4 ырыуға бүленә: ҡара табын, барын табын, тиләү табын, күбәләк табын. Бөгөнгө көндә Учалы менән Әбйәлил районында, Силәбе, Курган әлкәләрендә уларҙың нәҫелдәре көн итә.

Табын ҡәбиләһе бик ҙур, ғәйрәтле ҡәбилә булғанлыҡтан уны икенсе төрлө «Табын иле» тип тә атап йөрөткәндәр. Төрлө ваҡыттарҙа ул 12-нән алып 18-гә тиклем ырыу берләштергән.

«Урал» исемле боронғо башҡорт халыҡ йырының бер вариантында (ул күберәк табындар араһында таралған) ошондай тарихи юлдар бар:

Уралтауҙан алып Алтайғаса
Йәйрәп ята башҡорт далаһы.

Тәү ҡарашҡа был ауыҙ-тел ижадын тыуҙырыусыларҙың ижади фантазияһы кеүегерәк ҡабул ителә. Әммә тик ижади фантазия ғынамы икән? Әйҙәгеҙ, булмаһа, яуап эҙләп, Табын ҡәбиләһенең тарихына күҙ һалайыҡ.

Табын ҡәбиләһенең тамыры сал быуаттар төпкөлөнә барып тота-ша[2]. Уның ике мең йылдан ашыуыраҡ тарихы бар. Быны беҙ боронғо грек тарихсыһы Птоломейға таянып әйтәбеҙ. Б.э.т. II быуатта йәшәгән был мәшһүр ғалим телгә алған ҡәбиләләрҙең береһе «табивой» исемле. Зәки Вәлиди Туғандың яҙыуынса, был осраҡта һүҙ табын ҡәбиләһе тураһында бара. «Хәҙерге йәшәгән урындары — уларҙың берҙән-бер тыуған төйәктәре», — тип раҫлай ул. Бөгөнгө көндә табындар Ыҡ, Кама йылғаларынан алып Тубылға тиклем таралып, бик ҙур биләмәлә йәшәй.

Табын ҡәбиләһенең тарихы бик ҡатмарлы, үткән юлы оҙон һәм бормалы. Төрлө ваҡытта үҙ тирәһенә, мәҙәниәттәре, диндәре төрлөсә булған ырыу-аймаҡтарҙы туплаған, тарихи тетрәнеүҙәр мәлендә кесерәйеп ҡалған, сәскә атҡан дәүерендә айырым дәүләт булып та йәшәп алған. Былар барыһы ла табын ҡәбиләһенең үткән юлын билдәләүсе үҙенсәлектәр.

Академик Р. Ғ. Кузеев Көнсығыш Монголия, Алтай буйҙары — табындарҙың тыуған иле тип раҫлай. Дәлил итеп, Монголияла Табын-Богдо-Ола исемле бейек тау барлығын әйтеп үтә. Тау исеме менән бо-

ронғо башҡорт ҡәбиләһе табын араһында туранан-тура бәйләнеш бар, тимәксе ул. Топонимикала эҙ ҡалдырырлыҡ булғас, был ерҙәрҙә табындар оҙаҡ — бер нисә быуат йәшәгән булырға тейештәр. Птоломей яҙма сығанаҡтар ҡалдырған саҡта Уралда көн иткән табындар, беҙҙең эраның тәүге быуаттарында, тәбиғәт шарттары оҡшаш булған Алтай буйҙарына күсенеп, шунда төпләнеүҙәре лә бик мөмкин. Күсмә халыҡтар өсөн был ғәҙәти күренеш.

Башҡорт шәжәрәләренең береһе табын ҡәбиләһенең ата-бабаһы итеп Бумын ҡағанды күрһәтә. Ә Бумын ҡаған иһә, ҡеүәтле Төрки дәүләтенә нигеҙ һалған тарихи шәхес. Был хаҡта Н. Я. Бичурин, Л. Н. Гумилев' хеҙмәттәрендә бик ентекле мәғлүмәттәр бар. Бында шуны ғына өҫтәп әйтергә мөмкин: 552 йылда Бумын ҡаған көтмәгәндә Жужан ханлығына баҫып инеп, уны тар-мар итә. Һөҙөмтәлә ул Илхан тигән титулға лайыҡ була. Төркиҙәрҙең яҙма тарихы бына ошо ваҡиғанан башлана, һәм Бумын ҡаған йәки Төмән бей табын ҡәбиләһенең ата-бабаһы ғына түгел, ә Төрки ҡағанаты дәүләтенә нигеҙ һалыусы итеп тә нарыҡлана. Бында шуны асыҡлап китеү мөһим: башҡорт шәжәрәләренең күбеһе ырыуҙарының данын, абруйын арттырыр өсөн, нәҫел ептәрен ғәҙәттә мәшһүр шәхестәргә бәйләй. Табын ырыуы шәжәрәһе лә был традицияға тоғро ҡалған. Ә ғөмүмән алғанда табын ҡәбиләһенең тарихи йәше күпкә олораҡ. Беҙҙең өсөн шуныһы айырыуса ҡиммәт: Бөйөк Төрки ҡағанатын нигеҙләүҙә, уның дәүләтселеген тәьмин итеүҙә ҡеүәтле табын ҡәбиләһенең, тимәк, беҙҙең алыҫ ата-бабаларыбыҙҙың роле баһалап бөткөһөҙ ҙур.



*Таҡта аласыҡ һәм тирмә*

Табын ҡәбиләһенең бик боронғо һәм ҡеүәтле булыуын шул да раҫлай: табын исемле ырыуҙар башҡорттарҙан тыш башҡа халыҡтарҙа ла бар. Мәҫәлән, II меңенсе йыллыҡтың баштарында монголдарҙың «табунут-табунгут» исемле көслө ҡәбиләһе булыуы тураһында мәғлүмәттәр һаҡланған. Ут күршебеҙ булған ҡаҙаҡтарҙа ла табын ырыуының тармаҡтары бар — улар үткән быуатта Йәйыҡ, Эмба, Тубыл йылғалары буйҙарында йәшәгән.

Табындар асылда төрки сығышлы булһалар ҙа, монголдар менән уртаҡ яҡтары ла бар. Был уларҙың Алтайҙа йәшәгәндә бер нисә быуат үҙ-ара аралашып йәшәүҙәре менән аңлатыла. Бер нисә миҫал килтерәйек. Башҡорттарҙың башҡа ырыуҙары, ырыу эсендәге төркөмдәрҙе атау өсөн «ара» терминын ҡулланһа, табындар монголдарҙан ингән «аймаҡ» һүҙен ҡуллана. Тирмәләрҙең төҙөлөшө лә табындарҙа нәҡ монголдарҙыҡы һымаҡ: уларҙың өҫкө өлөшө ослайып барып бөтә, ә башҡа башҡорт ырыуҙарында ул ятыңҡы. Орнамент-биҙәктәрендә лә монголдарҙыҡы менән уртаҡ яҡтары байтаҡ.

847 йылда Үҙәк Азияла Уйғыр ҡағанатының емерелеүе бында йәшәгән халыҡтарҙың, айырым ҡәбиләләрҙең тормошонда ҙур үҙгәрештәргә килтерә. Далала тоҡанған үҙ-ара һуғыш табындарҙы өйрәнгән ерҙәрен ҡалдырып сит яҡтарға — Ҡара Иртыш, Етейылға буйҙарына күсенергә мәжбүр итә. Әммә Көнбайышҡа юл ябыҡ — был ерҙәр VII быуатта барлыҡҡа килгән Ҡимаҡ ҡағанаты ҡулында була. Ҡағанат 7 көслө ҡәбиләне берләштереп, араларында иң ҙурҙары ҡимаҡтар һәм ҡыпсаҡтар була. Ҡимаҡтар — Иртышта, ҡыпсаҡтар — Көньяҡ Уралда (Ҡытай йылъяҙмаларында: «улар «Юйли-боли» тауҙары буйында көн итәләр», — тип күрһәтелә). X быуатта Ҡимаҡ ҡағанаты сәскә ата: ҡағанат көслө державаға әүерелеп, Иртыштан Каспийға тиклемге ерҙе биләй. Ошондай шарттарҙа табындарға Ҡимаҡ ҡағанатының ҡул аҫтына инеүҙән башҡа сара ҡалмай. Бында улар ҡыпсаҡтар менән союзға инә. Һөҙөмтәлә, ҡыпсаҡтар бик ныҡ ҡеүәтләнеп, Ҡыпсаҡ ханлығын ойоштора. X быуат аҙағында — XI быуат башында ҡыпсаҡтар, Ҡимаҡ ҡағанатының власынан ҡотолоуға ирешә һәм көнбайышҡа поход башлай. Ҡыпсаҡтар ҡалдырып киткән ерҙәргә табындар килеп төпләнә.

XI быуатта табын ҡәбиләһе үҙ тирәһенә башлыса төрки һәм монгол ырыу-ҡәбиләләрен туплап (барын, дыуан Ҡ.6.), көслө конфедерацияға әйләнә, биләгән ерҙәре лә бик ҙур була.

Алтайҙан алып Урал тауҙарына тиклем йәйрәп ятҡан дала Табын илен тәшкил итә, әммә табындар, экспанцияларын дауам иттереп, Урал алдына үтеп инә, Үҙәк Башҡортостанды буйһондороп, көнбайышта ил сиктәрен Ыҡ, Сәрмәсән йылғаларына тиклем киңәйтә. Туҡ, Соран, Ырғыҙ, Кәмәлек бассейндарында үҙ хакимлыҡтарын урынлаштыра. Табын ханлығы ерҙәре, һөҙөмтәлә, ике ҡанатҡа — көнбайыш (Урал алды) һәм көнсығыш (Урал арты) ҡанатҡа бүленә. Илдең эске структураһы ҡатмарлы була. Халыҡтың төп көсөн дәүләткә исем биргән табын ҡәбиләһе башҡорттары тәшкил итә, бынан тыш бик күп ваҡ ырыу-ҡәбиләләр союздаштар булараҡ йә иһә буйһонған хәлдә йәмғиәт ҡоролошоноң нигеҙен тәшкил итә.

Монгол-татар яуы башланыр алдынан Табын ханлығы Дәшт-Кыпсаҡ империяһы составында була һәм уның иң көслө дәүләте булып һанала.

Ҡара табын ырыуы көнсығыш табындар араһында иң йәше, сама менән XIII быуат аҙағында — XIV быуат башында формалашҡан, табын ҡәбиләһенән бүленеп сығыу юлы менән барлыҡҡа килгән.

Ҡара табындарҙың шәжәрәһенән күренеүенсә, уларҙың ата-бабалары XIII быуат башында Миәс, Мидиәк буйҙарында йәйләгән. Ҡара табын ырыуы үҙенең килеп сығышын Табын ҡәбиләһенең бейе Майҡы бейгә алып барып тоташтыра. Ырыу үҙе Майҡы бейҙең бүләре Ҡаратабын исемен йөрөтә. Был ырыу һуңыраҡ табын ҡәбиләһенең иң өҫтөнлөклө ырыуына әйләнә, хакимлыҡ итеүсе ырыу статусын Ҡаратабын волосы старшиналары XVIII быуат аҙағына тиклем ҡулдарында ныҡ тота.

Көнсығыш табындарҙың икенсе ырыуы — барындарҙың тарихына сәйәхәт яһайыҡ. Барындарҙың да тарихы бик боронғо. Сығыштары буйынса улар төрки түгел, ә монголдар. Бер меңенсе йыллыҡта Үҙәк Монголияла, Селенга йылғаһы үҙәнендә, монгол ырыуы барин (байрин) көн иткән. Сыңғыз хан ҡеүәтләнеп, бер-бер артлы монгол ҡәбиләләрен үҙе төҙөгән державаға ҡуша башлағас, ошо бариндарҙың ҡаты ҡаршылығына осрай. Сыңғыз хандың Селенга үҙәненә ойоштورған походы бариндарҙың тар-мар ителеүе менән тамамлана. Ҡәбилә өс өлөшкә бүленә. Бер өлөшө ҡараҡытайҙарға барып ҡушыла, икенсе өлөшө Етейылға үҙәненә күсенеп китә. Әммә һуғыш ялҡыны уларҙы артабан да ҡыҫырыҡлап, ары ҡыуа, ҡырғыҙҙарға барып һыйынырға мәжбүр итә.

Өсөнсө өлөшө, көнбайыш йүнәлештә хәрәкәт итеп, табындарға килеп төртөлә һәм улар күрһәткән ергә килеп ултыра (Обь йылғаһы ярҙары). Хәҙерге Барнаул ҡалаһы, баҡтиһаң, ошо урында йәшәгән барындарҙан тороп ҡалған «Барын ауылы» икән!

Бына ни өсөн барын ырыуы, башҡорттарҙан тыш монголдарҙа ла, ҡырғыҙҙарҙа ла бар икән. Әлбиттә, ырыу исеменең әйтелеше, яңғырашы һәр халыҡта үҙенсә. Ҡырғыҙҙарҙа, мәҫәлән, ул баарын тип йөрөтөлә. Тамғаларға килгәндә ул 2 халыҡта ла бер иш ⊸ ⊸ ⊸ («Сүмес»). Бынан тыш, ике ырыуҙа ла «Туңғатар» тигән уртаҡ этноним бар.

Көнсығыш табындарҙың тағы ла 2 ырыуы — күбәләк һәм тиләү хаҡында. Легендалар Күбәләк менән Тиләүҙе бер туғандар тип һүрәтләй, ләкин ауыҙ-тел ижады ҡайһы бер осраҡта тарихи дөрөҫлөккә тап килмәй, шуның өсөн был риүәйәт нигеҙендә ысынбарлыҡ ята тип раҫлауы бик ҡыйын.

Тарихи сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Тиләү исемле ҡәбилә, башҡорттарҙан тыш ҡаҙаҡтарҙа, үзбәктәрҙә һәм ҡарағалпаҡтарҙа бар. Бынан тыш, Алтайҙа телеут исемле ҡәбилә булған. Ошо мәғлүмәттәр үҙҙәре генә лә тиләүҙәрҙең бик боронғо бер ҡәбилә булыуын раҫлай.

Тарихсылар тиләүҙәрҙең ата-бабалары тип, беҙҙең эраға тиклем күп быуаттар элек йәшәгән теле ҡәбиләләрен атай. Ҡытай йылъяҙмалары тәүге тапҡыр уларҙы беҙҙең эраға тиклем III быуатта телгә ала. Беҙҙең эраның тәүге быуаттарында телеләр Үҙәк Азияла ҡәбиләләр

конфедерацияһына берләшә. Улар ҙа барлыҡ төрки ырыуҙары кеүек үк күсмә тормош менән йәшәйҙәр. 12 теле ырыуының һәр ҡайһыһы үҙ старшинаһы тарафынан идара ителә. Ҡытай тарихсыларының яҙып ҡалдырыуынса, улар һуғышсан һәм ирек һөйөүсән, әммә һис бер ойошоуға килмәгән халыҡ булған.

V быуат аҙағында 100 мең тирмәле теле халҡы жужандарға ҡаршы баш күтәрә (Жужан ханлығы Хингандан Алтайғаса йәйрәп ятҡан даланы үҙ ҡулында тотҡан була). Был һуғыш һөҙөмтәһендә телеләр тыуған ерҙәрен ҡалдырып, Иртыш буйҙарына күсенергә мәжбүр була. Яңы урында улар үҙ дәүләтен барлыҡҡа килтерә. Жужандарға ҡаршы йүнәлтелгән был азатлыҡ һуғышы ярты быуат дауам итә һәм теле халҡының 2 тапҡыр кәмеүенә килтерә.

Телеләр төрки телле була. Улар үҙҙәренең килеп сығыштарын ата бүре менән һун батшаһының ҡыҙына бәйләй, үҙҙәрен шул икәүҙең нәҫелдәре тип таныта. Телеләр Тәңре менән Хоҙайға табынған.

546 йылда 50 мең тирмәле теле халҡы дәүләтселеген юғалтып, төрки кенәзе Бумындың хакимлығын танырға мәжбүр була. VI—VIII быуаттарҙа теле халҡы 15 ҡәбиләнән тора. 601 йылда 10 теле ҡәбиләһе ҡабат яуға күтәрелә, һәм, 605 йылда Джунгарияла үҙ аллы Теле дәүләте барлыҡҡа килә. Әммә 619 йылда был дәүләт үҙ ирке менән Төрки ҡағанатына ҡушыла. 630 йылда телеләрҙең яңы күтәрелеше булып ала, ә 631 йылда 11 теле ҡәбиләһе Ҡытай хакимлығын ҡабул итә.

Телеләр араһында «янь-мянь» (ҡытайса шулай яҙылған) исемле ҡәбилә лә була. Уның Балхаш күленән көнсығышта көн иткәнлеге билдәле. Ошо урында: «Ҡытай йылъяҙмалары башҡорт ырыуы «тамъянды иҫкә алманы микән?»— тигән урынлы һорау тыуа.

Табын ҡәбиләһенә ҡараған тиләү ырыуы башҡорттары бына ошо легендар телеләрҙең нәҫелдәре булырға тейеш.

Башҡорт тиләүҙәре лә, ҡаҙаҡ тиләүҙәре лә бер нисә быуат элек кенә ҡан-ҡәрҙәшлек ептәрен һаҡлап, бер тирәләрәк тупланып йәшәгән, бергә йәйләгән. Тамғалары ла бер иш: ⊢, ⊥ (тырма). Ҡаҙаҡтарҙың тиләүе лә, башҡорттарҙың тиләүе лә табын ҡәбиләһенең ҡанаты аҫтында көн иткән.

Ҡыуаҡан ҡәбиләһенә ҡараған ырыуҙар быуаттар буйына хәҙерге Учалы районы ерҙәрендә, Силәбе әлкәһенең Златоуст, һатҡы, Баҡал ҡалалары урынлашҡан ерҙәрҙә ғүмер иткән.



*Тамғаларҙың төрҙәре*

Ҡыуаҡан ҡәбиләһенең дә тарихы быуаттар төпкөлөнә китә. Легендалар ҡыуаҡандарҙың тәүтөйәге итеп Алтай тауҙарын, Байҡал күле буйҙарын, Монголия ерҙәрен атай. Был тарихи сығанаҡтар менән дә раҫлана. Килеп сығыштары буйынса улар боронғо төркиҙәргә һәм боронғо Алтай ҡәбиләләренә барып тоташа. Тимәк, ҡыуаҡандарҙың да, табындарҙың да тәүтөйәге уртаҡ, килеп сығыштары ла оҡшаш, тамғалары ла бер иш — ○ сүмес. Боронғо заманда бергә тупланып йәшәгән кеүек улар хәҙерге ваҡытта ла бер тирәләрәк көн итә.

## МОНГОЛ-ТАТАР ЯБЫРЫЛЫУЫ ҺӘМ УНАН ҺУҢҒЫ ОСОР.

Ҡара табындарҙың шәжәрәһе был ырыуҙы Майҡы бейгә алып барып тоташтыра. Майҡы бей — тарихи шәхес, табын ҡәбиләһе (иле) башлығы, мәшһүр Сыңғыҙ хан менән бер дәүерҙә йәшәгән һәм уның ихтирамын ҡаҙанған түрә.

Башҡорт халҡының мираҫы булған, 1610—1611 йылдарҙа төҙөлгән «Сыңғыҙнамә»нән түбәндәгеләрҙе уҡып беләбеҙ: Майҡы бей 9 ырыуҙан 10 бейҙе эйәртеп, Сыңғыҙ ханды эҙләп китә һәм уны барып тапҡас, 9 бейҙе арбаға егеп, Сыңғыҙ хан менән йәнәшә ултырып, хандың ставкаһына йүнәләләр, һарайға ҡайтып еткәс, Майҡы бей Сыңғыҙ хандың уң яғынан урын ала һәм шул рәүештә йәнәш атлап эскә үтә. Һуңынан Сыңғыҙ хан ошо 10 бейҙең һәр ҡайһыһына тамға, ҡош, ағас, оран бирә. «Чынғыз хан әйде: Ай, Уйшын Майҡы бей! Синең агачың ҡарагач, ҡошоң ҡарағош булсын, ораның «салауат» булсын, тамғаң себерке булсын диде»[4], — тиелә был әҫәрҙә.

Шәжәрәнән күренеүенсә, Майҡы бей Сыңғыҙ ханға бүләк алып барып, уның менән бер арбала ултырып йөрөгән хөрмәтле бей булған. Шулай итеп, шәжәрә табын иле халҡының монгол-татар яуына ҡаршы тороуы тураһында бер һүҙ ҙә өндәшмәй. Был тиктәҫкә генә түгел, әлбиттә. Дөйөм алғанда, башҡорт иле 1221 йылдан алып 14 йыл буйына монгол-татар ябырылыуына ҡаһармандарса ҡаршы тороп, тарихҡа улар еңә алмаған берҙән-бер халыҡ булып керһә лә, Табын конфедерацияһы ҡәбиләләре Сыңғыҙ ханға һуғышһыҙ ғына баш һала. Был әсе хәкиҡәтте танырға, беҙҙең алыҫ ата-бабаларыбыҙҙың дөйөм халыҡ көрәшенән ситтә ҡалғанлығын асыҡтан-асыҡ әйтергә тура килә.

Майҡы бей ҙур хәрби етәксе булып китә, Сыңғыҙ хандың вассалы булараҡ, уның ҡулынан 4 нәмә ала: ил (ырыуҙың сиктәрен күрһәткән, табындарҙың монголдар алдында бурыстары яҙылған ярлыҡ («грамота»), ҡош (ҡарағош), ағас (ҡарағас), оран («салауат») һәм тамға (һепертке).

Зәки Вәлиди мәғлүмәттәренә таянып’, табындарҙың монгол-татарҙар менән берләшкән йылын да билдәләй алабыҙ. Был — 1207 йылда була. Монголия менән Башҡортостан араһында хәрби союз төҙөү тураһында килешеүгә 14 йыл буйына ике ил араһында барған һуғыштан һуң ғына — 1235 йылда ҡул ҡуйыла. Сыңғыҙ хандың табын ырыуы бейенә ҡарата булған айырым йылы мөнәсәбәтенән, табын ҡәбиләләренең монголдарға ҡаршылыҡ күрһәтмәүенән сығып, монгол-

татарҙарҙың баҫып алыу һуғыштарында беҙҙең алыҫ ата-бабаларыбыҙ ҙа эҙ ҡатнашмағандыр тип фараз итә алабыҙ.

Был фактты табын ҡәбиләһенең Дәшт Ҡыпсаҡ составында булыуы, Башҡортостан дәүләтенән айырылып йәшәү һөҙөмтәһе итеп ҡарарға кәрәк.

Алтын Урҙа исемле бик ҙур монгол-татар дәүләте барлыҡҡа килгәс тә (1243 йыл, башҡалаһы — Сарай), табындар, усундар һәм ҡыпсаҡтар яңы дәүләттең нигеҙен тәшкил иткән, йәғни яңы империяны барлыҡҡа килтереүсе 3 халыҡтың береһе булған.

Шулай итеп, монгол-татарҙар менән союз Табын ханлығының бойондороҡһоҙлоғон бер ни тиклем сикләһә лә, Евразия киңлектәрендә уларҙың сәйәси йөҙөн һәм халыҡ-ара аренала тоткан урындарын һис тә кәметмәгән.

XIII быуат уртаһында табындар Ҡаҙағстандың үҙәк өлөшөндә ятҡан Ырғыҙ йылғаһынан Волганың һул ҡушылдығы булған Ырғыҙ йылғаһына тиклем ерҙә, йәғни ике Ырғыҙ араһында йәшәгәндәр. Ләкин күпмелер ваҡыттан һуң, Табын конфедерацияһы тарҡала, уның айырым ырыуҙары ҡаҙаҡтар араһында тороп ҡалып, ҡаҙаҡлаша, икенсе өлөшө башҡорттар биләгән ерҙәргә күсенә һәм башҡорт халҡының этник составына ҡушыла.

XIV—XV быуаттарҙа ҡара табындар Кама йылғаһы буйҙарында йәйләгән. Улар Ҡазан ханына буйһоноп, яһаҡ түләп йәшәгән. Күпмелер ваҡыт улар Өфө аръяғында, Асылыкүл буйҙарында көн иткән, хатта ошо күлдең исеме Ҡаратабынға үҙгәреүгә сәбәпсе булған (Асылыкүлдең икенсе исеме Ҡаратабын күле. Тарихи сығанаҡтар уны ҡара табын ырыуының исеме менән бәйләй).

Ҡара табын яңы ырыуға башлыҡ булып алғас, Миндәк, Миәс буйҙарын ҡалдырып, XIV быуат башында Кама буйына күсеп килеп ултыра.

Барындар ҙа был ваҡытта ошо тирәләрҙә көн иткән була. Уларҙан саҡ ҡына ситтәрәк, Тамъян иленә (хәҙерге Туймазы районы ерҙәре) һырығып, күбәләк һәм тиләү ырыуҙары йәйләгән. Ошо ырыуҙарҙың дүртеһе лә Ҡазан ханлығына яһаҡ түләп йәшәгән. Шулай итеп, учалыларҙың ата-бабалары XIV—XV бб. Кама, Ыҡ йылғалары (хәҙерге Татарстан республикаһы ерҙәрендә) буйҙарында ла йәшәп алған. XV быуат аҙағында — XVI быуат башында, Ҡазан хандарының ҡыҫымына түҙә алмайынса, ҡара табындар, барындар һәм тамъяндарға эйәреп күбәләктәр менән тиләүҙәр Көньяҡ Уралға, әлеге көндә йәшәгән ерҙәренә күсенергә мәжбүр булалар. Шуныһын онотмайыҡ: Көньяҡ Уралға үрҙә һанап үтелгән ырыу-ҡәбиләләр тотошлайы менән ҡайтмай, халыҡтың бер өлөшө өйрәнгән ерҙәрендә тороп ҡала. Ошо арҡала, көнбайыш Башҡортостанда Минзәлә, Бөгөлмә яҡтарында үрҙә һанап үтелгән ырыуҙарға ҡараған башҡорт ауылдары әле булһа ла осрай.

Үҙ төйәктәренә ҡайтҡас, көнсығыш табындарға ҡараған 4 ырыу халҡы бик ҙур биләмәгә һибелеп йәшәй башлай. Ләкин ул ырыуҙарҙың хәле, ергә булған хоҡуҡтары тигеҙ булмай. Әлеге 4 ырыу биләгән ерҙәрҙең туранан-тура вариҫы булып ҡара табындар иҫәпләнә. Икенсе

төрлө әйткәндә, ҡалған 3 ырыу (күбәләк, тиләү, барын) — ҡара табындар еренә килеп һыйыныусы булып сыға. Ләкин барындар ҙа, күбәләк менән тиләүҙәр ҙә бер үк табын конфедерацияһына ингәндәр, тимәк Уралдан Себергәсә йәйрәп ятҡан ерҙәр уларҙың уртаҡ биләмәләре булған.

Батша тарафынан бирелеп, кемдең ҡайһы ерҙе биләгәнлеген күрһәткән жалованная грамота ла шулай уҡ ҡара табындар исеменә яҙылған һәм уларҙа һаҡланған. 1692 йыл менән билдәләнгән бер документта ҡара табын ерҙәренең сиктәре түбәндәгесә күрһәтелгән: сик көньяҡта — Ҡыҙыл йылғаһы башынан (был йылға Әбйәлил районында), көнбайышта Әнкәр тауы башынан үтә (ошо тау башында Бөрйән волосының тамғаһы ҡуйылған, тиелә документта). Артабан сик Аҡиҙел йылғаһы буйлап төньяҡҡа борола, Әй йылғаһының үрге ағымына тиклем етә, шунан Миәс башына сыға, Миәс йылғаһы буйлап дауам итеп, Тубылға етә, унан көньяҡҡа — Уй тамағына тиклем бара һәм Уй буйлап — Ҡыҙылға тиклем.

Был инде ата-бабаларыбыҙҙың әле XVII быуат аҙағында ла бик ҙур ергә хужа булып тороуҙарын күрһәтә. Тимәк, бөгөн Силәбе, Копейск, Троицк, Коркино, Верхнеуральск, Южноуральск, Миәс, Сыбаркүл, Еманжелинск ҡалалары урынлашҡан ерҙәр ҡара табындарҙың законлы ерҙәре булып сыға, йәғни, Силәбе әлкәһенең өстән бер өлөшө — бынан 3 быуат элек кенә ошо биләмәгә хужа булған көнсығыш табын ырыуҙарыныҡы. Шулай уҡ Курган әлкәһенең дә өстән бер өлөшө (Курган ҡалаһын индереп) борон беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың ере булған. Бөгөнгө көндә ошо иҫ киткес ҙур ер биләмәһенең башҡорттар ҡулында ундан бер өлөшө лә ҡалмаған. Икенсе төрлө әйткәндә, ата-бабаларыбыҙ меңәр йыл буйына биләгән ерҙәрҙең иң яҡшы, иң ҙур өлөшө һуңғы 3 быуат эсендә тартып, баҫып алынған. Ә башҡорт ырыуҙарының иҫән ҡалған тармаҡтары тау-таш, һаҙ-урман араларына ҡыҫырыҡланған. Шуға күрә көнсығыш табындарҙың һаҡланып ҡалған ауылдарының күбеһе Урал тауҙарына һыйынып ҡына Учалы районы ерҙәрендә урынлашҡан. Был ауылдар күп түгел, уларҙың тарихы ғалим Әнүәр Әсфәндиәров тарафынан өйрәнелгән.

XV быуат аҙағы — XVI быуат башына кире әйләнеп ҡайтып, ырыуҙарыбыҙ биләгән ерҙәрҙе картаға төшөрһәк, түбәндәгеләрҙе күрербеҙ: Учалы районының көньяҡ осо менән Әбйәлил районының төньяҡ өлөшө — күбәләк ырыуы (һуңынан волосы) ерҙәре. Был — Кесе Ҡыҙыл буйҙары, Миндәк башы, Оҙонгүл тирәләре.

Тиләүҙәр ҙә ыҡсым төркөм булып Миндәк йылғаһы бассейнын, Яйыҡ (Урал) йылғаһының бер өлөшөн биләгән. Тиләүҙәр башта бер ауыл булып ҡына килеп ултырғандар. Тиләү ауылы хәҙерге Мәҫкәү ауылы тирәһендә булған. Ауыл үҙе бөткән (яндырылған), әммә тиләүҙәр шунан таралышып, XVIII—XIX быуаттарҙа 10-дан ашыу ауыл булып йәшәгән.

Барындар әле XVII быуатта, XVIII быуат башында Уй йылғаһының үрге ағымында, Күмәс, Ирәндек тауҙары буйҙарында, Ҡандыболаҡ йылғаһы буйында ишле ауылдар булып көн иткән. Бөгөнгө көндә беҙҙең районда барын ауылдары бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Барын

ауылдары Силәбе әлкәһендә (Туҡтыбай, Түбәнге Ҡараш, Оло Ҡолһары, Ураҙбай, Яратҡол, Ҡолой), Курган әлкәһенең Сафакүл районында (Ҡуйсан, Сыбыш, Баҡый, Бурыл-Айғыр) һаҡланып ҡалған. Барын волосының үҙәге Учалы күле буйындағы ауылда булған.

Ҡара табындарҙың ауылдары иһә Яйыҡтан Тубылға, Исәттән Уйға тиклемге арала һибелеп ултырған булған, бөгөнгө көндә уларҙың күбәһе (һаҡланып ҡалғандарының) Учалы районының төньяҡ һәм урта өлөшөндә урынлашҡан, Силәбе әлкәһендә бер нисәһе һаҡланып ҡалған (Һолтай, Һатлыҡ, Мәҙиәк, Аҡбаш, Мәүлит, Байрамғол, Арғужа). Ҡара табындарҙың волость үҙәге Силәбе ҡалаһы урынлашҡан ерҙә булған. Элегерәк Миндәк йылғаһының урта өлөшөндә Көҙөй ҡәбиләһенә ҡараған бер нисә ауыл булған. Сығышы менән һарттарға барып тоташҡан Һарт ауылы (хәҙерге исеме Ҡәйепҡол) ла бар.

XVI—XVII быуаттарҙа Яйыҡ, Ағиҙел, Уй йылғаларының баштарында, Аҡкүл, Ҡалҡан күле тирәләрендә Ҡыуаҡан ырыуҙары халҡы йәйләгән. Ҡыуаҡан волосының үҙәге Ҡалҡан күле буйындағы (хәҙер юҡ инде ул — яндырылған) ауылда урынлашҡан булған.

Ҡыуаҡан составы буйынса ҙур һәм ҡатмарлы ҡәбилә. XVIII—XIX быуаттарҙа ул ныҡ тарала, ваҡ төркөмдәр менән Башҡортостандың төрлө райондарына һибелә. Сәбәбе: тау-завод колонизацияһы арҡаһында ҡыуаҡандарҙың Йүрүҙән, Әй йылғалары араһындағы ерҙәре, Оло һәм Кесе һатҡы йылғалары үҙәндәре тартып алына. Ҡыуаҡандар тау үҙәндәрендәге үҙ ерҙәрен ҡалдырып, биләмәләренең сиктәренә, хатта ҡара табын ерҙәренә припущенник хоҡуғы менән күсеп ултырырға мәжбүр булалар. Ағиҙел башындағы Ҡыуаҡан ауылдары ғына күсенмәй тороп ҡала.

Ике ҡәбилә (табын һәм ҡыуаҡан) араһындағы мөнәсәбәттәргә килгәндә, улар татыу була. Килеп сыҡҡан аңлашылмаусанлыҡтар (мәҫәлән, 1728 йылдағы ғауға) һөйләшеү, килешеү юлы менән хәл ителә.

Ҡыуаҡан ҡәбиләһенең ырыуҙары: йылан, сәғит, тау, һатҡы, ҡырҡ өйлө, түбәләс. Ҡыуаҡан ҡәбиләһенең ораны — һандал, ағасы менән ҡошо әлегә билдәһеҙ.

Тамғалар: ҡыуаҡандарҙыҡы, ҡара табындарҙыҡы, барындарҙыҡы — сүмес (ижау), тиләүҙәрҙеке — туҫтаҡ, күбәләктәрҙеке — дүңгәләк.

Халыҡ һанына килгәндә, XVIII быуат башында көнсығыш табындар — 26500 кеше тәшкил иткән.

1725—26 йылда үткәрелгән иҫәпләүҙәр буйынса, Тиләү волосында 700 йорт, Күбәләктә — 600, Ҡыуаҡанда — 315, Ҡара табында — 325 йорт булған.

Зәки Вәлидиҙең китабында «һарт» һүҙенә аңлатма бирелә. Башҡортостанда 1771 йылға тиклем «Бохар» волосы булған, кешеләрен «һарттар» тип йөрөткәндәр. Ул заманда «һарт» һүҙе «каруан менән йөрөгән сауҙагәр» тигәнде аңлатҡан. Өфө провинцияһында 50 ғаилә, Исәт провинцияһында — 52 ғаилә, Ырымбур губернияһында иһә ирҙәр иҫәбе генә 20 меңгә еткән. Был этник төркөм бөгөн бик әҙ ҡалған, бер өлөшө татарса һәм типтәрсә, күбәһе башҡортса һөйләшә.

## Ислам динен ҡабул итеү.
## Беҙҙең төбәк һәм Себер ханлығы.

Башҡорт иленә ислам дине X быуаттан үтеп инә башлаһа, беҙҙең төбәк халҡы оҙаҡ ваҡыт мәжүси (язычник) булып ҡала биргән. Ул заманда башҡорттар араһында ислам динен таратыу менән Волга буйы Болғар иле шөғөлләнгән. Беҙҙең төбәк бөйөк Болғар иленән бик алыҫта урынлашҡанлыҡтан, ислам динен таратыусыларға даими рәүештә килеп тороу ҙа ауыр булғандыр. Шул арҡала XIII быуат уртаһында ла әле беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Тәңрегә (төп алла), ҡоштарға, хайуандарға, тәбиғәт көстәренә табынып йәшәгән.

Беҙҙең төбәккә ислам диненең үтеп инеүе Алтын Урҙала Бүркә хан (1255—1266) хакимлыҡ иткән осорға тура килә". Сығышы менән монгол булған Бүркә хан башлап исламды үҙе ҡабул иткән һәм исемен Бәркәгә үҙгәрткән. Хандан өлгө алып, Сарайҙағы (баш ҡала) бөтә татарҙар ҙа ислам диненә күскән. Хан үҙе һәм уның ярҙамсылары бар ихласлыҡтарын биреп, ислам динен үҫтерергә һәм таратырға тотонғандар. Бәркә хан хатта үҙен исламдың һәм Ҡөрьәндең яҡлаусыһы тип иғлан итә.

Хандың бойороғо буйынса ислам динен өйрәтеү, таратыу, Алтын Урҙала мәғариф эшен алға ебәреү маҡсатында ислам донъяһының төрлө нөктәләренән бик күп ғалимдар, дин белгестәре, уҡымышлылар килтертелә, һәр урында мәсет-мәҙрәсәләр төҙөлә, тирә-йүңгә ислам диненә өндәүселәр ебәрелә. Бәркә бик ҙур тырышлыҡ һалып, баш ҡала булған Сарайҙы төҙөттөрөп бөтә. Бөтә ошо хеҙмәттәре өсөн Бәркә хан динде яҡлаусы, динде юғары күтәреүсе тигән хөрмәтле исемгә лайыҡ була.

Бәркә хан тарафынан Сарайға саҡыртып килтерелгән дингә өгөтләүселәрҙең берehe, Шәйх Мөхәммәд Миһнән Алүҫә беҙҙең төбәктәге халыҡты ислам диненә күндереү эшенә тотона. Ул Әүеш тирәһендәге ауылда йәшәй, халыҡ араһында киң миссионерлыҡ эшмәкәрлеге алып бара. Ләкин уның ғүмере фажиғәле тамамлана. Был турала Әүеш тауы башындағы ҡәберлек һәм уның ташындағы яҙыуҙар һөйләй. Ҡәбер ташы икәү: яңыһы һәм иҫкehe бар. Яңыһын бынан 100 йыл тирәhe элек кенә Зәйнулла ишан Рәсүлев яҙҙыртып ҡуйған, боронғо яҙыуҙы ла ул дөрөҫләгән. Унда ошондай юлдар яҙылған.

Бу дингә өндәүсе
Шәйх Мөхәммәд
Миһнән Алүҫә
651 хижри ел
Берке хан ғасырында
Бәни Сарай
Берке хан дәүләте

Иҫке яҙыуҙан түбәндәгеләрҙе уҡып була:

Рамазан Әүлиә
Килгән Ош шәһәренән
Уны, хатынын, балаһын
651 ел кеше үлтергән.

Яңыса йыл иҫәбенә күсерһәк, мәрхүм 1273 йылда ерләнгән. Килеүе Бәркә хан заманында булһа ла, үлеме — Мәнгү хан (1266—1280 йй.) хакимлыҡ иткән осорға тура килә. Тимәк, Әүеш тауы башында ерләнгән кешенең шәйх булыуы уның ябай кеше түгеллеген күрһәтә.

Иҫке яҙыуға килгәндә, шундай фараз ҡылырға була: Шәйх Мөхәммәд Миһнән Алүҫә һәм Рамаҙан Әүлиә — икеһе лә бер кеше. Был шәйхтең халыҡ араһында Рамаҙан Әүлиә исеме аҫтында йөрөүе ихтимал. Ош шәһәренән тигәненә лә (хәҙерге ваҡытта Ҡырғыҙстан республикаһы) аптырарға ярамай, сөнки Бәркә хандың бойороғо менән дин әһелдәрен Сарайға төрлө тарафтан йыйғандар. Әйткәндәй, «Әүеш» һүҙенең килеп сығыуын да урындағы халыҡ «Ош» һүҙе менән бәйләй.

Ошо ерҙә: «Бәлки һәйтәк ауылының тирә-яғындағы тау баштарындағы 4 әүлиә ҡәбере лә ошо заманға ҡарайҙыр һәм шулай уҡ мосолман динен таратыу тарихы менән бәйләнгәндер», — тигән уй тыуа.

Шул уҡ ваҡытта дин таратып йөрөүсегә ҡул күтәреүсенең табылыуы боронғо дин булған тәңрелектең әле шаҡтай көслө булғанлығын күрһәтә. Ислам динен таратыу һәм уға булған ынтылыш Бәркәнән һуң власҡа килгән башҡа хандар тарафынан да дауам иттерелгән. 1312—1341 йылдарҙа Алтын Урҙала Үзбәк хан идара итә. Үзбәк хан Батуҙан һуң Сарай хандары араһында иң эшлекле, иң ғәҙел, башҡа дәүләттәргә һәм халыҡтарға иң йоғонтоло, абруйлы, ғилемгә һәм ғалимдарға яҡшы мөнәсәбәтле хан булған.

Шуға күрә Үзбәк хан эргәһендәге барлыҡ мосолман кешеләрен дә Үзбәк кешеләре тип атап йөрөтә башлағандар. Тимәк, үзбәк халҡы ошо Үзбәк хан исемен йөрөтә булып сыға.

Унан һуң хан булып торған Жанибәк тә (1341—1357) бик яҡшы, ғилемле хаким була. Был осорҙа Алтын Урҙала тыныслыҡ хөкөм һөрә, мәҙәниәт, сауҙа, дин һәм ғилем эше сәскә ата.

Үзбәк хан заманында Яйыҡ башында, Ирәмәл эргәһендә йәшәүсе ата-бабаларыбыҙ асылда ислам динен ҡабул итеп бөтә.

Шуны ла билдәләп үтәйек: Сарайҙың, йәғни Алтын Урҙа хандарының Башҡортостан менән бәйләнештәре бик тығыҙ була. Бының үҙ сәбәптәре бар, әлбиттә. Күсмә халыҡ булараҡ, идара итеүсе монгол-татар аҡһөйәктәре ҡышты Сарайҙа баш ҡаланың уңайлы шарттарында үткәреп, яҙ көнө үләндәр ҡалҡыу менән йәйләр өсөн Уралға, Башҡортостанға табан йүнәлгәндәр. Йәйҙе ошонда үткәреп, ҡыш етеүгә генә кире Сарайға ҡайтыр булғандар.

Алтын Урҙа бик ҙур дәүләт (империя) булараҡ, 12 улуҫҡа (өлөшкә) бүленгән, һәр улустың башында хан торған. 1243 йылдан 1380 йылға тиклем беҙҙең төбәк Болғар, Башҡорт һәм Көнбайыш Себерҙе үҙ эсенә алған ғәйәт ҙур биләмә эсендә булған. Хан ставкаһы (ошо өлкә ханының) Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалалары тирәһендә булған. Тәү башлап был әлкәгә хан булып Джучи улы Шибан тәғәйенләнгән. Унан һуң был өлкә менән Джучи Буҡа Бадаҡул, Миң Тимер идара иткән. Миң Тимер үлгәндән һуң Алтын Урҙа дәүләтендә оҙаҡ ваҡыт үҙ-ара һуғыштар, фетнәләр булып ала, империя көсһөҙләнә, таркалыуға бара. Ошондай шарттарҙа Миң Тимерҙең улы Илбәк Башҡортостанды айырып алып, башҡорт иленең ханы булып китә.

Илбәк хандан һуң Ҡанбай хан власка килә, ул Алтын Урҙа ханы Туҡтамыштың (1380—1399) замандашы булараҡ тарихҡа ингән.

Мәхмүдек хан биләмәләрен ҙурайтып, Көнбайыш Себерҙе лә үҙенә ҡуша. Ошо Мәхмүдек хан заманынан көнбайыш Себерҙең тарихы башҡорт иле тарихы менән тығыҙ бәйләнгән, яҙмыштарыбыҙ уртаҡҡа әйләнгән.

Мәхмүд хан идара иткән осорҙа башҡорт иле менән Көнбайыш Себерҙең Алтын Урҙа ҡаршыһындағы абруйы бик ҙур була. Мәхмүд хан үҙе лә бик ҡеүәтле хан булып танылған. Ул үлгәндән һуң хан тәхетенә улы Ибәк (Ибраһим) килә. Ул Алтын Урҙа эштәренә ҡыҫылып маташа, 1499 йылда вафат була. Ибәктең улы Мортаза хан XVI быуаттың беренсе яртыһында хакимлыҡ итә, ул үлгәс, ханлыҡ улы Күсемгә ҡала. Күсем хан 1563—1598 йылдарҙа башҡорт иле менән Көнбайыш Себерҙең, йәғни ата-бабаларынан ҡалған биләмәнең ханы була. Ошо урында мин Зәки Вәлидиҙең «Башҡорттар тарихы» тигән китабына таянып, тарих фәнендә ошоғаса йәшәп килгән бер хатаға иғтибарығыҙҙы йүнәлтәм. Быға тиклем рәсми фәндә: «Башҡортостандың бер өлөшө Себер ханы Күсем ҡулында булған», — тигән фекер йәшәп килде. Ә беҙҙеңсә тап киреһе: хан Башҡорт иленеке булған, ә Көнбайыш Себер — ошо ханлыҡтың бер өлөшө генә. Күсем хан дәүеренә килһәк, был ваҡытта ханлыҡтың биләмәләре нык кәмеүен күрмәү мөмкин түгел (Урал алды башҡорттарында нөғәй мырҙаларының хакимлығы көслөрәк булған). Әммә Күсем үҙе лә (тарих уны башҡорт тип, йәғни ваҡыт үтеү менән башҡортлашҡан легендар шәхес тип таба), уның ата-бабалары ла үҙҙәрен башҡорт иленең хандары тип иҫәпләгәндәр, Күсем үлгәндән һуң уның улдары башҡорт иленең бойондороҡһоҙлоғо өсөн урыҫтарға ҡаршы көрәште етәкләгәндәр, XVIII быуат башына ҡәҙәр, яндарында башҡорттарҙы туплап, урыҫ колонизацияһына ҡаршы торғандар.

Тимәк, башҡорт иленең, шул иҫәптән беҙҙең төбәктең дә, урта быуаттарҙағы тарихын хандарһыҙ күҙ алдына килтереү мөмкин түгел.

Зәки Вәлиди Туған «Хан һарайын «Алтын таш» тип атағандар», тип яҙа «Башҡорттар тарихы»нда. Тимәк, Ҡорама ауылынан алыҫ түгел ерҙәге (Силәбе әлкәһендә) Алтын-таш ауылы урынында бынан бер нисә быуат элек хан ставкаһы булған тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Башҡорт иле Алтын Урҙа составында артыҡ нык иҙелеп йәшәгән, тип әйтеп булмай. Сөнки башҡорттарыбыҙҙың еренә, һыуына, теленә, диненә бер кем дә янамаған. Дәүләте булғас, әлбиттә, һалымы ла булған (йәнлек киреһе менән, бал менән яһаҡ түләү, хан ғәскәренә хеҙмәткә алыныу Һ.6.). Тағы шуныһы: Алтын Урҙа хандары һуңғы 3 быуаттағы (XVIII, XIX, XX) колонизаторҙарҙан сағыштырғыһыҙ рәүештә мәрхәмәтлерәк, кешелеклерәк булған, һәр хәлдә, Алтын Урҙа дәүерендә башҡорттоң башҡалар тарафынан йотолоуын, күпләп ҡырылыуын тарих хәтерләмәй.

Халыҡ араһында Аҡһаҡ Тимерҙең ата-бабаларыбыҙ ерендә булыуы тураһында легенда йәшәй. Сәмәрҡәнд әмире — Тимурҙың беҙҙең төбәктә булыу-булмауын аныҡ ҡына әйтеп булмай. Әммә Тимурҙың Туҡтамыш ханға ҡаршы алып барған һуғышы ваҡытында, 1391 йылда, әмирҙең ғәскәре Орск ҡалаһы тирәһендә Яйыҡ йылғаһының һул яҡ

**Күсем хан нәҫеле (Зәки Вәлиди Туған буйынса)**




ярында туҡтай, ҡуҙғалып йылға буйлап өҫкә күтәрелә, йылғаны кисеп, 18 июнь көнө Ҡондорса йылғаһы (хәҙерге Һамар өлкәһе) буйында генераль алышта Туҡтамыш армияһын ҡыйрата. Әгәр ҙә Тимур ысынлап та беҙҙең тирәлә булған икән, был ваҡиғаның бары тик ошо 1391 йылда ғына булыуы мөмкин. Сөнки Тимур Туҡтамышты тар-мар иткәс тә, Сәмәрҡәндкә ҡайтып китмәй, ә Туҡтамыш хандың терәге булған башҡорт йәйләүҙәрен туҙҙырырға тотона. Күп һанлы ғәскәрен бәләкәйерәк отрядтарға бүлгеләп, Тимур уларҙы башҡорт иленең төрлө төбәктәренә оҙата, һөҙөмтәлә улар башҡорт илен ҡанға батыра.

XIV быуаттың өсөнсө сирегенән башҡорт иленең айырым өлөштәре менән идара итеү нөғәй мырҙалары ҡулында була. Кемдәр һуң ул нөғәйҙәр? Нөғәйҙәр, икенсе төрлө манғыттар — монголдар менән килгән, татарса һөйләшкән бик көслө ҡәбилә. Нөғәйҙәр (манғыттар) башҡорт иленә ауыл-ауыл күсенеп ултырғандар. Был ултыраҡ нөғәй ырыуҙары нөғәй (манғыт) мырҙаларының (урыҫса — кенәз) төп таянысы булған.

XV быуат баштарында беҙҙең төбәктә лә бер нөғәй мырҙаһы ныҡына. Исеме — Нуретдин (Нурадын)[7], Илек буйынан күсенгән ул бында. Башҡорттарҙа ул поэтиклаштырылған Мораҙым исеме менән билдәле («Иҙеүкәй менән Мораҙым»)*. Уның ейәне Муса мырҙа күренекле түрә була. Уның тураһында ҡобайыр юлдарын килтерәбеҙ (шиғыр Муса мырҙаның улы Шых Мамай исеменән һөйләнелә):

---

* Нурадындың (Мораҙымдың) атаһы Едигей (Иҙеүкәй батыр) 1352—1419 йылдарҙа йәшәгән, Нөрәй ханлығына нигеҙ һалған күренекле шәхес. Едигей йәш ваҡытында Алтын Урҙа ханы Туҡтамыштың төмәне, йәғни 10 меңлек ғәскәр башлығы, 1399 йылда Туҡтамыш ғәскәрен тар-мар итеп, уның урынына хан итеп үҙ кешеһен ултырҙҡан, 1408 йылда Мәскәүҙе уҡа һалған кеше. Едигейҙың кинйә улы Нурадындың тыуған йылы билдәле түгел, 1426 йылдан башлап, йәғни Алтын Урҙа тамам емерелгәс, Нөғәй урҙаһына әмир булып ултырған кеше. Хакимлыҡ өсөн көрәш ваҡытында ҡон йолаһы буйынса 1440 йылда үлтерелә.

Эдил башы Эремен тау
Менин атам Мусаның
Эли ҡонған ери иди

Яйыҡ башы ҡара арман
Менин атам Мусаның
Яз яйлаған ери иди...

Тәржемәһеҙ ҙә аңлашыла, һүҙ Муса мырҙаның Ирәмәл, Яйыҡ башы тирәләрендә, ҡарурманлы, таулы ерҙәрҙә йәйләүе тураһында.

Ошо беҙ йәшәгән төбәкте үҙҙәренең ставкаһы итеп, ошонан тороп Муса мырҙа һәм уның улдары Яйыҡ буйы, Башҡортостан менән идара иткәндәр. Муса мырҙаның улдары ла бик абруйлы булалар. Уларҙың идара итеү йылдары:

— Сайдаҡ мырҙа (1540 йылға тиклем),
— Шых Мамай мырҙа (1540—1548 йылдар),
— Йософ мырҙа (1548—1555 йылдар),
— Исмәғил мырҙа (1555—1563 йылдар).

1563 йылдан 1580 йылға тиклем Тиңәхмәт мырҙа хакимлыҡ итә, ул Исмәғил мырҙаның улы була. Тиңәхмәт мырҙаның улы Ормәмбәт мырҙа 1580—1601 йылдарҙа мырҙалыҡ итә.

Был мырҙалар бер үк ваҡытта Оло Нөғәй урҙаһының мырҙалары ла булалар. Шуға ла Тиңәхмәт мырҙаның ҡыҙына әйләнеү Күсем хан өсөн үҙе бер бәхет була.

Ормәмбәт бей заманында Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ өлөшөндә Исмәғил мырҙаның улы Урус мырҙа хакимлыҡ итә. Ханлыҡ үҙәге Уй һәм Тубыл йылғалары араһында була.

Урус мырҙа Күсем ханға урыҫтарға ҡаршы көрәштә ярҙам итә.

Бөгөнгө көндә Башҡортостанда нөғәйҙәр юҡ: уларҙың башҡорт илен ташлап (ҡалдырып) китеүҙәре 1558 йылда башлана. Ҙур аслыҡ һәм урыҫ хөкүмәтенең ҡаты ҡыҫымы аҫтында Иҙелдең көньяғындағы Оло Нөғәй Урҙаһы тарҡала, һөҙөмтәлә нөғәйҙәрҙең ҙур өлөшө Ҡырымға, Кубангә күсенеп китә, Исмәғил мырҙаның ҡулы аҫтында Башкортостанда йәшәгәндәре урыҫ подданствоһын ҡабул итә.

XVI быуат урталарында Яйыҡ-Иҙел башында йәшәгән Шалғыҙ йырау ҙа урыҫ дәүләтенә ҡушылмай, нөғәйҙәр менән Кубангә китә.

1600 йылда яңынан ҡурҡыныс аслыҡ, үҙ-ара тартҡылаш була. Быларҙан тыш, Ормәмбәт мырҙа вафат була. Ошо йылдарҙа «1 млн. нөғәй һәләк булды», — тиелә документтарҙа.

1696 йылда нөғәйҙәрҙең һуңғылары башҡорт илен мәңгегә ҡалдырып, Ҡырымға һәм Кубангә күсенә[8].

## ИҘКӘРМӘЛӘР

### I бүлек


1. Тулыраҡ мәғлүмәт: Н. Мажитов, А. Султанова. История Башкортостана с древнейших времен до XVIII века. — Уфа: Китап, 1994.
2. Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. — М.; Наука. — 1974; он же. Историческая этнография башкирского народа. — Уфа; Башкнигоиздат. — 1978.
3. Гумилев Л. Н. Древние тюрки. — СПб.; 1993.
4. Он же. Хунну. — СПб.; — 1993.
5. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Төрк һәм татар тарихы. — Өфө; Китап. — 1994.
6. Шунда уҡ.
7. Иҙеүкәй менән Мораҙым. — Өфө; Китап. — 1994.
8. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Күрһәтелгән әҫәр.

# УРЫҪ БАТШАЛЫҒЫ СОСТАВЫНДА

## УРЫҪ ХАКИМЛЫҒЫН ҠАБУЛ ИТЕҮ ҺӘМ УНЫҢ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Башҡорт халҡының күсмә тормоштан ярым күсмә тормошҡа күсеүе X—XIV быуаттарҙы үҙ эсенә ала. Күсмә тормош менән йәшәү күберәк дала шарттары өсөн хас күренеш. Урман, урман-дала зонаһында йәшәй башлау хужалыҡта оло үҙгәрешкә килтерә: күсмә тормош ярым күсмә тормош менән алмашына. Әммә ҡыштарын далаға мал ҡыуыу күп урында оҙаҡ һаҡлана. Беҙҙең төбәктә, мәҫәлән, XVII быуат башына тиклем мал ҡышҡы осорға Тубыл буйҙарына әйҙәлгән, шунда тибенеп ҡышты сыҡҡан (ҡалмыҡ ябырылыуына тиклем). Мал ҡышты киң далала тибендә үткәргән, ә яҙҙан көҙгә тиклем күберәген тау-урманлы ерҙәрҙә бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөгәндәр. Ата-бабаларыбыҙҙың ярым күсмә тормошҡа күсеүе документ менән нығытылған, йәғни уға юридик төҫ бирелгән. Урыҫ подданствоһын ҡабул иткәс бирелә торған «жалованная грамоталарҙа» һәр ырыуҙың ер биләмәләре, уның сиктәре асыҡ билдәләнгән, ошо сиктәрҙән сығыу тыйылған. XVIII быуат баштарында төҙөлгән урыҫ ҡалалары, ҡәлғәләре, нығытылған сик буйы линиялары ҡышҡылыҡҡа далаға мал менән күсенеү юлдарында ныҡлы кәртә булып торған.

Шулай итеп, X—XVIII быуаттарҙа беҙҙең төбәктә хужалыҡтың нигеҙен малсылыҡ тәшкил иткән, игенселек юҡ кимәлендә генә булған', һунарсылыҡ, солоҡсолоҡ, балыҡ тотоу киң таралған була. Һунарсылар һыбай, суҡмар һәм ҡамсы менән бүре, төлкө һуғып алғандар. Халҡыбыҙҙың төп аштарын малсылыҡ аҙыҡтары, бал, йәнлек, ҡошҡорт иттәре, балыҡ тәшкил иткән. Ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләү XVIII быуатта ғына башлана.

Башҡорттарҙың хужалығында йылҡысылыҡ тармағы өҫтөнлөк итеп, һыйыр малы, һарыҡ, кәҙә кәмерәк аҫыралған. Бының сәбәбе ябай: уларға ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләргә кәрәк булған. Йылҡы малы ҡыштарын тибендә үткәргәнлектән, иҡтисади күҙлектән сығып ҡарағанда ат аҫрауға өҫтөнлөк биреү отошло булған. Ҡайһы бер байҙар (мәҫәлән, Оҙонкүл ауылынан Етембай бай) меңәр баш йылҡыға хужа булһалар ҙа, ябай башҡорт ғаиләләрендә аттар һаны күп осраҡта бер нисә йөҙ баштан артмаған. Профессор С. И. Руденко, малсылыҡ менән көн күргән 5 кешелек ғаиләгә, минималь ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерер өсөн атҡа әйләндергәндә кәмендә 25 баш йылҡы тоторға кәрәк булған, ти (1 ат = $^5/_6$ һыйыр малы = 6 һарыҡ йә кәҙә). Хужалыҡ итеүҙең төп тармағы малсылыҡ булыуы, икенсенән, бик күп буш ятҡан, эшкәртелмәгән ер майҙандарын (көтөүлектәр) талап

иткән. Халыҡтың тығыҙлығы 1 квадрат километрға 0,5 кешенән артырға тейеш булмаған, кире осраҡта малсылыҡ шөғөлөн бөлгөнлөк көткән. Шуның өсөн дә халҡыбыҙға иркенлек, көтөүлек итеп файҙаланырға күп ер кәрәк булған. Ер башҡорттоң йәшәү сығанағы, мул тормоштоң нигеҙе булараҡ, дөйөм милек байлыҡ булып иҫәпләнгән. Шуға күрә ерҙән яҙыу — хәйерселеккә дусар булыуҙы аңлатҡан. Ата-бабаларыбыҙҙың ер өсөн көрәштә: «һин бай, мин ярлы», — тип тормайынса бер төптән булыуы, тыуған ере өсөн йән аямай ҡан түгеүе аңлашылалыр.

Тарихи сығанаҡтар башҡорт иленең бер ваҡытта ла бер бөтөн булмағанын күрһәтә. Әле II меңенсе йыллыҡтың башында, монгол-татар яуы башланыр алдынан, халҡыбыҙ өс дәүләт составында: төп өлөшө, абсолют күпселеге — Боронғо Башҡортостан дәүләтендә, ҙур булмаған өлөшө — Бөйөк Болғар батшалығында (көнбайыш башҡорттар), ә инде учалыларҙың ата-бабалары — табындар, ҡыуаҡандар — Табын конфедерацияһында булғандар.

Боронғо Башҡортостан дәүләтенең башында хан торған, Табын конфедерацияһын бейҙәр етәкләгән. Башҡорт иленең бүленгәнлеге Алтын Урҙа һәм унан һуңғы осорҙа ла һаҡланып ҡалған. Көнбайыш башҡорттары Ҡазан ханлығы составында, көнсығыш башҡорттары Көнбайыш Себер менән бер дәүләт төҙөп, уртаҡ ханға буйһонған. Үҙәк һәм көньяҡ Башҡортостанда Нөғәй мырҙалары хакимлыҡ иткән. 1580 йылда, нөғәйҙәр Башҡортостанды ҡалдырып киткәндән һуң, уларҙың ҡул аҫтында булған башҡорт волостары ҡаҙаҡ ханы Хаҡназар хакимиәтен ҡабул иткән.

Шулай итеп, Рәсәй ҡорал һәм көслөк юлы менән 1557 йылда Башҡортостандың төп өлөшөн, ә инде бер нисә тиҫтә йыл үткәс көнсығыш башҡорттарын үҙенә буйһондорһа ла, был бойондороҡлолоҡ тик ҡағыҙҙа ғына була. Башҡорт иле үҙ закондары, үҙ ҡағиҙәләре буйынса йәшәүен дауам итә, Рәсәй менән дә үҙен бик иркен, бер тиң тота, башҡорт бейҙәре, нөғәй мырҙалары һәм хандар Рәсәй тарафынан Башҡортостандың эске эштәренә ҡыҫылыуға юл ҡуймай, ҡыҫылған осраҡта баш күтәреүҙәр менән яуап бирә. XVIII быуат баштарына тиклем мөнәсәбәт шулай була. Башҡорт халҡы Рәсәй воеводаларының һүҙенә, талабына артыҡ ҡолаҡ һалып бармай (һүҙ Ҡазан, Тобольск, Верхотур өйәҙҙәре воеводалары тураһында; административ яҡтан Башҡортостан ошо 3 өйәҙгә ҡараған булған), күберәк үҙенең бейҙәрен, тархандарын, батырҙарын тыңлай, хандарына хөрмәт күрһәтә. Әммә, хандарҙың власы ла, урыҫ воеводаларыныҡы һымаҡ, юҡ дәрәжәһендә була. Хандарҙың береһе лә үҙ янында башҡорт хөкүмәтен төҙөмәгән, волостар менән идара итеүҙе лә хөкүмәт аша эшләмәгән. Рәсәй менән һуғышмаған, тыныс осорҙа башҡорттар үҙ тормоштарында хандарға артыҡ ихтыяж кисермәгән. Башҡорт иленә хандар үҙҙәре килгән, йә иһә уларҙы идара итер өсөн ситтән саҡырып килтергәндәр. Был — халҡыбыҙҙың үҙ азатлығы, иленең бойондороҡһоҙлоғо өсөн ихтилалдарға күтәрелгән ваҡыттарҙа күҙәтелгән, Башҡорт иленең хандары ғүмерҙәренең төп өлөшөн Башҡортостандан ситтә: йә Ҡаҙағстанда, йә Көнбайыш Себерҙә, йә Ҡарағалпаҡстанда, йә Кубандә йәшәп үткәргәндәр. Ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренең хандары булыуын, яуға





*Көрәгә, ижау, туҫтактар*

күтәрелгәндә яу башында хан тороуын дәүләтселек символы итеп күргәндәр. Башҡорттарға XVII быуаттың 2-се яртыһынан Рәсәйгә ҡаршы азатлыҡ һуғыштары алып * барғанда, бөтә көстәрҙе берләштереп, бергә уҡмаштырырлыҡ, күрше халыҡтар менән союз төҙөрлөк, уларҙан ҡорал, өҫтәмә ғәскәр һорап алырлыҡ абруйлы етәкселәр кәрәк булған. Ғөмүмән, феодаль дәүерҙә, ил башлыҡтары булып йә батша,

йә хан, йә солтан торғанда, бойондороҡһоҙ дәүләт төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуйған төрки, мосолман ата-бабаларыбыҙҙы хандарһыҙ күҙ алдына килтереүе бик ҡыйын. Хандар, быға тиклемге идеология һүрәтләгәнсә, башҡорт феодалдарына ғына түгел, ә бөтөн башҡорт халҡына кәрәк булған. 70—75 волоска бүленеп йәшәгән башҡорт илен бары тик хан абруйы бергә туплап тоткан. Юғарыла әйтелгәндәр хандарға ҡарата ғәҙел булмаған ҡарашты, рәсми тарихта улар өсөн билдәләнгән кәмһетеүле, түбән урынды өр-яңынан баһалап, лайыҡлы урындарын табырға ярҙам итергә тейеш.

1586 йылда Өфө ҡалаһы барлыҡҡа килгәнгә тиклем, бөтә башҡорт иле тиерлек, Урус мырҙа (Нөғәй ханы) хакимлығында булып, яһаҡты уға түләп килгән. Йәғни, Урус мырҙа Көнбайыш Себерҙә һәм Башҡортостанда тулыһынса Нөғәй идараһын урынлаштыра.

Дөйөм алғанда, XVI быуаттың икенсе яртыһында урыҫтар хакимлығын ҡабул иткән башҡорттар бик аҙ була, буйһонғандарҙың да күбеһе ярлы-ябағанан тора. XVII быуат баштарында ла әле урыҫ подданствоһын ҡабул итеүселәрҙең һаны күп булмай. Миҫал өсөн түбәндәге һандарҙы килтерергә мөмкин: 1629 йылда ни бары 888 башҡорт йорто урыҫ подданствоһында булған, 1635 йылда ла улар әллә ни күп түгел: 14000 йорттоң ни бары 2217-һе генә урыҫ хакимлығын ҡабул иткән булған[2].

Ошонан һуң: «Башҡорт иле 1557 йылда үҙе теләп Рәсәйгә ҡушылған», — тигән рәсми пропагандаға ҡарата урынлы шик тыуа. Ни өсөн тигәндә, урыҫтарҙың бөтә хакимлығы Өфө крепосынан ары китмәгән, Башҡортостан менән фактик идара итеү Күсем хан һәм уның улдары, нөғәй мырҙалары ҡулында булған. Ошо айҡанлы урынлы һорау тыуа: был тулы мәғәнәһендә урыҫ дәүләте составында булыу тигәнде аңлата аламы? Зәки Вәлиди Туғандың «Башҡорттар тарихы» исемле китабында яҙылғандарҙы бер һүҙһеҙ ҡабул итәбеҙ икән (ә башҡорт халҡының тарихын өйрәнеүселәр араһында Зәки Вәлиди торған бейеклеккә күтәрелгән ғалимдар Башҡортостанда ла, Рәсәйҙә лә юҡ), беҙ бөгөн, «башҡорт халҡы 1557 йылдан Урыҫ дәүләте составында», — тигән раҫлауға тәнҡит күҙлегенән ҡарарға һәм башҡорт халҡының урыҫ колонизаторҙарына ҡаршы йүнәлтелгән 220 йыллыҡ азатлыҡ һуғышы тураһында асыҡтан-асыҡ әйтергә тейешбеҙ. Ошо ерҙә Зәки Вәлиди Туғандың үлемһеҙ һүҙҙәрен килтереү урынлы булыр: «Урыҫ баҫып алыуына ҡаршы был тиклем оҙаҡ һәм ныҡышмалы, аяуһыҙ көрәшкән башҡа һис бер ҡәүем һәм һис бер төрки ҡәбиләһе юҡ». Урыҫ тарихсыһы Дубровин башҡорттарҙы юҡҡа ғына «урыҫ хакимиәтенең көнсығыштағы иң дәһшәтле дошманы», — тип баһаламағандыр.

Ошоларҙан сығып, беҙ Көньяҡ Уралдың, атап әйткәндә беҙҙең төбәктең нисек Рәсәй составына инеүен асыҡлаясаҡбыҙ. Тарихи документтарҙан күренеүенсә, Көньяҡ Урал башҡорттарының бер өлөшө (төньяҡ өлөшөндә йәшәгәндәре) 1586 йылдан рус подданствоһы ҡабул итеп, Өфөгә, Верхотурға яһаҡ алып барып тапшыра башлайҙар (1581 йылда Йәрмәк етәкселегендә казактар отряды Себерҙе яулап алыуҙы башлай)[3].

Көнсығыш табындар (ҡара табын, барын, тиләү, күбәләк) рус подданствоһына инеүҙән ҡәтғи баш тарталар һәм Күсем ханға тоғролоҡ һаҡлап, урыҫ агрессияһына ҡаршы бергәләп көрәшәләр, һуғыш хәрәкәттәре бик ҙур ерҙә — Йәйыҡтан алып Иртышҡа тиклемге арала — аралаш уңыш менән алып барыла. Бәрелештәрҙең береһендә (1598 йылдың 4 авгусы) Күсем хан һәләк була. Көрәш башына Күсемдең улы — Ғәли хан баҫа. Урындағы батша властары, башҡорттар йәшәгән ерҙәргә карательный походтар ойошторо, уларҙы ҡурҡытырға иҫәп тота. Мәҫәлән, 1596 йылдың йәй айҙарында, Ҡаратабын волосы ерҙәренә Лука Щербатовтың ғәскәрҙәре һөжүм итә. Был сапҡында Ишбахтин ауылы баҫып алынып, яндырыла, 30-лап ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға әсир итеп алына һәм Себерҙәге урыҫ ҡалаларында һатыла. Асыуҙары ҡабарған башҡорттар ялыу менән Өфө воеводаһына мөрәжәғәт итәләр, ә ул үҙ сиратында ошо вәхшилек тураһында юғарыға яҙып ебәрә. Мәскәүҙән, батша Федор Ивановичтан: «Әсирҙәрҙе азат итергә!» — тигән әмер килә. Ләкин Төмән воеводаһы уны үтәмәй. Был тартҡылаш 4 йылға һуҙыла. Сабырлыҡтары бөткән башҡорттар 1600 йылда Төмән воеводаһы биләмәләренә баҫып инеү өсөн әҙерлек башлай. Өфө воеводаһы Михаил Нагой башҡорттар һәм Күсем хандың улдары менән урыҫ подданствоһын ҡабул итеү буйынса һөйләшеүҙәр башлай, әммә уңышҡа өлгәшә алмай. 1601 йылда ул шул уҡ маҡсат менән Ҡаратабын волосы старшинаһы Үтәмеш Әнүәровҡа илселәр ҙә ебәрә, ләкин воеводаның ниәте йәнә барып сыҡмай.

1601 йылда Йәйыҡ далаларында күсмә тормош менән йәшәгән нөғәйҙәр (Алта Улишами һәм Ян Руслан ҡулы аҫтындағы 7000 нөғәй) Миәс-Исәт йылғалары буйҙарына күсеп килеп, тап шул саҡта был тирәлә урыҫ агрессияһына ҡаршы ҡыҙа барған һуғышҡа килеп ҡушыла. Һуғыш өр-яңынан дөрләп, ҡыҙғандан-ҡыҙа, ике яҡтан да күп ҡан ҡойола. 1606 йылда был яҡтарға, Ҡытайҙарҙан еңелгәндән һуң Джунгарияны ҡалдырып, Ҡаҙағстан далалары аша, юлдарындағы бар нәмәне емереп, яндырып, халҡына ҡырғын һалып ҡалмыҡтар (200 меңгаилә) килеп сыға. Күсем хандың улдары, нөғәй мырҙалары менән уртаҡ тел табып, күмәк көс менән урыҫтар йәшәгән Себер ҡалаларына ябырыла.

Ләкин урыҫ агрессияһына ҡаршы тороусы көстәрҙе үҙ-ара берҙәмлектең булмауы, дөйөм юлбашсылыҡтың юҡлығы бөлдөрә. Бында дөйөм маҡсат, йәғни урыҫ колонизаторҙарын Себерҙән ҡыуып сығарыу тураһында һөйләп тораһы ла юҡ.

Күсем хандың улы Ғәли хан 1601—1608 йылдарҙа ҡалмыҡтарҙы йәлеп итеп, Урус мырҙа менән уның улдарының ярҙамына таянып, урыҫтарға ҡаршы ҡаты һуғыштар алып барған, хатта Өфө ҡалаһына һөжүм иткән. Хандың ҙур булмаған шәхси ғәскәре барын ырыуы аҙаматтарынан төҙөлгән булған. 1608 йылда Ғәли хан ғәскәре өҙлөкһеҙ алыштарҙың береһендә ҡыйратыла, хан үҙе әсиргә төшә. (Ғәли хан 1616 йылда әсирлектә үлә).

Ғәли хан урыҫтар ҡулына төшкәс, көрәште Ишем солтан (Күсем хандың икенсе улы) дауам иткән. Бының өсөн ул ҡалмыҡтар менән союз төҙөгән. 1616 йылда Ишем солтан Өфөнө баҫып ала. Хан ставкаһы башҡорт ерендә, Тубыл йылғаһы ярында, Аман Ҡарағай тигән

урында була. Шуныһын һыҙыҡ өҫтөнә алып китәйек: хан эргәһендәге ғәскәр тик табындарҙан торған.

1622 йылда хандың Өфө яғына тағы ла бер поход ойошторoуы билдәле. Ошонан һуң бер нисә йыл үткәс, 1630 йылда Ишем хан вафат була.

Ҡара табын ырыуы урыҫ колонизаторҙарына ҡаршы көрәштә ышанысһыҙ союздаш булып сыға. Башҡа табын ырыуҙары менән сағыштырғанда улар урыҫ подданствоһына бик иртә — 1608 йылда уҡ күсә.

Бының үҙ сәбәбе бар. Ҡара табын монгол заманында уҡ өҫтөнлөклө, хакимдар ырыу һаналған; был ырыуҙың бейҙәре тиҙ арала Рәсәй яғына күсеп, хатта үҙ ғәскәрен төҙөп, урыҫтар яғында Күсем улдарына ҡаршы көрәшкән. Был — башҡорт халҡы араһында берҙәмлектең булмауын күрһәтеүсе сағыу миҫалдарҙың береһе. Етмәһә, улар урыҫ хакимиәтенең ҡотҡоһона бирелеп, йәшәгән ерҙәрен ташлап, бар ырыуы менән Өфө тирәләренә күсеп китергә маташҡан. Абылай солтан, атаһы Ишем хан вафат булғас, урыҫтарға ҡаршы һуғышты үҙ ҡулына алған шәхес, ҡалмыҡтар менән берләшеп, ҡара табындарҙың көнбайышҡа юлын киҫә, дөйөм эшкә хыянат иткән өсөн ырыу бейҙәрен ҡаты язаға тарттыра. Абылай солтандың үҙәк ставкаһы Ишем йылғаһы буйында (Ҡушҡарағай исемле ерҙә), икенсе ставкаһы Торатау (Стәрлетамаҡ эргәһендә — ?) тирәһендә булған. 1633 йылда ул Көньяҡ Урал башҡорттарын урыҫ хакимлығынан ҡотҡарырға ынтылып ҡарай. 1636 йылда Абылай солтан, ҡалмыҡтарҙың ҙур булмаған отряды ярҙамында, Өфөгә сапҡын ойоштора, ләкин Ҡариҙел эргәһендә (Өфөнән 15 саҡрымда) хәл иткес алышта тар-мар ителә, үҙе әсиргә алына. Абылай солтандың ғәскәр башында походҡа сыҡҡанын ишеткән ҡара табындар, йәйләүҙәрен ташлап, Өфө яғына күсеп китергә мәжбүр була. Ҡорал тота алған ир-ат урыҫ ғәскәренә ҡушыла һәм шуның менән батша яҡлы ғәскәрҙәрҙең еңеүен тәьмин итә. Ҡара табындарҙың батша властары алдында абруйҙары бермә-бер арта. 1636 йылда дөйәм азатлыҡ хәрәкәтенә тәүге емергес удар яһала.

Әммә башҡорт илендә яу туҡтамай. Көрәш байрағын Дәүләтгәрәй Солтан күтәреп ала. Тик ул урыҫҡа ҡаршы аяуһыҙ һуғышыусы хандарҙың һуңғыһы була. 1646—48 йылдарҙа урыҫ колонизаторҙарына ҡаршы тороу үҙенең иң юғары нөктәһенә етә. Дәүләтгәрәй Солтан Өфөнө, Башҡорт илен азат итеүгә бик күп көс һала, ләкин быуат буйына һуҙылған өҙлөкһөҙ һуғыштар илде бөлдөрә, еңеүгә булған ышаныс юғала барыу сәбәпле, урыҫтарға ҡаршы йүнәлтелгән коалиция таркала башлай. 1646 йылда нөғәйҙәрҙең бик күп өлөшө, ҡалмыҡтар менән һуғыша-һуғыша, Башҡортостанды ташлап, Волганың түбәнге ағымына күсеп китә. 1649 йылда 300 йорттан торған Юрматы волосы (иң һуғышсан, сая, баш эймәҫ ырыуҙарҙың береһе) урыҫҡа баш һала. Көнбайыш һәм Үҙәк Башҡортостан көрәштән ситләштерелә, — улар урыҫ подданствоһына күсеп, яңы хакимиәткә тоғролоҡ һаҡлайҙар. Өҫтәүенә, ҡалмыҡтар башҡорттарға хыянат итеп, урындағы халыҡты талай башлай. 1648 йылдан Дәүләтгәрәй Солтан һуғыш хәрәкәттәрен ике фронтта алып барырға мәжбүр була: урыҫтарға һәм хыянатсыл ҡалмыҡтарға ҡаршы. Ниһайәт, 1655 йылда, Башҡорт илендәге ҡалмыҡтар

ҙа урыҫ хакимиәтен ҡабул итеп, хәҙер йәшәгән ерҙәренә — Ҡалмыҡ - станға күсенәләр.

Дәүләтгәрәйҙән һуң урыҫ колонизацияһына ҡаршы киң фронт менән һуғыш хәрәкәттәре алып барыу туҡтай. Унан һуң көрәште дауам иттереүселәрҙән һаналған Абуға солтан менән Кесе солтан (икеһе лә бер үк ваҡытта башҡорт һәм ҡарағалпаҡтарҙың ханы) етәкләгән көрәш күберәк партизандар һуғышы төҫөн ала.

Шулай итеп, ырыуҙаштарыбыҙҙың ата-бабалары табындар (Ҡыуаҡандар тураһында мәғлүмәтебеҙ юҡ) тотош бер быуат (1580—1680), башҡорт иле хандарына тоғролоҡ һаҡлап (ҡара табындарҙы иҫәпләмәгәндә), урыҫ колонизаторҙарына ҡаршы йәнен-тәнен аямайынса, ҡулдарынан ҡорал төшөрмәйенсә һуғышҡан. Бөгөнгө көндә барындарҙың, күбәләк-тиләүҙәрҙең бик әҙ һанлы булыуының төп сәбәбе лә бер быуатҡа һуҙылған тиңһеҙ алыштыр, моғайын.

Ата-бабаларыбыҙҙың урыҫ хакимиәтен тулыһынса таныуҙары 1732 йылдан һуң, ҡаҙаҡтарҙың башҡорттар менән сиктәш йәшәгән Кесе Жузы урыҫ подданствоһын ҡабул иткәс кенә була. «Урыҫ хакимлығынан ҡасыу мөмкин түгел», — тигән фекер шул саҡтарҙа ныҡына.

«Табындар иң һуңғы дәүергә тиклем Күсем улдарына тоғро ҡалдылар», — тип яҙа Зәки Вәлиди Туған һәм беҙ ата-бабаларыбыҙҙың азатлыҡ, ирек һөйөүсәнлек принциптарына тоғро булыуҙары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана алабыҙ.

Һығымта:

1) Урыҫтарға иң башлап ҡара табындар буйһонған (1608 йылда).

2) Ҡалған ырыуҙарыбыҙ: күбәләктәр, тиләүҙәр, ҡыуаҡандар, барындар Урыҫ дәүләтенең власын бик һуң — XVII быуат аҙағында — XVIII быуат башында ғына таныған.

3) Ата-бабаларыбыҙ үҙ хандары етәкселегендә быуаттан ашыу урыҫ колонизаторҙарына ҡаршы көрәшкән.

3. Вәлидиҙең «Башҡорттар тарихы» исемле китабында башҡорт халҡының XVIII быуатҡа тиклемге тарихын дөрөҫ аңлауҙа принципиаль әһәмиәткә эйә булған һығымта бар. Мәшһүр тарихсыбыҙҙың яҙыуынса, 1732 йылда ҡаҙаҡ ханы Әбүлхәйер урыҫ подданствоһын ҡабул иткәнгә ҡәҙәр, 1735 йылда Ырымбур төҙөлә башлағанға тиклем, хәҙерге Һамар—Өфө—Силәбе тимер юлының көньяғындағы башҡорттар үҙ мөхтәриәтен һаҡлап килгәндәр, һәм ошо ерҙәрҙә көн иткән башҡорттар менән Рәсәй хөкүмәте араһындағы мөнәсәбәттәр «илселек» алмашыу формаһында йәшәп килгән.

Был һығымта башҡорт халҡының тарихына, үткәненә булған ҡарашты тамырынан үҙгәртә. Тимәк, башҡорт халҡының 60—70 проценты XVIII быуаттың 30-сы йылдарына тиклем батшаларға баш эймәйенсә, үҙ бейҙәренең, волость старшиналарының власын ғына белгән һәм таныған. Тимәк, беҙҙең төбәк (ул үрҙә телгә алынған тимер юл линияһынан көньяҡта ята) башҡорттары ла 1735 йылға тиклем ҡағыҙҙа ғына урыҫҡа бойондороҡло һаналып, асылда иһә үҙаллылыҡтарын һаҡлап йәшәгәндәр.

Өҫтәп шуны ғына әйтергә ҡала: урыҫ колонизаторҙарын ил эсенә оҙаҡ ваҡыт индермәй тороуҙа, ниндәйҙер дәрәжәлә традицион үҙида-

ралыҡты һаҡлап алып ҡалыуҙа, ер-һыуҙарҙы, телде, динде, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе юғалтыуға юл ҡуймауҙа башҡорт ихтилалдарының әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ зур.

Ә хәҙер 1732 йылға туҡталайыҡ. Ни өсөн 3. Вәлиди Туған был датаға шул тиклем зур әһәмиәт бирә? Эш шунда: XV быуаттан алып башҡорт иленең көнсығыштағы һәм көньяҡтағы ут күршеһе ҡаҙаҡ халҡы булып, Башҡортостандың ул замандағы сама менән 3000 саҡрымға һуҙылған тышҡы сиктәренең тап яртыһы башҡорт-ҡаҙаҡ күршелегенә тура килгән. Йәғни, Рәсәй 1557—1600 йылдарҙа көслөк менән исем өсөн булһа ла башҡорттарҙы үҙ хакимлығын танырға мәжбүр итһә лә, Башҡортостан Рәсәй сигендәге баш бирмәгән зур бер өлкә хәлендә ҡала биргән. Уның Рәсәй менән дөйөм сиге лә (көнбайышта һәм төньяҡта) сама менән 1500 саҡрым тәшкил иткән.

Иң мөһиме, ошо 1500 саҡрымға һуҙылған башҡорт-ҡаҙаҡ сигендә Рәсәйҙең бер генә ҡәлғә-ҡалаһы ла, башҡа терәк пункты ла булмаған, ике туғандаш халыҡ араһында сик асыҡ булған. Икенсе төрлө әйткәндә, ул саҡтағы карталарҙа сик Яйыҡ йылғаһының уртаһынан үтеп, Яйыҡтың көнбайыш яры Рәсәйҙеке, көнсығыш яры — Ҡаҙағстандыҡы итеп иҫәпләнһә лә, ысынбарлыҡта сикте бер кем дә һаҡламаған. Был башҡорттарҙың хәлен күпкә еңеләйткән, ихтилалдар ваҡытында илгә өҫтәмә ғәскәр, ҡорал (ҡаҙаҡтарҙан, Ҡарағалпаҡстандан, Кубандән, Ҡырымдан) индереүҙә бер ниндәй ауырлыҡ булмаған. Ихтилалдар аяуһыҙ рәүештә баҫтырылғандан һуң (1735 йылға тиклем Башҡорт иленең эсендә Рәсәй ғәскәр тотмаған; Килешеү шарттарына ярашлы рәүештә — тота ла алмаған), баш күтәреүселәргә каратель отрядтарының эҙәрлекләүенән ҡасып, ҡаҙаҡ далаларына китеп торорға

*Ҡаҙаҡ яуғиры. XV быуат*

ла мөмкинселек булған. Тағы шуныһы: 1732 йылға тиклем Ҡаҙағстан үҙ аллы, бойондороҡһоҙ дәүләт һаналып, Рәсәйҙең талаптарын (Рәсәй уларҙы ҡуйған хәлдә лә) үтәргә уйлап та ҡуймаған.

Үрҙә әйтелгәнсә, ҡалмыҡтар менән өҙлөкһөҙ һуғыштар арҡаһында ерҙәрен юғалтып, хәлһеҙләнгән ҡаҙаҡтар, 1732 йылдан Рәсәйҙең хакимлығын танып, уның вассалына әйләнгәндәр. Бынан һуң улар Рәсәйҙең талаптарын, бойороҡтарын үтәп, башҡорттарға ярҙам итеүҙән баш тартырға, ихтилалдары уңышһыҙлыҡҡа осраған хәлдә күршеләренә ҡасып килгән башҡорттарҙы үҙ ерҙәренә үткәрмәҫкә тейеш булғандар.

Бына шуға күрә 1732 йылда башҡорттарҙың Рәсәйҙән ҡотолоу өмөттәре һүрелә, тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Был тулыһы менән беҙҙең төбәккә лә ҡағыла, сөнки ата-бабаларыбыҙ көн иткән ер XV—XVI—XVII—XVIII быуаттарҙа башҡорт менән ҡаҙаҡ илдәренең сигендә булған бит.

Әммә башҡорттар ошондай ауыр мәлдә лә төшөнкөлөккә бирелмәй, бойондороҡһоҙлоҡ өсөн алып барылған азатлыҡ һуғышынан ваз кисмәй. Тик шуныһы, был яғына Рәсәйгә ҡаршы ихтилал башлаған осраҡта, башҡорттарға бары үҙ көстәренә генә таянырға тура килә, сөнки төрки донъяһы халыҡтарының ярҙамға килеү мөмкинлектәре киҫелгән була. Ҡаҙаҡ иленең Кесе Йөҙө урыҫ подданствоһын ҡабул иткәндән һуң, XVIII быуаттың 30-сы йылдарында батша Рәсәйе Башҡортостанды колонизациялауға ныҡлап керешә. Урыҫ дәүләте эсендәге башҡорттоң боронғо үҙаллылығын, күҙ ҡараһындай һаҡлаған азатлығын, хоҡуҡтарын юҡҡа сығарыу маҡсатында 1735 йылда Башҡорт иле менән Ҡаҙаҡ иленең уртаҡ сиктәрендә Ырымбур экспедицияһы (етәксеһе — Иван Кириллов) эшен башлай. Уның һөҙөмтәһе булып Ырымбур сик буйы линияһы төҙөлә. Башҡорт илен ҡаҙаҡ даланынан айырып, уны колонизациялауҙы күпкә еңелләштереүгә, батша властары өсөн башҡорт ихтилалдары ҡурҡынысын бөтөрөүгә йүнәлтелгән сара була был. Кириллов Башҡорт иле сиктәрендә һәм эсендә 21 ҡала һәм ҡәлғә төҙөтә, ә уны алмаштырған Неплюев был һанға тағы ла 70-те өҫтәй. XVIII быуат уртаһында Башҡорт илен буйһондороп тотоу өсөн бөтәһе 115 ҡала һәм ҡәлғә барлыҡҡа килгән. Ырымбур комиссияһы етәксеһе В. А. Урусов 1740 йылдың 13 мартында Сенатҡа яҙған донесениеһында: «Себер юлындағы башҡорт ерҙәрендә (йәғни, беҙҙең төбәктә — Ә. З.) Миәс, Силәбе, Эткүл, Сыбаркүл, Уҡлы-Ҡарағай, Үрге-Яйыҡ ҡәлғәләре һалынды», — тип хәбәр итә.

## XVII—XVIII БЫУАТТАРҘАҒЫ БАШҠОРТ ИХТИЛАЛДАРЫ ҺӘМ БЕҘҘЕҢ ТӨБӘК ХАЛҠЫНЫҢ УЛАРҘА ҠАТНАШЫУЫ

### XVII быуаттағы башҡорт ихтилалдары һәм беҙҙең төбәк.

1552 йылда Ҡазан ханлығы ҡыйратылғандан һуң, Урыҫ дәүләте башҡорт илен буйһондороуҙы беренсе планға ҡуя. Әммә башҡорт ерен Рәсәйҙең бер өлөшөнә әйләндереү урыҫ хөкүмәте өсөн бигүк еңел булмаған проблемаға әүерелә. Башҡорттар араһында урыҫ ҡоллоғона

төшөргә ашҡынып тороусылар табылмай. Бөгөнгө көндә: «Башҡорттар Рәсәйгә ҡушылғанға тиклем ырыу ҡоролошо менән йәшәгәндәр», — тип уларҙың ижтимағи-сәйәси үҫештә артта ҡалғанлығын раҫларға күпме генә тырышмаһындар (ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундайҙар ҙа осрай), тарихи ысынбарлыҡ был һүҙҙәрҙе селпәрәмә килтерә. Эш башҡорттоң ырыу-ҡәбилә тормошо менән йәшәүендә түгел, ә уның тарихи хәтеренең ныҡлығында, милли ғорурлыҡ тойғоһоноң бик көслө булыуында, бер һүҙ менән әйткәндә — башҡорттоң илһөйәрлегендә, тыуған ере, иле өсөн һәр ваҡыт үҙен ҡорбан итергә әҙер тороуында, рух ныҡлығында. Бөтә донъя тарихы башҡорт кеүек азатлыҡ өсөн быуаттар буйына бер туҡтауһыҙ көрәш алып барған башҡа халыҡты белмәй[4]. Февраль революцияһына (1917 йыл) тиклемге осорҙа ғына (XVI—XVII—XVIII—XIX бб.) башҡорт халҡы азатлыҡ даулап 76 тапҡыр (!) яуға күтәрелгән. «Урал» йырында әйтелгәнсә:

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-Һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын[5].
(т. 1, 644)

XVI—XVII быуаттарҙа Башҡорт иле 70—75 волостан торған булған, һәр волосыбыҙ вассалитет шарты менән махсус Грамотаға ҡул ҡуйып, Рәсәй хакимиәтен ҡабул иткән. Был процесс 1557 йылдан XVII быуат аҙағына тиклем Һуҙылған. Оҙаҡҡа Һуҙылыуҙың сәбәптәрен үрҙә асыҡлап киттек инде: башҡорт халҡының Рәсәй ҡулы аҫтына инергә атлығып тормауы, Мәскәүҙең: «Урыҫ подданствоһын ҡабул итегеҙ», — тигән бойороғона һәр саҡ һуғыш менән яуап биреүе. Башҡорттоң иҫ киткес һуғышсан халыҡ икәнлеге урыҫ кенәздәре менән батшаларына монгол-татар яуы һәм Алтын Урҙа заманынан бирле бик яҡшы билдәле булған. Шуның өсөн дә, колонизациялауға тотонор алдынан, батша самодержавиеһы Башҡорт иленең сиктәрендә нығынырға, башҡорттарға ҡаршы көрәштә хәрби көс менән ярҙам итерҙәй ҡәлғәләр, урыҫ слободалары, ауылдары менән уратып алырға тырышҡан. Колонизациялауҙың икенсе этабында ошо нығытылған пункттарға таянып, башҡорт ерҙәрен баҫып алыу, башҡорт ауылдарын тау-таш араһына ҡыҫырыҡлау, уларҙан талап алынған ерҙәргә башҡорттар кире дәғүә итә алмаһын өсөн яңы крепостар, ҡалалар, слободалар төҙөү һәм уларға урыҫ һәм башҡа милләт халыҡтарын күсереп ултыртыу кеүек саралар күҙ уңында тотолған. Бына ошо планды эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырыу башҡортто ерҙән яҙҙырыуға дусар иткән, ерен бирмәҫ өсөн халҡыбыҙ туҡтауһыҙ баш күтәргән, яу сапҡан, һөҙөмтәлә урыҫтар тарафынан яулап алынған башҡорт еренең һәр бер ҡарышы ата-бабаларыбыҙҙың ҡаны менән һуғарылған, баҫҡынсыларҙың да йәне әҙ ҡыйылмаған. Шуныһы бик мөһим: Рәсәй үҙенең баҫып алыу сәйәсәтендә бүтән халыҡтар йәшәгән ерҙе уратып, сик буйы линиялары төҙөмәгән. Колонизаторҙар башҡорт илен крепостар теҙмәһе менән уратып алып, шунан һуң ғына уның эсенә үтеп инә алғандар. 1652—1656 йылдарҙа Сембер—Минзәлә — Иҫке Кама арты нығытылған сик буйы линияһы төҙөлә (башҡорт еренә һаман үтә ба-

рып, нығытылған 7 ҡала-ҡәлғә барлыҡҡа килә). 1731 —1736 йылдарҙа Һамар—Минзәлә—Яңы Кама арты нығытылған сик буйы линияһы һалына. Ә инде 1736—1742 йылдарҙа Һамар—Ырымбур исемле нығытылған сик буйы линияһы төҙөлә. 1739—42 йылдарҙа нығытылған һаҡмар дистанцияһы барлыҡҡа килә. 1739 йылда Ырымбур сик буйы нығытылған линияһы сафҡа инә. Был ҡәлғәләр теҙмәһе Төмәндән Силәбе, Верхнеуральск, Орск, Уральск аша Гурьевҡа барып етә. Шул уҡ йылда Уй линияһы төҙөлә (Верхнеуральск — Звериноголовск араһы ҡәлғәләр менән нығытыла). Уларҙан күпкә иртәрәк, 1685 йылда Исәт линияһы төҙөлә (Екатеринбург—Щадринск). 1736 йылда Екатеринбург сик буйы нығытылған линияһы сафҡа инә (Уса—Көнгөр—Екатеринбург).

Шулай итеп, 1652—1742 йылдарҙа, барлығы 90 йыл эсендә Башҡорт иле сиктәрендә тиҫтәгә яҡын нығытылған ҡәлғәләр теҙмәһе ҡалҡып сыға. Башҡортостан тимер ҡоршауға алына, был ҡулса ҡыҫылғандан-ҡыҫыла, башҡорт ере йылдың-йылы кесерәйә, кәмей бара.

Тәүге башҡорт ихтилалдары (1572, 1582, 1616, 1645 йылдарҙағы) локаль, йәғни ерле характерҙа була, сик буйындағы башҡорт ерҙәрен баҫып алыуға протест формаһында, күберәк Ҡазан юлы башҡорттарының ҡатнашлығы менән үтә. Сәбәбе: батша властары был ваҡытта Башҡортостанды колонизациялауҙа терәк пункты ролен уйнаясаҡ Ҡазан ҡалаһының хәүефһеҙлеген нығыта башлай, шуның өсөн башҡорт ерҙәренең эсендә (Ҡазандан көньяҡ-көнсығышҡа табан) ҡәлғәләр, острогтар, слободалар төҙөртә, унда күпләп урыҫтарҙы күсереп ултырта.

Башҡорттарҙы илдең төпкөлөнә ҡыҫырыҡлау, талап алынған ерҙәрҙә ҡәлғәләр, ҡалалар төҙөү, ошо ҡала, ҡәлғәләргә таянып, яңынан-яңы башҡорт ерҙәрен баҫып алыу тактикаһы Себер юлында ла эҙмә-эҙлекле үткәрелә. Урыҫ властары XVII быуатта башҡорттарҙы Исәт һәм Тубыл йылғаһы үҙәндәренән (бассейнынан) ҡыҫырыҡлап сығарып, Миәс, Тинес (Теча) йылғалары бассейнын баҫып алырға керешәләр, ата-бабаларыбыҙ йөҙәр, меңәр йыл көн иткән төбәгебеҙгә ҡул һуҙалар.

Беренсе Бөтә башҡорт ихтилалы 1661 йылда башлана һәм 1684 йылда ғына тамамлана, йәғни, 24 йыл дауам итә, унда беҙҙең төбәк халҡы ла дәррәү ҡатнаша. Ошонан алып башҡорт ихтилалдарының барыһы ла колонизаторҙарҙы Башҡортостандан ҡыуыу, үҙ аллы, бойондороҡһоҙ Башҡорт дәүләтен төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Ихтилалды Ҡазан юлы башҡорто, Сәйет баһадир башлап ебәрә. Ул ҡаҙаҡ хандары, Күсем ейәндәре Абуға солтан һәм Кесе солтан менән бәйләнешкә инә. 1661 йылда үҙе ҡарамағындағы һуғышсылар менән Кама буйындағы һәм Ағиҙел тамағындағы урыҫ нығытмаларын емерә. Шуға күрә, Башҡортостан тарихында нығынған фекерҙән айырмалы рәүештә, ихтилал башланған йыл тип 1662 түгел, ә 1661 йылды күрһәтәбеҙ. Ихтилалға бөтөн башҡорт халҡы ҡушыла. Барын волосында төҙөлгән ғәскәр Абуға солтан һәм Кесе солтанға килеп ҡушыла һәм ошо солтандар ғәскәренең елеген тәшкил итә. Ҡалмыҡтар менән союз төҙөлә, улар солтандарға ярҙамға 4 мең кешелек ғәскәри

төркөм бирәләр. Едисан урҙаһынан 6400 кешелек нөғәй отрядының килеп ҡушылыуы солтандар ҡул аҫтындағы хәрби көстәрҙең ҡеүәтен бермә-бер арттыра. Кесе солтан ихтилал етәксеһе булараҡ ныығыраҡ таныла, 1662—64 йылдарҙа уның етәкселегендә баш күтәреүселәрҙең берләшкән көстәре күп кенә уңыштарға өлгәшә. Шуға ла Зәки Вәлиди Туған «Башҡорттар тарихы» исемле китабында һис бер икеләнеүһеҙ: «Сәйет баһадир тарафынан башланған был хәрәкәт асылда Күсем улдары хәрәкәте ине», — тип яҙҙы.

Себер юлында урыҫ колонизаторҙарына ҡаршы көрәш башында һары Мәргән тигән күренекле шәхес торған. Уның ғәскәрендә учалыларҙың ата-бабалары ла әҙ булмағандыр, тип фараз ҡылырға тулы нигеҙ бар. Сөнки табындар урыҫ колонизацияһына ҡаршы көрәштә үҙҙәренең принципиаллектәре менән айырылып торған.

Һары Мәргән Катайск острогын, Долматов монастырын штурмлап ҡарай, әммә уңышҡа өлгәшә алмай, Иртәш күле буйына сигенә. Ана шул күл буйында 1662 йылда батша карателдәре менән көслө алыш булып, быныһында ла башҡорттар еңелә. Себер юлында ихтилал баҫтырыла. Әммә Һары Мәргән көрәште дауам иттерер өсөн ғәскәрен Ҡазан һәм Уса юлына алып китә. 1663 йылдың башында баш күтәреүселәрҙең юлбашсыларының береһе булған Һары Мәргәндең ғүмере өҙөлгәс, Себер юлы башҡорттарының көрәшен Арыҫланбәк етәкләй (1663—1664 йй.), ләкин тиҙҙән ул да карателдәр тарафынан үлтерелә. 1665 йылда Себер юлы башҡорттарын көрәшкә күтәргән ихтилал етәкселәре Тобольск ҡалаһына барып баш һалалар һәм һөйләшеүҙәр алып баралар.

1665 йылда баш күтәреүселәрҙең бер өлөшө, Ҡырым һәм Төркиә менән бәйләнешкә инеп, солтандар етәкселегендә Әстрахан аша Терекка (Төньяҡ Кавказда) һөжүм итәләр, ҡаланы баҫып алып тар-мар итәләр.

1666 йылда баш күтәргән башҡорттар, төрөктәр'һәм ҡырым татарҙары менән берлектә Венгрияға баҫып инеп, Дебрецен ҡалаһын штурмлайҙар. Шул уҡ йылда Яйыҡ башында, Күк Шымай тигән ерҙә тупланып солтандар етәкселегендә башҡорттар Мәскәүгә ҡарай поход башлай. Ока йылғаһына еткәс, көньяҡҡа боролоп, Терек ҡалаһына яңынан һөжүм итәләр, ләкин тулы уңышҡа өлгәшә алмайҙар[6].

1667 йылда баш күтәргән башҡорттар солтандар етәкселегендә Черкесскка яу сабалар (Төньяҡ Кавказ). Әйләнеп ҡайтҡанда ғәскәрҙә ни бары 2000 һуғышсы ҡалған була. Төрөк ғалимы Әүлиә Челеби ошо походтар ваҡытында башҡорт яугирҙары менән аралашып: «Ғәйәт фанатиктар, ғәйәт батырҙар, ҡылыстары үткер», — тип үҙенең һоҡланыуын йәшермәй яҙып ҡалдырған.

Беҙҙең төбәк тарихына был алыҫ походтарҙың ниндәй ҡыҫылышы бар, тигән һорау тыуыуы мөмкин. Быға яуап рәүешендә шуны әйтергә мөмкин. Беренсенән, был яу сабыуҙар Кесе солтан һәм Абуға солтан тарафынан ойоштороло ҡан. Табын тармаҡлы ата-бабаларыбыҙҙың Күсем улдарына тоғролоҡ һаҡлап ҡалғанлығы тураһында әйткәйнек инде. 1662—84 йылдарҙа башҡорт иле эсендә барған ихтилалда Барын волосында төҙөлгән отрядтың солтандар ғәскәренең елеген тәшкил

иткәнен дә әйтеп үттек. Барындар артабан да уларға тоғролоҡ һаҡлаған булырға тейештәр. Икенсенән, 1666 йылда Мәскәүгә яһалған походтың Яйыҡ башы Күк Шымайҙа яралыуы ла күп нәмәгә ишара яһай.

1670 йылда, Степан Разин ғәскәрҙәре Сембер ҡалаһына яҡынлашҡан бер мәлдә, ҡалаға көнсығыштан Сәйет баһадир етәкселегендә башҡорттар һөжүм иткән.

1671 йылғы бер документҡа Кесе солтан «башҡорт ханы» тип теркәлгән. Был һис тә ғәжәп түгел, сөнки Кесе солтан бойондороҡһоҙ Башҡортостан дәүләтен төҙөргә ынтылған, шуға ла башҡорттар уға ғәскәрҙе лә, башҡа төрлө ярҙамды ла йәлләмәгәндәр. 1662—67 йылдарҙа башҡорт ихтилалы менән етәкселек иткән Кесе солтан, Төньяҡ Кавказда (!) еңелгәндән һуң, Ҡарағалпаҡстанға китеп, унда хан дәрәжәһенә күтәрелә, 1678 йылда ҡалмыҡ ханы Аюкә менән бәрелештә һәләк була.

Бер ни тиклем ваҡыт тынып торғандан һуң, ихтилал 1677 йылда яңынан тоҡанып китә. Башҡорттар Аятская слобода тигән ерҙә туплана (Себер юлы). Нинайәт, 1678 йылда Көнсығыш Башҡортостанда бер урыҫ та ҡалмай — улар ҡыуып сығарыла. Көрәш башында тағы ла Сәйет баһадир тора. Ул нөғәйҙәр һәм ҡалмыҡтарҙың бер өлөшө менән берләшә, шулай уҡ ҡаҙаҡтарҙан да ярҙам ала. 1679 йылда башҡорттар Көңгөрҙө, Семберҙе ҡамауға ала, һөҙөмтәлә Көңгөр үртәлә. 1680 йылда башҡорт ғәскәре Волганы кисеп сығып, юлындағы урыҫтарҙы ҡырып, туҙҙырып, Пенза ерҙәренә үтеп инә. 1681 йылдың йәйендә Ҡазан, һамар йүнәлешендә башҡорттарҙың дөйөм һөжүме башлана. Был һөжүмдә Көньяҡ Урал башҡорттарының ҙур-ҙур отрядтары ҡатнашыуы мәғлүм. 1682 йылда, башҡорттар үҙҙәренең оло йыйынында артабанғы һуғыш планын төҙөйҙәр. Рәсәйгә айырым талаптар ҙа ҡуйыла. Шул уҡ йылда баш күтәреүселәрҙең сиреүҙәре Өфөнө һәм Көңгөрҙө ҡамауға алалар. Был яуҙарҙа башҡорттарға уларҙың союздаштары булған ҡалмыҡтар ныҡ ярҙам итә. 1682 йылдың август аҙағында — сентябрь башында Яйыҡ йылғаһы үрендә башҡорттар менән Тобольскиҙан сыҡҡан 2000 кешелек карателдәр отряды араһында бик ҡаты һуғыш була.

1683 йылда ҡалмыҡтар, башҡорттарға хыянат итеп, башҡорт ерҙәренә ябырыла. Улар хатта урыҫтарҙың каратель отрядтарынан да бәғерһеҙерәк ҡыланып, илебеҙҙе ҡанға батыра. Аңғармаҫтан яһалған һөжүмгә башҡорттар, әлбиттә, әҙерләнмәгән була. Ихтилал тик 1684 йылда ғына тулыһынса баҫтырыла. Башҡорт иле, шул иҫәптән беҙҙең төбәк тә бик күп юғалтыуҙарға дусар була: ихтилалдың иң әүҙем ҡатнашыусылары язалап үлтерелә, меңәрләгән башҡорт яугиры һуғыш яланында ятып ҡала, хисапһыҙ күп ҡатын-ҡыҙ, бала-саға карателдәр тарафынан үлтерелә, йә булмаһа әсиргә алынып, ҡоллоҡҡа һатыла.

Ошо ихтилалдан һуң урыҫ хөкүмәте башҡорт илен колонизациялауҙы бер аҙға туҡтатып тора. Һөҙөмтәлә 20 йыл (!) буйына Башҡортостан тыныс тормошта йәшәй.

Башҡорт иленең формаль рәүештә Рәсәй ҡулы аҫтында булһа ла, үҙ хандарына тоғролоҡ һаҡлап килеүе хаҡында әйткәйнек инде. 1678

*Башҡорт һыбайлыһы*

йылға тиклем, мәҫәлән, Кесе солтан бер юлы ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ, башҡорт ханы булып торған. Унан был вазифа Ишем солтанға күсә. Һуңынан башҡорттарҙа Сүнчәләй солтан хан була, ләкин урыҫтар уны әсир итә. Ә инде 1698 йылдан башҡорт ханы вазифаһы Мурат Солтан ҡулында була. Был фактар башҡорттарҙың бойондороҡһоҙ дәүләт төҙөү идеяһына ни тиклем тоғро булыуҙары, уның өсөн изге көрәштә ни тиклем ныҡ булыуҙары хаҡында һөйләй.

## 1704—1711 йылдарҙағы башҡорт яуында.

Башҡорт илендә 1704—1711 йылдарҙа бойондороҡһоҙ Башҡортостан дәүләтен төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуйған азатлыҡ һуғышы яңынан тоҡана. Сираттағы башҡорт ихтилалы Петр I алып барған Төньяҡ һуғышының иң ҡыҙған мәленә тура килә. Шуны ла билдәләп үтеү урынлы булыр: башҡорт ихтилалдары араһында быныһы үҙенең ныҡ ойошҡанлығы, халыҡ-ара аренала иң көслө яңғыраш алғанлығы менән айырыла. Был күтәрелеш бөтөн Башҡортостанды ялмап ала. XVIII быуаттағы иң оҙайлы был башҡорт яуында азатлыҡ байрағы аҫтына 50—60 мең милләттәшебеҙ баҫа, шуларҙың 15—20 меңе — Себер юлы башҡорттары була. Күтәрелештең 1704—1705 йылдарҙағы тәүге осоро беҙ йәшәгән төбәкте урап үтә. Учалыларҙың ата-бабалары был ихтилалда 1706 йылдан 1711 йылға тиклем ҡатнаша.

1706 йылдың йәйендә Миңдеғужа батыр Көньяҡ Урал башҡорттарын көрәшкә күтәрә. Ойошторолған отрядтарҙың бер өлөшө Көңгөр өйәҙенә бәреп инә, урыҫ ауылдарын, слободаларҙы, острогтарҙы баҫып алып, ҡыйрата. Икенсе өлөшө Башҡортостандың үҙәгенә (Өфө тирәһендәге урыҫ һәм килмешәктәрҙең ауылдарына) ҡарай хәрәкәт итә, өсөнсө өлөшө — Кама, Ҡазан тирәләрендә һуғыша. Ата-бабаларыбыҙ изге көрәш хаҡына бер ни менән дә иҫәпләшеп тормайынса, хәрби көс ҡайҙа күберәк кәрәк — үҙ отрядтары менән шунда барып ҡушылған.

1706 йылдың көҙөнән алып 1707 йылдың көҙөнә тиклем ихтилал бер ни тиклем баҫылып тора. Ошо осорҙа арҙаҡлы башҡорт бейҙәре (күпселеге Себер юлынан, тимәк, араларында беҙҙең төбәктән дә булғандарҙыр инде) Ҡырымға һәм Ғосман империяһына дипломатик миссия менән йөрөп ҡайталар, башҡорт ханы Морат Солтандың ошо төрки һәм мосолман дәүләттәренә яһаласаҡ визитын әҙерләйҙәр.

Үрҙә әйтеүебеҙсә, Сүнчәләй урыҫтарға әсир төшкәс, Себер даруғаһы башҡорттары һәм Өфө тирәһе татарҙары мәшһүр Кесе хандың улы Морат солтанды хан итеп Башҡортостанға саҡыралар. Ул 1698 йылда атаһының мираҫы булып һаналған Яйыҡ үренә килә, халыҡ Ҡөрьән үбеп уға тоғролоҡҡа ант итә, Морат солтан үҙе Башҡорт иленең яңы ханы итеп иғлан ителә. (Сығышы буйынса — данлы Күсем хан нәҫеленән).

1707 йылдың көҙөндә, 2000 ҡораллы башҡорт егеттәре оҙатыуында, ул алыҫ сәфәргә сыға — Ҡырым һәм Төркиәгә юл тота. Ғәскәрен Башҡортостанда ҡалдырып, Кубангә ул 8 башҡорт яугиры менән барып етә. Баҡсаһарайҙа ла, Истамбулда ла Морат солтандың башҡорт илен Төркиә хакимлығына ҡабул итеү хаҡындағы тәҡдименә артыҡ ҡыуанмайҙар. Сөнки Башҡортостанды үҙ подданстволарына алыу Ҡырым ханына ла, Төрөк солтанына ла, Рәсәй менән мөнәсәбәтте боҙоу булып аңлашыла. Әлбиттә, әҙме-күпме аҡса, ҡорал менән ярҙам итәләр, ләкин Морат солтан өсөн был ғына әҙ була. Бай һуғыш тәжрибәһе туплаған, яҡшы ҡоралланған, пушкалары, ҡәлғәләре булған регуляр урыҫ армияһын насар ҡоралланған (йәйә менән уҡ, ҡылыс, һөңгө), һуғыш тактикаһына өйрәтелмәгән ғәскәр менән еңеп сығып булмаясағын аңлаған Морат солтанға һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһе

бик ауыр тәьҫир итә. Ысынлап та, еңеү өсөн халыҡтың ҡаһарманлығы, ил-йорто өсөн үҙен ҡорбан итергә әҙер тороуы ғына етмәй. Төркиә менән Ҡырымдың Рәсәйгә ҡаршы һуғыш башлауы, бер һүҙһеҙ, Башҡортостандың бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәшен еңеләйтергә тейеш була, сөнки урыҫ дәүләтенең төп көстәре ул саҡта урыҫ-төрөк фронтына йәлеп ителер ине.

Морат солтан Башҡортостанға ҡайтыу юлында Волга буйында торған урыҫ каратель отрядтарына осрай һәм кире Кубангә, Кавказға сигенә, уның кем булыуын яҡшы белгән ирек һөйөүсе таулылар ҡулдарына ҡорал алып уның тирәһендә тупланалар. Тиҙ арала 1600 кешелек ғәскәр барлыҡҡа килә, ошо отряд менән Морат Солтан Терек ҡалаһына һөжүм итә, ҡаланы баҫып ала, крепосын ҡамай. Ләкин көтмәгәндә урыҫ-ҡалмыҡ ғәскәренең һөжүменә дусар була, шунда яраланып, әсир ителә. Башҡорт иленең ханы Морат Солтанды 1708 йылдың февралендә Ҡазанда язалап үлтерәләр.

Морат Солтан Ҡырымда, Төркиәлә йөрөгән саҡта, ихтилал яңы көс менән тоҡанып, бөтә Башҡортостанды солғап ала. 1708 йылдың башында Көңгөр өйәҙендә ҡаты һуғыштар башлана, ҡала үҙе оҙайлы ҡамауға алына. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ был яуҙан да ситтә ҡалмайынса, дәррәү ҡатнашҡандар. Баш күтәреүселәр (башҡорттарҙан тыш мари, сыуаш, удмурттарҙың да ҙур булмаған ҡораллы төркөмдәре) Ҡазанға яҡынлаша, ләкин ҡалаға 30 саҡрым самаһы ҡалғас, улар ҙур хата эшләй: хәл иткес мәлдә батша властары менән һөйләшеүҙәр башлай. Күтәрелеш көндән-көн ҡыҙа барғанлыҡтан властар урындағы урыҫ, татар халҡына мөрәжәғәт итеп, уларҙы «добровольческий» отрядтар ойошторорға һәм баш күтәреүселәрҙе баҫтырыуҙа ярҙам итергә саҡыра. Ярҙам өсөн әжергә ҡыйратылған баш күтәреүселәрҙең мөлкәте, мал-тыуары, ҡатын-ҡыҙҙары, бала-сағалары вәғәҙә ителә, ауылдарын үртәргә рөхсәт бирелә. Тәбиғи, был сара баш күтәреүселәргә ҡаршы һуғышҡан каратель отрядтарының бермә-бер артыуына килтерә. Һөҙөмтәлә баш күтәреүселәрҙең Ҡазанға яһаған походы өҙөлә, көнбайыш һәм төньяҡ Башҡортостанда ихтилал һүрелә. Күтәрелештең үҙәге шул уҡ 1708 йылда Себер даруғаһына — беҙҙең төбәккә күсә. 30 апрелдә Ҡара табын һәм башҡа волостарҙың башҡорттары, XVII быуаттың 80—90 йылдарында үҙҙәренән тартып алынған ерҙәрҙә төҙөлгән Чумляцкая слобода һәм уның тирәһендәге урыҫ ауылдарына һөжүм итә.

Май айында Чусовская слободаһы ҡамауға алына. 1708 йылдың июль, август, сентябрь айҙары сағыштырмаса тыныс үтә. Сентябрҙә Сыбаркүл тирәһендә ҙур йыйын үтә. Шул уҡ йылдың көҙөндә вафат булған Морат Солтан урынына хан булып Ҡарағалпаҡстандан Күсем нәҫеле Ырыҫ Мөхәммәт килә, үҙе менән 400 ҡарағалпаҡ һуғышсыһын да алып килә. Ул бында Башҡорт иле менән Көнбайыш Себерҙең ханы тип иғлан ителә, Себер даруғаһы башҡорттары Ҡөрьән үбеп уға ант итә. Хандың ставкаһы бейек тауҙар, ҡара урмандар араһында — Ирәмәл тауы эргәһендә була. Ошонан тороп хан 1708 йылдың көҙөндә Катайск слободаһына һөжүм ойоштора.

Был ихтилал башҡорт халҡының Рәсәйгә ҡаршы һуғышта үҙ яғына союздаштар йәлеп итә алыуы менән үҙенсәлекле. Иң күп һанлы һәм

шул уҡ ваҡытта иң ышанысҺыҙ союздаш — ҡалмыҡтар. 1705, 1706, 1707 һәм 1708 йылдың башында ҡалмыҡтарҙың күп кенә ҡораллы отрядтары башҡорттар яғында һуғыша, һан яғынан күпкә ҡайтышыраҡ, ләкин иң ышаныслы союзник — Едисан урҙаһы нөғәйҙәре. Улар бер нисә мең кешелек ҡораллы отряд төҙөп башҡорттар яғында иң аҙаҡҡа тиклем һуғыша.

Морат Солтандың батша йәлләдтәре тарафынан язалап үлтерелеүе бөтөн даланы тетрәтә. 1708 йылда, Мәскәүгә берҙәм һөжүм итер өсөн, 4 халыҡтың (илдең) союзы төҙөлә. Союз 15 йылға төҙөлөп, унда Башҡорт иле, Ҡаҙағстан, Ҡарағалпаҡстан һәм Ҡалмыҡ иле инә. Рәсәй дәүләте өсөн дәһшәтле союз булырға тейеш була ул, ләкин ҡалмыҡтарҙың хыянаты, 1708 йылдан урыҫ карателдәре яҡлы булып сығыш яһауҙары бөтөн тырышлыҡты юҡҡа сығара.

Бынан тыш, баш күтәреүсе башҡорттар Донда восстание күтәргән казактарҙың башлығы К. Булавин менән дә бәйләнешкә инеп, батшаға ҡаршы бергәләп һуғышырға һүҙ беркетәләр. Дон казактары үҙ аллы Башҡортостан хөкүмәтенә автономияларын иғлан итеүҙәрен хәбәр итеү һәм башҡорт иленең үҙаллылығын тәбрикләү өсөн делегация ебәрә. Башҡорттарҙан уларға алмаш делегация бара. Кем белә, улар араһында бәлки беҙҙең төбәк кешеләре лә булғандыр.

Шуны ла өҫтәп китәйек: Яйыҡ казактары менән дә шундай уҡ килешеү төҙөлә.

1707 йылдың көҙөндә Көньяҡ Башҡортостанға Кубандән Хузей солтан килә. Уның артынса үҙен башҡорттарҙың да ханы тип иҫәпләгән ҡаҙаҡ-ҡарағалпаҡ ханы Ҡәйеп хан Башҡортостандың үҙәгендә пәйҙә була. Шуныһын да әйтеп үтәйек, Ҡәйеп хан 1707—1729 йылдарҙа Ҡаҙағстанда идара иткән иң бөйөк хандарҙың берене, абруйлы ил ағаһы. Хузей солтанды ул: «Улым», — тип таныштыра. 3 даруға (Нөғәй, Уса, Ҡазан) халҡы (башҡорттар) бер юлы 2 кешегә — Ҡәйеп ханға һәм уның йөҙөндә (башҡорт иленең солтаны сифатында) Хузей солтанға Ҡөрьән тотоп ант итә. Был ваҡиға башҡорт азатлыҡ хәрәкәтенә ҙур рухи күтәрелеш һәм көс өҫтәй. 1708 йылдың йәйендә 56 ҡаҙаҡ яугиры оҙатыуында Ҡәйеп хан йәнә Башҡортостанға килә. 1709 йылдың 27 июнендә Ырғыҙыҡ күле буйында бөтә Башҡорт иле йыйыны була. Бейҙәребеҙ үҙ ғәскәрҙәре менән ҡатнаша унда, мөһим ҡарарҙар ҡабул ителә.

Беҙҙең төбәктә 1709 йылда булып үткән ваҡиғалар ағышына туҡталып китәйек.

1709 йылдың яҙында күтәрелеш бик ҙур территорияны солғап ала: Тубылдан алып Урал тауҙарына һәм Көңгөр ҡалаһына тиклем йәйелә ихтилал. Себер даруғаһы 1709 йылда ла күтәрелештең үҙәгендә була. Күтәрелеш киң төҫ ала, беҙҙең төбәк халҡы ла унда бик дәррәү ҡатнаша. 1709 йылдың апрель башында Ырыҫ Мөхәммәт хан (мәрхүм Морат Солтандың туғаны) Сыбаркүл тирәһендә 8000 кешенән торған ғәскәр туплай (Сыбаркүлдең ҡара табын ерҙәренең уртаһында ятҡанын да иҫтән сығармайыҡ). 19—20 апрелдә Чумляцкая слободаға һөжүм ойошторола, 22 апрелдә Белоярская слобода (Тинес, йәғни Теча йылғаһы буйында) һөжүмгә дусар була, ә 23 апрель көнө хан ғәскәре митрополит ауылы булған Воскресенскоеға инә.

Май айында инде башҡорт ғәскәрҙәре Арамиль, Белоярская, Багаряцкая слободаларына һөжүм итәләр. Бынан тыш, Себер даруғаһы башҡорттарының отрядтары Көңгөр ҡалаһы тирәһендә лә һуғыш хәрәкәттәре алып бара.

Июнь айында башҡорттарҙың һөжүменә дусар ителгән урыҫ слободаларының, острогтарының, заводтарының һаны бер нисә тапҡырға арта: Уктусский һәм Каменский заводтары, Долматов монастыры, Катайск һәм Колчеданск острогтары, Барнеевская, Красномысская, Багаряцкая, Окуневская, Пещанская, Чусовская, Сулемская һәм Чумляцкая слободалары.

Июль-август айҙарында ла күтәрелеш үҙенең көсөн кәметмәй. 31 июлдә полковник Толбузин етәкселегендәге ҙур каратель отряды башҡорт ерҙәренең төпкөлөнә сапҡын ойоштора. Катайскийҙан Колчеданский острогы аша Сыбаркүл буйына килеп етә карателдәр һәм бында 3 көнгә һуҙылған ҡанлы бәрелеш була. Унда батша ғәскәрҙәре еңелеп, килгән ерҙәренә кире ҡайтырға мәжбүр була. Әйтергә кәрәк, Ырыҫ Мөхәммәттең ҡул аҫтында ул бәрелештә 100 ҡарағалпаҡ, 3000 башҡорт-ҡаҙаҡ һәм 250 Ҡара табын волосы яугиры була. Шул көстәр менән генә еңеүгә өлгәшә.

1709 йылдың сентябрендә хан ғәскәре 7000 кешегә етә, ошо көстәр менән ул Ият, Писим йылғаһы буйындағы урыҫ ауылдарына һөжүм итеп, уларҙы туҙҙыра.

Исәт, Тинес, Миәс, Тубыл буйҙарында урынлашҡан урыҫ слободаларына, острогтарына һәм заводтарына бер туҡтауһыҙ һөжүмдәр бары тик 1709 йылдың декабрендә генә туҡтала. 1710 йылдың 5 февралендә Тобольскиҙан полковник Л. Парфентьев етәкселегендә карателдәр отряды башҡорт ерҙәренә ташлана. Был вәхшиҙең тыныс хәлдәге башҡорт халҡын ҡырыуы (башҡаса атау мөмкин түгел) 3 ай ярым дауам итә.

Каратель экспедицияһы бумеранг эффектын бирә. Башҡорттар тынысланыу урынына, яңынан яуға күтәреләләр: 12 майҙа улар Белоярская слободаһына һәм Колчеданск острогына һөжүм итәләр.

Июнь айында инде баш күтәреүселәр Уктус заводын, Колчеданск острогын, Арамильская, Камышевская һәм Багаряцкая слободаларын ҡамауға ала, уларҙы штурмлай.

Әммә ихтилал тулы көсөнә ҡабынып китә алмай, сөнки көньяҡтан Себер даруғаһына, юлында бөтә нәмәне ҡырып, туҙҙырып, яндырып 5000 ҡалмыҡ башкиҫәре (1710 йылдың йәйендә) бәреп инә һәм еребеҙ буйлап утлы өйөрмә булып үтә. Башҡорттар ошо хыянатсыл сапҡындан һуң ҡалҡына алмайҙар, ихтилал һүрелә барып, туҡтап ҡала. Бында бер асыҡлау кәрәк: башҡорттар төньяҡтан урыҫ карателдәренең һөжүмен кире ҡағырға әҙерләнгәндәр, ә ҡаҙаҡ далалары менән сиктәш көньяҡ тылдары өсөн хәүефләнмәгәндәр, шуға күрә аңғармаҫтан яһалған һөжүмгә ҡаршы тора алмайынса, еңелгәндәр.

Тағы шуныһы, 1710—1711 йылдарҙа ихтилал хандарҙың һәм Хузей солтандың ҡатнашлығынан башҡа үтә. Солтандың һәм хандарҙың был йылдарҙа башҡорт илендә булыуҙарын раҫлаған документтар әлегә юҡ.

## Башҡорт иле 1712—1734 йылдарҙа

1711 —1715 йылдар — мосолмандарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, бергәләшеп ҡалмыҡтарға ҡаршы аяуһыҙ һуғыш алып барған йылдары. 1715 йылда ҡалмыҡтар, бер нисә тапҡыр ҡаты ҡыйратылғандан һуң, еңелеүҙәрен танырға мәжбүр була. Ҡалмыҡ ханы Аюкә үҙенең Петр батшаға яҙған хатында, дошмандарын һанап, беренсе урынға башҡорттарҙы ҡуя. Ҡалмыҡтарға ҡаршы һуғышта беҙҙең төбәк кешеләре лә дәррәү ҡатнашҡан, тип һис бер икеләнеүһеҙ әйтеп була.

Аюкә хаҡында бер нисә һүҙ. Аюкә 1671 йылдан алып 1724 йылға тиклем ҡалмыҡтарҙың ханы була. Бер үк ваҡытта 3 дәүләткә вассал булып торған (Ҡытай, Рәсәй, Төркиә) хыянатсыл, бик мәкерле хан. Ваҡыты менән башҡорттар, нөғәйҙәр яғында Рәсәйгә ҡаршы көрәштә союздаш була.

1718 йылдан 1723 йылға тиклем уңыш ҡалмыҡтар яғында була. Улар Ҡаҙағстан далаларын баҫып алып, Ташкентты ҡулдарына төшөрә. Ҡәйеп хандың ҡулынан ҡеүәт китә, унда башҡорт ҡайғыһы булмай. 1720 йылдан алып Рәсәй башҡорттар өсөн яҡшы сәйәсәт үткәрә: уларҙың ерҙәренә баҫып инеп ултырған меңәрләгән, унар меңләгән татар һәм сыуаш, урыҫ хакимиәте тарафынан кире Ҡазан яғына күсерелә. Әммә 1724 йылда хәл ҡатмарлаша: башҡорттар һәм Өфө яны татарҙары йыйын йыйып, Өфөгә һөжүм итергә ҡарар ҡыла. Ләкин Өфөгә поход барып сыҡмай: Петр 1 бойороғон үтәп, Доржа хан (Аюкә үлгәндән һуң яңы хан) башҡорт иленә ҡабаттан баҫып инә. Үҙән йылғаһы буйында бик ҡаты, ҡан ҡойғос һуғыш була. Ҡалмыҡтар еңеүгә өлгәшә, коалицион ғәскәр (башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ) ҡыйратыла, яу яланында 415 шәһит ятып ҡала. Доржа хан ҡушыуы буйынса, ҡалмыҡтар ошо 415 шәһиттең ҡолаҡтарын ҡырҡып алып, Әстрахан губернаторына тапшыра.

1725 йылда һуғыш яңынан ҡыҙа. Был юлы, коалиция бик ҙур көс туплап, Яйыҡ йылғаһы буйында ҡалмыҡтарға һөжүм итә һәм уларҙы сигенергә мәжбүр итә.

Нинайәт, 1727 йылда, 17 йыл буйы барған туҡтауһыҙ һуғыштан хәлһеҙләнгән ҡалмыҡтар (башҡорттарға ла был һуғыш еңел бирелмәгәндер), Рәсәйгә арт менән боролоп, башҡорттар менән союз төҙөргә мәжбүр булалар. 1731 йылда ҡалмыҡ ханы Дундуҡ Омбо Төркиә подданствоһын ҡабул итә. Төркиәгә барған илселек составында ҡалмыҡтар менән бер рәттән арҙаҡлы башҡорт тархандары, батырҙары ла була.

Шулай итеп, беренсенән, башҡорт ихтилалдары ваҡытында Рәсәй менән берләшеп халҡыбыҙға ҡырғын килтереүсе, күтәрелештәрҙе баҫтырыуҙа батша ғәскәрҙәренә хәл иткес ярҙам күрһәтеүсе ҡалмыҡ ҡурҡынысы бөтөрөлә. Киреһенсә, башҡорттарҙың иң ҡурҡыныслы дошмандары булған ҡалмыҡтар яңы ихтилалдар була ҡалһа, хәрби көс, ҡорал менән ярҙам итергә тейеш була. Икенсенән, 1704 йылда башланған һуғыш тамамлана. Әгәр 1704 йылда халҡыбыҙ Рәсәйгә ҡаршы күтәрелһә, 1711 йылда инде ул ҡоралын Рәсәйҙең союздашы булған ҡалмыҡтарға ҡаршы бора, 1727 йылға тиклем ошо дәһшәтле, мәкерле

*Ҡалмыҡ нойоны. XVII быуат*

дошман менән аяу белмәй һуғышып, союздаштары менән берлектә уларҙы еңеүгә өлгәшә. Беҙҙең төбәк халҡының күпмеһе был һуғышта ҡатнашҡан, уларҙың исемдәре кемдәр, беҙҙең тирәләрҙә ниндәй бәрелештәр булған — улары әлегә билдәһеҙ. Ләкин шул заманды шаң-

дауы булып, «ҡалмыҡ» һүҙе менән бәйле байтаҡ топонимик исемдәр бар: «Ҡалмыҡ тауы», «Ҡалмыҡ ҡәбере», «Ҡалмаҡар» һ.б. Легендалар Шартым йылғаһының исемен дә ҡалмыҡ ханының һүҙҙәре менән бәйләй. Йәнәһе, ул былай тигән: «һеҙ, башҡорттар, ошо йылғаны аша сыҡмағыҙ, минең шартым шул булыр», — тигән. Шунан бирле йылға Шартым тип йөрөтөлә башлаған, имеш. Учалынан Миәс яғына киткәндә, Һарбай үренә етмәҫ борон, уң ҡулда «9 ҡалмыҡ» тауы бар. Ҡарттарҙың һөйләүенсә, ошо тау битендәге бәрелештә һәләк булған 9 ҡалмыҡ һуғышсыһы ерләнгән.

Рәсүл ауылының икенсе исеме Тайсын да ҡалмыҡтар менән бәйле. Рәсүл тархан Этиммәсов ҡалмыҡтарҙан 3 ҡырҡмыш тай бәрәбәренә Тайсын исемле ҡалмыҡ малайын алып ҡалған, егет булып еткәс, уны башҡа сығарып, үҙенең эргәһендә донъя көттөргән. Шунан бирле ауыл ике исем йөрөтә.

## 1735—1740 йылдарҙағы ихтилалда.

XVIII быуаттың 30—40-сы йылдарында башҡорт иле быға тиклем күрелмәгән, киң ҡоласлылығы буйынса тиңе булмаған ихтилалға — Рәсәйгә ҡаршы йүнәлтелгән һуғышҡа күтәрелә (1735—1740 йылдар)[7].

1735—36 йылдарҙа яуҙың бар ауырлығы 2 ир-арыҫлан — Юрматы волосы старшинаһы Килмәк абыҙ һәм Барын волосы старшинаһы Йосоп батыр Арыҡов иңенә төшә. Ҡыуаҡан волосы старшинаһы, оло йәштәге, абруйлы Бәпәнәй абыҙ Төрөпбирҙин 1735 йылғы яуҙан ситтә ҡала. Уның тәҡдиме былай була: бер төптән күтәрелеп ҙур ҡан ҡойошҡа бармаҫҡа, урыҫтарҙы һөйләшеү юлы менән һындырыуҙы маҡсат итеп ҡуйырға. Ләкин дошман, быны үҙенсә көсһөҙлөк билдәһенә һанап, оторо шашынып китә.

Дөйөм алғанда, 1735—40 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы — беҙҙең ата-бабалар иң әүҙем ҡатнашҡан ихтилал ул. Беҙҙең төбәк ул заманда ҡаҙаҡ иле менән сиктәш ятҡанлыҡтан, ошоға тиклем күҙ ҡараһындай һаҡлап килгән бойондороҡһоҙлоҡтарын, үҙидаралыҡтарын юғалтыуҙың ҡурҡынысы килеп тыуғанлыҡтан, ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренең батырҙарына, волость старшиналарына таянып, улар етәкселегендә үлемесле яуға дәррәү күтәрелә.

Төҙөлөп ятҡан Ырымбур ҡалаһын икмәк, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү маҡсатында, Кириллов Яйыҡ башында Үрге Яйыҡ пристанын (1735 йылда) төҙөтә (хәҙерге Верхнеуральск ҡалаһы). Икмәк, башҡа аҙыҡ-түлек, уның иҫәбенсә, Себерҙәге урыҫ ауылдарынан ылауҙар менән башҡорт ере аша ошо пристанға килтерелә, унан ҙур кәмәләрҙә Яйыҡ буйлап түбән, Ырымбурға оҙатылырға тейеш була. Йосоп батырҙың 1000 кешелек ғәскәре ҡаты һаҡ аҫтында килгән ылауҙарҙы үткәрмәй, юлын быуып тора. Нәрәле тирәһендә, Йәнбикә йылғаһы буйҙарында ҡаты алыштар була, ылау алға табан бара алмайынса, кире борола. Икенсе ылау, дала яғынаныраҡ барып, Уҡлы-Ҡарағай күленә килеп етә, ләкин бында ла уны Йосоп батырҙың күп меңлек ғәскәре ҡаршы ала. Тик был юлы ылауҙы оҙатып килгән батша ғәскәре башҡорт сиреүен сигенергә мәжбүр итә һәм ылау Талҡалаға (Үрге Яйыҡ крепосының икенсе исеме) имен барып етә. Йосоп батыр,

ғәскәрен 4000 һуғышсыға еткереп, Үрге Яйыҡ пристанын баҫып ала, складтар талана, яндырыла, пристанда көн иткән халыҡ кем булыуына, милләтенә, йәшенә ҡарамаҫтан, тулыһынса ҡырып бөтөрөлә.

1736 йылдың ғинуарында, Башҡортостандың төньяғында ҡоторонған Тәфтиләүгә ҡаршы Себер даруғаһының төп көстәре башында Йәҫоп (Бәпәнәй абыҙҙың тәкдиме менән ул Себер даруғаһы баш күтәреүселәренең төп сардары итеп тәғәйенләнә) һуғыш хәрәкәттәре алып бара. Арыков еңеүгә өлгәшә: 50-нән ашыу башҡорт ауылын яндырып өлгөргән ҡанһыҙ Тәфтиләү кире борола, сигенергә мәжбүр була. 1736 йылдың февраленә Себер даруғаһында бер генә каратель дә ҡалмай — улар ҡыуып сығарыла.

Әммә халҡыбыҙға берҙәмлек етмәй: Учалы еренән сыҡҡан 2 башҡорт батыры «вирнай» булып, карателдәргә булыша, үҙ милләтенә хыянат ҡыла. Бына улар: Таймаҫ тархан Шаимов, Ҡыҙрас Муллаҡаев (икеһе лә ҡара табындарҙан).

Башҡорт болаһын (ихтилалын) баҫтырыуҙа уңышһыҙлыҡҡа осраған Тау заводтары начальнигы, буласаҡ тарихсы, Татищев ҡот осҡос указын иғлан итә: «Теләк белдереүселәрҙе (доброволецтарҙы) мөмкин тиклем күберәк тупларға. Әсир ителгән барлыҡ башҡорттар, мал-мөлкәте, бала-сағаһы менән теләк белдереүселәргә биреләсәк. Үлтереүҙә ҡатнашҡандар бүләк аласаҡ».

1736 йылдың февралендә Ҡобау ауылында дөйөм башҡорт йыйыны була, унда беҙҙең төбәктән Бәпәнәй абыҙ ҡатнаша. Олоғайып барған, ҡартлыҡ билдәһе ингән старшинабыҙҙың, бәгзе бер түрәләр һымаҡ өйҙә ятмай, һаман ил хәстәре менән йөрөүе үҙе генә лә тәрән ихтирам уята, өлгө алыуға лайыҡ күренеш тип ҡабул ителә.

Бәпәнәй абыҙ — үҙ заманының оло аҡыл эйәһе. Ул Себер даруғаһында үҙенең ғилемлелеге менән данлы була, үҙ заманының данлыҡлы мәҙрәсәләрендә уҡып белем алған, бер нисә телдә иркен һөйләшкән шәхес. Мосолмандарҙың изге китабы Ҡөрьәнде яттан белгән, үҙ мәҙрәсәһен тотҡан бер уҡымышлы була. Ул ысынлап та ҡан — ҡәрҙәштәрен дә ғилемле итергә ынтылыусы, зирәк кешеләрҙең берене булып күҙ алдыбыҙға килеп баҫа. Уның тарафынан сәсәндәр һәр саҡ иғтибар һәм яҡлау тапҡан. Мәҫәлән, йәше 20-нән саҡ уҙған Байыҡ сәсән Бәпәнәй абыҙ менән бергә йөрөгән.

1736 йылдың яҙы менән йәйендә ваҡиғалар бигерәк ҡанлы төҫ ала. Татищевтың указына ярашлы ойошторолған мең ярым кешенән торған 2 каратель отряды беҙҙең төбәк ауылдарына ябырыла. Тәүҙә 70 ауыл, бер ни тиклем ваҡыт үткәс тағы ла 29 ауыл — барыһы ла барын ауылдары, ер йөҙөнән юҡ ителә, яндырыла, халҡы ҡырып бөтөрөлә, әсирлеккә алына. Каратель ғәскәрҙәренең дөйөм һаны 22 мең кешенән ашып китә, 1736 йылдың июненә бөтөн Башҡортостан ҡыйралған, таланған, емерелгән, яндырылған хәлдә була. Башҡорттар партизан һуғышына күсә. Ҡорбандар иҫәпһеҙ була. 1736 йылдың июнь аҙағына тиклем, тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса, 15 мең башҡорт үлтерелә. Шуларҙың байтағы — беҙҙең ата-бабаларыбыҙ. 1736 йылдың көҙөндә Кинйәкәй (хәҙерге Вознесенка ауылы) ауылында баш күтәреүселәрҙең ҙур кәңәшмәһе була, сығыш яһаусылар араһында Йәҫоп батыр ҙа була. Ихтилал көндән-көн һүрелгән ваҡытта, батша вла-

старына башҡорт ерҙәренә яңынан-яңы каратель экспедициялары ойоштороу өсөн һылтау ҡалдырмаҫҡа теләп, Йосоп Арыҡов үҙенең 40 кешеһе менән һуңғыларҙан булып баш һала. Башҡа старшиналарҙы, штраф аттарын алып, өйҙәренә ҡайтарып ебәрәләр. Ә Йосоп батырға бығау һалып, һаҡ аҫтына алалар, тотҡон хәлендә Минзәлә ҡалаһына оҙаталар.

Бәпәнәй абыҙ һәм уның кәңәшен тотоусы старшиналар, батырҙар, ваҡыт отоу өсөн, урыҫ түрәләре менән һөйләшеүҙәр алып бара, ләкин штраф аттарын етәкләп, ярлыҡау һорап барырға ашыҡмай. Ҡыуаҡан старшинаһы берәүҙән дә ҡурҡмай: һатлыҡ старшиналарҙы, ҡорал ташлап ғүмерҙәрен оҙайтырға уйлаған ҡурҡаҡ йәндәрҙе асыҡтан-асыҡ фашлай. Бәпәнәй абыҙ 1736 йылдың 2 августында Татищевҡа: «...Элекесә тотмаһағыҙ, һәләк булырға, үлергә әҙербеҙ», — тип яҙған. «Бүтән беҙҙең барыр еребеҙ юҡ», — тип белдергән. Шулай итеп, Ырымбур экспедицияһына ҡаршы йүнәлтелгән башҡорт ихтилалы күп тә үтмәй, милли азатлыҡ көрәшенә әйләнә. Бәпәнәй абыҙҙың бөтә йөрәктән әйткән һүҙҙәре быны тағы ла бер тапҡыр раҫлай.

Бәпәнәй Төрөпбирҙинде батша властары башҡорт ихтилалының төп идеологы тип таный һәм был, ысынлап та, дөрөҫлөккә тап килә. Йосоп батыр ҡулға алынғандан һуң, 1737—1738 йылдарҙа Бәпәнәй абыҙ ихтилалдың төп етәксеһенә әйләнә. Яу өр-яңы көс менән 1737 йылдың яҙында тоҡанып китә. Бәпәнәй, Мандар, Төлкөсуралар (Себер даруғаһының күренекле түрәләре) яу менән Красноуфимск, Көңгөр, Бөрө тирәләрендә йөрөп, Танып буйында урыҫ слободаларын, карателдәргә ярҙамлашҡан мишәр, сыуаш, мари ауылдарын ҡыйратып, Өфөгә, Табынға 2 тапҡыр поход ойоштора. (1737—38 йылдар).

Шулай итеп, 1737 йылда бөйөк башҡорт ихтилалының 2-се этабы башлана. Уны яҡташыбыҙ, Себер даруғаһы Ҡыуаҡан волосы старшинаһы Бәпәнәй Төрөпбирҙин етәкләй. 1737 йылда көнсығыш башҡорттары, шул иҫәптән ата-бабаларыбыҙ ҙа, үҙҙәрен ҡаҙаҡ һәм ҡарағалпаҡ ханы Ҡәйеп хандың ҡулы аҫтында тип иҫәпләйҙәр, ләкин аныҡ ярҙам ала алмайҙар.

Башҡорттар урыҫҡа үҙҙәре генә ҡаршы тора алмаясаҡтарын аңлап, ҡаҙаҡ ханы Әбүлхәйергә мөрәжәғәт итәләр. Бәпәнәйҙең дипломатик оҫталығы, алдан күрә белеүсәнлеге арҡаһында, Татищевтың: «Башҡорт ихтилалын баҫтырырға походҡа сығырға!» — тигән әмерен алған Әбүлхәйер, тап киреһен эшләй. Артыҡ ҙур булмаған ғәскәре менән Ҡыуаҡан иленә, Бәпәнәй старшинаға ҡунаҡҡа килә. Был 1738 йылдың ғинуарында була. Бөрйән ҡыҙы Миңлезифа ханға йәш кәләш итеп йәрәшелә. Бәпәнәй абыҙҙың ҡышлауында (Ҡалҡан күле буйында) күркәм итеп туй үткәрелә, унда бик күп халыҡ йыйыла.

1738 йылдың ғинуарынан мартҡа тиклем Бәпәнәй Әбүлхәйерҙе үҙендә ҡунаҡ итә, көн йылынғас ҡына, Татищевтың саҡыртыуы буйынса, хан Ырымбурға юллана.

1738 йылдың йәйендә полковник Арсентьевтың 3 меңлек каратель отряды менән башҡорттар араһында туҡтауһыҙ бәрелештәр булып торған. Бәпәнәй абыҙ, уның менән бергә Мандар, Төлкөсура, Юлдаш муллалар, каратель отрядына көслө ҡаршылыҡ күрһәтә.

Миәс үрендәге бәрелеш — ул осорҙа иң оҫта ойошторолған алыш булып тора. Баш күтәреүселәр карателдәрҙе Сыбаркүлгә тиклем ҡыуып барып, Сыбаркүлдең үҙен ҡамауға ала.

Беҙҙең төбәктә әүҙем көрәш 1738 йылдың көҙөндә генә туҡтай. Бәпәнәй абыҙҙы батша властарына тотоп тапшырғандан һуң (уны тотоп биреүселәр Бәпәнәйҙең үҙ көрәштәштәре Мандар, Төлкөсура, Юлдаш муллалар) хәрәкәт етәксеһеҙ ҡала. Ул арала карателдәр килеп етеп, ҡыуаҡандарҙың ауылдарын яндыра. Бәпәнәйҙең үҙен быҡаулап Минзәләгә оҙаталар. «Вирнай» булып ҡалған Таймас Шаимов та бөтә ихласлығын һалып карателдәргә үҙ милләттәштәрен юҡ итеүҙә ярҙамлаша. Бәпәнәй абыҙ ҡот осҡос язаға тарттырыла: тәүҙә аяҡ-ҡулдарын балта менән ботарлап, һуңынан башын сабып өҙәләр. Бәпәнәйҙең уң ҡанаты булған Төлкөсура мулланы үҙ көрәштәше Мандар 1739 йылдың йәйендә властарға тотоп тапшыра, ул да Минзәлә төрмәһендә шул уҡ йылдың көҙөндә аҫып үлтерелә (Мандар Ҡарабаев башҡорт, әммә теленә, милләтенә хыянат итеп «мишәр» аталып йөрөгән кеше — Дыуан волосы старшинаһы).

Шулай итеп, халыҡтың дәррәү күтәрелеүенә һәм баш күтәреүселәрҙең батырлығына ҡарамаҫтан, батша ғәскәре һәм ихтилалсыларға ҡаршы көстәр (башҡорт булмаған халыҡтарҙан ойошторолған ирекле каратель отрядтары), шулай уҡ һатлыҡ башҡорттарҙың («вирнай») отрядтары, 1738 йыл аҙағында сираттағы баш күтәреүҙе аяуһыҙ рәүештә баҫтыра.

Азатлыҡ яҡлылар рәсми иҫәпләүҙәр буйынса ихтилал башланғандан алып (һуғышта үлгәндәрҙе, язаланғандарҙы, һөргөнгә ебәрелгәндәрҙе бергә иҫәпләгәндә), барлығы 25 меңдән ашыу кеше юғалта. Бөтөн Башҡортостан, шул иҫәптән бигерәк тә беҙҙең төбәк, ҡот осҡос емереклек, ас-яланғаслыҡ хәленә төшөрөлә.

Таймас тархан Шаимов һәм Ҡыҙрас Муллаҡаевтар тураһында бер нисә һүҙ. Улар икеһе лә «вирнай» башҡорттар иҫәбендә йөрөйҙәр. Таймас тархан — Анна Иоанновнаның коронацияһында ҡатнашҡан «иң яҡшы башҡорттар»ҙың береһе. Бер нисә айҙан ул Кесе Жуз илселәрен Мәскәүгә оҙатып бара, йәғни Кесе Жузды урыҫ подданствоһына ҡабул итеүгә ҙур өлөш индерә. Шул уҡ Таймас Шаимов Тәфтиләү менән бергә ҡаҙаҡтарға илсе булып бара, яуап визитын ойошторороуға тос өлөш индерә.

Ҡыҙрас Муллаҡаев та, Таймас тархан кеүек, ҡара табындарҙан, үҙ илендә һыйыша алмайынса, күсеп китеп, Дим буйына килеп төпләнгән бер йылғыр бәндә. Асылда иһә үҙ иленән ҡыуылған әҙәм.

Ырымбур экспедицияһы Мәскәүҙән юлға сығыр алдынан, Ҡыҙрас менән Таймас, Кириллов һәм Тәфтиләү менән бергә императрица янында ҡабул итеүҙә булалар.

Таймас тархан Шаимов үҙенең ялағайлығы менән сәйәси һуҡырлығы арҡаһында милләтебеҙгә ҙур зыян килтергән түрә. Ҡара табын волосы старшинаһы булараҡ, үҙ волосы ерендә шәхси тәҡдиме менән
2 урыҫ ҡалаһын һалдырта: Верхнеуральск һәм Силәбе, һуңынан, был ҡалалар беҙҙең төбәктә урыҫтарҙың терәк пункттарына әүереләләр, ошо 2 ҡалаға, ундағы гарнизондарға таянып, тирә-йүн ерҙәребеҙ баҫып

алына һәм Миәс, Сыбаркүл, Уҡлы-Ҡарағайлы, Степной, Этҡол һ.б. ҡәлғәләр һалына (1736—1740 йылдарҙа).

Батша властары тарафынан йыртҡыстарса саралар ҡулланыуға ҡарамаҫтан, Башҡортостанда азатлыҡ көрәше туҡталмай. 1739—1740 йылдарҙа ихтилал башына башҡорт халҡының бөйөк улы, Юрматы башҡорто Миңлеғол Юлаев — Ҡараһаҡал хан баҫа. Күп телдәрҙе (башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ, төрөк) белгән, бик уҡымышлы шәхес булған. Башҡорт ихтилалын етәкләгәнгә тиклем ул Ҡырымда, Төркиәлә, Төньяҡ Кавказда, ҡалмыҡтарҙа һәм ҡаҙаҡтарҙа булып өлгөрә, шул ерҙәрҙә күпмелер йәшәгән, исеме киң билдәле батыр була. Ҡалмыҡтар уны үҙ принцы тип, ҡаҙаҡтар — Байбулат солтан (Күсем нәҫеленән һуңғы принц) тип белгән, ә башҡорттар араһында ул Кубандан килгән Солтан Гәрәй исеме аҫтында билдәле була.

Ҡараһаҡалдың көрәштәштәре нигеҙҙә Себер даруғаһынан була. Хәҙерге заман теле менән әйтһәк, уның штабы ла, ғәскәр туплаған урыны ла ошо беҙ йәшәгән төбәктә, Иҙел башында (Ирәмәл аҫтында) була. Шунда ҡышларға ниәтләнеп, 1739 йылдың көҙөндә ул бында ныҡытмалар төҙөтә һәм бер аҙ тыныс тормошта йәшәп ала. Ул бында ғәскәренә яңы яугирҙар йыя, 600 башҡорт егете аты-ҡоралы менән уның янында туплана. Әммә был ғына бик әҙ була: күп тапҡыр ҡыйралыуҙан биҙрәгән башҡорт халҡының төп өлөшө ихтилалдан ситтә тороуҙы хуп күрә. Күп кенә башҡорт старшиналары отрядтары менән урыҫ каратель командалары составында, уға ҡаршы һуғыш хәрәкәттәре йәйелдерә. 1740 йылдың ғинуарында, тоғро башҡорт старшиналары етәкселегендәге ғәскәрҙәр Ирәмәл тауы аҫтындағы баш күтәреүселәрҙең ныҡытмаларына һөжүм итеп ҡарайҙар, әммә уңышҡа өлгәшә алмай, сигенергә мәжбүр булалар.

1740 йылдың март-апрель айҙарында ихтилал Себер даруғаһын, Нөғәй даруғаһының байтаҡ өлөшөн солғап ала. Ҡараһаҡал март айында батша яҡлы башҡорт ғәскәрҙәренән бер нисә тапҡыр еңелгәндән һуң, апрель баштарына Әй-Ағиҙел йылғалары башланған тирәләрҙә хәрби лагерь ҡороп урынлаша. Бында уға үҙенең отряды менән Юлдаш мулла Һөйөрөмбәтов килеп ҡушыла.

Батша властары ла тик ятмай: ян-яҡтан күп итеп ғәскәр туплай.

Ҡараһаҡал 10 мең кешелек батша ғәскәре менән 22 майҙа Иҙел башында осраша, ике арала ҡаты һуғыш ҡуба. Баш күтәреүселәр еңелә һәм Яйыҡҡа ҡарай сигенә. 3—4 көндән һуң Яйыҡ үрендәге кисеүҙә икенсе тапҡыр ҡаты һуғыш була — ул тәүлеккә яҡын дауам итә. Бала-сағалы, мал-тыуарлы мең ярым самаһы халыҡты Яйыҡ аша сығарып, ышығыраҡ урындарға йәшереп бөткәнсе, Ҡараһаҡал үҙенең 150 һыбайлыһы менән батша ғәскәренең әллә нисә атаҡаһын кире ҡаға. «Тау араһында таш урынына баҫып, барлы-юҡлы ҡоралы менән бер аҙым да сигенмәй тәүлеккә яҡын ҡеүәтле яуҙы тотоп торор алһыҙ-ялһыҙ был һуғыш баш күтәреүселәрҙең тиңһеҙ ҡаһарманлығының, иң героик алыштарының бер өлгөһө булырлыҡ», — тип яҙҙы ошо турала беҙҙең яҡ тарихын өйрәнеүсе Рәүеф Насыров.

Ҡараһаҡал күтәрелешендә иң дәррәү ҡатнашҡан Барын, Ҡыуаҡан волостары — ул беҙҙең ата-бабаларыбыҙ көн иткән төбәк. Барындарҙың старшинаһы Йосоп Арыков, 1737 йылда уҡ батша властары

тарафынан язалап үлтерелгәне мәғлүм инде. 1740 йылда барындарҙың яңы старшинаһы Әлиш Мөҡсинов та Ҡараһаҡал яуында ҡатнашҡаны өсөн шул яҙмышҡа дусар була. Халыҡ Әлиш батырҙы ныҡ хөрмәт иткән, уға арнап сығарылған йыр бөгөнгө көнгә тиклем килеп еткән. Йырҙан күренеүенсә, Әлиштең аты уҡтай оса, ә үҙе бөркөт кеүек дошмандарына ташлана, яуға сапҡанда, уға уҡ та, һөңгө лә теймәй. Ул бер үҙе генә дошмандың йөҙ кешеһен ҡыйрата. Әлиш батыр дошмандары менән алышҡан саҡта, урман шаулағандағы, дауыл ҡупҡандағы кеүек тауыштар ишетелә. Йырҙа әйтелгәнсә, ниндәйҙер көс Әлиште үлемдән һаҡлай (XVIII быуатта барлығы егермеләгән башҡорт батырына арнап йыр ижад ителә).

Ҡараһаҡал яуы менән бәйле тағы ла бер шәхескә туҡталып китәйек, һүҙ Күбәләк волосы старшинаһы Байым тархан Ҡыҙраев тураһында. 1739—1740 йылдарҙа ул «вирнай» башҡорттар иҫәбендә йөрөй. Уның ҡул аҫтындағы отрядтар Ҡараһаҡалдың баш күтәреүселәренә бер туҡтауһыҙ һөжүм итеп торалар, шуға ла Ҡараһаҡал 1740 йылдың яҙында уның волосы аша үткәндә, күбәләктәргә бының өсөн яуап бирергә тура килә. Ихтилал баҫтырылғандан һуң да Байым старшина баш күтәреүселәрҙе эҙәрлекләүҙә ҙур тырышлыҡ күрһәтә.

«Карас менән Ҡараһаҡал» тигән легенданан күренеүенсә, тиләүҙәр ҙә Ҡараһаҡал яуынан ситтә ҡалғандар. Дөйөм алғанда, тиләүҙәр ҙә, күбәләктәр ҙә XVIII быуаттың беренсе яртыһындағы башҡорт ихтилалдарында ҡатнашмағандар, дөйөм мәнфәғәттән, бойондороҡһоҙлоҡ, азатлыҡ яулауҙан бер аҙ ситтә торғандар, тигән һығымтаға килергә мәжбүрбеҙ.

Ихтилал бер һүнеп, бер тоҡанып, 1741—1742 йылдарҙа ла дауам итә, ләкин ул Бөтә Башҡортостан күләменә күтәрелә алмай.

Был дәһшәтле ихтилал да башҡорттоң еңелеүе менән тамамлана. Ҙур булмаған Барын волосынан ғына ла 174 ғаиләгә бығау һалынып, язалау өсөн Ырымбурға оҙатыла. 1735—1740 йылдарҙа Башҡортостандың азатлығын, үҙаллылығын һаҡлап ҡалыу өсөн күтәрелгән оло яуҙа халҡыбыҙҙың өстән бер өлөшө һәләк була.

Башҡорт халҡының тарихындағы иң ҡанлы, фажиғәле биттәр былар. Ҡот осҡос аҫыу-киҫеүҙәр ҙә, яндырыуҙар ҙа башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәш рухын, ғәйрәтен һүндерә алмай. Ул көс-кеүәт тағы ла саяраҡ булып, аҙаҡ Батырша — Салауат яуҙарында сағылыш таба.

Шуныһы ла тарихи факт: Рәсәйгә килешеү нигеҙендә ҡушылған Башҡортостан, ике быуат эсендә империяның иң хоҡуҡһыҙ колонияһына әүерелә. 1740 йылдан һуң Башҡортостан башҡорттар өсөн ысын мәғәнәлә төрмәгә әйләндерелә.

## Батырша яуы осоронда беҙҙең төбәк.

1755—1756 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының башында заманының иң күренекле ғалимы булған мишәр муллаһы Батырша торған (ысын исеме Абдулла Алиев). Батыршаның пландары ҙур була: кафырҙарға, йәғни урыҫтарға ҡаршы ғазауат (изге дин һуғышы) асыу,

ошо маҡсатта башҡорттоң, ҡаҙаҡтың һәм мишәрҙең хәрби көстәрен берләштереү.

Ихтилал 1755 йылдың 15 майында Бөрйән волосында башланып китә. Август айында иһә күтәрелеш ғәйәт ҙур ерҙе, шул иҫәптән Көньяҡ Уралды ла солғап ала.

Әммә Батыршаның хыялдары тормошҡа ашмай: иң хәл иткес мәлдә типтәрҙәр һәм мишәрҙәр көрәштән ситләшә. Ихтилалдың артабанғы ауырлығы башҡорт халҡының иңенә төшә. Өҫтәүенә, ҡаҙаҡтар вәғәҙә иткән хәрби ярҙам килмәй. 1755—1756 йылдарҙағы башҡорт яуы бөтә Башҡортостан еренә таралмаһа ла һәм оҙаҡҡа һуҙылмаһа ла тарихи күҙлектән баһалағанда ысын мәғәнәһендә милли-азатлыҡ көрәше булған.

Ырымбур губернаторы Неплюев башҡорт ихтилалын баҫтырыуға 30 мең кешелек регуляр һәм үҙҙәре теләп һуғышыусыларҙан торған 20 мең кешелек ғәскәрҙе йүнәлткән. Урыҫ ғәскәренә ярҙамға, йәғни ҡәрҙәштәрен ҡырыуға 5000 һыбайлынан торған татар ғәскәре, һәр саҡтағы ғәҙәттәре буйынса мишәр отрядтары, ҡалмыҡтар килгән, һөҙөмтәлә, 50 мең башҡорт мал-тыуары, ғаиләһе менән, шул иҫәптән беҙҙең төбәк халҡы ла, Яйыҡ аша сығып, ҡаҙаҡ далаһына ҡасып китә.

1755 йылдың 26 сентябрендә батша властары манифест иғлан итә: ихтилалды баҫтырыуҙа ҡатнашҡан татарҙарға, мишәрҙәргә, типтәрҙәргә башҡорттоң ерен, мал-мөлкәтен, ҡатын-ҡыҙын, бала-сағаһын тартып алып, өләшеп биреү законлаштырыла, һөҙөмтәлә, башҡорт ихтилалын баҫтырып, башҡортто ҡырып-үлтереп, байығып ҡалырға теләүселәр ишәйеп китә, уларҙан ойошторолған каратель отрядтарының осо-ҡырыйына сығыу мөмкин түгел хатта. Һөҙөмтәлә 700 башҡорт ауылы үртәлә, 17 мең башҡорт үлтерелә, 400 кеше һөргөнгә ебәрелә, 301 кешенең танауҙары, ҡолаҡтары, телдәре ҡырҡыла... Шулай ҙа иң яманы был түгел, ә ике туғандаш халыҡтың — башҡорт менән ҡаҙаҡтың үҙ-ара дошманлашыуы, бер-береһенә үс-нәфрәт тотоуы. Ә бындай мөнәсәбәттең башы түбәндәгенән ғибәрәт: Нурғәли хан, Неплюевтың ҡотҡоһона бирелеп, башҡорттарҙы һыйындырған ҡаҙаҡ волостарына яу аса, башҡорттарҙы ла, уларға дуҫ ҡаҙаҡтарҙы ла берҙәй үк тар-мар итә башлай, һөҙөмтәлә, ҡаҙаҡ ҡылысынан иҫән ҡалған ҡасҡын башҡорттар кире үҙ илдәренә әйләнеп ҡайтырға мәжбүр була. Ҡайталар ҙа, ғәскәр төҙөй һалып, үҙҙәрен ҡыйырһытҡан ҡаҙаҡтарға ҡаршы яу сабалар. Милли-азатлыҡ көрәше башҡорт-ҡаҙаҡ һуғышы, йәғни ҡарымта төҫөн ала. Ҡаҙаҡтар, үҙ сиратында, башҡорт ерҙәренә баҫып инә. Беҙҙең яҡтарҙы ла урап үтмәй был ҡан ҡойғос һуғыш. Шул дәһшәтле барымта һәм ҡарымта йылдарының һәйкәле — Иҫтамғол ауылы эргәһендәге ҡаҙаҡ батыры Аҡша ҡәбере. Уны Ҡарас сәсәнебеҙ үлтергән һәм шул урында хөрмәтләп ерләгән. Беҙҙең көндәргә ошо ваҡиғаны Ҡарас менән Аҡша ҡобайыр-эпосы алып килеп еткергән.

Неплюев үҙенең интрига һәм мәкерлектәре уңышлы барып сығыуы менән маһайып императрица Елизавета Петровнаға шундай хат яҙа: «Мин ҡаҙаҡ менән башҡорт араһын шул тиклем бутаным, киләсәктә улар берләшеп ниндәйҙер эш сығарырҙар, тигән ҡурҡыныс юҡ».

Урыҫ һәм ҡалмыҡ ғәскәрҙәре 1756 йылда ла әле көнсығыш Башҡортостанда баш күтәреүселәрҙе баҫтырыу менән мәшғүл була.

1755—1756 йылғы башҡорт ихтилалы тамамланыуға 15 йыл үтеп тә өлгөрмәй, башҡорт йәнә ат эйәрләп, уҡ-һаҙағын алып, һуғыш юлына баҫа. Был яуҙан беҙҙең төбәк башҡорттары ла ситтә тороп ҡалмай, һүҙ «ҡалмыҡ боҫоуы» исеме менән тарихҡа кереп ҡалған ваҡиға тураһында бара.

1771 йылда Яйыҡ-Иҙел араһы ҡалмыҡтары үҙҙәренең сыҡҡан тарафына — Джунгарияға табан ҡуҙғала. Улар башҡорт һәм ҡаҙаҡ иле араһындағы тар ғына коридорҙан, сама менән хәҙерге Себер тимер юлы эргәһенән үтәләр, һигеҙ айға һуҙылған оҙон, ауыр сәфәрҙә 169 мең ҡалмыҡтан Джунгарияға 70 мең кеше генә иҫән-һау барып етә. Сәбәбе: башҡорттар 10 меңлек ғәскәр ойошторо п, уларҙың артынан ташлана, юл буйынса эҙәрлекләй. Ата-бабаларыбыҙҙың шул тиклем ҡоралды, һуғышырға әҙер тороусы ир-егеттәрҙе таба алыуына ғәжәпләнергә генә ҡала. Ә күпме милләттәшебеҙ ошо бер файҙаһыҙ һуғышта башын һалды икән? Әлбиттә, быуаттан ашыу башҡорт халҡына ҡырғын һалып, иң хәл иткес ваҡыттарҙа хыянат ҡылыусы ҡалмыҡ үҙ язаһын һуңлап булһа ла ала. Ләкин өҙлөкһөҙ ихтилалдар арҡаһында былай ҙа нык кәмегән халҡыбыҙҙы тағы ла бер нисә мең кешегә кәметкәндер был яу сабыуҙар. Бынан тыш, 15 мең яугирҙы берләштергән 12 башҡорт полкы генерал Апраксин етәкселегендә,
1756—1763 йылдарҙа батша Рәсәйе алып барған Ете йыллыҡ һуғышта ҡатнашып, ҡаһарманлыҡ өлгөләре күрһәтә, һәм, әлбиттә, һанһыҙ ҡорбандар килтерә. Уларҙың һүнмәҫ дандары ҡала:. 1760 йылда башҡорт полктары беренселәрҙән булып Берлинға бәреп инәләр.

Учалыларҙың ата-бабалары ла әҙ булмағандыр был 12 башҡорт полкы сафтарында. Әммә тарихсыларыбыҙ тарафынан был дәүер насар өйрәнелгәнлектән, яҡташтарыбыҙҙың ҡайһы полктарҙа һуғышҡанын да, уларҙың исем-фамилияларын да хәҙергә килтерә алмайбыҙ.

## АУЫЛДАРЫБЫҘ ТАРИХЫ. БАШҠА ЭТНИК ТӨРКӨМДӘРҘЕҢ БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮЕ.

Районыбыҙҙың төп халҡы — башҡорттар. 1740 йылға тиклем беҙҙең төбәктә башҡа милләт вәкилдәре бөтөнләй йәшәмәгән тиерлек. Шулай булғас, районыбыҙ биләмәһендәге ауылдарҙың иң боронғолары — башҡорт ауылдары[8]. Шул уҡ ваҡытта был әлкәлә бер ҡыҙыҡ күренешкә юлығабыҙ: иң боронғо тип иҫәпләнгән башҡорт ауылдарының «йәше» 250-нән уҙмай. Әгәр ҙә башҡорттар был ерҙәрҙә ике мең йыл буйы йәшәйҙәр икән, ни өсөн был ауылдар шулай һуң нигеҙләнгән? Әллә элек йәшәгән ырыу-ҡәбиләләр күсеп китеп, был тирәләргә башҡа ырыу-ҡәбиләләр килеп ултырғанмы? Әлбиттә, бындай фараздың да йәшәргә хоҡуғы бар, сөнки быға миҫал итеп түбәндәгене килтерергә була: Әйле ҡәбиләләр союзы (берекмәһе) составында өпәй тигән ырыу бар. Ошо ырыуҙың бер аймағы «Яйыҡ башы» («Яйыҡбаш» та тиҙәр) исемен йөрөтә һәм легенда ошо ырыу халҡының күп быуаттар элек (XIV—XV бб.) Яйыҡ башында көн итеүҙәрен һөйләй. Тимәк, беҙҙең төбәктә төрлө ваҡытта төрлө ырыуҙар йәшәгәнлеген, берене күсеп китеп, икенселәре ҡалғанлығын

беҙ инҡар итә алмайбыҙ. Ләкин, ауылдарыбыҙҙың йәшен билдәләүҙә үрҙә әйтелгән факт төп дәлил була алмай. Бөтә сәбәп — 1735—1740 йылдарҙағы 6 йылға һуҙылған башҡорт ихтилалы һәм ошо ихтилалды баҫтырғанда карателдәр тарафынан ауылдарыбыҙҙың ҡат-ҡат яндырылыуы менән бәйләнгән. Шуға ла боронғо башҡорт ауылдарының йәше 200—250 йылдан артмай.

Ауылдарыбыҙҙың ниндәй ырыу халҡы тарафынан нигеҙләнеүенә килгәндә, уларҙың иң күбе — ҡара табын ауылдары. XVIII б. аҙағында ҡара табындарҙың Троицк өйәҙендә 49 мең дисәтинә ере булып, шул саҡлы уҡ ергә улар Верхнеуральск өйәҙендә лә хужа булғандар. Троицк өйәҙендәге ҡара табын ауылдарына туҡталып китәйек. Бына уларҙың исемлеге: Абҙаҡ, Түләк, Балбыҡ, Һөләймән, Мулдаш, Көсөк, Һөйөндөк, Мулдаҡай, Илсеғол, Иҫке Байрамғол (Әүеш), Кәрим, Төпәй. Был ауылдарҙа шулай уҡ барын ырыуы кешеләре лә аралаш көн иткән.

Ҡыуаҡандар ҙа Троицк өйәҙенә ҡараған дар. Башта уларҙың халҡы ла күп, ер биләмәләре лә ҙур булған (38 мең дисәтинә тәшкил иткән). Әммә, 1735—40 йылдарҙағы ихтилалда иң күп ҡорбан биргән халыҡ — ҡыуаҡандар икәнен, уларҙың рудаға бай ерҙәренең (Һатҡы Һәм Әй йылғалары буйҙары) 40-сы йылдарҙа (XVIII б.) күпләп Һатып (Һәм талап алынғанлығын) иҫтә тотҡаҡ, бөгөнгө көндә ҡыуаҡандарҙың бик әҙ Һаҡланып ҡалыу сәбәбен аңлауы ҡыйын түгел. Ҡыуаҡандар нигеҙләгән ауылдар исемлеге бик бәләкәй: Яңауыл (Буранғол), Тәтлембәт (Биксура), Әбсәләм (Этимгән), Байһаҡал, Ҡарағужа, Яңы Хөсәйен (Ихсан), Ялсығол, Һәйтембәт (Аҙнаш), Шәрип. Исеме, даны бөтә Башҡортостанға билдәле Ҡыуаҡан иле XX быуатҡа кескәй генә 9 ауыл булып аяҡ баҫҡан.

Беҙҙең төбәктә азатлыҡты иң ныҡ Һөйөүселәр, ирек, бойондороҡһоҙлоҡ хаҡына үтә сая Һуғышыусылар — барындар ҙа XX быуатҡа 5 кенә ауыл булып килеп инәләр. Барын ауылдары түбәндәгеләр: Туңғатар, Ҡарт Муйнаҡ, Малай Муйнаҡ, Ҡорама, Ҡужай.

Инде хәҙер Верхнеуральск өйәҙенә ҡараған башҡорт ауылдарына күсәйек. Троицк өйәҙендәге кеүек, бында ла иң ҡөҙрәтлеһе — ҡара табындар. Улар тарафынан түбәндәге ауылдар нигеҙләнгән: Ҡолош, Ҡотой, Кәбәк, Төҫлө Көҙөй, Иҫтамғол, Яңы Байрамғол, Баҙарғол, Ишкен, Ишмәкәй (Сорағол), Һәйтәк, Абдулҡасим, Абдулбаҡый, Ҡоҙаш, Рәсүл (Тайсын).

Шуны билдәләп үтергә кәрәк: Тиләүҙәр, Ҡара табындар, Көҙөйҙәр, Һарттар бөтәһе 126 мең дисәтинә ер биләмәһенә хужа булғандар (XVIII б. аҙағы). Тиләү ауылдарына түбәндәгеләр инә: Мәҫкәү, Йәһүҙә (Йәндек), Ташҡыя, Наурыҙ, Ғәҙелшә, Сораман, Көсөк, Ғәлиәхмәр, Амангилде (Сәнсәр), Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол (Зәйнәкәй), Алтаяҡ (Килмәк), Әбләҙе (Ҡарағай), Рафиҡ (Ҡойолдар), Кәкүк (Ҡалуй), Муса ауылдары.

Көҙөйҙәр нигеҙләгән ауылдар: Һөйәрғол (Көҙөй), Мәһәҙей (Көҙөйҙән алыҫ түгел). Мәһәҙей ауылы хәҙерге ваҡытта юҡҡа сыҡҡан.

Һарттар нигеҙләгән ауыл берәү —Һарт (Ҡәйепҡол).

Күбәләк волосы 80 мең дисәтинә ер биләгән, әммә уның күпселек ауылдары — хәҙерге Әбйәлил районы биләмәләрендә. Учалы районы ерҙәрендә күбәләктәр нигеҙләгән ауылдар алтау: Ҡобағош, Ҡаҙаҡҡол, Оҙонгүл, Баттал (Энәк), Аһылай, Ҡарағужа.

Үрҙә исемдәре телгә алынған ауылдарҙың бер өлөшө хәҙерге көндә бөткән, юҡка сыҡҡан. Беҙҙең был исемлеккә ингән ауылдар ул заманда̣ғы (XVIII—XIX бб.) төрлө статистик материалдарға, «ревизия сказкаларына» таянып төҙөлдө.

Халыҡ һанына килгәндә, XVIII б. уртаһында беҙ йәшәгән төбәктә яҡынса 6000 кеше йәшәгән. Был һан түбәндәге иҫәпләүҙәр буйынса сығарылды. Ҡара табын волосы — 430 йорттан торған, Күбәләк һәм Тиләү волостарында — 160 йорт булған. 1 йортҡа уртаса 10 йәндән һалғанда, 6000 кеше килеп сыға.

Колонизациялауҙың масштабын күҙ алдына килтереү өсөн түбәндәге һандарға күҙ һалайыҡ. Троицк өйәҙендә XIX б. уртаһында һәр 100 кешегә ни бары ... 36 башҡорт, Верхнеуральск өйәҙендә 78 башҡорт тура килгән. (Ә 110 йыл элек, йәғни 1740 йылда был өйәҙҙәргә ҡараған ерҙәрҙә башҡа этник төркөмдәр юҡ дәрәжәһендә булған.) Күреүегеҙсә, башҡортто үҙ илендә аҙсылыҡта ҡалдырыу, ассимиляция сәйәсәте бик йылдам темптар менән алып барылған.

Ассимиляцияның масштабын аңлау өсөн йәнә бер тарихи фактҡа иғтибар итәйек. 1850—1859 йылдарҙа Троицк әйәҙе башҡорт ауылдарынан 30-ҙан ашыу йәш яугир сик буйы хеҙмәте ваҡытында христиан динен ҡабул иткәндәр һәм ғаиләләрен алып Ырымбур губернияһы ҡалаларына, казак станицаларына күсенеп киткәндәр, бер һүҙ менән әйткәндә — йотолғандар. Христиан диненә күсеү батша хөкүмәте тарафынан ныҡ дәртләндерелгән: православиеға күскәндәргә көмөш аҡса менән 7 һум түләнгән, бынан тыш ул үҙе һәм ғаиләһе 3—4 йылға бөтә булған һалымдарҙан азат ителгән. Был хәл ярлы башҡорттарҙы бик ҡыҙыҡтырған, әлбиттә, һәм уларҙы үҙ диненә, милләтенә, теленә хыянат итеү юлына баҫтырған. «Суҡыныуҙың кәре китте әле», — тигән әйтем шул ваҡыттан тороп ҡалған: хәйерселек сигенә еткәнлектән суҡынырға теләгән башҡорттарҙың һаны ныҡ артҡас, суҡынған өсөн бирелә торған сумма 7 һумдан 2 һумға тиклем кәметелгән.

Силәбе-Миәс-Верхнеуральск тракты буйлап 1837 йылдың йәйендә, хәҙерге Учалы районы ауылдары аша, рус шағиры В. А. Жуковский оҙатыуында, буласаҡ батша Александр II уҙа. «9 июнь, кантон башлығының ауылында төшкө аш ашаныҡ», — тип яҙа шағир үҙенең көндәлегендә. Уның 3 ҡатыны барлығын иҫкә ала. Ошо мәғлүмәттәрҙән сығып, буласаҡ батша кантон башлығы Мөхәмәтйән Бүҙыкаевтың тирмәһендә ҡунаҡ булып киткән, тип әйтә алабыҙ. Сөнки, Мөхәмәтйән Бүҙыҡаев 1837 йылда кантон начальнигы була, ә уның ауылы Малай Муйнаҡ тракт өҫтөндә ултырған («Екатерина», йәки «Әбей батша» юлы Малай Муйнаҡ-Рысай-Ҡалкан ауылдары аша Верхнеуральскийға һуҙылған).

## Типтәрҙәр

Донъяла һәр бер халыҡтың үҙ атамаһы бар. Мәҫәлән, бер халыҡты урыҫтар тип, икенсеһен башҡорттар тип, өсөнсөһөн татарҙар тип исемләйҙәр. Ә бәғзеләр үҙҙәрен: «Типтәрбеҙ», — тип атай. Кемдәр һуң ул типтәрҙәр?

Был һорарға яуап биреүе ҡыйын һәм бының үҙ сәбәптәре бар. Беҙ: «Элек шундай милләт булған, бөгөнгө көндә ул юҡ инде», — тип раҫлай алмайбыҙ, сөнки был дөрөҫлөккә бигүк тап килеп етмәҫ ине. Ә шулай ҙа XVIII, XIX быуатта, хатта XX быуаттың 30-сы йылдарына тиклемге рәсми документтарҙа типтәр һүҙе «милләт» (национальность, национальная принадлежность) мәғәнәһендә ҡулланылған.

3. Вәлиди Туған, мәҫәлән, «типтәрҙәр» — улар дәфтәргә теркәлгән ауыл халҡы, ти. «Типтәр» тигән атама «дәфтәр» һүҙенән килеп сыҡҡан тип аңлата[9]. Монгол-татарҙар заманында уҡ хәрби хеҙмәт атҡарған кешеләрҙе дәфтәргә теркәп ҡуя торған булғандар, тип өҫтәй, һорау тыуа: ә ниңә һуң ул саҡта «типтәр» атамаһы тик Башҡортостанға ғына хас, тарихи Башҡортостандан ситтә ул ҡулланылмай? Ни өсөн был төшөнсә бары XVII быуаттан алып ҡулланыла башлай? Тимәк, XVII быуатҡа тиклем һәм, иң ҡыҙығы, Башҡортостандан ситтә типтәрҙәр булмаған, тип фараз итергә була. Күренекле мәғрифәтсе һәм ғалим Риза Фәхретдин былай ти: «Типтәр» тип йөрөтөлә торған халыҡтар — Ҡаҙанды алғандан һуң ҡасыусылар булырға тейеш»[10]. Атаҡлы ғалимдың был һүҙҙәре дөрөҫлөккә яҡыныраҡ килгәндәй, сөнки, Ҡазан ханлығы тар-мар ителеп, уның ерҙәре Рәсәй биләмәләренә ҡушылғас, урыҫтарҙың йәбер-золомона түҙә алмай бик күптәр, шул иҫәптән беренсе сиратта Бөгөлмә, Минзәлә тирәһендәге башҡорттар, тыуған ерҙәрен ташлап, көнсығышҡа ҡасып китергә мәжбүр була. XVIII быуатта «типтәрҙәр» араһында башҡорттар һан яғынан иң күбе булып иҫәпләнгән. Шуның өсөн «типтәр» — тибелгән, үҙ общинаһынан, ырыуынан тибелеп, ҡыуылып сыҡҡанды аңлата», — ти Ә. З. Әсфәндиәров.

Тимәк, типтәрҙәр, төрлө тарихи сәбәптәр арҡаһында башҡорт араһына ситтән күсеп килеп ултырған, сығышы буйынса күпселеге башҡорт булған этник төркөм. Шул уҡ ваҡытта, типтәрҙәрҙең мари, сыуаш, удмурт һәм татар сығышлылары ла әҙ булмаған. Тәүҙәрәк типтәрҙәр башҡорт ерҙәренә аренда хаҡы түләү шарты менән, аҫаба башҡорттар менән килешеү төҙөп, күсеп килеп ултырһалар, һуңыраҡ улар быны урындағы батша властарының рөхсәте менән башҡорттарҙың ризалығынан тыш эшләй башлайҙар. Билдәле булыуынса, башҡорттар ергә аҫабалыҡ хоҡуғы менән файҙаланғандар, бөтә ер ырыуҙарҙың күмәк милке булған. Дәһшәтле Иван заманынан XVIII быуаттың баштарына тиклем теләһә ниндәй күскенсе халыҡ тик

| №№ т/б | Ауыл исеме | Ир затынан | Ҡатын-ҡыҙ затынан | Бөтәһе күпме кеше йәшәгән |
|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 1. | Илтабан | 1 12 | 108 | 220 |
| 2. | Иманғол | 97 | 92 | 189 |
| 3. | Ишмәмәт | 22 | 31 | 53 |
| 4. | Ҡунаҡбай | 141 | 143 | 284 |
| 5. | Ҡалҡан | 101 | 91 | 192 |
| 6. | Мулдаш | 93 | 90 | 183 |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
|---|---|---|---|---|
| 7. | Миңлебай | 101 | 103 | 204 |
| 8. | Рысай | 119 | 109 | 228 |
| 9. | Юлдаш | 121 | 103 | 224 |
| | Бөтәһе | 907 | 870 | 1777 |

**Абдулнасыр Туҡмөхәмәт командаһындағы типтәрҙәр:**

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 10. | Әмин | 4 | — | — |
| 11. | Илсе | 99 | 121 | 220 |
| 12. | Мансур | 58 | 51 | 109 |
| 13. | Митряево | 196 | 208 | 404 |
| 14. | Сәфәр | 142 | 140 | 282 |
| | Бөтәһе | 499 | 520 | 1019 |
| 15. | Юлдаш, Ҡунаҡбай | — | — | |
| 16. | Мәсәғүт (Ярлыҡап) | 30 | 21 | 51 |
| 17. | Көҙән (Кәзекәй) | 16 | 7 | 23 |
| 18. | Дәүләт | 4 | 1 | 5 |
| | Бөтәһе | 50 | 29 | 79 |

башҡорт ырыуҙары һәм ауыл кешеләренең ризалығы менән генә башҡорттар биләгән ерҙәргә килеп төпләнә, нигеҙ ҡора алған. Шуға ла типтәрҙәрҙең байтағы, Башҡортостан сиктәренән эскә үтеп инә алмайынса, уның тышҡы периметры буйынса, төп халыҡтан баҫып алынған ерҙәрҙә йәшәргә мәжбүр булған.

Шулай итеп, типтәрҙәрҙең төп халыҡ түгел, ә күскенселәр икәнлеге бәхәс уятмай. Учалы еренә улар ҡайҙандыр икенсе яҡтарҙан күсеп килеп төпләнгәндәр. Ҡайҙан? Ҡасан? Нисек?

1736 йылдың 11 февралендә сығарылған батша указына ярашлы (Башҡортостанда был ваҡытта ниндәй хәл-ваҡиғалар булғанлығын иҫкә төшөр) баш күтәргән башҡорттарҙың ерҙәре тартып алынып, ошо ерҙәр башҡорт ихтилалдарын баҫтырыуҙа әүҙем ҡатнашыусы карателдәргә бушлай бирелергә тейеш була.

Был указға таянып, яһаҡ түләүсе типтәрҙәрҙең бер төркөмө (старшина Илтабан Степанов, йөҙ башы Миңлебай Ишмәнов, Рысай Баняшев, Һәйет Йосопов һ.б.) 1743 йылдың 16 июлендә Исәт провинцияһы канцелярияһына үтенес хаты тапшыралар. Улар «бунтовщиктарҙыҡы» тип һаналған, 1737—1740 йылдарҙа язалап үлтерелгән Барын волосы старшиналары Әлиш Мөҡсинов, Йосоп Арыҡов, Ҡыуаҡан старшинаһы Аҡҡужа Ҡоломбәтовтарҙың 89 мең дисәтинә майҙанды биләгән ер

биләмәләрен указ нигеҙендә үҙҙәренә биреүҙе юллайҙар. Дәғүәләрен 1735—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалын баҫтырыуҙа әүҙемлек күрһәтеүҙәре менән дәлилләйҙәр. Үтенес хаты ҡәнәғәтләндерелә һәм 1743—1750 йылдарҙа, ошоғаса Исәт йылғаһының уң ҡушылдығы булған Бәгәрәк йылғаһы буйында көн итеүсе типтәрҙәр (араларында башҡорто ла, татары ла, марийы ла, сыуашы ла була) хәҙер йәшәгән ерҙәренә — Яйыҡ башына, Өргөн, Асыуҙы, Юшалы күлдәре буйҙарына килеп төпләнәләр.

Тимәк, Учалы ерендәге типтәр ауылдары ил-йорто яндырылып, халҡы ҡырып бөтөрөлгән барын һәм ҡыуаҡан ерҙәрендә барлыҡҡа килгән. Шуныһын да оноторға ярамай: «типтәр» тип аталһалар ҙа, уларҙың байтағы сығыштары буйынса башҡорттар булған — Ҡазан тарафы, йәғни Көнбайыш башҡорттары. Бынан тыш, ихтилал баҫтырылғандан һуң, иҫән ҡалған аҫаба башҡорттар ҙа ошо ауылдарға килеп төпләнә. Шуныһы ла раҫ: бөгөнгө көндә Учалы типтәрҙәре үҙҙәренең мәҙәниәте, көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса тирә-йүн башҡорттарынан һис тә айырылмайҙар, үҙҙәрен башҡорт милләтенән тип һанайҙар.

Шулай итеп, типтәрҙәр — тарихи күҙлектән ҡарағанда бик үҙенсәлекле этник төркөм. Улар — дәүләт хеҙмәтендәге, йәғни урыҫса әйтһәк, «служилый» кешеләр. Был тулыһы менән Учалы типтәрҙәренә лә ҡағыла. Дәүләт һәм батша файҙаһына төрлө хеҙмәттәр, фарыздар, шул иҫәптән хәрби хеҙмәт тә атҡарыусылар. Уларҙың Учалы ерҙәренә күсенеп килеп ултырыуҙары ла ойошҡан, дәррәү төҫ алған.

Түбәндә 1799 йылдағы типтәр ауылдарының исемлеге, уларҙа йәшәүселәрҙең һаны бирелә."

Һағынбай Салауатовтың командаһына ҡараған типтәр ауылдары (ауыл исемдәре документтағыса бирелә):

Күреүегеҙсә, XVIII б. аҙағында типтәр ауылдарының һаны бөгөнгө көн менән сағыштырғанда, байтаҡҡа артыҡ булған. 1834 йылда ла типтәр ауылдарының дөйөм һаны 17 булған. Типтәр старшинаһы Сәйфелмөлөк Илбаев командаһына ҡараған ауылдар: Илтабан, Дәүләт, Мәсәғүт (Ярлыҡап), Зәит, Митряево, Илсе, Сәфәр, Мансур (8 ауыл). Иҡдисан Зәбиров командаһындағы ауылдар: Миңлебай, Ҡунаҡбай, Иманғол, Илтабан, Юлдаш, Мулдаш, Ҡалҡан, Рысай, Слатин хуторы (9 ауыл).

Был ауылдар 1781 йылда Айырым Типтәр волосына берләшәләр. Волость Верхнеуральск өйәҙенә ҡараған була. 1930 йылдың йәйенә тиклем был волость Типтәр—Учалы исеме аҫтында билдәле була.

Бөгөнгө көндә 12 (Силәбе әлкәһенең Уй районындағы Әмин ауылын индереп иҫәпләгәндә — 13) типтәр ауылы бар. Әмин ауылын 1746 йылда Аҡбулаттан (Рысайҙан) күсеп барып ултырған Әмин Ибраһимов тарафынан нигеҙләнгән өсөн иҫәпкә алдыҡ. Типтәр ауылдарының күбеһенең 2—3 исеме булыуы ла бик үҙенсәлекле күренеш.

Түбәндә хәҙерге ваҡыттағы типтәр ауылдарының исемлеген килтерәбеҙ:

1. Учалы — элекке исемдәре — Минусяево, Митряево, Асуҙы.
   Ауылға нигеҙ һалыусы — Микола Митряев, мари кешеһе.

*Турһыҡ, еләк йыйыу өсөн һауыт, аш табағы*

2. Сәфәр. Элекке исеме — Һәйет.
3. Мансур. Икенсе исеме — Ирәндек.
4. Өргөн. Элекке исеме — Мулдаш.
5. Рысай. Нигеҙ һалыусы — сыуаш Рысай Банящев. Икенсе исеме — Аҡбулат, ауылдың көньяҡ өлөшөнә килеп ултырған башҡорт ҡарты исеменән.
6. Ҡалҡан — Шамар;
7. Юлдаш — Аҡҡужа;
8. Ҡунаҡбай — Ҡандыболаҡ;
9. Иманғол — Ташкисеү;
10. Ураҙ — Миңлебай;

11. Илсе;
12. Илтабан. Ауыл старшина, сыуаш Илтабан Степанов исемен йөрөтә.

Типтәрҙәрҙең хужалығы, көнкүреше башҡорттарҙыҡынан әллә ни айырылып тормаған. Шуныһы, башҡорттар менән сағыштырғанда, улар игенселек менән күберәк шөғөлләнгәндәр, бер үк ваҡытта йәйләүгә сығырға ла онотмағандар. Ошо үҙенсәлекте Өргөн ауылы кешеһе Абдулатиф Ишкинин 1833 йылда властарға яҙған хатында «башҡорт йолаһы» һәм «ата-бабаларға» оҡшарға тырышыу менән аңлата. Бынан беҙ типтәрҙәр араһында башҡорттарҙың да байтаҡ булыуын күрәбеҙ, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ менән дә шөғөлләнгән улар. Малдары ҡышын башҡорттарҙыҡы һымаҡ тибендә йөрөгән.

Бер типтәр хужалығына уртаса 215 дисәтинә, шул иҫәптән 12 дисәтинә һөрөнтө ер тура килгән. Был күрһәткестәрҙең бик юғары булыуына ғәжәпләнергә һәм һоҡланырға ғына ҡала.

Типтәрҙәр үҙ иҫәбенә биш йөҙ кешелек 2 казак полкы тотҡан (1-се һәм 2-се типтәр полктары). Улар рекрут булып иҫәпләнгән, шуға ла башҡорт менән мишәрҙән айырмалы рәүештә, 15-әр йыл хеҙмәт иткән (башҡорттар һәм мишәрҙәр һәр ярты йыл һайын алмашынып торғандар).[12]

Учалы типтәрҙәренең күпмелер өлөшө, тарихсыларыбыҙҙың фекеренсә, XVI—XVII быуаттарҙа Ыҡ йылғаһы бассейнында, революцияға тиклемге бүленеш буйынса — Бөгөлмә өйәҙендә көн иткән. Быны улар ауыл исемдәренең бер өлөшөнөң, ер-һыу атамаларының бер нисәүһенең оҡшашлығынан сығып әйтәләр.

Фин-уғыр элементына килгәндә, XVIII быуат уртаһында улар типтәрҙәрҙең байтаҡ өлөшөн тәшкил иткән булырға тейеш. Академик Паллас, мәҫәлән, Өргөн ауылы халҡы — сыуаш сығышлы тип яҙып ҡалдырған. Рысайҙа сыуаш аймағы булған. Тарихи сығанаҡтарға таянып, Рысай һәм Илтабан ауылдарын нигеҙләүселәр ҙә сыуаштар булған, тип әйтә алабыҙ. Илсе ауылында XVIII быуатта һирәкләп кенә булһа ла удмурттар, мариҙар, сыуаштар йәшәгәнлеге билдәле. Учалы ауылына нигеҙ һалыусы Микола Митряев мари булған, тиҙәр ҡарттар.

Әйтелгәндәрҙән сығып, шундай һығымтаға килергә мөмкин: бөгөнгө көндә Учалы районындағы типтәр ауылдарында йәшәүселәр төрлө милләт (башҡорт, татар, сыуаш, мари, удмурт) кешеләренең үҙара аралашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән үҙенсәлекле этник төркөм ул. Башҡорт этник элементының өҫтөнлөк алыуы һөҙөмтәһендә был ауылдарҙың халҡы тулыһынса башҡортҡа әйләнгән.

Учалы типтәрҙәренән күренекле шәхестәр сыҡҡан. Шуларҙың береһе — Мансур Ибраһимов (1732—1816 йй.).

Мансур Ибраһимов — заманына күрә һәйбәт белем алған, писарь булып торған. Сығышы буйынса Мансур ауылныҡы булғас, был ауыл уның исемен йөрөтә. Заманында ул халыҡ араһында бик абруйлы булған.

Исәт провинцияһы (беҙҙең төбәк 1737 йылдан Исәт провинцияһына ҡарай) типтәрҙәре уны Екатерина II ойошторған Закондар сығарыу комиссияһына депутат итеп һайлай. 1767—68 йылдарҙа ул





*Тәйгәс, бешкәк, ит турағыс*

Санкт-Петербургта депутатлыҡ бурыстарын башҡара, бөтә Исәт провинцияһы типтәрҙәре исеменән сығыштар яһай, уларҙың мәнфәғәттәрен яҡлай; был әлкәлә ҙур сыҙамлылыҡ, ныҡышмалылыҡ күрһәтә.

Тыуған иленә ҡайтҡас, муйынына лентаға тағылған алтын миҙал (депутатлыҡ миҙалы) тағып йөрөгән.

## Мишәрҙәр һәм урыҫтар.

Кемдәр һуң ул мишәрҙәр? Был һорауға яуап биреүе еңел түгел. Бөгөнгө көндә мишәрҙәр татар яҙылалар[13]. Ләкин батша Рәсәйендә бер генә мишәр ҙә үҙен татарға һанамаған. Шулай уҡ татарҙар ҙа мишәрҙәрҙе бөтөнләй сит-ят халыҡ итеп ҡабул иткән.

Мишәрҙәр (русса: мещеряки) — туранан-тура Алтын Урҙа татарҙарынан килә. Уларҙың исеме Мещералағы «Мещерский городок» тигән ҡаланан алынған. XV быуат уртаһында бөйөк кенәз Василий III был ҡаланы тоғро хеҙмәттәре өсөн Алтын Урҙанан ҡасып килгән татарҙарға бүләк итә. Мишәрҙәрҙең һаны Әстрахан ханлығынан, Нуғай урҙаһынан, улар ҡолағандан һуң батша Рәсәйе яғына сыҡҡан нөғәй һәм татар иҫәбенә нығ арта.

Мишәрҙәр Дәһшәтле Иванға Ҡазан ҡалаһын яулап алыуҙа әүҙем ярҙамлаша. Урыҫ армияһының Ҡазанға походында бөтә кавалерия тиерлек мишәрҙәрҙән торған була. Үҙҙәренең батшаға тоғролоғо, икенсе яҡтан башҡорт телен аңлауҙары, уларҙы тынғыһыҙ башҡорттарға ҡаршы файҙаланыу мөмкинселеген бирә. Мишәрҙәр хеҙмәтсе татар сифатында Башҡортостанға XVII быуатта (8 ауыл) һәм XVIII быуатта (127 ауыл, һәр ауылда 21—22 өй) күсә башлаған. XVIII быуат башында мишәрҙәрҙең барыһы ла хәрби хеҙмәткә ылыҡтырылып, һалым түләүҙән ҡотҡарылған (1747 йылға тиклем) һәм улар башҡорт яуҙарын баҫтырыуҙа, башҡорттарҙы буйһондороп тотоуҙа батша хөкүмәтенең тоғро ялсыларына әүерелгән. Улар башҡорт яуҙарының етәкселәрен, шул иҫәптән Салауатты батша властарына тотоп биреүҙә туранан-тура ҡатнаша.

Беҙҙең районда ҙурлығы буйынса икенсе урында торған ауыл — Ахун ауылы. 1777 йылда хеҙмәттәге мишәрҙәр тарафынан нигеҙләнгән. Пугачев яуында баш күтәргән башҡорттарҙы баҫтырғанда күрһәткән хеҙмәттәре өсөн был ерҙәр уларға бушлай, бүләк рәүешендә бирелә. Улар ҙа бында, типтәрҙәр кеүек үк, Исәт йылғаһы буйҙарынан күсеп килеп ултырғандар. Тәүгеләрҙән булып 42 ғаилә башында ахун (руханиҙарҙың дәрәжәһе) Абдулла Даушев күсенеп килгән.

Абдулла Даушев — Екатерина II 1767—1768 йылдарҙа саҡырған Закондар сығарыу комиссияһында депутат булып торған. Ул унда Исәт провинцияһының бөтә мишәрҙәренән һайланған булған, уларҙың мәнфәғәтен яклаған. Санкт-Петербургтан түшенә депутатлыҡты күрһәткән ҙур алтын миҙал тағып ҡайтҡан.

XVIII быуат аҙағында мишәрҙәрҙең ер биләмәләре 26 мең дисәтинә тәшкил иткән (был ерҙәр быға тиклем ҡара табындарҙыҡы булған). Бер йортҡа уртаса 472 дисәтинә ер тура килгән, шуның 14-е — һөрөнтө ерҙәр. Тимәк, батша властары мишәрҙәргә, типтәрҙәр менән сағыштырғанда, 1 хужалыҡҡа ике тапҡыр күберәк ер биргән. Был, әлбиттә, тикмәгә түгел: хәл иткес ролде уларҙың батша хөкүмәтенә тоғролоғо уйнаған. Был «йомартлыҡты» һәр башҡорт ихтилалын баҫтырыуҙа аяу белмәүҙәре өсөн әжер тип аңларға кәрәк.

Мишәрҙәрҙең тормошо башҡорттарҙыҡынан ныҡ айырылып торған. Беренсенән, күҙгә ташланып торған хәллелек, муллыҡ. Икенсенән, ултыраҡ тормош. Төп шөғөл — игенселек. Мишәрҙәр малды

ҡураларҙа тоҡандар, типтәр һәм башҡорт кеүек тибенгә сығарып ебәрмәгәндәр. Ҡышҡылыҡҡа бесәнде күп әҙерләгәндәр. Йәйләүгә сығыуҙың нимә икәнен дә белмәгәндәр.

Хөкүмәт файҙаһына хәрби хеҙмәт, хөкүмәттән ҡиммәт хаҡҡа тоҙ һатып алыу — мишәрҙәрҙең төп йөкләмәләре булып торған.

XIX быуатта Ахун ауылы бик тиҙ ҙурая. 1812 йылда бында Ҡазан һәм Өфө губернияларынан татарҙар күсенеп килә (улар дәүләт крәҫтиәндәре хәлендә булған).

1840 йылда ауыл халҡының бер өлөшөн казак сословиеһына күсерәләр, ҡалғандары дәүләт крәҫтиәндәре булып йәшәй биргән.

XIX быуат аҙағында ауылдың казак өлөшө 67 ғаиләнән торған, улар үҙ атамандарына буйһонған булғандар. Дәүләт крәҫтиәндәре тип йөрөтөлгән өлөшө күпселекте тәшкил иткән (390 ғаилә иҫәпләнгән).

Ахун казактары Ырымбур казак ғәскәренең Ҡарағайлы станица йортона ҡарағандар, ә дәүләт крәҫтиәндәре — Типтәр волосына беркетелгән булғандар.

Бара-тора ауыл ныҡ ҙурайған, унда 4 тирмән, 3 ағас мәсет булған. Шишәмбе көндө баҙарҙар күп халыҡтың ҡатнашлығы менән үтә торған булған.

XVIII быуат урталарында беҙҙең төбәктә урыҫ кешеләре пәйҙә була. Тәүге урыҫ кешеләре — руда белгестәре һәм руда сығарыусы эшселәр: урыҫтар күсенеп килеп йәшәй башлаған тәүге урындар — рудниктар. XVIII быуат — беҙҙең төбәктә баҡыр рудаһы сығарыуҙың барлыҡҡа килгән һәм сәскә атҡан осоро.

1758 йылда Бирсә йылғаһына ҡойған Кирәбе йылғаһы буйҙарында районыбыҙ ерендә тәүге баҡыр руднигы асыла, рудник эргәһендә ауыл төҙөлә башлай. Шулай итеп, Кирәбе исемле тәүге урыҫ ауылы барлыҡҡа килә. Рудник 1827 йылға тиклем эшләгән. XIX быуаттың 30-сы йылдарынан бында алтын сығарылған.

Бер нисә йыл үткәс, XVIII быуаттың 60-сы йылдарында Кинйәкәй исемле башҡорт ауылы эргәһендә шул уҡ исемдәге рудник барлыҡҡа килә, күп тә үтмәй уның янында Вознесенка исемле ауыл үҫеп сыға.

XVIII быуат аҙағында Поляковка руднигы нигеҙендә шул уҡ исемдәге тағы ла бер урыҫ ауылы барлыҡҡа килә. Бында ла шулай уҡ тәүҙә баҡыр рудаһы, һуңынан алтын тапҡандар. 1839 йылда унда 123 өй иҫәпләнгән.

Был ауылдар барыһы ла башҡорт ерҙәрендә урынлашҡандар. Кирәбе ауылы — ҡыуаҡан ырыуы, Вознесенка менән Поляковка — барын ырыуы ерендә. Революцияға тиклем улар Туңғатар волосына, Троицк өйәҙенә ҡараған булғандар.

1871 йылда Кирәбелә — 130, Вознесенкала — 240, Поляковкала 187 йорт була.

Халҡының төп кәсебе: тау промышленносы, урман кәсептәре һәм игенселек була.

XIX быуат аҙағында — XX быуат башында алтын табыу, Столыпин аграр реформаһы менән бәйле тағы ла бер нисә бәләкәй генә урыҫ ауылы барлыҡҡа килә. Шулар иҫәбендә Мансур эргәһендәге Баталин, Мулдаштан алыҫ түгел урынлашҡан Козьма-Демьянск ауылдарын әйтеп үтергә була. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа был ауылдарҙың халҡы

күмәкләп ситкә күсенеп китә һәм шул сәбәпле 60—70-се йылдарҙа улар йәшәүҙән туҡтай.

Ауылдарыбыҙҙың Первомайский, Озерный, Октябрьский, Уральск кеүектәре 30-сы йылдар башында, колхозлаштырыу осоро башланғас, барлыҡҡа килә.

## ПУГАЧЕВ — САЛАУАТ ЯУЫНДА БЕҘҘЕҢ АТА-БАБАЛАРЫБЫҘ

1773—1775 йылдарҙағы Пугачев — Салауат етәкселегендәге крәҫтиәндәр һуғышында беҙҙең төбәк ҡайнап торған ваҡиғалар уртаһында була[14]. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ был күтәрелештә лә берҙәм рәүештә ҡатнаша. Башҡа ихтилалдарҙан айырмалы рәүештә, был юлы башҡорттар менән бер рәттән типтәрҙәр ҙә көрәшкә дәррәү күтәреләләр. Шулай итеп, районыбыҙ тарихында был башҡорттар менән типтәрҙәрҙең бер яҡ булып тәүге һәм һуңғы (Февраль революцияһына тиклемге осорҙа) яуға күтәрелеүе. Типтәрҙәрҙең сағыштырмаса әҙ булғанлығын иҫтә тотһаҡ, уларҙың был ихтилалда уйнаған ролен артыҡ ҡабартып күрһәтеү ҙә тарихи дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәйәсәк'. Ни тиһәң дә, беҙҙең яҡта ғына түгел, бөтә Көньяҡ Уралда һәм дөйөм Башҡортостанда, хатта дөйөм Пугачев армияһында ла төп көстө башҡорттар тәшкил иткәнлеге — тарихи факт. Йәғни, 2 йыл буйына барған, Крәҫтиәндәр һуғышы тип исемләнгән был яуҙа башҡорттан да күп һәм ныҡ ҡатнашҡан башҡа халыҡ та, синыф та юҡ. Мәҫәлән, Исәт провинцияһының 11 мең урыҫ булмаған халҡының Пугачев яуында 56-һы ғына ҡатнашмай ҡала, шуның 43-ө — мишәр.

1773 йылдың 17-се сентябре көнө — Пугачевщина башланған көн. 8-се октябрҙән — башҡорттар Пугачев ставкаһында (Кинйә менән Яманһары старшиналар). Ошо ваҡиғанан һуң 2 аҙна үтеп тә өлгөрмәй, беҙҙең төбәк башҡорттары ғәскәр туплап, көслө нығытылған ҡәлғә иҫәпләнгән Верхнеяицкийға һөжүм итәләр. 3 башҡорт старшинаһы (Күбәләктән — Байым тархан Ҡыҙраев, Тиләүҙән Муса тархан Килкин һәм Ҡара табын волосынан — старшина улы Муйнаҡ Рәсүлев) отрядтары менән ҡәлғәнән 3 саҡрым алыҫлыҡта туҡтайҙар. Бында батша ғәскәрҙәре менән тәүге бәрелеш була. Яҡшы ҡоралланған, һуғыш алымдарын оҫта ҡулланған урыҫ ғәскәре башҡорттарҙы сигенергә мәжбүр итә.

Шулай итеп, регуляр урыҫ армияһы менән тәүге осрашыу ата-бабаларыбыҙҙың еңелеүе менән тамамлана. Шуны ла иҫтән сығармайыҡ, Үрге Яйыҡ ҡәлғәһен баш күтәреүселәр 1773 йылда ла, 1774 йылда ла ала алмайҙар, бик ныҡ нығытылған булыуы һәм гарнизонының көслө булыуы арҡаһында уны хатта штурмлап тороуҙан да баш тарталар. Дөйөм алғанда, башҡорт иленең эсенә индереп һалынған ҡалаларҙың һәр береһе көслө ҡәлғә ролен үтәгән. Түбәндә килтерелгән һандар бының шулай икәнлеген тағы бер тапҡыр раҫлай. Өфө ҡалаһы халҡының 52 проценты (1790 йылда, Пугачев яуы баҫтырылғандан һуң әле), Силәбе халҡының 60 проценты һәм Ырымбурҙың 77 проценты — һалдаттар һәм казактар, йәғни хәрбиҙәр була.

Был ихтилалдың беҙҙең яҡ өсөн тағы ла бер үҙенсәлеге шунда: тирә-яғыбыҙҙа бик ҙур хәрби көстәрҙең тупланыуы була. Үрге Яйыҡ

ҡәлғәһенән тыш, Троицк, Сыбаркүл ҡәлғәләре, Силәбе ҡалаһы көслө гарнизондар менән нығытылған булған, бынан тыш Башҡорт иленең сиктәрендәге ҡала-ҡәлғәләрҙә лә урыҫтарҙың ҙур хәрби көсө тупланған булған. Бынан тыш, һәр бер рудник, завод, үҙе бер ҡәлғә хәлендә булып, ҡораллы көстәр менән һаҡланған.

Быларҙың барыһын да иҫтә тотоп, халҡыбыҙҙың ошо ихтилалда берҙәм рәүештә ҡатнашыуын тарихта тиңе булмаған бер ҡаһарманлыҡ өлгөһө тип һис бер икеләнеүһеҙ атарға була.

1773 йылдың ноябрендә учалыларҙың ата-бабаларынан Баҙарғол Юнаев һәм Юламан Ҡушаев етәкселегендәге ғәскәр Исәт провинцияһының үҙәге булған Силәбе ҡалаһын ҡамай, 1774 йылдың февралендә ҡала баш күтәреүселәр ҡулына күсә.

Бынан тыш, декабрь айында башҡорт отрядтары Кинйәкәй (Вознесенка), Кирәбе, Шартым рудниктарын штурм менән ала. Ҡаршылыҡ күрһәткән хужалар, ҡораллы һаҡсылар үлтерелә, рудниктар яндырылып, юҡ ителә, ә унда эшләгән урыҫтар әсир ҡылына.

1774 йылдың ғинуарында тирә-йүндәге башҡорт отрядтары Үрге Яйыҡ ҡәлғәһен дә ҡамауға ала. Ҡәлғә стеналарының ныҡлығы, пушкаларының күплеге, гарнизонының көслө булыуы баш күтәреүселәрҙе штурм яһауҙан баш тартырға мәжбүр итә. (Генерал Деколонг декабрь аҙағындағы бер бәрелештә башҡорт отрядтарын бер тапҡыр ҡыйратҡан була.)

Февраль айында, көстөң кем яғында икәнлеген аңлаған ҡәлғә комендант полковник Ступишин үҙе контрһөжүмгә күсә. 25-е көнө карателдәр отряды баш күтәреүселәрҙең терәк пункты булған Мәҫкәү ауылына һөжүм итә һәм уны баҫып ала. Ауыл яндырыла. Вәхшилек — ҡот осҡос була, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға тереләй утта яндырыла. Ҡулға төшкән һәр бер башҡортто рәхимһеҙ язалауға дусар итәләр: уның танауы, теле, ҡолаҡтары, уң ҡулындағы бөтә бармаҡтары ҡырҡып алына.

1774 йылдың апреленә тиклем беҙҙең төбәк башҡорттары Юламан Ҡушаев, Исай Туҡтағолов етәкселегендә Силәбе ҡалаһын, Миәс, Сыбаркүл ҡәлғәләрен терәк пункттар итеп файҙаланып, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы көрәшә. 10 апрель көнө баш күтәреүселәр Силәбене ҡалдырып, Сыбаркүл ҡәлғәһенә ҡарай сигенергә мәжбүр була. Беҙҙең яҡташыбыҙ Юламан Ҡушаев — Пугачев ҡулынан генерал званиеһы алған башҡорт командиры, ғәскәр башлығы һәм Ҡара табын волосы старшинаһы. Ул беҙҙең төбәктә иң һуңғы булып (1775 йылдың ғинуары) көрәште туҡтатҡан пугачевсы-командир.

Совет тарихсылары оҙаҡ йылдар башҡорт халҡының тарихын боҙоп күрһәтеп, яһалма рәүештә уны синфи йәмғиәт итеп һүрәтләнеләр, «башҡорт хеҙмәтсән массаларына» «башҡорт феодалдарын» ҡаршы ҡуйырға маташтылар. Ләкин фактҡарҙы ентекле өйрәнеү бындай раҫлауҙарҙың уйҙырма ғына булыуын фашларға ярҙам итә. Башҡорт халҡы азатлыҡ, бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәштә айырылғыһыҙ бер бөтөндө тәшкил иткән. Пугачев яуында башҡорт старшиналарының 90 проценты ҡатнашыуы һәм уларҙың, Пугачев урыҫ казактары тарафынан батша властарына тотоп бирелгәндән һуң да, һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатмауы башҡорт йәмғиәтенең синфи үҫеш юлы менән йәшәүенә шикләнеп ҡарарға мәжбүр итә. Икенсенән, нисә

заводчик, помещик, сауҙагәр, ҡала, өйәҙ башлығы Пугачев яҡлы булып сығыш яһаны икән? Һәр хәлдә, тарихҡа ундай факттар билдәле түгел. Шулай булғас, Рәсәй тарихына хас йәмһеҙ, зарарлы күренеште (синыфтар көрәшен, мәҫәлән) Башҡортостан ерлегенә күсерергә тырышыу — бөтәһен дә дегет менән һылауға бәрәбәр. Ошоларҙан сығып, беҙҙең башҡорт старшиналарына «йүнһеҙ ҡан эскес феодалдар» тип ҡарарға хаҡыбыҙ бармы икән? Киреһенсә, уларға ҡарата беҙҙең күңелдәрҙә һоҡланыу, ғорурланыу, рәхмәт тойғоһо ғына йәшәргә тейеш һымаҡ. Халҡыбыҙ тарихында тәрән эҙ ҡалдырған арҙаҡлы, мәшһүр шәхестәребеҙҙе белеү, хөрмәт менән иҫкә алыу — беҙҙең изге бурыстарыбыҙҙың береһе.

Ошо айҡанлы, әлегә тиклем йәшереп киленгән, Пугачев шәхесе менән бәйле бер фактҡа иғтибарҙы йүнәлтке килә. Билдәле булыуынса, Пугачев башҡорттарға тулы бойондороҡһоҙлоҡ, ирекле тормош вәғәҙә иткән, бөтә урыҫтарҙы боронғо башҡорт ерҙәренән ҡыуып сығарырға һүҙ биргән һәм үҙ вәғәҙәләрен ғәмәлгә ашырған: урыҫ ауылдарын, хатта үҙенә буйһонғандарын да, талаған, яндырған, уларҙың халҡына үҙенә эйәреп китергә бойорған.

Пугачев, үҙ һүҙенә тоғро ҡалып, урыҫ халҡын башҡорт ерҙәренән сығарған, ә был иһә башҡорттарҙың күптәнге теләге булып иҫәпләнгән. Ошо фактҡан сығып икенсе һығымтаға килергә була: Пугачев күтәрелешендә башҡорттарҙың бер төптән «Петр III батшаны» яҡлап сығыуҙары, унар меңләгән ғәскәрҙәре менән Пугачев яҡлы булып һуғышыуҙары уларҙың интернационализмы тураһында ла, башҡорт-урыҫ дуҫлығы хаҡында ла һөйләмәй. Башҡорттарҙың үҙ мәнфәғәте (Бойондороҡһоҙ Башҡортостан) уларҙы иң яуыз дошмандары — урыҫ баш күтәреүселәре менән ваҡытлыса союзға инергә мәжбүр иткән. Пугачев Мәскәү тәхетенә ултырған хәлдә уның үҙенә бөтә яҡтан да ярҙамлашҡан, власҡа килергә ярҙам иткән башҡорттарға рәхмәт йөҙөнән Рәсәйҙән айырылып сығып, Бойондороҡһоҙ Башҡортостан дәүләтен төҙөргә рөхсәт итеү ихтималы ла бар ине.

...1774 йылдың май башында, Ырымбур эргәһендә Пугачевтың төп көстәренең тар-мар ителеүен ишеткән Үрге Яйыҡ крепосы коменданты Ступишин һәм Ҡарағайлы крепосы коменданты полковник Фок етәкселегендә көсәйтелгән каратель отрядтары беҙҙең төбәк ауылдарына ябырыла; ауылдарыбыҙ аяуһыҙ яндырыла, ә ҡасып өлгөрә алмаған тыныс халыҡ үлтерелә, әсир ителә.

Карателдәр нисек кенә аяуһыҙ ҡыланмаһын, улар беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың азатлыҡҡа ынтылышын һындыра алмайҙар. Башҡорттарға тирә-яҡ ауылдарҙа йәшәгән типтәрҙәр ҡушыла. 1773 йылдың аҙағында Бөрйән волосы старшинаһы Морат 600 кешелек отряды менән барындарға ҡушылырға китеп барышлай, Асуҙы (Учалы) ауылында туҡтап китә. Бында уға типтәрҙәрҙән төҙөлгән ҙур отряд ҡушыла, етәкселәре булып типтәрҙәрҙең үҙ старшиналары Мөхәммәт Сәфәров һәм Күсәрбай Арыҫлановтар торған. Бынан тыш, типтәрҙәр берләшкән ғәскәрҙе фураж, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итәләр. Үрҙә исемдәре аталған старшиналарыбыҙ — Учалы ауылынан Мөхәммәт Сәфәров һәм Ҡалҡан ауылынан Күсәрбай Арыҫланов үҙҙәрен оҫта,

булдыҡлы командирҙар итеп таныта. Пугачев ҡулынан юғары звание — полковник званиеһы алыуға өлгәшәләр.

Тарих беҙгә типтәрҙәр араһынан сыҡҡан башҡа баш күтәреүселәрҙең дә исемдәрен ҡалдырған. Бына улар: Ишмән Ишмәтов, Собханғол Бәхмәтов, Йәрмәк Дәүләтов, Ғайса, Рәшит Ғәҙеловтар, Рәсүл Йосопов. Шул уҡ ваҡытта батша властарының тоғро ялсылары ла булған улар араһында: һайланған депутат Исмәғил Әбләев, йөҙ башлығы Зәбир Бикмәтов һәм башҡалар.

Типтәрҙәрҙең Пугачев яуында дәррәү ҡатнашҡанын билдәләү менән бер рәттән беҙ, әлбиттә, баш күтәреүселәрҙең хәл иткес күпселек көсө, етәкселәренең иң абруйлылары башҡорттар булғанлығын тағы ла бер мәртәбә һыҙыҡ өҫтөнә алып китергә тейешбеҙ. Был — бәхәсһеҙ тарихи факт. Беҙҙең төбәктән сыҡҡан хәрби етәкселәрҙең исемлеге генә бының дөрөҫлөгөн раҫлаусы дәлил булып тора.

1. Юламан Ҡушаев — пугачевсы-генерал.

2. Байым тархан Ҡыҙраев — Пугачев тарафынан Башҡортостандың баш судьяһы итеп тәғәйенләнгән шәхес.

3. Муса тархан Килкин — Тиләү волосы старшинаһы, үҙ волосының хәрби көстәре башында торған пугачевсы-командир.

4. Мансур тархан Таймасов — пугачевсы-полковник, Ҡара табын волосы старшинаһы, күренекле етәксе.

5. Рәсүл тархан Этиммәсов — Ҡара табын волосы старшинаһы, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, үҙ волосында ойоштороған отрядтарҙың башлығы.

6. Муйнаҡ Рәсүлев — Рәсүл тархандың улы, Ҡара табын волосы старшинаһы, күренекле пугачевсы-командир.

7. Исай Туҡтағолов — Ҡара табын волосы старшинаһы, ҡыйыу һәм оҫта командир, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы көрәште иң һуңғы булып туҡтатыусыларҙың береһе.

8. Әмин Ибраев — Тиләү волосынан, исеме киң билдәле командир, пугачевсы-полковник.

9. Көсөк Мортазин һәм Яһаҡ Абдулҡасимовтар — пугачевсы-есаулдар, тарихҡа 1774 йылдың йәйендә Ҡатау-Ивановск тирәһендә һуғышып йөрөүҙәре менән инеп ҡалғандар.

10. Поход старшинаһы Шөкөр Абзамов һәм йөҙ башы Упаҡ Абзамов — дипломаттар, Пугачев ставкаһында хеҙмәт итеп, ҡаҙаҡтарҙың Урта Йөҙө менән союз төҙөү өҫтөндә күп көс һалған шәхестәребеҙ.

Яуҙан ситтә ҡалғандар, йәиһә ҡулына ҡорал алып, халҡына ҡаршы сыҡҡандар ҙа, һирәкләп беҙҙең төбәктә лә осраған, әлбиттә. Шулар араһынан иң яуызы, 1730 йылдар башында ырыуҙаштары тарафынан Ҡара табын волосынан ҡыуылып киткән Ҡыҙрас Муллаҡаевты күрһәтергә була. Был кеше пугачевсыларҙың ҡурҡыныс дошманына әүерелә, көслө каратель командаһы етәксеһе булып тәғәйенләнеп, үҙ халҡын әҙ ҡырмай. Күренекле мишәр полковнигы Ҡәнзәфәр Усаевты батша властарына тотоп биреүсе лә ул.

1774 йылдың апрель аҙағы. Үҙенә тоғролоҡ һаҡлаған 300 урыҫ казагы һәм бер нисә йөҙ башҡорт яугиры менән Пугачев Ырымбур тирәһенән ҡасып килеп, Белоретта 4 көнгә туҡтай. Бында уның ғәскәре тиҙ арала ҙурая. Байым тархан Ҡыҙраев Пугачев янына бер

нисә мең баш ат ҡыуып алып килә, үҙенең ҡул аҫтындағы ғәскәрен Пугачевҡа тапшыра. Шундай ихласлыҡты, киң күңеллелекте көтмәгән Пугачев, Байым тархан менән һөйләшеп, уның иҫ киткес төплө белемле булыуына һоҡлана, аҡылына хайран ҡала һәм уны Башҡортостандың баш судьяһы итеп тәғәйенләй. Байым тархандың ҡул арты еңел була — артынса Белоретҡа Исәт провинцияһы баш күтәреүселәренең башлығы И. Грязнов ғәскәре менән килеп ҡушыла (төп өлөшө барын һәм ҡара табындарҙан торған отряд була ул).

Халҡыбыҙҙың үҙен ҡорбан итергә әҙер тороуы, ҡол булып йәшәүҙән һуғышып үлеүҙе хуп күреүе арҡаһында, бәләкәй генә отряд көслө армияға әүерелә. Ошо баш күтәреүселәрҙең, башлыса башҡорттан торған ғәскәрҙең башында, 1774 йылдың 2 майында Пугачев Белорет заводын ҡалдырып, үҙенең көнсығышҡа триумфаль походын башлай. 5 май Магнитная крепосы штурм менән алына. Ошонан һуң ғәскәр төньяҡҡа боролоп, Ырымбур сик буйы линияһы буйынса хәрәкәт итә башлай. Үрге Яйыҡ крепосын штурмларға баш күтәреүселәр был юлы ла баҙнат итмәйҙәр, уның эргәһенән үтеп китеп, 9 май көнө районыбыҙ сигендә урынлашҡан Уҡлы-Ҡарағайлы ҡәлғәһен һуғышһыҙ тиерлек алалар. 5 май менән 9 май араһында Пугачев армияһы Наурыҙ ауылында була (Наурыҙ эргәһендәге бейек тау — Бүгәс тауы — шул ваҡиғаның өнһөҙ шаһиты). Ошонда сик буйы линияһы буйлап барып, Себергә ҡарай поход башларға тигән ҡарарға килә баш күтәреүселәрҙең етәкселәре. 11 май — Петропавловск, 12 май Степная крепосы ҡан ҡоймай, ҡаршылыҡһыҙ алына.

20 май көнө, 12 мең кешенән торған, 30 пушкаһы булған баш күтәреүселәр армияһы Троицк крепосын штурм менән ала. Икенсе көндө, 21 майҙа батша ғәскәрҙәренең көтөлмәгән һөжүме пугачевсыларҙың тулыһынса тар-мар ителеүенә килтерә. Иҫән ҡалған 500 кешеһе, яныңдағы 3 пушкаһы менән Пугачев Нижне-Увельская, Кичигино крепостары, Варламово слободалары аша етеҙ хәрәкәт итеп Сыбаркүл крепосы тирәһендә пәйҙә була. 22 майҙа Өфө яғынан ҡаршыға килгән Михельсон етәкселегендәге карателдәр отряды уның юлын бүлә. Кундравы слободаһынан 20 саҡрым алыҫлыҡта, Верхне-Увельская слободаһына илткән юлда, Лягушино исемле ауыл тирәһендә, Пугачев яңынан еңелеүгә осрай.

Михельсондың каратель командаһы май башында барындарҙың һәм ҡара табындарҙың ерендә башҡорт отрядтарын эҙәрлекләп, һуғыш хәрәкәттәре алып барған була. 17 майҙа барындарҙың һәм бөрйәндәрҙең 1000 яугирҙан торған ҙур отряды Нәрәле тирәһендә карателдәргә һөжүм итә, ләкин еңеүгә өлгәшә алмай. Яу яланында 318 мәйет (шуларҙың 18-е карателдәрҙеке) ятып ҡала. Михельсон башҡорт отрядтарын эҙәрлекләп барып Кинйәкәйҙе баҫып ала, унан Туңғатарға күсә, бынан Уйское станицаһына килә. Ошонда ул был яҡтарға табан Пугачевтың хәрәкәт итеүен ишетеп, уға ҡаршы сыға һәм тар-мар итә.

Иҫән ҡалған 50 һыбайлыһы, ярҙамсыларынан — Кинйә Арыҫланов менән бергә, Е. Пугачев яңынан беҙҙең төбәккә үтеп инә, бында ҡара табын башҡорто Әбним тархан йәйләүендә йәшеренә. (Йәйләү Миәс йылғаһы башында булған.) Ошонда, йәғни бәрәкәтле Учалы ерендә,

4 көн үткәргәндән һуң, ул башҡорттарҙан 2 мең кешелек ғәскәр туплап, Силәбе ҡалаһына ҡарай йүнәлә. Силәбенән 35 саҡрым алыҫлыҡта (Сыбаркүл менән Силәбе араһында), Миәс буйында, Байғаҙы исемле башҡорт ауылында, Пугачев Салауат Юлаев менән осраша. Салауаттың эргәһендә башҡорттарҙан торған 3 мең атлы ғәскәре була. Ошо ҙур көс менән улар Сыбаркүл ҡәлғәһен баҫып алып яндыралар, шул уҡ яҙмышҡа Кундравы слободаһы ла дусар ителә. Бынан һуң берләшкән ғәскәрҙең юлы беҙҙең район ере буйлап дауам итә. Яйыҡ башында, Яманһаҙ аша күпер түшәп, баш күтәреүселәр ғәскәре һаҙҙы юғалтыуһыҙ үтеп (был күпер бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланған, халыҡ араһында Салауат күпере тип йөрөтөлә), йылдам рәүештә хәрәкәт итеп, Әй йылғаһына сығып, уның үҙәнендә Михельсон менән яңынан осрашалар, 3 һәм 5 июндә каты бәрелештәр була. Берләшкән ғәскәр Красноуфимск һәм Көңгөр ҡалаларына табан йүнәлә.

Шулай итеп, беҙҙең төбәк Пугачев яуының үҙәгендә булған тип әйтһәк, һис тә хаталанмабыҙ. Май айында (1774 йыл) Иртәш күле буйында (Сыбаркүл ҡәлғәһенән йыраҡ түгел) 12 башҡорт старшинаһы, шул иҫәптән беҙҙең төбәктекеләр ҙә, отрядтары менән йыйынға киләләр, артабан һуғыш хәрәкәттәрен алып барыу планын төҙөйҙәр. Был факт баш күтәреүселәрҙең ҙур ойошҡанлығы тураһында һөйләй.

Шулай ҙа июнь айында беҙҙең төбәктә ихтилал һүрелеп тора. Баш күтәргән башҡорттарҙың һәм типтәрҙәрҙең, шул иҫәптән генерал Юламан Ҡушаев һәм полковник Мөхәммәт Сәфәровтың, отрядтары Пугачев ғәскәренән айырылып, бары тик июль башында ғына тыуған яҡтарына кире әйләнеп ҡайталар. Кама ярындағы Оса ҡалаһын 21 июндә баҫып алғандан һуң, артабан поход удмурт һәм татар иле аша дауам итергә тейеш була. Шуға ла ата-бабаларыбыҙ көрәште дауам иттерер өсөн Башҡортостан биләмәләренә ҡайтыуҙы хуп күрә. 1774 йылдың июль-октябрь айҙарында Исәт провинцияһы биләмәһендә ихтилал яңы көс менән тоҡанып китә. Баш күтәреүселәрҙең отрядтары генералдар Деколонг, Станиславский, Скалон, Фреймандарҙың каратель отрядтары менән һуғышалар, ҡәлғәләргә һөжүм итәләр, исәт мишәрҙәренең, ичкин һәм усть-багаряк хеҙмәттәге татарҙарының ауылдарын туҙҙыралар (һуңғылары — башҡорттарға ҡаршы карателлек ҡылғандары өсөн). Декабрь айында ихтилал, дөйөм алғанда, баҫтырыла. Бөтә Исәт провинцияһында батша властарына ҡаршы көрәш алып барыусы генерал Юламан Ҡушаевтың ғына ғәскәре ҡала. 1775 йыл тыуа; ғинуар айында, Салауат Юлаев ҡулға алынғандан һуң 2 ай үткәс кенә, Юламан генерал да көрәште туҡтатырға мәжбүр була. (Ҡара табын волосының поход старшинаһы Юламан Ҡушаев уҙ заманында «беренсе һәм төп бунтовщик» исеменә лайыҡ булған шәхес.)

Шулай итеп, Себер даруғаһында 1774 йылдың ноябрендә, партизан һуғышы алып барыусы 11 башҡорт, 1 мишәр старшинаһы була.

1774 йылдың көҙөндә һуғыш хәрәкәттәре алып барыуҙа Илсеғол Этҡолов (подполковник) үҙен һәләтле командир итеп таныта.

1774 йылдың 6 ноябрендә Исәт провинция канцеляриеһына (Силәбе ҡалаһы) Исай Туҡтағолов — Ҡара табын волосының ахуны һәм төп старшинаһы — үҙе килеп баш һала.

Декабрь (1774 йыл) башына, Исәт провинцияһында партизан һуғышы алып барған «билдәле 6 башҡорт бунтовщигы» була, шулар исемлегенә Илсеғол Этҡолов та инә.

Ҡыуаҡандарға килгәндә, 1774 йылдың майынан ноябренә тиклем улар Юлай Аҙналиндың һәм Салауат Юлаевтың ғәскәрҙәре составында һуғышалар, Ҡатау заводын ҡамап тоталар, яҡын тирәләге заводтарҙы баҫып алып яндыралар.

Ҡыуаҡандарҙың ни өсөн Юлай һәм Салауаттың ғәскәрендә һуғышып йөрөүен түбәндәгесә аңлатырға була. XVIII быуаттың II яртыһындағы административ-территориаль бүленеш буйынса, Ҡыуаҡан волосы ерҙәре Ырымбур губернияһының Өфө провинцияһына ҡараған, Салауат менән Юлайҙың ерҙәре лә Өфө провинцияһында булған. Ҡара табын һәм барындарҙың ере — Исәт провинцияһына буйһонһа, Күбәләк һәм Тиләүҙәрҙең ерҙәре Ырымбур провинцияһына ингән (Губерния бер — Ырымбур). Шулай итеп, беҙҙең төбәк ерҙәре 3 провинцияға бүлгеләнгән хәлдә булған.

Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда ихтилал баҫтырылғандан һуң, башҡорттарҙы һәр 5 йорттан 1-әр ат тапшырырға мәжбүр итәләр («штраф аты», йәки 25 һум аҡсалата түләргә). Үрге Яйыҡ ҡәлғәһенә Күбәләк волосы башҡорттары 400 һум килтереп тапшыра, Тиләү волосы — 375 һум, Ҡара табын волосы — 400 һум. Бынан тыш, Силәбелә лә штраф аттарын ҡабул итәләр. Ҡара табын волосы башҡорттары йыйып 1770 һум аҡса алып килә. Штраф аттарын типтәрҙәрҙән дә йыя башлайҙар, әммә һуңынан туҡтаталар, йыйған аттарын да, аҡсаларын да, дәүләт файҙаһына налог түләүсе сословие булараҡ, кире ҡайтарып бирәләр (III ревизия буйынса Учалы типтәрҙәренең ир енесле дөйөм һаны 839 кеше була). Штраф аттарын һәм штраф аҡсаһын Ҡара табындарҙан старшина Рәсүл тархан Этиммәсов, барын волосынан старшина Абдулкәрим Ҡорманаев, Тиләү волосынан сотник Абдулғәзиз Абулатипов һәм Күбәләк волосынан Абзан тархан Байымовтар алып барып тапшыралар.

Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыу — ул беҙҙең төбәктә йәшәгән халыҡтарҙың батшалыҡҡа ҡаршы, Башҡорт иленең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн XVIII—XIX быуаттарҙағы һуңғы күтәрелеш ул. Башҡалары кеүек үк быныһы ла еңелеү менән тамамланған.

Тулы булмаған 3 быуат эсендә 76 эре һәм ваҡ башҡорт ихтилалы булып уҙа. Уларҙың һәр берәһе йөҙәрләгән, меңәрләгән яндырылған ауыл, халҡыбыҙҙың меңәрләгән иң яҡшы улдарының яу ҡырында, йә иһә йәлләдтәр ҡулынан үлеме менән тамамлана.

## XVIII—XIX БЫУАТТАРҘА ТАУ ЭШТӘРЕ.

Иң тәүҙә шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып үтәйек: беҙҙең яҡтағы тау эшенең кәм тигәндә 4—5 мең йыллыҡ тарихы бар. Руда сығарыу, уны эшкәртеү эше бер туҡтап, бер көсәйеп, бөгөнгө көнгә тиклем килеп еткән. Учалы ерендә заводтар һалынмаһа ла, беҙҙең төбәк борон-борондан төрлө ҡаҙылма байлыҡтарға бик бай булған һәм урындағы ха-

лыҡ ябай ғына ысулдар һәм технологик конструкциялар менән булһа ла уларҙы эшкәрткән, һуғыш, көндәлек кәрәк-яраҡтарының күбеһен үҙе етештергән. Халҡыбыҙға 2 быуат буйы милли-азатлыҡ һуғышы алып барыр өсөн бик күп ҡорал, беренсе сиратта һөңгө остары, уҡ башаҡтары, ҡылыстар талап ителгән. 76 ихтилалда ҡатнашып, ирек өсөн яуға күтәрелгән унар, йөҙәр меңләгән аҙаматтарыбыҙ, ситтән килтерелгән ҡорал менән бер рәттән, үҙҙәрендә етештерелгән һуғыш ҡоралдары менән дә тәьмин ителгән. Әлбиттә, батша властары башҡорттарға тимерлектәр тоторға рөхсәт итмәгәнлектән, был эштәр бик йәшерен башҡарылған.

Тау эшендәге һынылыш XVIII быуат башында була. Рудниктар асыу, руда сығарыу эше, хәҙерге тел менән әйткәндә, коммерция нигеҙенә ҡуйыла. 1720 йылда Сенат үҙенең махсус указы менән руда ятҡылығын асҡан һәм күрһәткән башҡорттарға, Рәсәйҙең башҡа халыҡтарына түләгән кеүек, түләү тәртибен законлаштыра. Ә инде 1734 йылдан башлап рудалы урын күрһәтеүселәргә ҙур бүләктәр, башҡа төрлө әжерҙәр вәғәҙә итә һәм бирә башлайҙар. Тап ошо ваҡыттан беҙҙең төбәктә тау эше киң ҡолас ала.

XVIII быуат беҙҙең төбәк өсөн — «баҡыр быуаты» булған тип әйтһәк, һис тә хаталанмабыҙ, моғайын[15]. Ул заманда хәҙерге Учалы районына ҡараған ерҙәрҙә 100-гә яҡын баҡыр ятҡылығы асыла һәм шуларҙың күбеһе эшкәртелә. Тимер ятҡылыҡтары ла билдәле була (Рысайҙан алыҫ түгел Серкәй тауы тотош тимер рудаһынан тора), тик улар эшкәртелмәй.

Ләкин аҡса ла, бүләк тә, башҡа төрлө әжерҙәр ҙә беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙы үҙ ерҙәрендәге руда ятҡылыҡтарын батша властарына күрһәтергә, үҙ ерҙәренә урыҫ геологтарын индерергә мәжбүр итә алмай. Сөнки был, күп осраҡта ер-һыуыңды бүләккә алмашып, унан ҡолаҡ ҡағыуҙы аңлатҡан. Шуға күрә, башҡорттар араһында руда белгестәре күп булыуға ҡарамаҫтан, тәүге рудниктар бары тик XVIII быуаттың 50-се йылдарында ғына асыла. Шуны ла әйтеп китергә кәрәк: руда ятҡылыҡтарын танып-белеүҙә башҡорттар үҙҙәре күпкә маһирыраҡ булһалар ҙа, уларҙы властарға күрһәтеүҙә ситтән килгән типтәрҙәр өлгөрлөк күрһәтәләр.

XVIII быуаттың 60—80-се йылдарына беҙҙең төбәктә баҡыр рудаһы сығарыуҙың иң юғары нөктәһе тура килә. Баҡыр рудаһы бик күп күләмдә сығарыла һәм аттар менән Белорет заводына ташыла, бер өлөшө Яйыҡ йылғаһы буйлап (Рысай, Ҡалҡан тирәләренән) ҙур кәмәләрҙә түбән ағыҙыла, унан һуң артабан йәнә аттар менән Белоретҡа алып барып еткерелә. Руданың күпмелер өлөшө Ағиҙел йылғаһы ярына ташылып, артабан Белорет заводына һыу юлы менән оҙатылған.

Типтәр волосы ерҙәрендә Белорет заводына ҡараған 49 баҡыр ятҡылығы булған, шуларҙың 8-ндә баҡыр рудниктары асылған булған. Улар башлыса Ҡарағайлы, Учалы, Өргөн, Ҡалҡан күлдәре буйында урынлашҡан. Был баҡыр ятҡылыҡтарын асыуҙа һәм властарға күрһәтеүҙә рысайҙар алдынғылыҡты берәүгә лә бирмәгән. Ибрай Рысаев, Үрәзмәт Йәрмәков, Тәриш Йосопов һәм Йүкеш Муҡановтарҙың «руда белгестәре» тигән даны бик алыҫҡа таралған булған. Әйтергә кәрәк, ундай оҫталар Өргөн ауылында ла байтаҡ булған: Әитҡол

Кусимов, Дауыт Кинйәбаев, Ҡотош Ҡотоҡаев һәм Байтирәк Әсәновтар. Үрҙә исемдәре аталған руда белгестәренең һәр берене бер нисә ятҡылыҡ асҡан һәм шуның өсөн мул бүләктәр алған.

1760—62 йылдарҙа ғына Илтабан ауылынан йорт старшинаһы Илтабан Степанов, Өргөндән Әитҡол Кусимов, Рысайҙан Йүкеш Муканов, Ибрай Рысаев һәм Үрәзмәт Йәрмәковтар 8 руда ятҡылығын күрһәткәндәр. Ҡармый Йомашев менән Яҡуп Йосопов 3 ятҡылыҡ, Ҡотош Ҡотоҡаев, Дауыт Кинйәбаев һәм Әитҡол Кусимовтар 5 руда ятҡылығын асҡандар.

Типтәр биләмәләрендә сығарылған руданы Белорет заводына ташыу бик күп сығымдар талап иткән һәм үҙен аҡламаған тиерлек. Араларҙың алыҫлығы, ташыу ысулының (ат арбаһы) примитивлығы әкренләп Белорет заводы хужаларын был ерҙәрҙә баҡыр рудаһын ҡаҙыуҙы кәметергә, ә аҙаҡ рудниктарҙы бөтөнләй ябырға мәжбүр иткән.

1773 йылғы отчеттар буйынса, бөтә башҡорт ерҙәрендә урыҫтарҙың 56 баҡыр һәм тимер иретеү заводы эшләгән. Шуларҙың берене — Белорет тимер иретеү заводы киң ҡатлам уҡыусыларға таныш инде. Беҙҙең төбәктә рудниктар асҡан икенсе завод — Косотур (Златоуст) тимер иретеү заводы. Завод 1761 йылда тимер иретеү буйынса эш башлай, 1764 йылдан башлап баҡыр иретеү буйынса махсуслаша башлай. Завод хужаһы Максим Мосолов беҙҙең яҡтарҙа бик актив эш алып бара. Хәҙерге Учалы районы ерҙәрендә завод 6 баҡыр һәм 4 тимер руднигы тотҡан. Шул алтауҙың өсөһө — Кирәбе, Кинйәкәй һәм Шартым заманында бик бай рудниктарҙан һаналғандар, уларҙа күпселеген Косотур заводына беркетелгән рус крәҫтиәндәре эшләгән. Рудниктар ныҡытылған булған, уларҙың һәр берене ҙур булмаған ҡораллы отрядтар һаҡлаған (тирә-яҡтағы башҡорттарҙан һаҡланыу өсөн шулай эшләнелгән был).

Ҡалған 3 баҡыр һәм 4 тимер руднигында Ҡармыш, Мулдаҡай, Туңғатар, Әбдрәхим, Ҡәип, Үмәркәй, Таһир ауылдары халҡы эшләгән, сығарылған руданы үҙ көстәре менән Косотур заводына ташып торғандар.

1768 йылда Косотур заводына тағы ла 4 баҡыр руднигы беркетелә. Уларҙы ошо яҡ кешене, Көньяҡ Уралда иң тәжрибәле руда белгесе башҡорт Ғүмәр Ямашев аса. Шул уҡ йылда Косотур заводын Тула сауҙагәре Л. И. Лугин һатып ала. 5 йыл үткәс, 1773 йылда, ул заводты рудниктарға яҡынайтыу маҡсатында Миәс баҡыр иретеү заводына нигеҙ һала. XVIII быуат аҙағына Миәстә йылына 4500 бот бик яҡшы сифатлы баҡыр иретеп алынған, шуның яртыһы Екатеринбург монета йортона аҡса һуғыр өсөн оҙатылған. Әммә был ваҡытта инде заводҡа беркетелгән 222 рудниктың тик бишене генә руданы даими рәүештә бирә алған. Шул бишәүҙең араһына Кирәбе, Кинйәкәй, Поляковка рудниктары ингән.

XVIII быуат аҙағына баҡыр рудаһы табыу кәмеү сәбәпле, заводтарҙың күбене ябыла. Ләкин улар үҙҙәренең һәләкәтле тәьҫирен ҡалдырып өлгөрә. Тирә-яҡ мөхиткә ҙур зыян килтерелә: унар меңләгән дисәтинә шаулап үҫкән урмандар урынына ҡола яландар барлыҡҡа килә (ул саҡтағы технология буйынса, баҡыр иретеү өсөн ағас күмере

ҡулланылған). Бынан тыш, 1744 йылдың 14 мартында императрица Елизавета Петровна сығарған указ буйынса, һәр яңы төҙөлгән заводҡа «завод ултырған урындан дүрт яҡҡа табан 50-шәр саҡрым алыҫлыҡтан уратып, тура һыҙыҡлы квадрат рәүешендә» ер ҡырҡып бирелгән. Был ерҙә көн иткән халыҡ, йәғни башҡорттар, ошо урындан ҡыуып ебәрелгән. Шуның өсөн дә Миәс, Златоуст, һатҡы, Белорет ҡалаларының тирә-яғында әллә күпме территорияла бер генә башҡорт ауылы ла юҡ.

Беҙҙең яҡтағы тау эштәренең юғары кимәлдә торғанлығын түбәндәге факттар раҫлай: 1770 йылда был ерҙәрҙе, йәғни беҙҙең төбәкте, арҡырыға-буйға йөрөп, 2 академик — Лепехин һәм Паллас — эҙләнеү эштәре алып барған. XVIII быуатта беҙҙең төбәктә баҡыр һәм тимер руданыны тыш, башҡа ҡаҙылма байлыҡтар ҙа күп сығарылған. Мәҫәлән, көнсығыш гәлсәре, апатит, аксинит, йәшмә, слюда, көмөш руданы һәм башҡалар. Учалы йәшмәһенән эшләнгән әйберҙәрҙе Луврҙа (Париж), Эрмитажда (С.-Петербург) күреп һоҡланырға мөмкин. Ошо минералдарҙы асыуҙа түбәндәге яҡташтарыбыҙ ҙур тырышлыҡ күрһәткән: Әлиш Мөҡсинов, Бурыш Кинйәкәев, Күсем абыҙ Айытҡолов һәм Байым тархан Ҡыҙраев.

## Хәҙер алтын сығарыу тураһында[16].

Көньяҡ Уралда иң тәүге алтын 1797 йылда Миәс йылғаһына ҡойған Ирәмәл йылғаһының һул ҡушылдығы Ташҡутарған буйында табылған. Хәҙерге Учалы районының төньяғында алтын ҡаҙыу эштәре 1823 йылдан алып барыла. Ана шул ваҡыттан беҙҙең яҡтарҙың «Урал Калифорнияһы» тигән даны сыға ла инде! Ошо осорҙа төбәкте ялмап алған «алтын биҙгәге» башҡа файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарҙы эҙләүҙе һәм эшкәртеүҙе туҡтата. Шунан һуңғы осорҙа төбәктә баҡыр руданы табыу йәки иретеү тураһында материалдарҙы табып булмай. Был эш яңынан ошо быуаттың 50-се йылдарында ғына киң йәйелдерелде.

Типтәр-Учалы волосында тәүге алтын һибелмәләре 1830—1833 йылдарҙа генерал-лейтенант Жемчужниковтың старателдәр компанияһы тарафынан асыла.

1837 йылда алтын табыу эштәре Күбәләк-Тиләү волосында ла башлана (Ғәлиәхмәр ауылы тирәһендә, Миндәк йылғаһы буйында).

1833—34 йылдарҙа алтын ҡаҙыусылар менән башҡорттар араһында килешеү ҡағыҙҙарына ҡул ҡуйыла. Был килешеүҙәр буйынса алтын сығарыу өсөн ер арендаға бирелә.

Беренсе килешеүҙе 1833 йылдың ғинуарында Типтәр-Учалы волосы етәкселәре менән үрҙә исеме аталған Жемчужников төҙөй. Жемчужниковҡа ошо волостың ҡайһы ерендә теләй, шунда алтын ҡаҙып алырға рөхсәт ителә. 1837 йылда генералдың ҡул аҫтындағы кешеләре Аҡҡужа, Мансур һәм Ураз ауылдары тирәһендә приискылар асалар (соҡорҙар ҡаҙып һибелмә алтын сығаралар, ябай ғына алтын йыуыу ҡорамалдарында уны йыуалар).

Алтын йыуыу эшендә һынылыш 1836 йылда була. Сенаттың махсус указы менән алтын табыу айырым (ирекле) кешеләргә лә рөхсәт ителә, һөҙөмтәлә башҡорттарҙың вотчина, типтәрҙәрҙең ҡаҙна

ерҙәренә төрлө яҡтан старателдәр ағыла. 1867 йылда, мәҫәлән, типтәр биләмәләрендә 217, ҡаҙна ерҙәрендә 520 һәм башҡорт ерҙәрендә 1097 кеше алтын табыу менән шөғөлләнгән.

1843—1844 йылдарҙа «Жемчужников һәм К.» ошо уҡ ауылдар эргәһендә, шулай уҡ Ахун, Рысай яҡтарында яңы приискылар аса — бөтәһе унлап урында эш ойоштора. Утыҙ йылдар самаһындағы эш дәүерендә Жемчужников компанияһы 2 мең 500 кг алтын сығарып ала, шуның 2 тоннаһы Шартым йылғаһы буйындағы Мансур ауылы тирәһендә табыла.

Типтәр-Учалы волосы ерҙәренән 1830—1890 йылдарҙа 60 йыл эсендә бөтәһе 7,5 тонна алтын ҡаҙып алына. XIX быуат аҙағына алтын табыу кәмей башлай: бай ятҡылыҡтар эшкәртелеп бөтөлә тиерлек.

1834 йылдың февралендә Жуковский тигән баяр Уй йылғаһы буйында йәшәгән барын табын башҡорттары менән килешеү төҙөй һәм 1837 йылда Балбыҡ приискыһын асып ебәрә. Уй буйында һибелмә алтын ҡаҙыу менән бер рәттән шахталар асылып, алтынлы руда ла сығарыла. Шахталарҙың тәрәнлеге 36 метрға етә, ә ер аҫтындағы «келәт юлдарының» оҙонлоғо 500 метр самаһы була. Жуковский ойоштороған компания, хужалары алмашыныу сәбәпле 1890 йылда исемен үҙгәртһә лә, 1905 йылға тиклем эшләй. 1837 йылдан алып иҫәпләгәндә ул Балбыҡ приискыһында ғына 7,4 тонна алтын сығара (шуның 245 килограмы — шахталарҙан). Бынан тыш, йәнә 8 урында был компания ике тонна самаһы хазина ҡаҙып ала.

Исемдәре үрҙә телгә алынған генерал менән баяр артынан Учалы ерҙәренә башҡа йүнселдәр ҙә килә (башлыса 1840—90 йылдарҙа). Килеүселәрҙең башлыҡтары, теге йәки был йылға буйын арендаға алыу тураһында башҡорттар менән килешеү төҙөйҙәр ҙә эшкә тотоналар. Бер прииск өсөн ғәҙәттә 100, һирәк осраҡта 200 дисәтинә ер арендалайҙар. Аренда хаҡы бик оҫоҙ була.

Был дәүерҙәрҙә арендаға башҡорт ерҙәрен алыусылар һаны 50-нән артып китә. Әммә, араларында төрлө авантюристар күберәк була, шул арҡала приискыларҙа хужалар бик йыш алмашынып тора. Бер урында оҙаҡ йылдар хужа булып торған йүнселдәр ғөмүмән әҙ булған.

Эре хужалар араһында башҡорт-татар фамилиялы кешеләр бөтөнләй осрамай тиерлек. Шундай һирәктәрҙең береһе — Ғәҙелшин фамилиялы кеше. Ғәҙелшин компанияһы 1912—1917 йылдарҙа Түләк ауылы тәңгәлендә 350 дисәтинә ер арендалап, 5 прииск тотҡан (7 кг алтын тапҡан). 1915 йылда Чанышева һәм Ниғмәтуллиндың артеле Кәрим ауылы тирәһендә 2 кг алтын ҡаҙып алған. Атаҡлы Рәмиевтар Учалы алтынына үтеп инә алмаған; 1893—94 йылдарҙа Ишмәкәй һәм Ҡолош ауылдары эргәһендә 800 грамм алтын йыуыуын йыуалар, әммә башҡаса улар беҙҙең район ерҙәрендә эш итмәйҙәр.

Учалы алтыны буйынса белгес Басир Мәһәҙиевтең әйтеүенсә, беҙҙең яҡтарҙың алтын приискылары күберәк бай ҡатындар ҡулында булған. «Ниңәлер байбисәләр Сәфәр, Рысай ауылдары тирәһен бигерәк ярата», — ти ул. Сәфәрҙәге 14 приискының 7-һендә улар рәсми хужа булып иҫәпләнә. Бына улар: поручик ҡатыны Овчинникова, коллежский асессор ҡатыны Ярина, сауҙагәр ҡатыны Горячева, статский советник ҡатыны Быкова, яһауыл ҡатыны Бухарина, титулярный

советник ҡатыны Баженова һәм Гилева, Рысай ауылы эргәһендәге 14 прииск ының 8-ендә төрлө ваҡытта ҡатындар хужа булып тора: Сахарова, Быкова, Юрьевич, Федорова, Пономарева, Степанова, Черниловская-Сокол, Севастьянова. Күренеүенсә, ҙур түрәләрҙең һәм генералдарҙың ҡатындары була улар.

Флот лейтенанты ҡатыны С. Немитц 1912—1917 йылдарҙа Вознесенка, Туңғатар ауылдары эргәһендә, 1207 дисәтинә ер арендалап, 5 прииск тотҡан, 50 кг алтын ҡаҙҙыртып алған. Графиня Анна Толстая үткән быуат уртаһындағы 1 йыл эсендә генә (1843 йыл) Миндәк эргәһендә 422 кг һибелмә алтын сығарта. Баронесса Катц Өргөн күле тирәһендә өс, Миндәк йылғаһы буйында бер прииск тота, уның табышы — 135 кг. Ахун ауылы янында Чехомов тигән лесничийҙың ҡатыны ун йыл буйына алтын ҡаҙыу менән кәсеп итә, бөтәһе 8 кг алтын ала.

Алтын хужаларының күбеһен, шулай ҙа, ирҙәр тәшкил итә. Хужалар прииск ыға йылына 1—2 тапҡыр ғына килеп китер булған, урындарҙа эште управляющийҙар алып барған. Алтын йыуыу эштәре тәүге дәүерҙә ҡул көсө менән генә башҡарылған. Бары тик XIX быуат аҙаҡтарында — XX быуат башында ғына балсыҡ, ҡом, таш эсендәге алтынды механик йә химик юл менән айырып алыу өсөн техника ҡулланыла башлай. Вознесенка ауылы эргәһендә алтын йыуыу пар машинаһында башҡарыла, Учалы менән Ахун ауылдары араһындағы бер прииск ыла химия заводы төҙөлә.

1903—1907 йылдарҙа Ҡалҡан, Өргөн күлдәре өҫтөндә драга алтын сығара. Ҡалҡанда драга 3 йыл һәйбәт кенә эшләгән, ярымутрау эргәһендә күл төбөнән алтын сығарған. Ләкин, драга шунда бата. Уны күтәреп сығаралар һәм Өргөн күленең утрауы эргәһенә күсерәләр. Әммә һыуҙың тәрәнлеге арҡаһында драга сүместәре ҡомдо бик ала алмай, шуға ла бер йыл эшләткәс, драганы һүтергә мәжбүр булалар. Драга 1903—1906 йылдарҙа Ҡалҡан күле төбөнән 15 кг, 1907 йылда Өргөн күле төбөнән 1 кг алтын сығара.

Башҡорт ерҙәренә әйләнеп ҡайтайыҡ. 1865—1890 йылдарҙа ғына башҡорт ерҙәренән 10 тонна алтын алына. Бынан тыш, был ерҙәр 1 центнер көмөш һәм 1 кг платина ла биргән.

Алтын шулай уҡ урыҫ ауылдары Кирәбе, Поляковка, Вознесенка тирәһендә лә табылған.

Туңғатар волосына килгәндә, бында XIX быуат урталарында ысын-ысындан «алтын биҙгәге» башлана. Мулдаш, Көсөк, Мулдаҡай ауылдары эргәһендә 1 центнер ҡомдан 1 килограмға тиклем сағылташ йыуып алалар. 4-се кантон башлығы Төхвәт Үтәев, бик бай кеше, тап ошо осорҙа бик күп башҡорт ерҙәрен оҫоҙ ғына хаҡҡа урыҫтарға һатып ебәрә. Тәбиғи, урыҫтар иң тәүҙә алтынға бай урындарҙы һатып ала.

Алтын прииск ыларындағы ауыр эш, завод-прииск хужаларының ҡыҫымына һәм баш-баштаҡлығына сыҙай алмайынса, 1869 йылда уҡ барын табын алтын прииск ыларындағы 156 башҡорт эш ташлап, өйҙәренә таралышҡан. 1881 йылдың август айында Миәс промыслаларында контракт буйынса эшләгән башҡорттар (уларҙың төп өлөшө — хәҙерге Учалы районынан) стачка күтәргәндәр. Стачка Миәстән Мул-

даҡайға күскән, уға Ильинка приискыһы эшселәре лә ҡушылған. Башҡорт эшселәренең сығышын урыҫ эшселәре лә дәррәү яҡлап сыҡҡан. Был стачка бөтә Башҡортостан күләмендә тәүге стачка була.

Тулы булмаған мәглүмәттәргә ҡарағанда, Февраль революцияһына тиклемге осорҙа хәҙерге Учалы районы ерҙәрендә кәм тигәндә 30 тонна алтын сығарылған. Шуның кәмендә 7,8 тоннаһы Мулдаҡай яғында; 7,4 тоннаһы Балбыҡ приискыһында; 4,5 тоннаһы Шартым йылғаһы буйында; 2,5 тоннаһы Ураҙ ауылы тирәһендәге ваҡ йылғаларҙа; 1,6 тоннаһы Миндәк йылғаһы үҙәнендә; 1 тоннанан артығырағы Рысай ауылы тирәһендә, ҡалған 5 тоннаһы — әҙләп башҡа урындарҙа (Уй һәм уға ҡойған бәләкәй йылғалар буйында, Ҡалҡан, Өргөн күлдәре тирәһендә, Юлдаш, Илтабан, Илсе, Сәфәр, Ахун, Учалы ауылдары эргәһендә һ.б.) йыуылған алтын.

Шул тиклем байлыҡтың төп хужаһы булып та, Февраль революцияһын халҡыбыҙ ас-яланғас хәйерсе булып ҡаршылаған икән, был факт үҙе генә башҡорттоң ниндәй ҡот осҡос колонизация кисереүен дәлилләй. Тәбиғәт беҙҙең төбәккә байлыҡты йәлләмәй биргән. Ә уның файҙаһын фәҡәт колонизаторҙар ғына күргән. Ошо ерҙең төп хужалары булған башҡорттарға был байлыҡтан һис бер өлөш сығарылмаған.

30 тоннанан ашыу алтын бөгөнгө замандың бойондороҡһоҙ илдәрендәге алтын запасына тиң байлыҡ икәнлеген уйлаһаң, ил-йортобоҙҙоң, халҡыбыҙҙың таланыу масштабы тетрәндерә, донъяла тиңе булмаған күренеш икәнлегенә инандыра.

## XVIII БЫУАТ—XX БЫУАТ БАШЫНДА МӘҘӘНИ ТОРМОШ

### Рухи һәм мәҙәни сығанаҡтарыбыҙ.

Билдәле булыуынса, уҙған быуаттарҙа башҡорт халҡының рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүҙә сәсәндәр мөһим урын тотҡан. Улар бер үк ваҡытта шағир ҙа, көйсө лә, үҙ әҫәрҙәрен башҡарыусы оҫта ҡобайырсы ла булып танылғандар, һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеп китәйек: боронғо Ҡытайҙа шиғыр ижад итеп, уны билдәле бер көйгә һалып башҡарыусыны «шежень» тип йөрөткәндәр. Был һүҙҙе төркиҙәр ҡытайҙарҙан үҙләштергәнме, әллә киреһенсә ҡытайҙар беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙан отоп алғанмы — әйтеүе ҡыйын. Бында шуныһы мөһим: төрки ҡәүемдәре менән боронғо Ҡытай араһындағы мәҙәни бәйләнештәр бик боронғо замандарға барып тоташа. Был беҙҙең тарихыбыҙҙың боронғолоғона йәнә бер дәлил.

Башҡорт сәсәндәре үҙ-ара тығыҙ аралашып, бер-береһенең ижадына йоғонто яһашып, йыраусылыҡ менән сәсәнлектең иң яҡшы традицияларын артабан үҫтереп, дауам итеп йәшәр булғандар.

Үткән заманға күҙ ташлаһаң, шул күренә: борон йәшәгән һәм ижад иткән байтаҡ атаҡлы сәсәндәрҙең тормош юлы беҙҙең төбәк менән бәйләнгән. Шулар рәтенә Ҡобағош сәсәнде, Мәхмүт менән Ҡарасты, замандаштары араһында «ата сәсән» тигән ҡушамат алған Ишмөхәммәт сәсәнде индерергә була.

Мәшһүр Ҡобағош сәсән Дим буйында Ҡараҡоломбәт хандың ғәскәрҙәре менән һуғышып, хандан еңелгәс, беҙҙең яҡтарға — Уралға ҡасып килгән тарихи шәхес. Ул мең башы булып танылған бей булыуы өҫтөнә әйтештәрҙә тиңһеҙ сәсән дә булған. 1917 йылда Орск әйәҙе Үҫәргән волосы һабыр ауылы (Башҡортостандың хәҙерге Йылайыр районы) Әфләтүн ахундан яҙып алынып, Мөхәммәтша Буранғолов тарафынан төҙөлгән «Башҡорт халыҡ поэзияһы» («Фольклор ижадсылары») исемле ҡулъяҙма йыйынтыҡта был турала: «...Ҡобағош, хан ғәскәренән еңелеп, Урал эсенә, Ҡатай яғына ҡасҡан», — тип әйтелә. Был тарихи мәғлүмәттәге «ҡатай яғы» тигәндең беҙҙең райондағы Ҡобағош ауылы икәнлегенә шик юҡ, сөнки, берҙән, ҡатайҙарҙа ул исемдәге ауыл юҡ, икенсенән, Ҡобағош ауылының барлыҡҡа килеүе хаҡындағы риүәйәт тә күпмелер дәрәжәлә беҙҙең фаразды ҡеүәтләй. «Беҙҙең ауыл бында күсеп килеп ултырған», — тиелә риүәйәттә. Һынсыл ҡарттар әйткән: «Өс йылғаның тамағына барып төпләнһәгеҙ генә нигеҙегеҙ ырыҫлы булыр». Бына шунан Ҡобағош ауылы Миндәк, Ҡуяш һәм Соңғор йылғалары бергә ҡушылған ергә килеп төпләнгән.

«Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтеше» 15—16 быуаттарҙа булып үткән тарихи ваҡиғаларҙы сағылдырыуы, Ҡобағоштоң үлтергес һүҙ әйтеү ҡеүәһен нарыҡлауы менән ҡиммәтле рухи ҡомартҡы. Уның дошман хәтерен һаҡламай, үлтергес һүҙ әйтер ҡөҙрәте Бисәнбай атлы ҡаҙаҡ байына әйткәнендә лә сағыла. Алсынбай исемле ҡаҙаҡ аҡыныныҡ өләңенә ҡарағанда:

Истәк аҡыны Ҡобағос
Ҡурайын бер гөжләтеп оран салды,
Ай-хайлап өләңен жарып салды.
Әйтескәндә Бисәнбайың сарсап ҡалды,
Өнө тығылып, Ҡобағостан үлеп ҡалды.

Тимәк, Ҡобағош сәсәндең даны башҡорт араһында ғына түгел, ә ҡаҙаҡ араһында ла киң таралған булған. Уның «яманлыҡты яҡламаҫ, дошман хәтерен һаҡламаҫ, ханға ҡаршы уҡ булған, бейгә ҡаршы ут булған» сәсән теле үткер ҡорал сифатын үтәгән.

Ҡобағоштоң ейәне Ҡарас сәсән сама менән 17-се быуат аҙағында, 18-се быуаттың башында йәшәгән. Ҡобағоштан Айбағыш менән Көнбағыш исемле ике улан ҡала. Айбағыштан Килдеш батыр тыуа, Көнбағыштан Ҡушкилде тыуып, ул да заманында мәргән атҡыс, батыр була (әйткәндәй, Наурыҙ ауылының боронғо исеме Ҡушкилде). Ҡушкилденән Ҡарас атлы ул тыуып, атҡыслыҡта тиңһеҙ батыр һәм сәсән булып таныла. Был турала Учалы районы Наурыҙ ауылында табылған ҡулъяҙманан күсереп ташҡа баҫылған «Ҡарас менән Аҡша» исемле эпик әҫәр һөйләй.

Ҡарастың олатаһы Ҡобағош сәсәнгә тиң булырҙай тел оҫталығын түбәндәге риүәйәт һүрәтләй: Ҡараһаҡал яуы алдынан халыҡ йыйын уҙғарып, Ҡарастың уға үҙ мөнәсәбәтен белдереүен һорай: «Яу эше — дау эше, ике яҡлы була торған. Меңгә баш булып, Димде һыулаған, хандар менән айҡашып, илен-һыуын ташлап, Уйташта өй тотҡан Ҡобағош сәсәндең ярсығы Ҡарас сәсән бар. Ул Иҙел башы Ирәмәлгә, Яйыҡ башы Уйташҡа баш, уға һүҙ һалырға кәрәк». Ҡарасты саҡырып

килтергәс, һин ил теле, тип кәңәш һорағандар. Ҡарас әйткән: «Дөрөҫ, ил ауыҙын аса, мин — тел, һөйләйем. Шунда ла ил ауыҙын асыр микән? Уралда йәшәйем, ҡамсы һабына ҡырҡып алыр тал юҡ. Ҡамсыһыҙ яуға барырҙармы икән?» Шунан Ҡараһаҡал тороп былай тигән: «Һине ил ағаһы тинеләр, аҡыллы һүҙ көттөләр. Ә һин бөтөнләй бушты һөйләйһең». Ҡарас әйткән: «Талы күп тә ул Уралдың, тик ҡырҡа башлаһаң, ҡан сыға. Унан һуң, Уралдағы мәмерйәләр эсенә бүреләр инеп көсөкләгән. Аттарҙың ҡолағына ин һалғандар, боттарына тамға баҫҡандар. Төндә йөрөр эттәр үлтерелгән. Ә һуң ямау һалыр кейем бармы? Уныһын да белеп булмай. Ағас башына ҡор ҡунмаған бит әле, уҙамандар. Ә һуң урыҫ батшаһы һаҡаллы микән?»

Ҡарас сәсәнде күптәр аңламаған. Аранан берәү уның йомаҡ телен сисеп биргән: «Юҡ, уҙамандар, Ҡарас дөрөҫ һөйләне, һеҙ үҙегеҙ ҡыйыш аңланығыҙ. Талды ҡырҡһаң ҡан тама, тигәне — Урал урмандары яуҙарҙа аҡҡан халыҡ ҡаны менән һуғарылған тигән һүҙ була. Аттарҙың ҡолағына ин һалынған, боттарына тамға баҫылған тигәне — бөтөн еребеҙ билдәле, ҡайҙа барһаҡ та тоторҙар, тигән һүҙ була. Төндә йөрөр эттәрҙе үлтергәндәр тигәне — үткән яуҙа ҡатнашҡандарҙы язалап бөткәндәр була. Ағас башына ҡор ҡунмаған тигәне — яуҙан һуң ҡасып йөрөүселәр илгә ҡайтып бөтмәгән була. Ә ямау һалыр кейем бармы тигәне — килгән ҡунаҡ (Ҡараһаҡал) сит кеше, беҙҙең илгә ямаулыҡтай ғына буласаҡ тигән һүҙ була. Урыҫ батшаһының һаҡалын һорауы — илар бала атаһының һаҡалы менән уйнай, тигән һүҙ».

Беҙҙең төбәктә тағы ла бер атаҡлы сәсән торған. Ул 17 менән 18 быуат аралығында йәшәгән, Әүеш күл йәйләүендә тыуған Мәхмүт сәсән. Уның хаҡында Мөхәммәтша Буранғолов тарафынан яҙып алынған һәм «Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өсөнсө китап» (1982 й.) баҫмаһында донъя күргән риүәйәттәрҙә шулай тиелә: «Борон бер байҙың ике ҡыҙы, Мәхмүт исемле бер улы булған. Мәхмүт Әүешкүл йәйләүендә тыуған, Яугүл йәйләүендә үҫкән. Уның атаһы бай булһа ла, бик һаран булған. Хатта малына көтөүсе ялларға мал ҡыҙғанып, йылҡыһын улынан, һыйыр, һарығын ҡыҙҙарынан көттөргән. Башҡорттар араһында батша хөкүмәтенә ҡаршы баш күтәреү өсөн ат йыйыу башланғас, Мәхмүттең атаһы, ат биреүҙән ҡасып, малы менән ҡаҙаҡ араһына сығып киткән. Мәхмүт йәш-елкенсәк көтөүселәр менән тороп ҡалған. Бола баҫылғас, атаһы кире ҡайтҡан, батшаға ышаныслы кеше һаналып, старшина итеп ҡуйылған. Бай балаһы булһа ла, Мәхмүт йәштән үк көтөүселәр менән аралашып үҫкән, ҡурай уйнарға, әкиәт һөйләргә оҫта булған. Атаһы старшина булып түрәлеген ҡотлап йыйған мәжлестә ҡурайсылар, йырсылар, сәсәндәр бәйгеһендә Мәхмүт сәсән үҙенең хәҙер инде башҡорт халыҡ ижадында урын алған «Ҡурғаштан да тосораҡ» исемле йомаҡ-ҡобайырын әйткән, уға үҙе үк яуап биргән:

Ҡурғаштан да тосораҡ,
Ҡараңғы төндән дөмөрәк,
Ҡара төҫтән сөмөрәк —
Ил өҫтөндә бей булыр,
Аяҡлы йылан шул булыр;

Тау-таш күрмәҫ аяғын
Өҫтөндә йөрөгәс, ил күрер.

Быны ишеткәс, атаһы Мәхмүтте: «Минән көләһең, күҙемә күренмә!» — тип Себергә ебәргән, ти».

Атаҡлы ғалим Мөхтәр Сәғитов үҙенең «Боронғо башҡорт ҡобайыры» тигән китабында мәшһүр «Йәйәүле Мәхмүт» көйөн шулай уҡ Мәхмүт сәсән менән бәйләй.

Хәҙерге Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылынан сыҡҡан Ишмөхәммәт Мырҙаҡаев та беҙҙең төбәктеке тип ҡаралырға хаҡлы, сөнки ул ауыл элек Тамъян-Ҡатай кантонының Күбәләк-Тиләү волосына ингән (үҙәге Ҡаҙаҡҡолда). Ишмөхәммәт сәсәнде башҡаларҙан айырып торған сифат — уның сәсәнлегенән, ҡурайсылығынан тыш, көй сығарыу маһирлығы. Әлеге көндә башҡорт халыҡ ижадының алтын фондын тәшкил иткән «Ғүмәров», «Малбай», «Саңдуҙәк», «Юлтый ҡараҡ», «Аюкә», «Һыр» йырҙарының авторы Ишмөхәммәт сәсән тигән фекер йөрөй.

Ишмөхәммәт Мырҙаҡаев 1839 йылда Хива ханлығына ҡаршы ойоштороған хәрби поход ваҡытында Ырымбурҙың хәрби губернаторы В. А. Перовский янында йөрөгән ҡурайсы музыканттар төркөмөндә булған, уның тарафынан исемле ҡылыс менән бүләкләнгән. Уның шәкерте, ике йыл буйы ҡурайсылыҡ, ҡобайырсылыҡ серҙәрен өйрәнеүсе, остаҙының барлыҡ репертуарын ятлап алыусы Ғәбит сәсән Арғынбаев Ишмөхәммәт сәсән хаҡында былай тип хәтерләгән: «Мин күргәндә Ишмөхәммәт ҡурайсы 90 йәштәрҙә ине. Ул 97 йәшкә етеп үлде. Ете йыл буйына минең уның менән осрашып тормаған айым булмағандыр. Мин бер саҡта ла уның күңелһеҙ ваҡытын күрмәнем. Уның янына барһаң, барлыҡ ҡайғың онотола ине. Ул осҡор һүҙле, тура әйтеүсән, уйынсаҡ кеше ине. Ул үҙенең Аҡмәсет һуғышында Перовский менән бергә булыуын, унан бүләккә ҡылыс алып ҡайтыуын һөйләр, шул саҡтарҙан һаҡланып ҡалған кейемен күрһәтер ине, кейемдәрен миңә кейҙереп үҙенең йәш саҡтарын иҫкә алыр ине».

Ғәбит сәсән Ишмөхәммәт Мырҙаҡаевтан башҡорт эпостарының гәүһәрҙәре булған «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Иҙел менән Яйыҡ», «Күҫәк бей», «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат», «Байыҡ Айҙар сәсән» исемле әҫәрҙәрҙе отоп алған.

Әйтелгәндәрҙән сығып, шундай һығымта яһарға була: учалыларҙың бөгөнгө «йыр феномены»ның тамырҙары ҡасандыр ошо төбәктә йәшәгән һәм ижад иткән атаҡлы сәсәндәргә, уларҙың данлы традицияларына барып тоташа. Ер йөҙөндә бер нәмә лә эҙһеҙ юғалмай. Мәшһүр сәсәндәребеҙҙән ҡалған рухи ҡомартҡыларыбыҙ, ата-бабаларыбыҙҙың тел оҫталығы, йыр-моң сәнғәте быуындан-быуынға күсә килеп, беҙҙең талантлы замандаштарыбыҙҙың күңелендә терелә һәм йәшәүен дауам итә. Тик был тамырҙарҙы белергә, өйрәнергә һәм милли рухи ҡеүәтте артабан үҫтереү сараларын ғына күрергә кәрәк.

**Ауыҙ-тел ижадында һәм яҙма әҙәбиәттә беҙҙең төбәк.**

Әлеге көндә Башҡортостандың Учалы районы тип йөрөтөлгән биләмәләр, был яҡтарҙың ер-һыу атамалары ауыҙ-тел ижадында һәм

яҙма әҙәбиәттә бик боронғо замандарҙан уҡ сағылыш тапҡан. Бының шулай булыуы бик тә тәбиғи, сөнки әле беҙ көн күргән ерҙәрҙә, белеүебеҙсә, байтаҡ күсмә ҡәбиләләр алмашынған: сарматтар, һун ҡәбиләләре, уғыҙҙар, ҡыпсаҡтар, монгол-татарҙар, нөғәйҙәр һ.б. Бер һүҙ менән әйткәндә, был ерҙәр хәтһеҙ ырыу-ҡәбиләләргә төйәк булған, бик күп тарихи ваҡиғаларҙың өнһөҙ шаһиты булған.

Беҙҙең тирәнең ер-һыу атамалары башҡорт халҡының мәшһүр эпостарында телгә алына[17]. Миҫалға «Урал батыр» эпосын алайыҡ. Уның аҙағында шундай юлдар бар:

«...Уралдан тыуған ул булып,
Халыҡты һыуһыҙ ҡаңғыртып,
Батыр исеме күтәреп,
Һыу табалмай тилмереп
Тороу ирлек буламы?» —
Тигән дә Иҙел ирәйеп,
Тауҙы яра сапҡан, ти,
Көмөштәй бер аҡ йылға
Шылтырап шундуҡ аҡҡан, ти:
Тауҙы буйлап киткән, ти,
Әзрәҡәнән бар булған
Ямантауға еткән, ти,
Тау йылғаны быуған, ти,
Иҙел килеп уҡталып,
Билен өҙә сапкан, ти, —
Йылға ары аҡҡан, ти;
Иҙел баҫып торған тау,
Ирәмәлләп сапҡан тау,
Йылға сығып аҡҡан тау —
«Ирәмәл» булып ҡалған, ти.

Әйтергә кәрәк, «Ҡуңыр буға» эпосында һүрәтләнгән данлы Ҡуңыр буға ла беҙҙең тирәнән, тотош һыҙат булып көньяҡҡа табан һуҙылған Оло Уралдың арҡаһы буйлап үтә. Был юл элегерәк башҡорт ырыуҙары араһында бәйләнеш тотоу, илгә яу килгәндә бер-береһе менән хәбәрләшеп тороу өсөн мөһим хәрби-стратегик роль уйнаған.

Бына Таңдысаның юлда йырлаған йырҙарының бер нисәһе — унда ла беҙгә таныш исемдәр осрай:

Беҙ ултырған ерҙән күренеп
ятҡан
Иҙел башы — Ирәмәл тау икән;
Беҙ киткәндә бары ла теүәл ине,
Илгенәйем имен, һау микән?

Таңдысаның (эпос героиняһы) йәнә бер йырынан өҙөк:

Ҡуңыр буғам, малдарым,
Туйғанынса ҡарағыҙ,
Танып-белеп алығыҙ,
Хәтерегеҙгә һалығыҙ.

Әле байтаҡ барырбыҙ.
Ҡурташ ҡалды уңдараҡ,
Рәз, Ҡағыташ — ҡырҙараҡ,
Ҡырҡты, Ирәндек — көнлөктә,
Сахра-Сусаҡ — төнлөктә.

Йәки «Билал менән Дүсән» тигән эпосты алайыҡ. Ул шулай башланып китә: «Борон башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында бер-береһенә яу һалыуҙар булған. Бер ваҡыт ҡаҙаҡтар яу һалып, Туңғатар йортондағы башҡорттарҙың 1500 баш йылҡыһын әйҙәп алып киткәндәр. Шунан һуң башҡорттар үҙҙәре ҡарымтаға барған...»

Хәҙер яҙма әҙәбиәткә киләйек. Мәшһүр башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың «Башҡорттарҙың тарихы» тигән әҫәрендәге «Төмән бейҙәре һәм Нөғәй мырҙалары» бүлегендә тарихи шәхес булған Мамай мырҙа үҙенең атаһы Мусаның йәйләүҙәре тап ошо беҙ йәшәгән ерҙә булғанлығын бәйән ҡыла:

Иҙел башы Ирәмәл тау
Минең атам Мусаның
Иле ҡунған ере ине.
Яйыҡ башы ҡара урман
Минең атам Мусаның
Яҙ йәйләгән ере ине.

Билдәле булыуынса, Бату хан ғәскәрҙәре урыҫ кенәзлектәренә башҡорт ерҙәре аша ябырыла һәм үҙ юлдарында ҡаты ҡаршылыҡҡа осрай. Бына, мәҫәлән, ошо хаҡта монголдарҙың «Юань-пао би ши» (Изге риүәйәт) китабында ни тиелә: «Үгедәй хан Субидәйгә ярҙамға Батуҙы, Бүрине, Мәңгүҙе һәм башҡа бик күп хандарҙы оҙатты, сөнки Сүбидәй батыр хан тарафынан яулап алырға бойоролған халыҡтар һәм ҡәлғәләр яғынан мул һыулы Иҙел һәм Яйыҡ йылғалары буйында, ҡаты ҡаршылыҡ осратты».

Бату хан эргәһендә йөрөп, монголдарҙың хәрби походтарын өҙмәйенсә теркәп барған ғәрәп уҡымышлыһы Рәшитетдин үрҙәге фекерҙе ҡеүәтләп бына ниҙәр яҙып ҡалдырған:

«...Болғарҙар менән башҡорттар урҙаға ҡаршы 40 төмәнлек ғәскәр менән ҡаршы сыҡтылар. Бату хан уларҙың монголдарҙан ике мәртәбә күп икәнлеген һәм һәммәһенең дә данлы баһадирҙар булыуын белде».

Урыҫ прогрессив яҙыусыларынан Р. Игнатьев, Мамин-Сибиряк, Нефедов һәм С. Рыбаковтар беҙҙең төбәктә сәйәхәт итеп шул турала яҙып ҡалдырғандар. Түбәндә атаҡлы музыкант-этнограф С. Рыбаковтың Оҙонгүл ауылы йәйләүендә мәшһүр ҡурайсы һәм сәсән Усман Лоҡманов менән осрашыуы хаҡында бер өҙөк килтерелә.

«Ырымбур әлкәһенең Верхнеурал әйәҙе Оҙонгүл йәйләүендә тирәяҡта иң шәп ҡурайсы һәм шағир булып танылған Лоҡмановты осраттым. Ул үҙенең ырыуҙаштары һәм төрлө хәлдәр тураһында шиғырҙар сығарырға бик оҫта. Лоҡманов урта йәштәрҙәге һәм урта буйлы, ҡаҡса, әммә алһыу йөҙлө таҙа бер башҡорт. Бик тыйнаҡ һәм аҙ һүҙле, «Йә, Лоҡманов, уйнап күрһәтәһеңме?» — тип һораным мин унан. Ул көлөмһөрәне лә: «Була ул, ниңә уйнамаҫҡа», — тине. «Уйна, улай

булғас», — тип ҡыҫтаным мин. Эргәләге башҡорттар бергеһе артынан икенсеһе ҡурайсыны мактарға керештеләр: «һай, һай, шәп ҡурайсы ул, иң шәп ҡурайсы». Үҙҙәре дәртләнеп киттеләр, утҡа сыбыҡ-сабыҡ һалып, уны яҡтыраҡ дөрләтеп ебәрҙеләр, ҡыуыштан бер сапсаҡ сығарып ҡуйып, «әйҙә, ултыр, знакум» тип миңә урын күрһәттеләр ҙә ҡурайсыларын тыңларға йыйындылар. Лоҡманов ҡыуыш тирәләй ҡуйылған кәртәгә ултырып алды ла, ҡулдарын һөрткәләп, ҡурайын еүешләңкерәп, бер-ике тапҡыр һыҙғыртҡылап ҡуйҙы. Шунан бейек Ҡурташ, Артылыш тауҙары тураһында, Йүгрә хаҡында бик матур көйҙәр уйнарға тотондо. Ут тирәләй ултырған башҡорттар рәхәтләнеп тыңлай-тыңлай ах-ух килделәр. Ҡурайсы уйнап туҡтағас башҡорттар уның бүтән яҡтарын да мактай башланылар: «Үҙе шәп уйнай ул, знакум, үҙе һүҙгә бик оҫта. Теләһәң, һиңә лә, миңә лә, бүтәнгә лә шундуҡ һүҙ сығара, һәләк оҫта ул быға, һәләк!»

Мин Лоҡмановтан ҡурайҙа тағы ла уйнауын үтендем. Башҡорттар мут ҡына йылмайышып ҡуйҙылар: «һәй, нимәгә ул, знакум, һиңә беҙҙең йыр?» «Улар яҡшы йыр, миңә оҡшай», — тим. Быны башҡорттар етди төҫ менән раҫлап: «Эйе, беҙҙең йырҙар — шәп йыр», — тиҙәр. Ә мин үҙем яҙып алған көйҙө яңынан көйләп күрһәтһәм, башҡорттар миңә текләп ҡарап-ҡарап торҙолар ҙа: «Тәк, тәк, знакум, молодец», — тип хуплау һүҙҙәре әйтешеп, үҙ-ара нимәлер һөйләшеп, көлөшкөләп тә алдылар».

Күреүегеҙсә, беҙҙең төбәктең тарихы сал быуаттар төпкөлөнә барып тоташа, беҙгә таныш географик атамалар, ер-һыу исемдәре, айырым шәхестәр фольклор материалдарында һәм яҙма әҙәбиәттә урын алған.

Беҙҙең өсөн шуныһы мөһим: йәшәгән еребеҙ ҙә, тирә-яҡтағы тәбиғәт тә бик боронғо дәүерҙәрҙә үк мәғлүм булған, ошо тирәнән шанлы ла, ҡанлы ла ваҡиғалар шаулап уҙған. Тимәк, тарихыбыҙ ҙа, мәҙәни тамырыбыҙ ҙа боронғо. Тик уларҙы ентекләп өйрәнергә, һаҡларға һәм оло ғорурлыҡ менән киләһе быуындарға тапшырырға ғына кәрәк.

## Зәйнулла Рәсүлев — XIX быуаттың иң күренекле мәғрифәтсеһе.

Зәйнулла ишан Рәсүлев, XIX быуаттың иң күренекле кешеләренең бергеһе булһа ла, хәҙерге көнгә тиклем йәшәп килгән тоталитар система уның тураһында дөрөҫөн һөйләргә, яҙырға мөмкинлек бирмәй килде[18]. XVIII быуат өсөн Салауат Юлаев, XX быуат өсөн Зәки Вәлиди ниндәй бөйөк шәхестәр булһа, XIX быуат өсөн Зәйнулла Рәсүлев та шундай уҡ бөйөк.

Зәйнулла ишан 1917 йылдың 2 февралендә, Рәсәйҙә ҙур сәйәси тетрәнеүҙәр башланыр алдынан ғына, 84 йәшендә донъя ҡуя. Шул заманда ғы «Ваҡыт» гәзите уның тураһында түбәндәгеләрҙе яҙҙы: «Зәйнулла хәҙрәт эске Рәсәйҙәге мәшһүр заттарҙың иң олоһо һәм абруйлыһы... Ғасырыбыҙ уның кеүек мәшһүр һәм абруйлы зат күрмәгәндер... Троицкиҙағы Зәйнулла хәҙрәт эске Рәсәйҙә иң мәшһүр үә иң атаҡлыларҙандыр... Заманында уның һәр һүҙе һәр кемгә закон — шәриғәт ине. Ахыры ғүмеренә ҡәҙәр һәр кем уны олуғ бер шәйех,

мөгтәбәр бер ғалим һанап, хөрмәт итте... Зәйнулла хәзрәттең бер нисә баҫылған әҫәре лә бар... Мәзрәсәгә (һүҙ «Рәсүлиә» мәзрәсәһе хаҡында) башлап 10 мең һум бүләк итте...»

«Ҡояш» гәзите уның эшмәкәрлегенең икенсе яғына баҫым яһап, ошолай яҙҙы: «Зәйнулла хәзрәттең милләтебеҙгә олуғ хеҙмәттәренән береһе уның ысул жәдидә мәктәптәрҙе яҡлап һәм күтәреп сығыуы ине. Бөтә ерҙә лә ысул жәдидә (Ырымбур, Өфө) ҡыуылған ваҡытта, Троицкиҙа ул камил гражданлыҡ хоҡуғы алған ине».

Зәйнулла ишан Рәсүлев тураһында ҡайҙан уҡып белергә мөмкин һуң? Иң беренсе, исемдәре үрҙә әйтелгән ғәрәп графикаһы менән баҫылған гәзиттәрҙән, шулай уҡ ул заманда сыҡҡан башҡа гәзит-журналдарҙан, Риза Фәхретдиновтың 1917 йылда сыҡҡан, 105 битлек «Шәех Зәйнулла хәзрәттең тәржемәи хәле» исемле китабынан да күп нәмәне белергә була. Зәйнулла Рәсүлев тураһында ҡайһы бер мәғлүмәтте шулай уҡ 1936 йылда донъя күргән Л. Климовичтың «Ислам в царской России» китабынан да алырға була. Был баҫмаларҙа ишан тураһында объектив, дөрөҫ материалдар тупланған. Улар, Башҡортостандың халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаштың бер яҡлы, тенденциоз яҙмаларына һәм уға эйәреп яҙылған башҡа сығанаҡтарға тәнҡит күҙлегенән ҡарап, Зәйнулла ишан хаҡында дөрөҫ фекер тупларға ярҙам итә.

Татар әҙәбиәте менән яҡындан таныш кешеләр Зәйнулла Рәсүлев тураһында Атилла Рәсихтың «Ҡазан утлары»нда (1990 йыл, 1—2-се һандар) баҫылған «Ишан оныҡы» тигән әҫәренән белә алалар.

Зәйнулла Рәсүлев — нәҫеле буйынса ҡыуаҡандарҙан, 1833 йылдың 25 мартында донъяға килгән. Тыуған ере: Ырымбур губернияһы, Троицк әйәҙе, Туңғатар волосы, Шәрип ауылы. Атаһының исеме Хәбибулла.

Зәйнулла ишан, ысын башҡорт булараҡ, үҙенең ата-бабаларын яттан белгән. Бына уның шәжәрәһе:

Зәйнулла
↓
Хәбибулла
↓
Рәсүл
↓
Муса
↓
Байрамғол
↓
Ғашиҡ
↓
Солтанай
↓
Мораттупай (Мираттупай)
↓
Ураҙғәли
↓

↓
Яңши (Яңышай)
↓
Йәтәбей

Зәйнулла 12 йәшенә ҡәҙәр үҙ ауылындағы мәҙрәсәлә уҡый, унан Малай Муйнаҡтағы (кантон үҙәге) Әл шәех Яҡуп хәҙрәт мәҙрәсәһендә белем ала. 1848 йылда Яҡуп хәҙрәт Ахун ауылының икенсе мәхәлләһенә имам-мөҙәрис итеп тәғәйенләнгәс, уҡытыусыһына эйәреп Зәйнулла ла Ахунға килә һәм уның мәхәлләһендә белем алыуын дауам иттерә. Бында ул 17 йәше тулғансы уҡый. Белемен арттырыу маҡсатында 1851 йылда Троицкиға китә, унда данлыҡлы Әхмәд бән Хәлидәл Мәнгәри мәҙрәсәһендә һабаҡ ала. Тырышлығы һәм һәләтлелеге уға 7 йыл эсендә мәҙрәсәнең тулы курсын үтергә мөмкинлек бирә. 1858 йылда, яңы ғына мәҙрәсә тамамлаған егетте, мәҙрәсәнең үҙендә үк уҡытыусы итеп ҡалдыралар. 1859 йылда имамлыҡ шәһаҙәтнамәһе ала. Әммә төрлө сәбәптәр арҡаһында (көнләшеүселәре лә күп була уның) ул ҡаланан китергә мәжбүр була. Типтәр-Учалы волосы Аҡҡужа ауылына имам-хатиб һәм мәҙрәсәнең мөҙәрисе итеп тәғәйенләнеп, 1859 йылдан шунда эшләй башлай. Аҡҡужалағы Әхмәт байҙың бер ҡыҙына әйләнә.

Зәйнулла ишан үҙ ғүмерендә ике тапҡыр хажға барған кеше. Тәүге хаж ҡылыуының тарихы былай. Ҡаҙаҡтарҙың Ж,әббәс ырыуынан булған Йыршыбай исемле бер бай донъя ҡуя. Зәйнулла хәҙрәттән уның өсөн хаж ҡылыуын үтенеп, мең һум аҡса тапшыралар. 1869 йылдың 19 авгусында хәҙрәт Истамбулға ҡарай юл ала. Истамбулда Зәйнулла хәҙрәт бер юлы белемен арттыра: әл-шәех Әхмәт Зиялитдин бән Мостафа Көмешханави хәҙрәтенән дәрестәр ала, һынау тота. Ошонан һуң ул Хажға китә. Хажды башҡарып, пароход менән кире Истамбулға ҡайта. Мөритлеккә дәрестәр ала, ғилемен камиллаштыра. Ишанлыҡ дәрәжәһенә лайыҡ булып, махсус диплом ала.

1870 йылдың июль башында ул Аҡҡужаға ҡайтып төшә. Сентябрь айҙарында ишан үҙенең миссияһын башҡарырға керешә. Тиҙ арала ярандар һәм эйәреүселәр пәйҙә була. Абруй арта. Хатта башҡа шәехтәрҙең мөриттәре (арттан эйәреүселәре) лә Зәйнулла хәҙрәткә күсә башлай (Ишандың ғилемлелеге һәм кешелеклеге бында хәл иткес роль уйнай). Әлбиттә, был тырышлыҡтар халыҡ араһында хәҙрәттең популярлығын арттыра һәм бер юлы уны күрә алмаусылар һанын күбәйтә, һөҙөмтәлә, Зәйнулла ишан өҫтөнән Өфө Дониә назаратына һәм Ырымбур губернаторына доностар яуа башлай. Йәнәһе, ул батшаға ҡаршы ҡотҡо тарата.

1872 йылда Өфөлә мөфтөй ҡаршыһында уға яуап тоторға тура килә. Уға өйөлгән ғәйептәрҙең береһе лә дөрөҫләнмәй — Зәйнулла ишан аҡлана. Бер ни тиклем Өфөлә булғас, ул ҡайтырға сыға. Ләкин ишанға ауылына ҡайтып етергә насип булмай — дошмандары Ырымбур губернаторы аша эш итеп, Златоуста уны ҡулға алдырталар. 6 ай үткәс кенә уға ҡарата хөкөм ҡарары сығарыла. Зәйнулла Рәсүлев этап менән Вологда ҡалаһына һөргөнгә ебәрелә. Юлда Өфө, Ҡазан, Нижний Новгород, Мәскәү ҡалаларын үтәләр. Вологда губернаторы уны тайғалағы Никольский ҡалаһына оҙата. Ошо ҡалала ул полиция

күҙәтеүе аҫтында 3 йыл йәшәй. Хәҙрәттең өләсәһе, балалары Аҡкужала ҡала, ҡатындары иһә уның янына килә.

1876 йылда, ишандың үтенесе буйынса уға Костромаға күсергә рөхсәт бирелә. Ул шундағы татар биҫтәһендә 5 йыл йәшәй. 183¾ йылда, 8 йыл ғүмерен һөргөндә заяға үткәргәндән һуң, Аҡкужаға ҡайта.

Зәйнулла хәҙрәт, тотҡонлоҡтан ҡотолоу ҡыуанысынан, 1882 йылда икенсе тапҡыр хаж ҡыла.

Һөргөндә сағында ла Зәйнулла хәҙрәт белемен арттырыу өҫтөндә бирелеп эшләй: энциклопедик белемле, феноменаль хәтерле шәхескә әйләнә.

Үҙ милләтенең патриоты булараҡ, Зәйнулла хәҙрәт башҡорт йәштәренә белем биреү әлкәһендә лә бик күп эш башҡара.

Зәйнулла ишандың халыҡ араһында абруйы ни тиклем көслө булғанына ике генә миҫал. Зәйнулла хәҙрәтте һөргөнгә оҙатҡанда полиция начальнигы Вәликәй Дәүләтшин уға ылау бирҙермәй, йәнәһе, йәйәү, конвой менән оҙаттырып, хур итә. Ләкин, юлда халыҡ егеүле аттар менән ҡаршы сығып, уны ауылдан ауылға оҙата.

Ишан ҡулға алынғандан һуң, халыҡ төркөм-төркөм булып төрмәгә ағыла. Был быҫаса күрелмәгән хәл була. Ошо факт губернаторҙы айырыуса шикләндерә, сөнки уға яҙылған доноста ишандың дошмандары: «Ул бик хәүефле кеше, төрөк шпионы, төрөктәргә аҡса, ғәскәр йыя», — тип яҙған булғандар.

Зәйнулла ишан тураһында һөйләгәндә, уның ифрат көслө экстрасенс булғанлығын, гипнозды, тибет медицинаһын бик яҡшы белгәнлеген дә билдәләмәй булмай. Үл үҙенең тәьҫир итеү көсө менән бихисап



*Троицкиҙа Зәйнулла Рәсүлев нигеҙ һалған «Рәсүлиә» мәҙрәсәһе.*

ир-егетте эскелек бәләһенән ҡотҡарған, бик күп ауырыуҙарҙы дауалаған, хатта аҡылын юйғандарҙың аҡылын кире ҡайтара алған (бөгөнгө медицина был өлкәлә көсһеҙ).

Зәйнулла ишан тураһында халыҡ телендә һөйләнелеп, бөгөнгө көнгә тиклем килеп еткән бер легендала уның хаҡында былай тиелә: Батша ғали йәнәптәре Зәйнулла ишанды ҡабул итә икән. Быларға эсергә сәй килтерәләр. Хәҙрәт ултырған урынынан тороп, яһалған сәйҙе сынаяғы менән ҡулына ала ла, уны тәҙрә аша һибә. Икенсе сынаяҡ сәйҙе лә эсмәй, уныһын да тәҙрәнән һибә. Батша аптырай, асыулана, ни әйтергә белмәй. Шул саҡ Зәйнулла ишан: «Әстрахан ҡалаһы яна ине, шуны һүндерҙем, ғали йәнәптәре», — ти. Зәйнулла Рәсүлев ҡайтып китә, ә батша Әстраханға телеграмма һуҡтыра: «Ысынлап та шул көндә, шул сәғәттә ҡалала янғын булдымы?» Яуап килә: «Эйе, бик көслө янғын сыҡҡайны, әммә күктә ус аяһындай ғына болот сығып, көслө ямғыр булды, янғын шулай һүнде», — тиелә. Был, әлбиттә, легенда, ләкин риүәйәттәрҙең дә буш урында тыумағанын оноторға ярамай.

Ҡабул итеү мәлендә уны һәр саҡ йөҙәрләгән кеше көтөр булған. Зәйнулла ишан һәр көн йөҙәрләгән кешенең аһ-зарын, ҡайғы-хәсрәтен тыңлап, һәр ҡайһыһының хәлен еңеләйтергә тырышҡан, һис юғында файҙалы кәңәштәр биреп ҡыуандырған.

Үлер алдынан, түшәктә ятҡан сағында ла, алыҫтан килгән ярҙамға мохтаж кешеләргә ҡатындары, балалары аша кәңәш биргән. Торорға хәле булмаған, әммә ишек алдында, соланда йә иһә башҡа ерҙә көтөп торған кешеләрҙең үҙҙәрен күрмәһә лә: «Фәләән яҡтан фәләән ауырыу менән шундай-шундай кеше килгән икән, ул әле фәләән ерҙә тора, Зәйнулла хәҙрәт шулай кәңәш итте», — тип әйтегеҙ тигән хәбәр менән аһ-зарлы кешеләр янына эргәһендәге яҡындарын сығара торған булған.

Зәйнулла хәҙрәттең бөйөклөгө, 1884 йылда ул Троицкиға күсеп килгәндән һуң күренә. Хәбибулла Ғәббәсов яңы мәсет һалдырғандан һуң, халыҡ һорауы буйынса, мәхәлләгә имам итеп Зәйнулла ишан Рәсүлев саҡырылған. Зәйнулла ишан мәсет ҡаршыһында «Рәсүлиә» мәҙрәсәһен аса (быныҢ өсөн үҙенең 10 мең аҡсаһын бирә, ҡала байҙары, башҡорттоң хәлле кешеләре лә аҡса йыйып тапшыралар) һәм уның менән ғүмеренең аҙағына тиклем — 1917 йылға тиклем етәкселек итә. Троицк ҡалаһы Зәйнулла хәҙрәт һәм уның мәшһүр мәҙрәсәһе арҡаһында дан һәм шөһрәт ҡаҙана.

1897 йылда беренселәрҙән булып йәдитсә (яңыса төрки уҡыуы) уҡыуҙы ойоштора. Үҙенең 33 йыл ғүмерен ул Троицк ҡалаһында башҡорт, татар, ҡаҙаҡ балаларын уҡытыуға арнай. Дин уҡытыу ғына түгел, математика, география, тарих һ.б. фәндәр буйынса шәкерттәр тәрән мәғлүмәттәр ала.

Зәйнулла ишандың башҡорт-татар араһында абруйы ла иҫ киткес көслө була. Ҡазандағы атаҡлы «Мөхәммәҙиә» мәҙрәсәһенә тәүге нигеҙ ташын да ул һала, быныҢ өсөн ишанды махсус рәүештә Ҡазанға саҡырып килтерәләр. Был мәҙрәсә лә, «Рәсүлиә» кеүек үк, тәүге көнөнән йәдитсә уҡытып алып китә.

Зәйнулла ишан Аҡмулла менән бик дуҫ була. Аҡмулла үҙенең һуңғы сәфәренә сығыр алдынан Зәйнулла хәҙрәт уға ат бүләк итә. Ниндәйҙер яуыз әҙәмдәр Аҡмулланы үлтергәс, Зәйнулла ишан уны ерләүҙе ойоштора, үҙе яҙып, ҡәбер ташы ҡуйҙыра.

Зәйнулла Рәсүлев ғаиләһе менән Троицкиҙа Амур биҫтәһе тигән урында, өҫтө ағас, аҫты таш өйҙә йәшәгән. Бөгөнгө көндә өй ташланды ҡ хәлдә, мәсет, мәҙрәсә, шәкерттәр ятағы төҙөк, әммә унда ниндәйҙер әҙәмдәр йәшәй, башҡорт, татар, ҡаҙаҡтың тарихи ҡомартҡыһы булған «Рәсүлиә» һис бер ҡарау, хәстәрлек күрмәйенсә, күҙ алдында юҡҡа сығып бара.

Ғайса Фәтхулла улы Рәсүлев (1865—1921 й.) — ҡыуаҡандарҙан сыҡҡан өсөнсө күренекле шәхес. Ғайса менән Зәйнулланың аталары бер туғандар булған. Ғайса Рәсүлев — халыҡ араһында киң таралған һәм яратып башҡарылған «Илсе Ғайса» йырының авторы. 1865 йылда Троицк әйәҙе Туңғатар волосының Шәрип ауылында Фәтхулла Рәсүлев ғаиләһендә тыуа. Башта ул үҙ ауылында белем ала, «Рәсүлиә» (бабаһының) мәҙрәсәһендә уҡый. Муллалыҡ итә. Урыҫ-япон һуғышы башланғас, үҙ теләге менән фронтҡа китә. 1904 йылда Манчжурияла һуғышта сағында, Ахун ауылында мулла булып торған бер туған ағаһы Муса хажи ҡапыл вафат була. Бик ныҡ хәсрәтләнеп, ҡайғырып, Ғайса ҙур күләмле әҫәр ижад итә.

Империалистик урыҫ-япон һуғышында мосолмандар ғәскәренең муллаһы вазифаһын башҡара Ғайса Рәсүлев. Ҙур шәхси батырлыҡтар күрһәтә ул фронтта, һуғыш тамамланғас, тыуған яғына генерал чинында, бриллиантлы орден, исеме яҙылған ҡылыс тағып ҡайта. Троицк өйәҙендә иң юғары постарға дәғүә итә алһа ла, ул иленән, халҡынан айырылмай — Әүеш, Шәрип һәм Ялсығол ауылдарын берләштергән мәхәлләләә ахун булып тора.

Ә хәҙер уларҙың балаларына, уларҙың яҙмышына күсәйек:

Муса Хажиҙың балалары:

1) Ғабдулла Рәсүлев (1920-се йылдарҙа Тамъян-Ҡатай кантоны халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире була).

2) Мөждәбә Рәсүлев (1920 йылда ошо кантонда күтәрелгән халыҡ восстаниеһының етәкселәренең береһе, 1946 йылда ГУЛАГ-та үлеп ҡала).

Ғайса Рәсүлевтың балалары:

1) Таяр Рәсүлев — Шәриптә мулла була. 1918 йылда ҡыҙылдар тарафынан атыла.

2) Талха Рәсүлев — Зәки Вәлидиҙең иң тоғро, яҡын ярҙамсыларының береһе. 1920 йылда 3. Вәлиди кәңәшен тотоп, Рәсәй империализмына ҡаршы көрәште дауам иттерер өсөн Ҡаҙағстанға китә.

## КАНТОНДАР ОСОРО. 1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНДА АТА-БАБАЛАРЫБЫҘҘЫҢ ҠАТНАШЫУЫ

Идара итеүҙең кантон системаһы Башҡортостанда 1798 йылғы батша указы менән индерелә. Башҡорт иле 11 башҡорт һәм 5 мишәр кантонына бүленә. Бынан тыш, казактар биләгән ерҙәр ҙә кантондарға

бүленә: барыһы 5 ырымбур һәм 2 урал казактары кантондары ойошторола.

Шулай итеп, башҡорттар һәм мишәрҙәр, гражданлыҡ хәленән хәрби-казак сословиеһына күсерелеп, хөкүмәт файҙаһына һалым түләү улар өсөн үҙ иҫәптәренә хәрби хеҙмәт менән алмаштырыла.

Кантон башлыҡтары (халыҡ телендә «кантон»дар) тәүҙә туранан-тура Ырымбур генерал-губернаторына, ә 1834 йылдан һуң Башҡорт-мишәр ғәскәренең командующийына буйһондорола. Кантондар бик ҙур территорияны биләгән (кантон сиктәре өйәҙ сиктәре менән тап килгән). Троицк өйәҙенә ҡараған башҡорт ауылдары үҙҙәре бер кантон тәшкил иткән һәм документтарҙа (1832 йылға тиклем) 4-се кантон тип исемләнгән. 1832 йылда 4-се кантон икегә бүленеү сәбәпле, кантондың беҙҙең төбәк ауылдары ингән өлөшө 4-се Тау аръяғы кантоны тип йөрөтөлә башлаған. 1855 йылда кантондың иҫәп һаны үҙгәртелеп, ул кантон системаһы бөтөрөлгәнгә тиклем 7-се кантон тип исемләп йөрөтөлә.

Кантон үҙәге төрлө ваҡытта төрлө ауылдарҙа урынлашҡан: Малай Муйнаҡта, Ҡорамала, Кәримдә, Туңғатарҙа. Бының сәбәбе бик ябай: кантон башлығы ҡайһы ауылдан булһа, шул ауыл кантон үҙәге хеҙмәтен үтәгән.

Районыбыҙҙың Верхнеуральск өйәҙенә ҡараған башҡорт ауылдары (ҡара табындар, тиләүҙәр, көҙөйҙәр, һарттар, күбәләктәр) 6-сы башҡорт кантоны составында булғандар. Был кантондың иҫәп һаны ла үҙгәртелә: 1847—1854 йылдарҙа ул 7-се һанлы кантон тип йөрөтөлә, 1855—1865 йылдарҙа ҡабаттан 6-сы кантон тип үҙгәртелә. Был кантондың үҙәге төрлө йылдарҙа Хәсән, Рәхмәт, Сермән (Белорет, Әбйәлил районы ерҙәре) ауылдарында урынлашҡан булған.

Административ берәмек булараҡ, кантон үҙ эсенә ҙур ерҙәрҙе берләштергән, шуға ла идара итеүҙе еңелләштереү маҡсатында кантондар командаларға (икенсе исеме — «йорт») бүленгән, һәр команда (йорт) бер нисә ауылды үҙ эсенә алған. Мәҫәлән, 4-се кантон 6 команданан (йорттан) торған. Уй йылғаһы башы ауылдары 1-се йортто тәшкил итһә, Яйыҡ башы ауылдары — 2-се, Миәс башы ауылдары — 3-сө, Ағиҙел башы ауылдары — 4-се, Күмәс тауынан көнсығыштараҡ ятҡан ауылдар — 5-се, Уй буйы ауылдары — 6-сы йортҡа ҡараған булғандар, һәр йорттоң башында йорт старшинаһы торған. Сама менән һәр йорт ир енесенән булған 700—1000 кешене үҙ эсенә алған.

6-сы кантон ҙур булған, уның составында районыбыҙ ауылдары 5 команда (йорт) тәшкил иткәндәр (22, 23, 24, 25 һәм 26-сы һанлы йорттар). 26-сы йортҡа, мәҫәлән, һәйтәк, Рәсүл, Баҙарғол, Әбделҡасим ауылдары ингән, 25-се йортҡа ҡараған ауылдар: Мәҫкәү, Наурыҙ, Яңы Байрамғол.

Мишәрҙәр ауылы Ахунға килгәндә, ауыл 1798—1847 йылдарҙа 1-се мишәр кантоны составында булған (был кантон Силәбе, Троицк өйәҙендәге мишәр ауылдарын берләштергән). 1847 йылдан һуң Ахун — 4-се Тау аръяғы кантонына ҡарай.

Типтәр-Учалы волосына ингән ауылдар 1855 йылға тиклем туранан-тура Верхнеуральск әйәҙе начальнигына буйһондоролған. 1855 йылдан алып, типтәрҙәр ҙә хәрби-казак сословиеһына күсерелеү

сәбәпле, волость 2 командаға (йортҡа) бүленә һәм 6-сы башҡорт кантоны составына индерелә.

Шулай итеп, батша самодержавиеһы, башҡорттарҙы хәрби-казак сословиеһына күсереп, уларҙы ниндәйҙер дәрәжәлә ҡулда тотоуға өлгәшә: һәр башҡорт иҫәпкә алына, уларҙың һәр бер етәксеһе контролдә тотола, хәрби хеҙмәткә ылыҡтырылып, Рәсәй өҙлөкһөҙ алып барған һуғыштарҙа ҡатнашыуға йәлеп ителә, яу яландарында күпләп ҡырылыу сәбәпле халҡыбыҙҙың тәбиғи үрсеүен кәметеүгә өлгәшелә. Ҡыҫҡаһы, хәрби-казак сословиеһына күсереү, башҡорт халҡының уйтеләгенә тура килгән кеүек күренһә лә, бының асылда бик мәкерле сәйәсәт (политика) булғанлығын һыҙыҡ өҫтөнә алып китергә кәрәк.

Хәрби хеҙмәт тураһында бер нисә һүҙ. Ул халҡыбыҙ тарихындағы иң ауыр, иң аяныслы биттәрҙең береһе. Башҡорттар менән мишәрҙәр сик буйын һаҡлауға, йәғни Ырымбур һәм Себер сик буйы һыҙығында хеҙмәткә йәлеп ителгән. Ҡаҙаҡ баҫҡынсылары менән бәрелештәр йыш булып тороу сәбәпле, ике яҡтан да ҡорбандар әҙ булмаған. Бынан тыш, сик буйын һаҡларға килгән башҡорттарҙы ҡәлғә коменданттары, башҡа урыҫ түрәләре арзан эшсе көс, хеҙмәтсе сифатында файҙаланған, шул сәбәптән күптәр төрлө ауырыуҙарға дусар булған, сирҙән аяҡтан йығылып, мантып китә алмай, донъя ҡуйған.

Хеҙмәт 15 майҙан 16 ноябргә тиклем дауам иткән, юлда барыу, ҡайтыу ваҡыты был срокка инмәгән. 4—5 өйҙән бер кеше хеҙмәткә алынған, ләкин хеҙмәт итеү 50 йәшкә тиклем дауам иткәнлектән, һәр ир-егет үҙ ғүмерендә 8—9 тапҡыр сик буйын һаҡлауға саҡырылған, бынан тыш, бер нисә оҙайлы походта (һуғыштарҙа) ҡатнашҡан. Шуныһын да онотмаҫҡа кәрәк: батша властары башҡорттарға хәрби хеҙмәт өсөн бер тин дә түләмәгән. Хәрби хеҙмәткә алынған һәр ир-егет үҙ иҫәбенә (бик тә булмаһа, ауылдаштары ярҙамы менән) кейенергә, ҡоралланырға, ярты йыллыҡ аҙыҡ запасы булдырырға, үҙе менән 4 ат, 1 салғы, 1 балта алып йыйылыу урынына килергә тейеш булған.

Ырымбур сик буйы һыҙығын һаҡлаған ғәскәрҙең (1798—1847 йылдар) 65 процентын башҡорт менән мишәрҙәр тәшкил иткән (10—12 мең һуғышсы), ҡалған 35 проценты — рус ғәскәрҙәре һәм казактар булған. Башҡорт менән мишәр бергә хеҙмәт итһә лә, хеҙмәттәге башҡорттар мишәрҙәрҙән 8 тапҡыр күберәк булған. Йәғни, дөйөм башҡорт-мишәр ғәскәрен шартлы рәүештә 100 берәмек тип алһаҡ, шуның 88-е башҡорттар өлөшө.

Ырымбур сик буйы һыҙығынан тыш, башта йыл һайын 1000 башҡортто Себер сик буйы һыҙығын һаҡларға ебәрә торған булғандар. Хеҙмәт срогы 1 йыл булған. Был хеҙмәткә башлыса беҙҙең төбәк халҡы йәлеп ителгәнлектән, уларҙың ҡәнәғәтһеҙлеге йылдың-йылы көсәйгән. Шуға ла, 1800 йылдан һуң Себер һыҙығына ата-бабаларыбыҙ башҡаса ебәрелмәй, уларға Себер трактында этап хеҙмәтен үтәү йөкмәтелә (Себер тракты буйлап тотҡондарҙы һаҡлап, оҙатып барыу).

Хәрби хеҙмәт быны менән генә сикләнмәй, әлбиттә. 1825—1840 йылдарҙа батша властары ҡаҙаҡ далаһына 15 поход ойоштора, был походта ата-бабаларыбыҙ ҙа күпләп ҡатнаша, шул яуҙарҙа байтағы башын һала. Был һуғыштарҙа ҡан күп ҡойола, сөнки Рәсәй агрессияһы ҡаҙаҡ далаларында ҡаты ҡаршылыҡҡа осрай. Башҡорт һәм мишәр от-

рядтары каратель сифатында ла киң файҙаланыла: Ҡазан, Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларында, оло йәрминкәләр ваҡытында полиция ғәскәре булараҡ та ҡулланылалар.

1832—1834 йылдарҙа Верхнеуральск—Стәрлетамаҡ сауҙа трактын төҙөүҙә меңәрләгән ата-бабаларыбыҙ эшләгән (барлығы 207 мең башҡорт 3 йыл буйы ҡара урман аша ошо юлды һала).

1835—1838 йылдарҙа башҡорттар көсө менән яңы сик буйы һыҙығы — Орск-Троицк төҙөлә. Йөҙәр мең башҡорт ал-ял белмәй, үҙ транспорты менән (ат), яңы сик буйы һыҙығын төҙөп бирә. Асылда был башҡорт менән ҡаҙаҡтың бер-береһе менән тығыҙ аралашып йәшәүенә кәртә ҡуйыу ине. Ни өсөн тигәндә сик буйы һыҙығын төҙөгәндә, башҡорттар менән йәнәш көн иткән ҡаҙаҡ ырыуҙары, тотош ауылдар ҡаҙаҡ иленең төпкөлөнә ҡыуыла, ике туғандаш халыҡ араһында барлыҡҡа килгән, 150 км киңлектәге коридорға төрлө ерҙән урыҫтар күсереп килтерелә. 1845—1847 йылдарҙа тиҫтәләрсә мең башҡорт (араларында беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа булғандыр) ҡаҙаҡ далаларына ҡәлғәләр төҙөү эшенә ебәрелә. Бынан тыш, башҡорттар урыҫ ҡалаларын (Силәбе, Верхнеуральск, Ырымбур һ.б.) утын менән тәьмин итергә тейеш булғандар, төҙөлөш материалдарын әҙерләү (беренсе сиратта аҡас ҡырҡыу, һаҙ ағыҙыу), улар менән ҡала-ҡәлғәләрҙе тәьмин итеү ҙә башҡорттар өҫтөндә булған. Барлыҡ был эштәр фарман биреү тәртибендә эшләтелгән. Шуға ла башҡорт халҡының хәрби-казак сословиеһындағы дәүерен идеаллаштырып күрһәтергә ярамай — был тарихты белмәүҙән килә. Башҡорттарҙың хәле (бигерәк тә 1820—1865 йылдарҙа) шул замандағы Америка негрҙары тормошонан һис тә яҡшы булмаған. Урыҫтың демократ ғалимдары, сәйәхәтселәре әсенеп: «...башкирский народ ... обращен в негров-работников», — тип юҡҡа ғына яҙмағандыр.

Билдәле булыуынса, ярым күсмә тормош алып барыу (XIV—XVIII быуаттарҙа халҡыбыҙ ярым күсмә тормош менән йәшәгән, йәғни — йәйен — йәйләүҙә, ҡышын — ауылда) бик ҙур ер биләмәләрен талап иткән. Халҡыбыҙҙы хәрби-казак сословиеһына күсереп, батша властары төп байлығыбыҙ — еребеҙҙе тартып алыуға тотонған. Бының өсөн
2 сара ҡулланылған: 1832 йылдан башлап Генераль межа үткәреү, башҡорттоң һәр ир йәненә 40 дисәтинә генә ер ҡалдырып, ҡалғанын ҡаҙнаға тартып алыу (ҡаршылыҡ күрһәтеү мөмкин түгел, сөнки фарман мотлаҡ үтәлергә тейеш).

Икенсеһе: 1835 йылдан башлап, көслөк юлы менән (тыңламағандарҙы язалап) башҡорттарҙы ултыраҡ тормош менән игенселеккә күсереү юлы. Ярлы башҡортто, өйҙәрен һүттереп, урам булып ултырырға мәжбүр иткәндәр, ваҡ ауылдарҙы юҡ иттереп, эреләткәндәр. Ниндәй тәбиғи зонала йәшәүҙәре менән иҫәпләшеп тормаҫтан, Байһаҡал менән Ихсанда йәшәгән башҡорттарҙы орлоҡ һатып алырға һәм ауылдары тирәһендә иген сәсергә мәжбүр иткәндәр. Иң аяныслыһы шул: игендең уңыу-уңмауына ҡарамаҫтан, йыл һайын уларҙан иген талап иткәндәр. 1842—1851 йылдарҙа генерал-губернатор булып торған Обручев, мәҫәлән, иген сәсмәгән башҡорттарға ҡарата аяу белмәүе, бер ниндәй яза алдында ла туҡтап ҡалмауы менән айырылып торған, һөҙөмтәлә, меңәр йыл буйына малсылыҡ менән көн иткән

халҡыбыҙ бөлгөнләккә төшкән. Был урыҫ колонизаторҙарының халҡыбыҙға ҡарата ҡылынған ҡот осҡос енәйәттәренең береһе: башҡорттоң традицион хужалығын юҡ итеү — милләттең тамырына балта сабыу менән бәрәбәр.

1855 йылда, батша властары реформа үткәреп, Башҡорт-мишәр ғәскәренә типтәрҙәрҙе лә ҡуша. Ғәскәргә яңы исем бирелә, ул хәҙер Башҡорт ғәскәре тип атап йөрөтөлә башлай. Ғәскәр өр-яңынан кантондарға бүленеп, уларҙың һаны 28-гә, ә йорттар (командалар) һаны 394-кә етә. Ошо реформа менән башҡорттоң традицион ижтимағи тормошона ла емергес удар яһала: кантондарҙың яңы сиктәре боронғо ырыу-ҡәбилә сиктәрен бөтөнләй иҫәпкә алмаған.

Шулай итеп, башҡортто хәрби-казак сословиеһына күсереп һәм кантон идаралығын урынлаштырып, батша властары Башҡортостанды тулыһынса Рәсәйҙең колонияһына әүерелдереүгә өлгәшә. Заманында бөтә Рәсәйҙе дер һелкеткән (XVII—XVIII бб.) башҡорт иле ниндәйҙер дәрәжәлә башҡорттоң үҙ ҡулы менән ябай бер провинцияға, ә башҡорт үҙе империяның иң хоҡуҡһыҙ ҡолдарының береһенә әйләнә. «Башҡорттоң үҙ ҡулы менән» тигән һүҙ — кантон начальниктары аша тигәнде аңлата. Шуларҙың бер нисәһенә туҡталып китәйек.

1. Мөхәммәтйән Йыражбай улы Буҙыҡаев (1793—1856). 1808 йылдан хәрби хеҙмәттә була. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, ғәскәри (войсковой) старшина (майорға тиң) тигән армия чины алған. 4-се башҡорт кантоны начальнигы булып торған. Хеҙмәттәре өсөн генерал-майор дәрәжәһен алған. Уның 2 улы Омск хәрби училищеһында белем алған, үҙе бөтә Көньяҡ Уралда билдәле булған тире иләү заводы тотҡан. Шул да мәғлүм булһын: 1850 йылда бөтәһе 580 башҡорт дворяны иҫәпләнеп, Мөхәммәтйән Буҙыҡаев шуларҙың береһе булған. Мөхәммәтйән Буҙыҡаев тураһында 2 йыр сығарылған. 1856 йылда 63 йәшлек был түрә Мәскәүҙә Александр II батшаның коронацияһында ҡатнашып генерал-майор дәрәжәһен алған. Йырҙа ошо ваҡиғаның да сағылышын күрәбеҙ:

Сығып ҡына киттем, һай, юл менән,
Юлғынайым керҙе Мәскәүгә.
Мәскәүҙәргә барып кереү менән
Депутат та булдым ғәскәргә.

Мөхәммәтйән Буҙыҡаев кантонға бәйле сығарылған йырҙарҙың «Буҙыҡай кантон» исеме менән таралғаны уның эшмәкәрлеген кире баһалай:

Буҙыҡаев кантон бер ҡысҡырһа,
Старшина ҡурҡып ҡалтырай.

Йырҙың икенсе бер вариантында Буҙыҡай кантондың хатта үҙ ҡатынын да Себергә ебәрткәнлеге хаҡында әйтелә:

Буҙыҡай ҙа кантон мәкерле икән,
Йәмиләне Себер ебәрткән.

Йырҙың өсөнсө бер вариантында, Буҙыҡай кантон Мәскәүгә барған ерендә үлеп ҡалған, тип йырлана. Имеш, Абдулла Дәүләтшин,

Буҙыҡаевтың кантон булыуынан көнләшеп, уның кейеменең яғаһына ағыу һипкән булған. Йырҙың был варианты, киреһенсә, Буҙыҡаевтың тик яҡшы яҡтарын ғына ҡылыҡһырлай: уның «исемкәйе мәшһүр империяға», «ғаҡылдары камил» һ.б.

2. Ҡорама Муйнаҡов (1760—1828) — 1819 йылға тиклем 4-се кантон начальнигы. Төп сығышы — Муйнаҡ ауылынан, Ҡара табын волосы старшинаһы, пугачевсы Муйнаҡ Рәсүлевтың улы, 14-се класс чиновнигы, дворян исемен йөрөтөүсе.

3. Төхвәт Үтәев («Төхвәт кантон») — яуыз һәм дыуамал кантон булған, 4-се кантон начальнигы (1819—1832 йылдар). Заманында яуызлығы һәм алйотлоғо менән дан алған кеше. Түбәндәге йыр уның тураһында:

«Сыбыҡ менән ҡағыҙ ҡулдарында
Төхвәт кеүек яуыз ир ҡайҙа?»

Төхвәт кантон 1832 йылда яуызлыҡтары өсөн ҡулға алына, чинынан (йорт старшинаһы, кантон начальнигы), шәхси дворянлығынан мәхрүм ителеп, үҙе мәңгегә Себергә һөргөнгә ебәрелә.

1850 йылдар аҙағында 4-се кантонда начальник булып Абдулнафиҡ Этиммәс улы Ҡотоев торған, дворян чинында булған кеше.

6-сы кантонға килһәк, унда кантон булып 1812 йылға тиклем Ҡаһым түрә торған. (Ҡаһым түрәнең Салауатҡа тиң шәхес булыуын, әммә һуғыштан ҡайтышлай Владимир ҡалаһында ағыулап үлтерелеүен һәр кем беләлер.)

Шул уҡ кантонда начальник булып торған — Шәйәхмәт Сибаев тигән кеше халыҡ араһында яҡшы кантон булараҡ ҡылыҡһырлана, ул «Сибай кантон» исеме менән киң билдәле шәхес. Рәхмәт ауылында 1855—1863 йылдарҙа «кантон» булып торған, ауырып китеп, 1863 йылда вафат булған. Ҡәбере Учалы ерендә, Килмәк (Алтаяҡ) ауылы зыяратында.

XVIII быуат уртаһынан алып беҙҙең төбәк башҡорттары (XVIII б. аҙағынан — типтәр һәм мишәрҙәр ҙә) Рәсәй алып барған баҫып алыу һуғыштарында ҡатнашып, урыҫ батшаларының шовинистик һәм колониаль политикаһын тормошҡа ашырыуҙа ярҙамлашҡан, үҙҙәрен тоғро һәм ҡурҡыу белмәҫ һуғышсылар итеп таныҡан. 1756—1763 йылдарҙағы Ете йыллыҡ һуғышта ҡатнашҡан 2500 башҡорттоң, 1772 йылда Польшаның азатлығын быуып, дәүләтселеген бөтөрөргә ебәрелгән 3000 башҡорт һуғышсыһының һәм 1788—1790 йылда Швецияны яулап алырға ебәрелгән 3000 башҡорт яугирының ниндәйҙер бер өлөшө ата-бабаларыбыҙ булғанлығын беҙ иҫтә тоторға тейешбеҙ. Халҡыбыҙ өсөн бер файҙаһы ла булмаған баҫып алыу һуғыштарында ҡатнашыу, бер яҡтан башҡортто һис биҙәмәһә, икенсенән, һуғыш ҡорбанһыҙ бул-, май, тигәндәй, ул йәп-йәш егеттәребеҙҙең күпләп ҡорбан булыуына ғына килтергән. Урыҫ батшалары ҡулында жандарм, суҡмар функцияларын үтәү, башҡорттоң ирек һөйөүсе, азатлыҡ даулаусы тигән данына тап төшөрмәй ҡалмағандыр, әлбиттә.

XIX быуатта башҡорт халҡы ихтилалдарға күтәрелмәһә лә, бер ҙә мантып, хәлләнеп китә алмай, ә киреһенсә, йылдан-йыл нығыраҡ хәйерселеккә төшә бара. Бының сәбәбе бер: илебеҙҙең, Башҡортоста-

ныбыҙҙың колония хәлендә, ә башҡорт халҡының ҡол хәлендә булыуында. Төп ғәйеп әйәһе лә билдәле — Рәсәй һәм уның башҡорт ерендәге ҡот осҡос колониаль сәйәсәте. XVIII быуатта Рәсәй американдар индеецтарға ҡарата үткәргән сәйәсәтте (индеецтарҙы бөтөнләй ҡырып бөтөрөү) башҡорттарға ҡарата ҡулланһа, XIX быуатта ла АҠШ өлгөһөнә эйәреп башҡорттан Америка негрҙары тибындағы «һары ҡолдар» армияһын булдырыу сәйәсәтен алға һөрҙө. Былар барыһы ла әсе, әммә һис бер бәхәскә урын ҡалдырмаҫлыҡ тарихи хәҡиҡәт.

Үҙен ҡот осҡос хәйерселеккә, хоҡуҡһыҙлыҡҡа, ҡоллоҡҡа дусар иткән империяны яклап, уның армияһы составында һуғыштарҙа ҡатнашырға һәр саҡ әҙер тороу, империяның бөйөклөгө хаҡына үҙ ғүмерен ҡорбан итеү — башҡорт халҡының характерындағы икегә бүленгәнлектең, ҡапма-ҡаршылыҡтың бер сағылышы булып тора. Икенсе бер халыҡ, үҙәктең ауыр хәленән файҙаланып, колониаль ҡоллоҡтан ҡотолоу сараһын күрер ине, ә беҙҙең ата-бабалар, киреһенсә, Мәскәүгә иң ҡыйын саҡтарҙа ярҙамға хәрби көс ебәргән.

Европаны Наполеон шәүләһе ҡаплағас, алыҫ Австро-Венгрия империяһында һуғыш хәрәкәттәре алып барыусы урыҫ армияһына ярҙамға 7000 башҡорт кавалерисы оҙатыла (сағыштырыу өсөн: Ырымбур губернияһынан был яуға барлығы 1000 урыҫ казагы оҙатыла). Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа әҙ булмай был ғәскәрҙә. Ике йыл буйы һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнашып, 1808 йылда, иҫән ҡалғандары тыуған Башҡортостанына әйләнеп ҡайта.

1798 йылдан Ырымбур сик буйы һыҙығын һаҡлауҙа 1-се һәм 2-се Типтәр полктары ла ҡатнаша. Ошо 2 типтәр полкы составында беҙҙең төбәк типтәрҙәре лә хеҙмәт иткән. 1812 йылда, Наполеон Рәсәйгә баҫып ингән саҡта (12 июнь 1812 йыл), 1-се Типтәр полкы көнбайыш сик буйында һаҡта торған була. Йәғни, 1-се Типтәр полкы һуғышсылары, һуғыштың тәүге көнөнән үк фронтта француздарға ҡаршы арьегард һуғышы алып баралар. 16 июнь көнө Вильно ҡалаһы эргәһендәге алыштарҙа типтәрҙәр ҡаһарманлыҡ өлгөһө күрһәтәләр, дошман уты аҫтында Вилия йылғаһы аша һалынған күперҙе яндыралар, ҡорал арсеналын шартлаталар һәм шуның менән уның дошман ҡулына эләгеүенә юл ҡуймайҙар. Бородино һуғышында ла ҡатнаша 1-се Типтәр полкы яугирҙары. 12 сентябрҙән 22 сентябргә тиклем, француздарға ҡаршы һуғыштың хәл иткес этабында, 1-се Типтәр полкы Денис Давыдовтың партизан отряды составында дошман менән алһыҙ-ялһыҙ һуғыша. Мәҫәлән, 13 сентябрҙәге бәрелештә 100 француз һалдаты үлтерелә, 12-һе ҡулға алына. 18 сентябрҙәге бәрелештә типтәрҙәр 100 дошман һалдатын юҡ итә, 125-ен әсир итә. 22 сентябрь полк Рославль ҡалаһы тирәһенә ебәрелә, ул унда Брянск йүнәлешен дошмандан һаҡларға тейеш була. 23 сентябрь полк яугирҙары 60 французды дөмөктөрә. 7 октябргә, үҙ-үҙҙәрен аямай һуғышыу һөҙөмтәһендә 1-се типтәр полкында 530 кешенән 120 кеше сафта ҡала.

2-се типтәр полкына килгәндә, һуғыш башланғанда ул Ырымбур тирәһендә торған була. Полк һамар, Нижний Новгород ҡалалары аша

фронтҡа ебәрелә һәм 1812 йылдың көҙөнән алып III округ ополчениеһы составында һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнаша.

Башҡорт халҡының Беренсе Ватан һуғышында ҡатнашыу тарихына килгәндә, нисек кенә парадоксаль булмаһын, беҙ түбәндәге һығымтаға килергә тейеш булабыҙ: һуғышта урыҫтарҙан ҡала иң күп ҡатнашҡан һәм иң ныҡ һуғышҡан халыҡ[19], ул — башҡорттар. Рәсәйҙең азатлығын яҡлауҙа башҡа бер генә халыҡтың да шул тиклем көс сарыф итеүен, иҫ китерлек батырлыҡ өлгөләре күрһәтеүен тарих белмәй. Был хәл иткес хәрби ярҙамда беҙҙең төбәк халҡының да өлөшө ҙур булған, шуның өсөн ул темаға нығыраҡ туҡталып китәйек: Ырымбур губернияһы фронтҡа барлығы 45 полк оҙата, шуның 28-е башҡорт полктары, 2 типтәр, 2 мишәр полкы, ҡалғандары — рус казактарынан төҙөлгән полктар. Уларҙан тыш Өфө ҡалаһы 1 полк төҙөп оҙата. Ошо 28 башҡорт полкында (28 х 530 = 14840) яугир була. Бынан тыш, тыныс ваҡыттағыса 12000 башҡорт кавалерисы Ырымбур сик буйы һыҙығында хеҙмәтен дауам итә. Йәғни, башҡорт халҡы үҙенең иң батыр, иң көслө 27 мең ир-егеттең һәр береһенә 2—4-әр ат табып бирә, бынан тыш үҙ иҫәбенә кейендерә, ҡоралландыра. Икенсе төрлө әйткәндә, был һәр бер йорттан бер ир-егет хеҙмәткә алынған тигән һүҙ. Бындай әүҙемлек урыҫ халҡының үҙендә лә булмаған хатта. Тағы шуныһы: башҡорт ғәскәрен кейендереп, ҡоралландырыуға батша властары бер тин аҡса ла бирмәгән. Киреһенсә, һуғыш башланыуға 2 ай ҙа үтмәй, Ырымбур губернияһында йәшәгән башҡорттар, мишәрҙәр, типтәрҙәр йәмғеһе 500 мең һум аҡса йыйып, хәрәкәт итеүсе армияға ярҙамға иғәнә итеп тапшыралар. (Губернияла йәшәгән урыҫ крәҫтиәндәре һан яғынан башҡорттарҙан әллә ни кәм булмаһалар ҙа, тормоштары етешерәк, мулыраҡ булһа ла, уларҙың был иғәнәләге өлөштәре — 60 мең һум ғына тәшкил итә.) Аҡса йыйыуҙа Учалыларҙың ата-бабалары ла ҙур ихласлыҡ, йомартлылыҡ күрһәтәләр.

Быларҙан тыш, башҡорттар хәрәкәт итеүсе армияға ярҙам йөҙөнән 4139 иң яҡшы аттарҙы өйрәтеп, яуға ебәрәләр.

Беҙҙең төбәккә килгәндә, 4-се башҡорт кантоны (Троицк өйәҙе) фронтҡа бер полк төҙөп оҙата, уға 18-се атлы полк исеме бирелә. 6-сы кантон (Верхнеуральск өйәҙе) 2 полк формалаштыра. Улар Беренсе Ватан һуғышы тарихында 14-се атлы полк (убалыларҙың ата-бабалары ошо полк составында һуғышҡан) һәм 15-се атлы полк исемдәре аҫтында билдәле.

Төп башҡорт полктары фронтҡа 1812 йылдың аҙағында килеп етәләр (һуғыш башланған көндән сик буйын һаҡлап тороусы 1-се һәм 2-се атлы башҡорт полктары француздарға ҡаршы ҡаһармандарса һуғышҡан). Шуны билдәләп үтәйек, 18-се атлы полк Ватан һуғышында үҙен бигүк күрһәтә алмай, ә бына 14-се полк яугирҙары дошман менән алышҡанда иҫ киткес ҡаһарманлыҡ өлгөләре күрһәтәләр һәм тарихҡа үҙ исемдәрен алтын хәрефтәр менән яҙып ҡуялар.

Айырып әйткәндә, 14-се башҡорт полкы беренселәрҙән булып Одер йылғаһын кисеп сыға. 1813 йылдың 4—7 октябрендә Лейпциг эргәһендәге «халыҡтар һуғышында» ҡатнашып, был полк мактауға лайыҡ була. Полк яугирҙары Дрезден ҡалаһын ҡамауҙа тотҡанда һәм штурм менән алғанда (1813 йылдың 31 октябре) ҙур батырлыҡ

*Башҡорт казаҡы. 1812 йыл*

күрһәтәләр. Наурыҙ ауылы егете Ғәбделнасир Наурузов күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн IV дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнә.

Типтәр полктарына килгәндә иһә, 1-се Типтәр полкы 1813 йылды Германия ерендә һуғышып үткәрә. Лейпциг эргәһендәге «халыҡтар һуғышында» ҡатнаша. 2-се Типтәр полкы 1813 йылдың ғинуарынан декабренә тиклем Данцигты ҡамап тороусы һәм штурмлаусы ғәскәрҙәр составында була.

1814 йылдың яҙында һуғыш Парижды алыу менән тамамлана. Парижға беренселәрҙән булып башҡорт полктары бәреп инә (ни тиһәң дә, еңел кавалерия!). Парижға ингән 9 башҡорт һәм бер типтәр полктары араһында 14-се башҡорт полкы менән 2-се типтәр полкы ла була.

Шулай итеп, ата-бабаларыбыҙ, үҙҙәренең Яйыҡ үренән башланған походын уңышлы тамамлап, еңеү һәм дан менән тыуған илдәренә ҡайталар. Ләкин бик күптәргә был ҡыуанысты күргә яҙмаған була. Меңәрләгән башҡорт, типтәр һәм мишәр яугиры сит тупраҡта ятып ҡала.

1835 йылда 1-се һәм 2-се типтәр полктарынан «1-се Ырымбур казак полкы» төҙөлә, күп тә үтмәй уның исеме «Өфө казак полкы» тип үҙгәртелә (полк Өфөлә торған була). 1845 йылда типтәрҙәрҙең ғәскәри берәмеге булған Өфө казак полкы Николай I бойороғо менән таратыла.

Түбәндә 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм сит ил походында (1813—1814 йылдар) ҡатнашҡан һәм XIX быуаттың 30-сы йылдарында әле иҫән булған яугирҙарҙың исемлеген килтерәбеҙ (уларҙың һәр береһе һуғыштан кәмендә икешәр көмөш миҙал менән ҡайтҡан: «За взятие Парижа 19 марта 1814 года» һәм «В память войны 1812 года»)

1. Прапорщик Ғәбделнасир Наурузов (1782—1840). Наурыҙ ауылынан. IV дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнгән, шулай уҡ 2 көмөш миҙалға лайыҡ булған батырыбыҙ.

2. Прапорщик Ғәбделнасир Ҡорманҡаев. Иҫтамғолдан. 2 көмөш миҙал һәм IV дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнгән.

3. Төхвәтулла Ҡорманаев. Рәсүлдән. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

4. Кинйәбулат Ишмәкәев. Ишмәкәйҙән. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

5. Мөхәмәтйәр Яҡшымбәтов. Баҙарғолдан. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

6. Хисаметдин Хоҙаҡаев. Алтаяҡтан. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

7. Йомағол Сыуашбаев. Алтаяҡтан. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

8. Ғәбдин Ҡолгилдин. Алтаяҡтан. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

9. Иҫәнгилде Ғәббәсов. Алтаяҡтан. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

10. Нурғәли Зөбәйеров. Ҡалуйҙан. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

11. Сәйфетдин Ҡәҙерғәлин. Байрамғолдан. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

12. Ғәбделҡадир Килдебаев. Наурыҙҙан. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

13. Кейекбай Әмиров. Әбләҙенән. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

14. Ғабдрахман Әбләҙин. Әбләҙенән. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

15. Сәйетбай Абдулғафаров. Әбләҙенән. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

16. Мөхәмәтәмин Хәмитов. Әбләҙенән. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

17. Ноғоман Сәғитов. Әбләҙенән. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

18. Абдулҡадир Тоҡбирҙин. Әбләҙенән. 2 көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

14-се полк яугирҙарының исемлеге булды был. 14-се полк командиры подпоручик Абдулла СораҒолов, ике тапҡыр IV дәрәжә Изге Анна ордены менән наградланыусы, ҡайһы ауылдыҡы икәнлеге әлегә асыҡланмаған (Әбләҙенеке булырға тейеш, ләкин был фараз ғына).

18-се полк яугирҙарының исемлеге ҙур түгел:

1. Зауряд-хорунжий Мөхәмәтйән Буҙыҡаев. Малай-Муйнаҡ ауылынан.
2. Бурансы Әлимсурин — Ҡарт Муйнаҡтан.
3. Абдулвәхит Этимгәнов — Һөйөндөктән (Ҡыуаҡан волосы).
4. Айҙарбәк Сәғитов — Көсөктән.
5. Байрамғол Раҡаев — Төхвәттән.
6. Урядник Ҡылыс Киҙәев — Иҡсандан (Ҡыуаҡан волосы).
7. Сәйфетдин Ҡәҙерғәлин — Иҙке Байрамғолдан (Әүеш)

Типтәрҙәрҙән:

1. Абдуллатиф Иманғолов — 2-се Типтәр полкынан. Иманғолдан.
2. Юлдыбай Иманғолов — 1-се Типтәр полкынан. Иманғолдан.
3. Баҙарғол Әсәнов — 1-се Типтәр полкы, Илсенән.

Ата-бабаларыбыҙ бынан һуң да Рәсәй мәнфәғәттәре өсөн ҡандарын әҙ түкмәгән. 1828—29 йылдарҙағы урыҫ-төрөк һуғышында 2 башҡорт полкы ҡатнашҡан, 1853—56 йылдарҙағы Ҡырым һуғышынан да башҡорт һуғышсылары ситтә ҡалдырылмаған. Башҡорттарҙы даими рәүештә яу яланында ҡырҙыртып тороуҙар, юлбашсы булырҙай батырҙарыбыҙҙы юҡ итеп тороуҙар эҙһеҙ үтмәгән: XIX быуат башҡорт тарихында уғата тыныс быуат булып һанала. Йәбер-золом, иҙеү көсәйгән һайын, халҡыбыҙҙың урыҫ колонизаторҙарына тоғролоғо, бирелгәнлеге арта ғына барған, сөнки XVIII быуатта башҡорттоң арҡа һөйәге һындырылғайны шул. Ул быуат ярымға яҡын (1775—1917) ҡалҡына алмайынса, бөлгөнлөккә төшөрөлгән хәлдә ҡала бирҙе. Халҡыбыҙҙың XIX быуаттағы хәле ысынлап та аяныс һәм ҡыҙғаныс ине: ҡасандыр батшалар тәхетен дер һелкеткән яусыл, ғорур милләткә ҡоллоҡ быҒауҙары кейҙерелгәйне.

## КАНТОН ИДАРАЛЫҒЫ БӨТӨРӨЛГӘНДӘН АЛЫП ФЕВРАЛЬ РЕВОЛЮЦИЯҺЫНА (1917) ТИКЛЕМГЕ ОСОР

Башҡорт ғәскәренең бөтөрөлөүе, һуғыш техникаһының ҡатмарлана барыуы, Башҡортостандың империя уртаһында тороп ҡалыуы (Ҡаҙағстан Рәсәйгә ҡушылғандан һуң) иррегуляр ғәскәрҙәрҙән, шул

иҫәптән башҡорт ғәскәренән дә, баш тартыуға килтерә. 1863—65 йылдарҙа бары тик 2 башҡорт кантоны ғына, шул иҫәптән 6-сы кантон (Верхнеуральск өйәҙе) хәрби-казак хәлендә ҡала.

1865—66 йылдарҙа башҡорттар, ә улар менән бергә типтәрҙәр һәм мишәрҙәр ҙә, хәрби ведомствонан граждандар ведомствоһына күсереләләр. Кантон идаралығы осоро, шулай итеп, тамамлана. 1865 йылдың декабрендә Верхнеуральск әйәҙе башҡорттары һәм уларҙың припущенниктары, 1866 йылдың ғинуарында Троицк әйәҙе башҡорттары һәм припущенниктары мировой посредниктар ҡарамағына тапшырыла.

1874 йылдағы хәрби реформа хәрби хеҙмәткә алыуҙа бөтөн милләт вәкилдәрен дә тигеҙләй. Армияға 21 йәше тулған ир-егеттәр алынған. Тыныс ваҡытта Рәсәй армияһы бәләкәй булыу сәбәпле, хәрби хеҙмәткә яраҡлыларҙың 20—25 процентын ғына армияға алып, ҡалғандарын (йәрәбә ташлағандан һуң) өйҙәренә кире ҡайтара торған булғандар. Шулай итеп, 1874 йылдан алып башҡорттар, мишәрҙәр һәм типтәрҙәр үрҙә әйтелгән шарттарҙа урыҫ армияһына хәрби хеҙмәткә алына башлайҙар. Әммә батша властары бәләкәй генә ташлама яһап, 250 кешелек Айырым башҡорт эскадронының ойошторолоуына фатиха бирәләр. Был эскадронда үҙҙәренең аттары менән Верхнеуральск (тимәк, беҙҙең төбәктекеләр ҙә), Силәбе һәм Ырымбур өйәҙҙәре башҡорттары хеҙмәт итә алған.

1875 йылда Айырым Башҡорт эскадроны Айырым Башҡорт полкы итеп үҙгәртелә, инде уның составында 5 эскадрон була (берене — резервта). Әммә башҡорт полкының «ғүмере» ҡыҫҡа була, 7 йылдан һуң, 1882 йылда ғәскәр йәшәүҙән туҡтай.

**Административ бүленеш.** 1863 йылда башҡорттар менән идара итеү өсөн элекке кантондар урынына 808 ауыл һәм 130 волость йәмғиәте булдырыла. Кантон идара системаһы индерелгәнгә ҡәҙәр Барын табын волосына ҡараған ерҙәр (хәҙерге Учалы районының төньяҡ өлөшө) Туңғатар волосына берләштерелә, үҙәге Туңғатар ауылында була. Урыҫ ауылдарынан Вознесенка һәм Поляковка ла ошо волосҡа ҡарағандар.

Районыбыҙҙың урта өлөшөндәге 12 типтәр ауылы урынлашҡан ерҙәр үҙенең исемен һаҡлап, элеккесә Типтәр-Учалы волосы тип йөрөтөлгән. Үҙәге — Учалы ауылында булған (Учалы — ауыл исеменең урыҫса әйтелеше, типтәрҙәр үҙ ауылдарын «Асуҙы» ауылы тип йөрөткәндәр. Асуҙы һүҙе урыҫса Ачулино тип яҙылып, һуңынан Учалыға әүерелгән).

Районыбыҙҙың көнбайышында, Ағиҙел, Яйыҡ, Уй башында ятҡан башҡорт ауылдары (элекке Ҡыуаҡан волосына ҡараған ерҙәр) Байһаҡал волосына берләшкән, Үҙәге — Байһаҡал ауылында булған.

Туңғатар һәм Байһаҡал волостары Троицк өйәҙенә ҡарағандар. Шуға ла Троицк ҡалаһында ул саҡта төрлө эштәрен атҡарып, йомош менән йөрөгән ата-бабаларыбыҙҙы йыш осратырға тура килгән. Троицк башҡорт ерендә, ҡара табын волосы ерҙәрендә барлыҡҡа килгән ҡәлғә-ҡала булараҡ, граждандар һуғышы башланғанға тиклем (1918 йыл) — башҡорт ҡалаһы булып ҡала килгән. Башҡорттар бында бик күп йәшәгән. Троицк башҡорт-татар, ҡаҙаҡ культураһының

Көньяҡ Уралдағы үҙәге булған. Мәжит Ғафури, Аҡмулла, Ғабдулла Туҡай, Шәйехзада Бабичтар юҡҡа ғына Троицк ҡалаһын үҙ итмәгәндер бит. Троицк ҡалаһында XIX быуат аҙағында — XX быуат башында исеме бөтә Рәсәйгә билдәле «Рәсүлиә» мәҙрәсәһе эшләгән. Был мәҙрәсәгә шәкерттәр йөҙәр саҡрым алыҫлыҡтан килеп уҡығандар; бында башҡорт, татар, ҡаҙаҡ балалары төплө белем алғандар. Ҡалала татар-башҡорт театры булған, унда йыл һайын меңәрләгән башҡорт-татар йыйылып байрам итә торған ҙур һәм бай һабантуйҙар үтә торған булған.

Районыбыҙҙың көньяҡ өлөшө ауылдары үҙҙәре айырым бер волость — Күбәләк-Тиләү волосын тәшкил иткәндәр, һәйтәк ауылы ла ошо волость составында булған. Волость үҙәге Ҡаҙаҡҡол ауылында була.

**Мәғариф реформаһы**. 1864 йылғы мәғариф реформаһын тормошҡа ашырып башҡорттар, типтәрҙәр һәм мишәрҙәр йәшәгән ерҙәрҙә күпләп урыҫ-башҡорт мәктәптәре асыла, бер үк ваҡытта милли мәктәптәрҙең дә һаны ныҡ арта. 1864 йылда ғына 26 урыҫ-башҡорт мәктәбе асыла (губерния буйынса). Шулар иҫәбендә, беҙҙең төбәктәге Илтабан урыҫ-башҡорт мәктәбе лә була. 1863 йылда Туңғатар ауылында (1865 йылға тиклем 7-се кантондың штаб-квартираһы) 10 ир бала уҡытыуға иҫәпләнгән урыҫ-башҡорт мәктәбе асылған. Балаларҙы Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусын (хәрби училище) тамамлаған хорунжий Абдулатиф Урусов уҡытҡан. Дәрестәр башлыса урыҫ телен (яҙыуын) үҙләштереүгә һәм урыҫ телендә уҡырға өйрәнеүгә, арифметиканы үҙләштереүгә йүнәлтелгән булған.

Мәҙрәсәләрҙән, XIX быуаттың икенсе яртыһында — XX быуаттың башында, халыҡ араһында абруйлы уҡыу йорттары булараҡ, Малай Муйнаҡ, Аҡҡужа, Ахун, Яңы Байрамғол мәҙрәсәләрен телгә алырға була.

Ауыл мәҙрәсәләрендә уҡытыу башлыса ҡәҙимгесә (йәғни иҫкесә) барған, реформатор хәрәкәте — йәдитселек бында үтеп инә алмаған. Йәдит ысулы менән уҡытыу Троицкиҙағы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә генә киң яҡлау таба.

Суд эше. Башҡортостанда присяжныйҙар суды бик ныҡ һуңлап, бары тик 1898 йылда ғына индерелә. Уға тиклем суд эше элеккесә алып барыла. Башҡорттар өсөн волость судтары һаҡлана. Йыл һайын үтә торған волость йыйындарында 4—15 кешенән волость суды составы һайлана торған булған. Волость судтары, әгәр юлланған сумма 100 һумдан артмаһа, волость эсендәге генә эштәрҙе ҡарағандар. 6 көнгә ҡәҙәр йәмғиәт эштәренә йәлеп итеү, 3 һумға тиклем штраф һалыу, таяҡ менән 20 тапҡырға тиклем һуҡтырыу — волость суды бына шундай язаға хөкөм итә алған. Волость судының хөкөмөн үҙгәртеү мөмкин булмаған. Ҙурыраҡ эштәрҙе Троицк округ суды ҡараған. Дин әһелдәренең эштәре Өфөлә, мөфтөй эргәһендәге тикшереү органында ҡарала торған булған.

**Хужалыҡтағы үҙгәрештәр.** Реформанан һуңғы йылдарҙа (1861 — 1917) башҡорт ерҙәрен талау сәйәсәте дауам итә. Бының шулай булғанлығын түбәндәге таблица асыҡ күрһәтә.

Башҡорт ерҙәренә урыҫ крәҫтиәндәрен күпләп күсереп ултыртыу ҙа дауам итә. Мәҫәлән, 1904—1914 йылдарҙа ғына Ырымбур губернияһына тимер юл менән 65 мең кеше күсереп килтерелә, шуларҙың күбеһе башҡорт ерҙәрендә төпләнә. Ер тартып ҡына алынмай, ул алдағыһы көнөн уйламаған башҡорттар тарафынан күпләп урыҫтарға

| 1877 йыл: | Өфө губернияһы | Ырымбур губернияһы |
|---|---|---|
| 1 крәҫтиән наделы | 25 дис. | 52 дис. |
| 1 аҫаба башҡорт наделы | 37 дис. | 91 дис. |

| | | |
|---|---|---|
| XX быуат башы: | | |
| Уртаса 1 крәҫтиән наделы | 18 дис. | 30 дис. |
| Аҫаба башҡорт һәм уларҙың припущенниктарының уртаса наделы | 24 дис. | 44 дис. |

һатыла ла. Халыҡ ижадында ер һатыу темаһына арнап сығарылған йырҙар бик күп. Шулар араһында үҙенең драматизмы менән «Йәмәлекәй» йыры айырылып тора. Ҡара табындарҙың борондан биләп килгән ере һатылған, һәм халыҡ ерһеҙ тороп ҡалған. Аһ-зар, үкенеү мотивтары менән һуғарылған был йыр ерҙе һатҡан, «мәғрифәтһеҙ ирҙәр»ҙе ҡәһәрләй^ киләһе быуындар яҙмышы өсөн борсола.

Йәмәлекәй тауҙың, ай, башында,
Йондоҙ кеүек ваҡ-ваҡ таштар бар.
Йәмәлекәй тауҙы ник һаттығыҙ,
Беҙҙән ҡалған ғәйре йәштәр бар.

1890 йылда Өфөнән Силәбегә тимер юл килә. Был ваҡиға беҙҙең төбәктең экономик үҫешен тиҙләткән, әлбиттә, әммә ошо юлға таянып тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙы талау ҙа, күскенселәрҙең яңы төркөмдәрен күпләп ташыу ҙа бермә-бер еңеләйгән. Ул ваҡытта яҡын тирәләге ҡалаларыбыҙ (өйәҙ ҡалалары) һаман да бәләкәй, ҡәлғә хәлендә ҡала биргәндәр. Мәҫәлән, Силәбелә 20 мең кеше, Троицкиҙа 13 мең, ә Верхнеуральскийҙа ни бары 11 мең кеше йәшәгән (1895 йылда). Шуға ла был ҡалалар, иҡтисади үҙәк булыуҙан бигерәк административ үҙәк ролен генә үтәгәндәр. Күскенселәрҙең береһе лә ҡалаларҙа йәшәргә теләмәгән, уларҙың һәммәһен дә ҙур ер биләмәләре, тимәк ауыл ҡыҙыҡтырған. Күскенселәрҙең барыһының да тип әйтерлек крәҫтиәндәр булыуы ла уларҙың ергә йәбешеп ятыуында мөһим роль уйнаған.

Күскенселәрҙең башҡорт ерҙәренә ябырылыуы һөҙөмтәһендә ярым күсмә тормош менән йәшәгән ата-бабаларыбыҙҙың тормошо йылдан-йыл нығыраҡ бөлгөнлөккә, хәйерселеккә табан тәгәрәгән. Башҡорттар

яңы, капиталистик шарттарға, баҙар иҡтисадына бик әкрен яраҡлашҡандар, улар араһында йүнселлек бик яй үҫешкән. Шуларҙың барыһы ла һөҙөмтәлә халҡыбыҙҙың таланып йәшәүенә килтергән. Мәҫәлән, 1912—13 йылдарҙа урыҫ күскенселәре менән сағыштырғанда көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының йәшәү кимәле 6 тапҡырға түбәнерәк булған. XIX быуат аҙағында — XX быуат баштарында тирмәндәребеҙҙең (беҙҙең район тураһында һүҙ) 90 проценты урыҫтар ҡулында, ә магазиндарыбыҙҙың (ауылдарыбыҙҙағы кибет лавкалары-быҙҙың) 100 проценты урыҫ һәм татар милке булған. Шулай уҡ симал (сырье) әҙерләү, төрлө промыслалар, алтын табыу эшенең 90—100 проценты килмешәктәр ҡулында булған.

**Думаға һайлауҙар**. I Дәүләт думаһына һайлауҙар 1906 йылдың апрелендә булып уҙған[20], һайлауҙар күп баҫҡыслы булыуҙары менән хәҙерге һайлауҙарҙан айырылып торған. Тәүҙә һәр ауылда 25 йортҡа 1 кеше иҫәбенән «выборныйҙар» һайлағандар. Был 1906 йылдың февралендә-март башында була. Шунан, 6 март көнө Учалы ауылында (Типтәр-Учалы волосы) һәм Ҡаҙаҡкол ауылында (Күбәләк-Тиләү волосы) волость сходтары булып үтә. Ҡаҙаҡкол ауылындағы волость сходында ауыл сходтарында һайланған 181 «выборныйҙың» 127-һе ҡатнаша, документта әйтелгәнсә, аҫаба башҡорттар һәм вазифа биләүселәр. Сходты волость старшинаһы Солтан Боҫконов аса һәм алып бара. Волостан «уполномоченный» итеп һайланалар:

1) Ғабдуллатиф Байғузин Ғайсин, 53 йәштә.

2) «потомственный почетный гражданин Шагбал Сахаутдинов Сейфетдинов», 59 йәштә.

Уларҙың һәр береһенә сход ҡарары менән волостың «мирский» капиталы иҫәбенән 50-шәр һум юл аҡсаһы бирелә.

Учалы ауылындағы волость сходында һайланған 128 «выборныйҙың» 80-е ҡатнаша, бынан тыш 13 һалым йыйыусы, 7 ауыл старостаһы, волость заседателе Хайбуллин тауыш бирә. Сходты волость старшинаһы Ишбирҙин алып бара. Ахун ауыл йәмғиәтенән староста Күсәрбаев, Ураҙҙан — Рамаҙанов, Ҡалҡандан (йәмғиәткә Ҡалҡан һәм Рысай ауылдары ингән) — Юнысов, Ҡунаҡбай йәмғиәтенән (Ҡунаҡбай һәм Иманғол ауылдары) — Асадуллин, Илсе йәмғиәтенән (Илсе, Сәфәр, Мансур ауылдары) — Нур Солтанов, Илтабан йәмғиәтенән (Илтабан һәм Аҡҡужа ауылдары) — Зәйнулла Хәйруллин, Мулдаш йәмғиәтенән (Учалы һәм Мулдаш ауылдары) — Ғәлимов старосталар сходта ҙур активлыҡ күрһәтәләр. Сход 2 «уполномоченный»ҙы тиҙ һайлай. Бына улар:

1. Ҡунаҡбайҙан: «Әхмәт Йәҙәри Мөхәммәт Вәлитов», 59 йәш.
2. Ахундан: Ғүмәр Садыҡов.

Бер нисә ауылдың сходта ҡатнашҡан «выборныйҙарын» (йәғни авторитетлы кешеләрен) һанап үтәйек. Бына улар: Рысайҙан Ҡадир Фәтҡуллин, Ибәтулла Рахманғолов, Сәғиҙулла Әхмәтшин, Ғиниәтулла Ҡаһарманов, Динмөхәммәт Хәсәнов.

Илсе ауылынан: Бикчәнтәй Сәитборханов, Закир Мәғәсүмов, Мөфтәхитдин Ғәниев, Хәсән Ҡаһиров, Таип Таһиров.

1906 йылдың 11 апрелендә Верхнеуральск ҡалаһында волостарҙан «уполномоченныйҙарҙың» өйәҙ съезы була (17 «уполномоченный» ҡат-

нашлығында). Ырымбур губерния һайлау йыйылышына (20 апрель 1906 йыл) крәҫтиәндәрҙән һайлаусылар («выборщиктар») булып 4 кеше һайлана. Бына улар:

1) Шаһибал Сәхәүетдин улы Сәйфетдинов, 60 йәштә, «потомственный почетный гражданин из башкир», белеме — өйҙә алынған, игенселек менән шөғөлләнгән, Муса ауылында йәшәгән.

2) Хажимөхәммәт Яҡшымбәтов, 35 йәштә, мулла, Асҡарҙан.

3) К. И. Сапунов, 34 йәш, крәҫтиән, Белорет заводы.

4) М. И. Рыбаков — 50 йәш, крәҫтиән, Үрге Әүҙән заводы.

Аңлауыбыҙса, ошо дүртәүҙең берehe, исемлектә тәүгehe — беҙҙең төбәк кешehe.

1907 йылдың ғинуар башында II Дәүләт Думаһына һайлауҙар башлана. Тәүҙә үрҙә әйтелгәнсә, ауыл сходтары булып үтә. Типтәр-Учалы волосында 128 «выборный», Күбәләк-Тиләү волосында 181 «выборный» һайлана, бер үк көндә, 14 ғинуарҙа Учалыла һәм Ҡаҙаҡҡолда волость сходтары була. Өйәҙ съезына «уполномоченныйҙар» һайлана. Типтәр-Учалы волосынан: Динмөхәммәт Мөхәмәҙиев, 41 йәштә, Ҡунаҡбайҙан һәм Иманғолдан Ғүмәр Садыҡов, 41 йәштә, Ахундан. Күбәләк-Тиләү волосынан «уполномоченныйҙар» булып Шаһибал Сәхәүетдин улы Сәйфетдинов (үткән һайлауҙа ла ул үткәйне) һәм Нәсибулла улы Шәрипов (59 йәштә, ауыл фельдшеры) һайланалар.

II Дәүләт Думаһында 3 башҡорт депутатының берehe беҙҙең яҡташыбыҙ Шаһибал Сәйфетдинов булған. Ул Думала Ырымбур губернияһы башҡорттары исеменән тәрән йөкмәткеле доклад менән сығыш яһаған. Үҙенең телмәрендә ул батша администрацияһын тәнҡитләгән һәм дөйөм демократик позицияларҙан сығып ябай халыҡ массаларының мәнфәғәтен яҡлаған.

1912—1913 йылдарҙа Ырымбур губернияһында, Өфө губернияһы менән сағыштырғанда бер нисә тиҫтә йылға һуңлап, земстволар индерелә. Верхнеуральск һәм Троицк ҡалаларында һайланып ҡуйылған 10 «гласныйҙан» торған өйәҙ земское собраниелары ойошторола, һәр сословиеға квотаға ярашлы бер нисә урын бирелгән. Эре ер биләүселәргә — 2 урын, ә ҡалған 8 урынға ҙур мөлкәткә эйә булған ҡала кешеләре һәм волость йәмғиәттәренән һайланған кешеләр тәғәйенләнгән.

## ИҪКӘРМӘЛӘР

### II бүлек


1. Руденко С. И. Башкиры. Историко-этнографические очерки. М. СПб., 1955; Янгузин Р. З. Хозяйство башкир дореволюционной России. Уфа. 1989.

2. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Төрк һәм татар тарихы. Өфө: Китап, 1994.

3. Усманов А. Н. Добровольное присоединение Башкирии к Русскому государству. Уфа, 1982.

4. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Күрһәтелгән әҫәр.

5. Башҡорт халыҡ ижады. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте, 1990., т. 1.

6. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Күрһәтелгән әҫәр.

7. Акманов И. Г. Башкирские восстания XVII — I половины XVIII веков. Свердловск, 1992; Насыров Р. Йосоп һәм башҡа батырҙар // Совет Башҡортостаны, 1990, 72—76-сы һандар.

8. Асфандияров А. З. История сел и деревень Башкирской АССР. Уфа., 1990, книга 1.
9. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Күрһәтелгән әҫәр.
10. Ризаэтдин Фәхретдинов. Болғар вә Казан төрекләре. Казан, 1993.
11. Центральный государственный исторический архив Республики Башкортостан (ЦГИА РБ) ф И 138, оп. 2, д. 41, лл. 23 об. —27
12. Адельгужин А. Сближение наций// Серп и молот, 1985, 17 декабря.
13. Кәлимуллин Ә. Г. Татарлар: исемебеҙ һәм жисемебез. Казан., 1991.
14. Адельгужин А. Пугачевское движение в Башкирии // Серп и молот, 1986, 58, 60, 61, 63, 66, 69, 72, 73, 76, 77, 79, 80-се һандар.
15. Әҙелгужин Ә., Руда яҡылығын күрһәтте...// Ураҡ һәм сүкеш — 1986, 146, 147, 148, 151, 152, 155; Хумай — птица счастья. Уфа, 1993.
16. Моталов М. Башҡортостан алтыны // Аманат, 1992, 2-се һан.
17. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Өфө: Китап, 1990, 1 том.
18. Атилла Рәсих. Ишан оныҡы // Казан утлары, 1990, 1-се һан.; Насыров Р. Ишан илен ҡурсалай // Башҡортостан, 1994, 46—50-се һандар.
19. Любезные вы мои... Уфа: Китап, 1992.
20. Государственный архив Челябинской области. Ф.И 163, оп. 1, д. 4; ф.и. 166, оп. 1, д. 1, 2.

# ФЕВРАЛЬ РЕВОЛЮЦИЯҺЫНАН (1917) БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫНА ТИКЛЕМГЕ ДӘҮЕР.

## БЕҘҘЕҢ ТӨБӘКТӘ СОВЕТ ВЛАСЫ УРЫНЛАШЫУЫНЫҢ ҺӘМ ГРАЖДАНДАР ҺУҒЫШЫНЫҢ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

### Милли-азатлыҡ хәрәкәтенең 1 этабында (1917 йылдың йәйе — 1918 йылдың яҙы).

1917 йылғы Февраль революцияһынан һуң киң ҡолас алған башҡорт милли хәрәкәте халҡыбыҙҙың ер, үҙаллылыҡ өсөн быуаттар буйы барған милли-азатлыҡ көрәше менән тығыҙ бәйләнгән. Ул халыҡтың киң ҡатламдарына, бер һүҙ менән әйткәндә, дөйөм милләт мәнфәғәтенә яуап биргән. 1917 йылдан 1922 йылға тиклем һуҙылған милли-азатлыҡ көрәше бик ауыр шарттарҙа барған: беҙҙең төбәктә лә, бөтөн Башҡортостандағы кеүек, милли автономия идеяһына һәр төрлө көстәр ҡаршы күтәрелгән. Беренсенән, урындағы урыҫ һәм башҡорт булмаған башҡа халыҡ төркөмдәре (мишәр, типтәр), икенсенән, Колчак администрацияһы, өсөнсөнән, урындағы большевистик етәкселәр.

1917 йылдың йәйендә-көҙөндә урындағы батша администрацияһы шура, йәғни совет идаралыҡтары менән алмаштырыла. Күбәләк-Тиләү волосында старшина Ишкәримов 30 октябргә тиклем власты үҙ ҡулында тота. Бары тик һуғыштан ҡайтҡан фронтовиктар Муса Мортазин, уның ҡустыһы Ибраһим Мортазиндарҙың инициативаһы һәм тырышлығы менән 400 делегат ҡатнашлығында волость съезы саҡырыла, шура идаралығы төҙөлә. III Бөтә Башҡорт ҡоролтайына делегаттар итеп Муса Мортазин (Көсөктән) һәм Исмәғил Солтанов (Ҡотойҙан) һайлана. Муса Мортазин быға тиклем Рәсәй мосолмандарының 1-се съезында (май, 1917) полк муллаһы сифатында ҡатнашҡан була. III Бөтә Башҡорт ҡоролтайында ҡатнашыу Муса Мортазин күңелендә юйылмаҫ эҙ ҡалдыра, уның башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә яҡынайыуына килтерә. Ләкин ул әлегә тулыһынса Зәки Вәлиди байрағы аҫтына баҫмай. 1918 йылдың февралендә беҙ Мусаны Ҡазанда, II Мосолман хәрби съезы делегаты сифатында күрәбеҙ. Йәғни, күпмелер ваҡыт Муса Лут улы өсөн беренсе планда мосолманлыҡ идеяһы тора (был яғы менән ул татар большевиктары һәм эсерҙарына бик яҡын), уның өсөн башҡорт идеяһы артыҡ мөһим булмай. Ләкин шулай булһа ла, Муса Лут улы бик әҙәпле, тәрбиәле кеше булараҡ, бер ваҡытта ла «бысраҡ уйындар»ҙа ҡатнашмай, бер кемгә лә хыянат итмәй. Башҡор-

тостан автономияһының дошмандары булған татар шовинистары Ырымбурҙа торған 1-се Мосолман полкына таянып, III Ҡоролтайҙы ҡыуып таратырға ниәтләнгәс, килеп тыуған ауыр хәлдән Муса Мортазин һәм башҡа фронтовиктар ҡотҡарып алып ҡала. Улар полк һалдаттары араһында аңлатыу эштәре алып бара, уларға Ҡоролтайҙың ни өсөн саҡырылғанлығын төшөндөрә һәм шуның менән Ҡоролтайға янаған ҡурҡынысты бөтөрөүгә өлгәшә. Һөҙөмтәлә, артабан Ҡоролтай үҙ эшен тыныс шарттарҙа дауам итеп, мөһим ҡарарҙар ҡабул итә. Был ваҡытта Ырымбурҙа Ваҡытлы хөкүмәт комиссары Архангельскийҙың власы ине. Яңы власть, йәғни ҡыҙылдар диктатураһы, Ырымбурҙа бик һуңлап, бары тик 1918 йылдың 18 (31) ғинуарынан һуң ғына урынлаша алды. Ваҡытлы хөкүмәт рәсми рәүештә Башҡортостан автономияһын танымаһа ла, демократик хөкүмәт булараҡ, башҡорт милли хәрәкәтенә ҡаршы төшмәне, бер ниндәй ҙә репрессив саралар ҡулланманы.

1918 йылдың 18 (31) ғинуарынан һуң хәл бермә-бер ҡатмарлана: Башҡорт хөкүмәте совет власына, большевиктарға ҡарата үҙенең нейтраль позицияла тороуын күпме генә һыҙыҡ өҫтөнә алмаһын, синфи мәнфәғәтте беренсе урынға ҡуйған, мәҙәни һәм белем кимәле бик түбән булған урындағы большевистик етәкселәрҙең симпатияһын яулай алмай. Киреһенсә, халҡыбыҙҙың үҙ дәүләтселеген (автономия формаһында булһа ла) тергеҙергә тырышыуы уларҙың асыуын ғына ҡабарта, бер һелтәүҙә (йәғни, репрессив саралар менән) башҡорт халҡының алдынғы ҡарашлы лидерҙарынан ҡотолоу теләген тыуҙыра. Етмәһә, империя позицияларынан арынып етмәгән Ырымбур Советына татар ойошмалары тарафынан ныҡ баҫым яһала, башҡорт милли хәрәкәте, уның етәкселәре тураһында төрлө бысраҡ уйҙырмалар таратыла. Ырымбурҙа совет власы урынлашҡанға тиклем Дутов менән тығыҙ бәйләнештә торған татар ойошмалары, яңы властар алдында ярамһаҡланып, башҡорт хәрәкәтен контрреволюционлыҡта, етәкселәребеҙҙе Дутов менән союзда тороуҙа ғәйепләйҙәр һәм тиҙҙән маҡсаттарына ирешәләр: 1918 йылдың 2 февраль төнөндә Башҡорт хөкүмәте ағзалары ҡулға алынып, Ырымбур төрмәһенә ябыла. Бөтөн ерҙә башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙы эҙәрлекләү, төрмәгә ябыу, күпләп атыуҙар киң йәйелдерелә. Орскиҙа Башҡорт ирекле отряды етәкселеге ҡулға алына, һәм татар лидерҙарының талабы буйынса, атыла. Баймаҡта хөкүмәт ағзалары булған И. Иҙелбаев, М. Мағазовтар, башҡа башҡорт аҙаматтары ҡулға алынып, барыһы ла атып үлтерелә.

Муса Лут улы Мортазин 1917—1918 йылдың ҡышында Мәскәүҙә, Татар-Башҡорт комиссариатында бер ни тиклем эшләп ала. Шунан һуң тыуған яғына, Верхнеуральск өйәҙенә ҡайтып, ҡыҙыл Башҡорт батальоны төҙөргә тырышып ҡарай. Йәғни, ул большевиктарҙың, атап әйткәндә В. И. Лениндың башҡорт халҡына автономиялы республика төҙөргә мөмкинселек бирәсәгенә ысын күңелдән ышана.

Башҡорт милли хәрәкәте өсөн ошондай ауыр заманда яҡташыбыҙ Муса Мортазин бер ҡатлылыҡ күрһәтеп татар революционерҙары менән берләшеп, «Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советына» ағза булып инә һәм Башҡортостанда большевистик позицияларҙа

торған совет республикаһын төҙөү өсөн күп көс һәм энергия түгә. Әммә Ырымбур Советындағы бөйөк державасылыҡ рухы һеңгән большевиктар, ике ай ҙа үтмәҫтән был яңы органды ла ҡыуып тараталар.

Баймаҡ ваҡиғалары һәм Башҡорт хөкүмәтенең төрмәгә ябылыуы, халыҡ араһында асыу һәм көслө нәфрәт кенә уята. Автономия идеяһының большевиктар тарафынан аяҡ аҫтына һалып тапалыуы, үҙаллы дәүләтселек төҙөү булып халҡыбыҙ күңелендә йөҙәр йылдар буйына йәшәп килгән уй-хыялдарыбыҙҙың селпәрәмә килеүе, кантон һәм волость шураларының таратылыуы һәм ҡабаттан өйәҙ идаралыҡтарының (асылда, урыҫтарҙың) хакимлығын тергеҙеү башҡорт иле өсөн ҙур фажиғәгә тиң ине. Был ваҡиғалар милләтебеҙҙе советтарға һәм большевиктарға дошман көстәр ҡосағына ырғытыусы төп сәбәптәр булды.

1918 йылдың яҙынан башлап халҡыбыҙ большевиктарға ҡаршы көрәшеү өсөн коралға тотона. Иң тәүге уңышлы операция итеп Дутов казактары менән берлектә 4 апрель көнө (1918 йыл) Ырымбурға яһалған һөжүмде, төрмәлә үлем язаһы көткән Башҡорт хөкүмәте ағзаларын ҡотҡарыуҙы атарға була.

Һығымта яһап, шуны әйтергә кәрәк: башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең беренсе этабы (1917 йылдың яҙы — 1918 йылдың яҙы) еңелеү, ҡыйралыу менән тамамлана. Башҡорт автономияһы идеяһы Үҙәк Совет хөкүмәте (В. И. Ленин) тарафынан яҡлау тапмай. Башҡарма Үҙәк комитеты (Я. Свердлов) уны танырға теләмәй, урындағы большевистик властар башҡорт хәрәкәтенә «контрреволюцион» тигән енәйәткә тиң баһа бирә, уның менән хеҙмәттәшлек итеүҙән ҡырҡа баш тарта. Был ғына етмәй, Башҡорт автономияһына ҡаршы ысын мәғәнәһендә һуғыш иғлан ителә, автономиябыҙ юҡҡа сығарыла. Татар шовинистары алға һөргән «Татар-башҡорт республикаһын» төҙөү идеяһы Ленин һәм Сталин тарафынан киң яҡлау таба, 1918 йылдың яҙында уны ойоштороу эштәре йәйелдерелә. Ләкин, берҙән, 1918 йылдың йәйендә Башҡортостандың аҡтар ҡулында ҡалыуы, икенсенән, башҡорт халҡының ҡырҡа ҡаршы булыуы арҡаһында, был үле килеш тыуған авантюристик проект тормошҡа ашырылмай.

Башҡорт автономияһын ойоштороусылар (З. Вәлиди һәм уның көрәштәштәре) подпольеға китеп, көрәште йәшерен рәүештә дауам итергә мәжбүр булалар. 1918 йылдың мартынан, тыныс юл менән автономия яулап алыуға һис бер өмөт ҡалмағас, һәр ерҙә ҡораллы башҡорт отрядтарын ойоштороу башлана. Көрәштең беренсе этабында большевиктарға, улар етәкләгән советтарға, ҡыҙыл отрядтарҙың террорына ҡаршы партизан һуғышын киң йәйелдереү күҙ уңында тотола. Беҙҙең төбәктә был эшкә Муса Мортазин, Талха Рәсүлевтар етәкселек итә (тәүгеһе Күбәләк-Тиләү волосында милиция начальнигы, икенсеһе — Тамъян-Ҡатай кантоны начальнигы). Ләкин бөтөн ерҙә лә Совет власы нығынған осорҙа (Миәс, Верхнеуральск, Белорет, Троицк, Силәбе ҡалаларына ҡыҙыл гвардия, эшселәрҙең ҡораллы дружиналары килеп тулған бер мәлдә) быны ғәмәли тормошҡа ашырыу еңелдән булмай.

1918 йылдың апрелендә күтәрелеш үҙәге хәҙерге Әбйәлил районының Әхмәт ауылында (һаҡмар йылғаһы башы) була. Зәки Вәлиди

ошонан тороп, башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте менән етәкселек итә, 57 ваҡ башҡорт партизан отрядтары менән дә бәйләнеш тотола. Иң беренселәрҙән булып, Зәки Вәлиди яныҡа большевиктарҙан ваз кискән Муса Мортазин килә, оҙаҡламай мәшһүр Ғайса Рәсүлевтың улы Талха Рәсүлев та килеп етә. Күп тә тормай Зәки Вәлиди менән Ғ. Рәсүлев икәүләп апрель аҙаҡтарында хәүефле юлға сығалар. Улар Учалы районы аша Кустанайға юл тоталар.

Түләк ауылында (Шартымка станцияһы тирәһендәге был ауыл хәҙер юҡ инде) алтын йыуыу приискыһы хужаһы Ғәҙелшаһ исемле кешелә ял итергә туҡтайҙар. Бай булһа ла, бик йомарт һәм кешелекле була Ғәҙелшаһ. Башҡорт милли хәрәкәтенә матди яҡтан ныҡ ярҙам иткән кеше. Халыҡ араһында абруйлы, аҡыллы, алдан күрә белеү һәләтенә эйә була был яҡташыбыҙ. Үҙе уҡымышлы, урыҫса яҡшы белгән. «Сит ил мөнәсәбәттәре өсөн байтаҡ алтын аҡса, сәйәхәтебеҙҙе дауам итер өсөн аттар бирҙе», — тип, бик риза булып иҫкә ала уның тураһында 3. Вәлиди үҙенең «Хәтирәләр»ендә.

Туңғатарҙа туҡтап, Талханың тыуған ауылы Шәриптә булып, улар юлдарын артабан дауам итәләр. Талха Рәсүлевты 3. Вәлиди поезға ултыртып, кәрәкле ҡағыҙ, документтар, етәрлек алтын, ҡағыҙ аҡса менән тәьмин итеп, Владивостокка, Япон консуллығына, кәрәкһә Японияға барып етергә тигән маҡсат ҡуйып (Япония хөкүмәтенә, киң япон йәмғиәтселегенә Рәсәй мосолмандарының хәле, башҡорт халҡының автономия өсөн көрәше менән таныштырырға ҡушып), уны оҙатып ҡала. Был тарихи факт үҙе генә лә яҡташыбыҙ Талха Рәсүлевтың Зәки Вәлидиҙең уң ҡулы, иң тоғро һәм ышаныслы ярҙамсыһы булыуы тураһында һөйләй.

Шулай итеп, башҡорт халҡының үҙбилдәләнешкә булған хоҡуғын инҡар итеү, демократик юл менән һайланған Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алып төрмәгә ябыу, Башҡорт автономияһын бөтөрөү — Совет власы өсөн дә, башҡорт милләте өсөн дә ҡот осҡос фажиғә ул. Был сәйәси хата ғына түгел, ә большевистик диктатура тарафынан эшләнгән ғәфү итмәҫлек, быуындан быуынға һөйләй торған енәйәт. Дөйөм алғанда, «урыҫ азатлығы» заманы (1917, октябрь — 1918, июнь) башҡорт халҡы күңелендә ауыр, йән өшөткөс тәьҫир ҡалдыра, уға ҡарата иғлан ителмәгән һуғыштың, террорҙың тәүге этабы булып күҙ алдына баҫа. Икенсе төрлө әйткәндә, Октябрҙан (1917) һуң Кремлдең яңы хакимдары, милләттәрҙең үҙбилдәләнешен яҡлап ҡыланһалар ҙа (икейөҙлөлөктөң классик өлгөһө) асылда, халыҡтарҙы колониаль быҒауҙан ыскындырмаҫ өсөн төрлө мутлыҡ, хәйлә юлына баҫтылар, бер ниндәй енәйәт алдында ла туҡтап ҡалманылар, һөҙөмтәлә, башҡорт милләте үҙ дәүләтселеген тергеҙеү өсөн көрәштә (автономия формаһында) Рәсәйҙә башҡа бер милләт тә килтермәгән ҡорбан килтерҙе — 300 мең башҡорт 1917—20 йылдарҙа һәләк булды. Беҙҙең шуны оноторға хаҡыбыҙ юҡ: башҡорт халҡына автономия өҫтән (юғарынан) бүләк рәүешендә бирелмәне, ул һуғышып, даръялай ҡан түгеп яулап алынды. Мәскәүҙең большевистик етәкселеге (Ленин, Сталин) башҡорт автономияһын 2 йыл аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәткәндән һуң, тик 1919 йылда ғына танырға мәжбүр булды.

# БЕҘЕҢ ТӨБӘКТӘ СОВЕТ ВЛАСЫНЫҢ УРЫНЛАШЫУЫ (1917 октябрь — май, 1918 йыл)[1]

Башҡортостандың үҙәгендә, Өфө—Стәрлетамаҡ тирәләрендә, совет власы (большевиктарҙың хакимлығы) 1917 йылдың октябрь аҙаҡтарында уҡ еңһә лә, Уралда, Көньяҡ Уралда ул күпкә һуңлап урынлаша. Бының үҙ сәбәптәре бар. Миҫал өсөн, беҙгә терәлеп ятҡан Белорет ҡалаһын алайыҡ. 1917 йылдың яҙында бында урындағы эсерҙар ойошмаһы 2000-дән ашыу ағзаны берләштерһә, большевиктар ячейкаһы бер нисә генә кешенән тора. Уларҙың да һис бер абруйы булмай. Петроградтағы октябрь (1917 йыл) ваҡиғаларынан һуң, башында Точисский тигән авантюрист торған Белорет большевистик ойошмаһы (50 коммунисты берләштергән була) һөжүмгә күсеп, ҡалала власты үҙ ҡулына алырға тырыша. 1918 йылдың ғинуарында Петроградтан мул ғына аҡса, ҡорал килтерелә һәм 108 кеше ҡоралландырыла. Ошо ҡораллы көскә таянып, Точисский Белоретта үҙенең диктатураһын урынлаштыра.

Законһыҙ рәүештә бик күп мөлкәт конфискациялана, әллә күпме кеше бер ғәйепһеҙгә атып үлтерелә. 1918 йылдың март аҙағында эсерҙарҙан торған Белорет советы йәшәүҙән туҡтай, уның урынына террор ярҙамында большевистик совет барлыҡҡа килтерелә. Тағы бер факт: Өфө большевиктары үҙҙәренең Белореттағы партиялаштарына ярҙам йөҙөнән өҫтәмә 500 винтовка бүләләр. Шулай итеп, беҙгә терәлеп торған Белоретта һәм уның тирә-яғында совет власы (большевистик диктатура) асылда, штыктар ярҙамында урынлаштырыла. Ошондай уҡ хәл-ваҡиғалар Златоуста, Миәстә һәм яҡын-тирәләге башҡа ҡалаларҙа ла күҙәтелә.

Быға тиклем йәшәп килгән тарих фәне большевиктарҙың урындағы халыҡ араһында ҙур абруйға эйә булыуы тураһында күп яҙһа ла, тарихи документтарҙы ентекләп өйрәнеү бының тап киреһен раҫлай. Уралда һәм Көньяҡ Уралда халыҡтың ышанысы менән файҙаланған көс — ул эсерҙар һәм меньшевиктар булған. Әгәр большевиктар был әлкәләрҙә үҙ власын урынлаштыра алған икән, был демократик юл менән түгел, ә ҡурҡытыу (ҡорал ярҙамында) аша эшләнгән.

Беҙҙең төбәктә оҙаҡ ваҡыт (ярты йылға яҡын) совет власы урынлаша алмауының икенсе сәбәбе — ерҙәребеҙҙең Ырымбур казак ғәскәре ерҙәре менән сиктәш булыуында. 1914 йылда рәсми килтерелгән һандар буйынса, Ырымбур казак ғәскәрендә 55 мең казак хеҙмәт иткән (улар бөтәһе 13 полк тәшкил иткәндәр). Хәҙерге Уйский, Миәс, Верхнеуральский райондарына ҡараған урыҫ ауылдары (элекке казак станицалары) батша Рәсәйе заманында иркенлектә, мул тормошта йәшәгәнлектән, большевиктар хакимиәтенә бер төптән булып ҡаршы сығалар. Беҙҙең төбәктә совет власының урынлашыуына ҡораллы ҡаршылыҡты ойоштороусы һәм аҡ ғәскәрҙең төп көсө шул станицаларҙың казактары булған. Ә беҙҙең төбәккә бик яҡын урынлашҡан Верхнеуральск, Троицк өйәҙ ҡалалары, губерния үҙәге булған Ырымбур оҙаҡ ваҡыт аҡ казактарҙың терәк пункты ролен уйнаған. Совет власын урынлаштырыу өсөн барған көрәштең беҙҙең яҡтарҙа бик оҙаҡҡа һуҙылыуына тағы ла бер нәмә булышлыҡ итә. Ул да булһа,

Ырымбур казак ғәскәре атаманы генерал-лейтенант Александр Ильич Дутов. Ул — Верхнеуральскийҙан 35 саҡрымда урынлашҡан Краснинский станицаһынан. Бында уның таянысы көслө була, яҡташтары йөҙөндә ул һәр ваҡыт яҡлау, ҡурсалау тапҡан, һәр төрлө ярҙамға өмөт итә алған. Шуныһын да иҫтә тотоу мөһим: беҙҙең төбәк халҡы Зәки Вәлиди сәйәсәтен яҡлап, Башҡортостан хөкүмәтенә тоғролоҡ һаҡлаған, ул большевистик диктатураны ла (совет власы), Дутов диктатураһын да берҙәй ҡ ҡабул итмәгән.

1917 йылдың ноябрендә Петроградтан Урал большевиктарына ярҙамға 17-се Себер полкы оҙатыла. Был полкта беҙҙең төбәк егеттәре лә байтаҡ була. Тик Ҡарт Муйнаҡтан ғына Хәмзә, Хәсән Әлимсуриндар, Мәхмүт Мөхәмәтйәров, Хөснулла Бураншин, Мөхәмәтша Шәһәрғазиндар хеҙмәт итә. Полк, бер ни тиклем ваҡыт Екатеринбургта туҡталып торғандан һуң, 20 ноябрҙә Силәбегә килә. Башҡа революцион отрядтар менән көсәйтелгәндән һуң, полкка Троицк ҡалаһы йүнәлешендә һөжүмгә күсергә приказ бирелә. Бер аҙнаға һуҙылған бәрелештәр Токарев етәкселегендәге аҡ казак ғәскәрҙәренең ҡыйратылыуы менән тамамлана. 25 декабрҙә (1917 йыл) Троицкиҙа Совет власы урынлаша. Шулай итеп, өйәҙ ҡалабыҙ булған Троицкиҙа совет власы (большевистик диктатура) штык ярҙамында, йәғни антидемократик ысул менән урынлаштырыла. Был ваҡиға беҙҙең өсөн шуныһы менән әһәмиәтле: Байһаҡал менән Туңғатар волостары ошо өйәҙгә ҡараған булғандар.

Полктың артабанғы юлы Дутовтың Ырымбур ҡалаһындағы аҡ казактарына ҡаршы йәйелдерелгән һуғыш хәрәкәттәренә бәйле. 18 (31) ғинуарҙа (1918 йыл) Дутов Ырымбурҙы ҡалдырып, 300-ләгән һыбайлыһы менән артабан большевистик советтарға ҡаршы көрәште дауам итер өсөн тыуған яҡтарына — Верхнеуральск йүнәлешендә сигенә. Форштад станицаһында атаман Дутов яңы ставкаһын булдыра. 1918 йылдың февраленән апреленә тиклем Верхнеуральск ҡалаһы һәм уның тирә-яғы большевиктарға дошман көстәрҙең көрәш үҙәгенә әүерелә.

Дутов тиҙ арала 13—15 мең кешенән торған һыбайлы ғәскәр туплап, 1918 йылдың февралендә яңынан һөжүмгә күсә. Верхнеуральскийҙы баҫып ала, урындағы советты ҡыуып тарата, 600-ләгән кешене ҡулға алып, төрмәгә яба. Был ваҡиға Көньяҡ һәм Урта Урал большевистик етәкселәрен ҙур хафаға һала.

1918 йылдың ғинуарында Верхнеуральскийҙа үткән өйәҙ съезында башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтен яҡлаусыларҙың өҫтөнлөк алыуына риза булмаған Ахун, Типтәр-Учалы һәм урыҫ волостары вәкилдәре съезды ташлап сығалар. Шуның менән улар Башҡорт автономияһына ҡаршы булыуҙарын асып һалалар, һөҙөмтәлә, 1918 йылдың 5—6 ғинуарында Рәсәйҙә тоҡанған Граждандар һуғышында совет власы тарафынан ҡыйырһытылған, рәнйетелгән (автономиялары аяҡ аҫтына һалып тапалған) башҡорттар дутовсыларға ҡаршы сыҡмайҙар — нейтралитет һаҡлайҙар. Дутовҡа ҡаршы көрәш (казактарҙың быуаттар буйы йәшәп килгән үҙаллылығын, автономияһын бөтөрөргә тырышыу) башында Белорет, Троицк, Силәбе ҡалаларының РКП(б) комитеттары тора. Уларҙың ҡул аҫтындағы Ҡыҙыл Гвардия отрядтары ла тәүҙәрәк тик урыҫтарҙан ғына төҙөлгән була. Әммә бер ни тиклем ваҡыттан һуң

хәл үҙгәрә, дутовсыларға ҡаршы һуғышсыларҙың сафтары артҡандан-арта. Өфөнән, башҡа ҙур промышленность үҙәктәренән килгән Ҡызыл Гвардия отрядтарына ҡыҙыл казактар, Ахун һәм Типтәр-Учалы волосы ярлылары (башлыса фронттан ҡайтҡан һалдаттар) килеп ҡушыла. Һөҙөмтәлә беҙҙең төбәктә совет власының яҙмышы ыңғай хәл ителә.

1918 йылдың феврале һәм март айының беренсе яртыһы Дутовтың базаһы булған Верхнеуральск һәм уның тирәһендәге станицаларҙы аҡ казактарҙан таҙартыу өсөн Белорет, Силәбе һәм Троицк ҡалаларында совет ғәскәрҙәрен туплау менән үтә. Ике удар төркөм ойошторола: беренсе — Белоретта, икенсеһе — Троицкиҙа. Маҡсат: Верхнеуральскийҙы ике яҡтан ҡыҫымға алырға һәм Дутовты юҡ итергә. Ләкин был план барып сыҡмай. Троицкиҙа тупланған төркөмдөң Верхнеуральск йүнәлешендәге һөжүме уңышһыҙлыҡҡа осрай. Отрядтар кире Троицкиға әйләнеп ҡайтырға мәжбүр булалар.

Белорет удар төркөмө ике отрядтан тороп, беренсе Белореттың үҙендә (командиры — И. Волков), икенсеһе — Тирләндә тупланған була (командиры — Прямицын). «Һөжүмгә күсергә», — тигән приказ алғас, Прямицын отряды Муса ауылы аша Наурыҙға ҡарай хәрәкәт итә. Бында дошман заставаһына юлыға, уны тар-мар итә, ләкин приказды аҙағынаса үтәмәй, кире боролоп, Тирләнгә ҡайта.

И. Волков отрядының һөжүме лә уңышлы ғына башлана (18 март Ҡаҙаҡҡол ауылы эргәһендә дутовсылар заставаһы ҡыйратыла), ләкин күп тә үтмәй отряд яңынан Белоретта була.

26 март көнө, отрядтарҙы тулыландырып, командирҙарын алмаштырғас, ҡыҙыл ғәскәрҙәр яңынан һөжүмгә күсә. Н. Фролов отряды (120 һуғышсы) Тирләндән сығып, Яңы Байрамғол ауылы янында Дутовсылар менән бәрелешкә инә, уларҙы сигенергә мәжбүр итә. Күп тә үтмәй, икенсе тапҡыр Наурыҙ ауылы баҫып алына, дутовсылар Верхнеуральск йүнәлешендә сигенә. Екатеринбурга ебәрелгән донесениела: «Наурыҙҙа 120 дутовсы юҡ ителде, 213 ат ҡулға төштө», — тиелә. Әлбиттә, был һандарға ышаныу ҡыйын, сөнки улар күп тапҡыр арттырып күрһәтелгән пропаганда трюгы тиеберәк ҡабул ителә.

Белорет отряды (300 һуғышсы) Н. Константинов командалығында яңынан Ҡаҙаҡҡол ауылын баҫып ала. Әммә Верхнеуральск өсөн барған һуғышта һис уйламағанда һынылыш барлыҡҡа килә. 26 мартта атаман Дутовтың тылында фетнә ҡуба. Бер туған (Иван һәм Дмитрий) Каширидар, ҡыҙыл сотня ойошторо, Форштадтан Верхнеуральскийға бәреп инәләр. Был шул тиклем көтөлмәгәндә була — дутовсылар ҡаушап ҡалалар һәм ҡаланы һуғышһыҙ ҡалдырып, Дутовтың тыуған станицаһы Краснинский йүнәлешендә сигенәләр. Шулай итеп, ҡыҙыл ғәскәрҙәр килеп етеүгә, ҡала инде аҡ казактарҙан азат ителгән була.

Тап ошо ваҡытта, Миәстән беҙҙең төбәк ауылдары аша, үҙенең Өфө отряды менән Михаил Кадомцев үтә. Ул үткән ауылдарҙа ошо отрядҡа ҡушылыусылар ҙа табыла, мәҫәлән, отряд Иманғол ауылында туҡтаған ваҡытта күптәр уға эйәреп китә. Верхнеуральскийға килеп еткәс, Кадомцев ошо районда тупланған совет ғәскәрҙәренең баш командующийы итеп тәғәйенләнә, һуғыш хәрәкәттәре тағы ла ҡырҡыуыраҡ төҫ ала. Дутов контрһөжүмгә әҙерләнә, яңы ғәскәрҙәр туплай.

Әммә хәл ҡыуанырлыҡ булмай. 1500—3000 кешелек ғәскәр менән тоғролоҡ һаҡлаған 6 станицаға таянып (Карагайская, Петропавловская, Краснинская, Кассельская, Остроленская), әллә ни ҙур пландар төҙөп булмай. Ҡаршы яҡ, йәғни ҡыҙыл көстәрҙең көндән-көн арта барыуын да Дутов иҫәптән сығарып ташлай алмай. Румын фронтынан яңы ғына ҡайтҡан Илсе егеттәре хәрби учетҡа инергә тип килгән ерҙәренән Каширин отрядына яҙылалар. Бына улар: Әбделвәли Кәримов, Закир Шакиров, Фәхретдин Шәрәфетдинов, Шайкамал Ғәлиуллин. Уларға шунда уҡ ат биреп, ҡулдарына ҡылыс, винтовка тотторалар. Каширин отрядына Учалы яҡтарынан яңы яугирҙар килеп ҡушыла. Илсенән Вәли Сәғиҙуллин, Шаһикамал Шәрәфетдинов, Ғәйнетдин Сәғитдинов, Ғиззәт Ғәйнуллин, Сәйҙулла Фәйзуллин, Ғәни Бикчәнтәев, Әхмәтвәли Вәлиев, Фәттәх Кәримов, Лотфулла Әһлиуллин, Зия Мирзин, Ғәзимйән Шәһивәлиев, Насретдин Низамов, Таһир Зарипов, Нотфулла Әһлиуллин, Сәйҙулла Хәйруллин. Бер Илсенән генә, тимәк, бөтәһе 23 ҡыҙыл партизан була. Рысайҙан Ибәтулла Хөснуллин, Зиннәт Сибәғәтуллин, Зиннәт Әхмәтшин, Закир Зарипов, Шәрәф Шәйхетдинов, Һиҙиәт Хисмәтуллин, Ҡасим Мәсәлимов, Ираил Баушев, Шәрәфетдин Шәйхетдинов, Миндияр Шәрәфетдинов, Хәкимйән Динисламов — бөтәһе II яугир — Каширин отряды сафтарында совет власын яҡлап һуғыша. Ураҙ ауылынан сыҡҡан каширинсылар: Әһел Хәйерваров, Вәли Әбдрәзаҡов, Ибраһим Нәжметдинов, Сабир Заһиров, Абдулла Сәғәҙәтов, Динияр Ҡорбанов, Ғиниәт Зарипов, Шаһибал Имамов, Хәмит Ғәйнетдинов, Бәлхи Абдулсәғитов, Ғәбит Ғәлиуллин, Ишмөхәммәт Аҡмурзин, Ғимадислам Динисламов, Ғибаҙулла Рәсүлев, Йосоп Шәрипов, Шәүәли Ситдиҡов — бөтәһе

16 кеше. Типтәр-Учалы волосының башҡа ауылдары буйынса мәғлүмәттәр тулы түгел. Учалы ауылынан Каширин отрядында һуғышыусыларҙың бер нисәһе: Мирза Вәлиуллин, Шәймәрҙән Файзуллин, Сәләхетдин Бәшәров, Мөбәрәк Шәмсетдинов; Өргөндән Заһир Ғарипов, Ҡалҡандан Мөхәмәтйәр Бәхтиәров, Мансурҙан Хәким Хәжиәхмәтов, Иманғолдан Латиф Ҡаһиров, Аҡҡужанан Ғ. Һунаршин, Сәфәрҙән Әһлиулла Шәһивәлиев, Рәхим менән Әхмәтхан Әхмәтйәновтар, Дәүләт Мөхәммәтрәхимов, Камалетдин Сәләхетдинов, Ғабдулла Мөхәмәтйәров һәм башҡалар, һығымта яһап, шуны әйтәбеҙ: 1918 йылдың яҙы-йәйе Типтәр-Учалы һәм Ахун волостарынан Ҡыҙыл Гвардияға, башлыса ағалы-ҡустылы Кашириндар отрядына, 600 кеше яҙыла. Улар совет власы өсөн ҡандарын ҡоя, күптәре үҙҙәрен ҡорбан итә. Төптәнерәк уйлаһаң, ошо 600 яҡташыбыҙ ҡулына ҡорал алып, Башкортостан автономияһына, йәғни үҙ-үҙенә ҡаршы көрәшкән, тигән һығымтаға киленә. Был ысынлап та шулай. Миҫал өсөн Белорет хәрби революцион комитетының (большевиктар тарафынан ойошторолоп, диктатор хоҡуҡтарына эйә булған, законлы булмаған орган) 1918 йыл,

12 март көнө ҡабул ителгән ҡарарынан өҙөк килтерәйек: «...еңеп сыҡҡанға тиклем ***өс төп дошманға*** (курсив минеке — Ә. З.) ҡаршы көрәшергә:

1) дутовсылар менән;
2) Башҡортостанға ҡаршы;
3) бөтә донъя буржуазияһы менән».

Йәғни, аңлы рәүештәме, әллә приказ үтәпме (нисек кенә булмаһын), 600 яҡташыбыҙ Башҡорт автономияһына ҡаршы ҡорал күтәрә, большевистик узурпаторҙарға «берҙәм һәм бүленмәҫ Рәсәйҙе» һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итә. Сәйер, әммә факт: XVII—XVIII быуаттарҙа типтәр һәм мишәр отрядтары башҡорт ихтилалдарын баҫтырыуҙа батша властарына ярҙам итһә, 1918 йылдың яҙында-йәйендә шундай уҡ тарихи аналогия беҙҙең яҡтарҙа йәнә ҡабатлана. Власты үҙ ҡулдарына алған большевиктарға Башҡорт автономияһын быуыуҙа башҡорт ерендә йәшәгән килмешәктәр ҙур ярҙам күрһәтә. Нисек кенә йәмһеҙ күренмәһен, был — тарих битенән һыҙып ташлап булмай торған факт һәм бик тә аянысҡы әсе хәҡиҡәт. Беҙ уларҙың йөҙөнә тура ҡарарға тейешбеҙ.

Башҡорт волостары Мулдаҡай һәм Туңғатарҙан да Троицкиҙа большевик Николай Томин ойошторған отрядҡа барып яҙылыусылар табыла. Уларҙың исемлеге бик бәләкәй, ләкин барыбер бар. Бына улар: Мулдакайҙан Ғәффән Исаев, Ялсығолдан Абдулла Шәмиғолов, Шәриптән Мөхәмәтша Әминев, Аҙнаштан Ғәйфулла Ҡунакбаев. Бынан шундай һығымта яһап була: манҡортлоҡ халҡыбыҙға бөгөн генә килгән афәт түгел, ул элегерәк тә осраған, әммә һирәк күренеш булған.

28 мартта Дутов контрһөжүмгә күсеп карай, тик уңышҡа өлгәшә алмай. 29 март көнө Троицк эргәһендә фронт тотҡан дутовсылар еңелеүгә осрай һәм Краснинский станицаһына ҡарай сигенә. Верхнеуральск тирәһендәге төп көстәр ҙә сигенергә мәжбүр булалар. Ошо урында бер иҫкәрмә яһап китеү кәрәк булыр. Типтәр-Учалы һәм Ахун волосы егеттәре күпләп Ҡыҙыл Гвардия отрядтарына яҙылып, яңы власть өсөн йәнтәслим һуғышып йөрөгән бер мәлдә, районыбыҙ сигендә ятҡан Һәйтәк ауылы башҡорттары был власҡа ҡаршы һуғыш асалар, һәйтәктәрҙең ҙур булмаған отряды батырҙарса һуғыша, бигерәк тә ҡаты бәрелештәр 1918 йылдың йәйендә була.

Шулай итеп, март айы ла үтеп китә, ә совет власы беҙҙең төбәккә һаман да килеп етә алмай. Был факт шуныһы менән дә әһәмиәтле: барлыҡ Башҡортостанда совет власы урынлашмаған 1 генә төбәк тороп ҡала — ул да булһа беҙҙең төбәк (Учалы районы ауылдары һәм Әбйәлил районының ҙур өлөшө). Әлбиттә, беҙҙең төбәккә ҡағылышлы үрҙәге факттар ошоға тиклем йәшереп киленделәр, сөнки улар рәсми историографиялағы «Совет власының триумфаль еңеүе» тураһындағы мифҡа ҡаршы килә ине. Әгәр октябрь путчынан (1917 йыл) һуң 5 ай үткәс тә әле илдең ҡап уртаһындағы ҙур ғына территорияла яңы, большевистик власть һаман да нығына алмағанда ниндәй триумфаль еңеү тураһында һүҙ алып барырға була? Башкортостанда яңы власть тыныс юл менән еңгән, йәнәһе башҡорт халҡы совет власын (большевистик диктатураны) ҡолас йәйеп ҡаршы алған тигән йәнә бер миф та ысын-барлыҡҡа тап килмәй. Тарихи факттар быныҢ киреһен раҫлай: архив материалдарын ентекле өйрәнеү төбәктә совет власының штыктар ярҙамында ғына урынлаштырылғанлығын асыҡларға ярҙам итә. Ә ул материалдар халҡыбыҙҙың яңы власть ҡулы аҫтына инергә атлығып тормағанлығын һүрәтләй. Шулай уҡ беҙҙең күршеләребеҙҙә — Ырым-

бур казак ғәскәренә ҡараған станицаларҙа ла совет власы ныҡ һуңлап, фәҡәт 1918 йылдың мартында-апрелендә генә урынлаша.

Апрель башларында Дутов ғәскәрҙәренең ҡалдыҡтары Краснинский станицаһында ҡамауға алына. 4 апрель көнө атаман, ҡулсаны өҙөп, көньяҡҡа, Ырымбур яғына йүнәлә, һуғыш хәрәкәттәре артабан дауам итә. Беҙҙең тирәлә ул әҙерәк баҫыла төшһә лә, Ырымбур тирәһендә хәлдәр ҡатмарлаша. Ни өсөн тигәндә, 4-се апрель көнө дутовсылар һәм ҙур булмаған башҡорт отряды Ырымбурға баҫып инәләр. Ырымбурҙарға ярҙамға ашығыс рәүештә Николай Каширин отряды ебәрелә (был отрядта Учалы егеттәре лә байтаҡ була). 2 аҙна тигәндә 2 эскадрондан, 2 йәйәүле ротанан торған был отряд Ырымбурға барып етә һәм Орск тирәһендәге һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнаша.

Был ваҡытта Көньяҡ Уралдағы совет ғәскәрҙәре яңынан өс төркөмгә бүленә. Беренсе төркөм Верхнеуральскийҙа тора. Баш командующийы — Михаил Кадомцев, икенсеһе — Троицк төркөмө, уның башында Николай Томин тора. Өсөнсөһө — Ырымбур төркөмө. Баш командующийы — Николай Каширин. Дутовсыларға ҡаршы һөжүм 3 яҡтан алып барыла. 9 апрелдә Троицк яғынан Блюхер етәкселегендә килгән ҡыҙыл ғәскәрҙәр яңынан Краснинский станицаһын атакалайҙар. Иван Каширин ғәскәрҙәре һуғышып килеп, Карагайканы ала.

12 апрелдә ошо отрядтың Н. Иванов отделениеһы Ахун ауылына инә. Ахунда был мәлдә совет власы яклылар байтаҡ була. Мәҫәлән, фронтовик Шәйкамал Кәримов, Ғәббәс Усманов, Вәлиулла Мөрсәлимов, уҡытыусы Ниғәмәт Ғәзизов һ.б. Ошо активистарҙың тырышлығы менән 13 апрелдә сход үткәрелә. Шулай итеп, беҙҙең төбәктә беренсе совет Ахунда 1918 йылдың 13 апрелендә ойошторола. Ул волость советы тип атала, һалдат Вәлиулла Мөрсәлимов — хәрби комиссар, Ғәббәс Усманов — аҙыҡ-түлек буйынса комиссар, Сәләх Шәрипов — ер мәсьәләләре буйынса, Имам Сибәғәтуллин сәркәтип итеп һайлана.

Яңы һайланған волость советы тәүге көнөнән үк үҙенең саралары менән халыҡтың ҡотон ала. Ауыл «кулактарына 100000 һум контрибуция һалына, 6500 бот (104 тонна) игендәре тартып алына, уның 4500 бото шунда уҡ Белоретҡа оҙатыла. Волость советы баш-баштаҡлыҡ ҡылып, ауыл «кулагы» Ә. Мөрсәлимовты һәм батша охранкаһы хеҙмәткәре Н. Даушевты атырға тигән ҡарар сығара.

Һуғыш хәрәкәттәре совет ғәскәрҙәре өсөн уңышлы тамамлана. Ике көн ҡаршы торғандан һуң, Краснинский станицаһы 11 апрелдә аҡ флаг күтәрә.

1 майға ҡыҙыл отрядтар килгән ерҙәренә кире ҡайтып китәләр. Учалы яҡтарында ла, нинһайәт, ярты йылға һуңлап, совет власы (большевиктарҙың хакимлығы) нығына. Учалы ауылында сход йыйылып, волость советы һайлана. Председателе — Иманғол кешеһе, фронтовик Ғүмәр Ихсанов була. Апрель-май айҙарында районыбыҙ ауылдарында ауыл советтары барлыҡҡа килә.

1918 йылдың 24 майында Верхнеуральскийҙа советтарҙың беренсе өйәҙ съезы эшен башлай. Съезда Иван Каширин рәйеслек итә. Мәғлүмәт өсөн: Иван Каширин — элекке казак офицеры, фронтовик, званиеһы — подъесаул. 1880 йылда Верхнеуральскийҙа тыуған. Граждандар һуғышы геройы исемен йөрөтә. 1925 йылда Граждандар

һуғышы осорондағы батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. 1937 йылда репрессиялана.

Йомғаҡлау. Ҡаты һәм аяуһыҙ һуғыштарҙан һуң, 1918 йылдың апрель-май айҙарында беҙҙең төбәктә большевиктарҙың хакимлығы урынлаша. Башҡорт автономияһының һуңғы осмоттары бөтөрөлә: хөкүмәт тарафынан урындарҙа ойошторолған үҙидара органдары юҡ ителә. Уларҙың башында торған етәкселәребеҙ подпольеға китергә мәжбүр була. «Совет власы» лозунгыһы аҫтына йәшеренеп, большевиктар батша Рәсәйе заманындағы административ-территориаль бүленеште яңынан аяҡҡа баҫтыралар: һәр ауылдағы, волостағы власть башына большевистик рухтағы кешеләрҙе ҡуйып, уларҙы өйәҙ урыҫ администрацияһына (өйәҙ советы) буйһондоралар. Башҡорт автономияһын ҡабул итмәйенсә, уны тар-мар иткән большевиктарға хеҙмәт итеү, улар ойошторған советтарҙа вазифа биләү — ул ваҡыттағы конкрет тарихи шарттарҙа башҡорт кешеһе өсөн үҙ халҡыңа, милләтеңә хыянат итеүгә тиң ине. Ҡыҫҡаһы, совет власының еңеүе — автономия идеяһының еңелеүе булды. Уны яңынан тормошҡа ашырыу тик совет власын ҡолатыу юлы аша ғына мөмкин ине. Шуға күрә беҙҙең төбәктә совет власы (большевистик диктатура) оҙаҡ йәшәп, нығынып китә алманы, тиҙ арала (1918 йылдың йәйендә) ҡолатылды. Автономиябыҙҙы тормошҡа ашырыр өсөн киң мөмкинселектәр асылды.

## СОВЕТ ВЛАСЫНЫҢ БӨТӨРӨЛӨҮЕ

27 майҙа советтарҙың өйәҙ съезында ҡатнашҡан делегаттарға телеграмма уҡып ишеттерәләр: Силәбе аҡ чехтар ҡулында! Съезд ашыҡбошоҡ үҙ эшен тамамлай. Был хәбәр делегаттар аша бөтә ауылдарға ла тарала. Яңынан Верхнеуральскийға тирә-яҡ ауылдарҙан ир-егеттәр ағыла, ҡораллы отрядтар төҙөлә.

Аҡ чехтар тиҙ арала Мулдаҡай волосын баҫып алалар һәм көньяҡ йүнәлештә Верхнеуральск — Белорет һөжүмдәрен йәйелдерәләр. Чехтарҙың төп көстәре был ваҡытта Златоуст-Өфө һәм Екатеринбург йүнәлештәрендә, ҙур булмаған отрядтары — Троицкиға ҡарай һөжүм итәләр. Троицкизы Николай Томиндың 3 мең кешенән, 2 броневиктан торған отряды обороналай. Ләкин 18 июнь көнө томинсылар ҡаланы ҡалдырып, Верхнеуральск йүнәлешендә сигенергә мәжбүр булалар. 24 июндә Троицк партизан отряды Верхнеуральскийға инә, бындағы совет власы яклы көстәрҙе нығыта.

3 июнь көнө Иван Каширин етәкселегендәге отряд, Верхнеуральскийҙан сығып, төньяҡтан яҡынлашып килгән чехтарға ҡаршы поход башлай. 5 июнь көнө Ахунда митинг үткәрелә. И. Иванов отрядына үҙ теләктәре менән 100 кеше яҙыла. Бына шуларҙың бер нисәһе: Шәйкамал һәм Әхмәткамал Кәримовтар, Ғәйнулла Ғәфүров, Шәриф Шәйәхмәтов, Ғәлимйән Шакиров, Муллағәли Мөниров, Ғибаҙулла Фәйзуллин, Закирйән Усманов, Ниғәмәтйән Мөхәмәтшин, Әхмәтйән Ясаков, Ғәлиулла Фәхретдинов, Сафа Мәсәүиров һ.б. Яҡын тирәләге Иманғол һәм башҡа ауылдарҙан 35 кеше килеп ҡушыла. Шулар араһында Илтабандан Х. Ғәлиәскәров та була.

Каширин отряды чехтарға ҡаршы юлын Асуҙы, Мансур, Малай-Муйнаҡ ауылдары аша дауам иткән. Вознесенкала аҡтарҙың алғасҡы отряды менән бәрелешкә инеп, Туңғатарға ҡарай борола. Ләкин бында ла туҡталмай, Уйское станицаһы йүнәлешендә хәрәкәт итеп, Пичугин ауылын ала. Яңынан боролоп килеп, Поляковкаға инә. Бында кулактарға 120000 һум контрибуция һалып, бер нисә тиҫтә аттарын тартып ала. Погорельский етәкселегендә Верхнеуральскийҙан сыҡҡан икенсе ҡыҙыл отряд та Наурыҙ, Ураз, Илтабан, Ҡалҡан ауылдары аша үтеп, Поляковкаға килеп етә.

Гражданда һуғышында ныҡлы тыл булмай. Бының шулай икәнлеген түбәндәге ваҡиғалар раҫлай. Иванов отрядының Ахунды ҡалдырып китеүенә күп тә үтмәй, ауылды аҡ казактар килеп баҫа. Совет активистарын эҙәрлекләү башлана. Вәлиулла Мөрсәлимов боҫоп өлгөрә. Ә бына Әхмәтвәли Дауышев тотола һәм ҡулға алынып, Верхнеуральск төрмәһенә оҙатыла (ауылына кире әйләнеп ҡайтмай, үлтерелә). Ошоға оҡшағанырақ хәл Поляковкала ла була. Көтмәгәндә ауылды аҡ чехтар килеп баҫа, ревком ҡулға алына. Совет активистары Миәс төрмәһенә оҙатыла. Большевик Бородин Ф. Г. ауыл ситенә сығарып атыла.

Поляковкала тупланған ҡыҙыл ғәскәрҙәр Уйский станицаһы йүнәлешендә һөжүмгә күсә. Атакаға барып, Выдрино ауылын алалар. Ошонда нығынып аҙна (!) буйына уңышһыҙ һуғыш хәрәкәттәре алып баралар, һорау тыуа: аҙна буйына әллә ни стратегик әһәмиәте булмаған Уйскийға һөжүм итеүҙең маҡсаты ниҙә булды икән? Уйскийҙы баҫып алыу ҡыҙыл казактарға ниндәй өҫтөнлөк бирер ине?

Аҡ казактар бик ныҡ ҡаршы торалар. Ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең дөйөм рухы түбән булыуы, өҫтәүенә уңышһыҙ хәрби операция хыянатҡа этәрә. Дошманға тылдан һөжүм итер өсөн Фомино ауылына ебәрелгән 2 эскадрон аҡ казактар яғына сыға. Был мәкерле хыянат хаҡында төп көстәрҙең бер ни ҙә һиҙмәүенән файҙаланып, был эскадрондар хәрби лагерға кире әйләнеп ҡайталар һәм ҡылыстарын ҡындарынан һурып алып, үҙҙәренең кисәге яуҙаштарына ташланалар. Был көтөлмәгән хәл Иван Каширин командалыҡ иткән ҡыҙыл ғәскәрҙе ҡот осҡос ҡыйралыуға дусар итә. Юғалтыуҙар бихисап була, хыянатсылар менән һөжүмгә күскән аҡ казактарҙың ҡылысынан иҫән ҡалған, тамам күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән каширинсылар, Ахун ауылы тарафына сигенә. Каширинда хеҙмәт иткән Типтәр-Учалы һәм Ахун волосы ирегеттәренең күбеһе ошо ҡыйралышта һәләк була.

17 июндә ҡыйралған отрядтың осмоттары Ахун ауылына килеп инә. Ике волость — Ахун һәм Типтәр — Учалы буйынса мобилизация иғлан итә. 20 июндә Ахунда ҙур сход булып, 250-ләп кеше Ҡыҙыл Армияға яҙылырға теләк белдерә. Шунда уҡ айырым Ахун ротаһы ойошторола. Командиры итеп волость советы ағзаһы Вәлиев Кәшәф һайлана.

Шулай итеп, Ахун ауылында бер нисә көн тороп, яраларҙы уңалтып, сафтарҙы тулыландырып алғандан һуң, каширинсылар яңынан һөжүмгә күсергә тырышып ҡарайҙар. Беренсе бәрелеш һәйтәк ауылы эргәһендә була. Алыш ҡыҫҡа, әммә ҡан ҡойғос булыуы менән айырылып тора. Һәйтәк ауылы бер нисә сәғәткә ҡыҙылдар ҡулына күсә. Отряд үҙенең юлын дауам иттереп, волость үҙәге Асыуҙы ауылына

йүнәлә. Бында аҡтарҙың ҙур булмаған отрядын тарҡатып, төнгө ялға туҡтайҙар. Иртәгеһен отряд ауылды ҡалдырып, Ахун йүнәлешендә хәрәкәт итә. Разведка ауылдың аҡтар ҡулында булыуын хәбәр иткәс, Каширин отряды Ахунды урап үтеп, Верхнеуральскийға әйләнеп ҡайта. Отрядтың кинәт кенә өйәҙ ҡалаһына ҡарай юл алыуының сәбәбе шул: Троицк ҡалаһының 18 июндә аҡ чехтар тарафынан баҫып алыныуы тураһында хәбәр алыу менән, Каширин бар булған пландарынан баш тартып, Верхнеуральскийҙы обороналау өсөн тиҙерәк ҡайтып китергә кәрәк, тигән фекергә килә.

Шулай итеп, 1918 йылдың июнь аҙаҡтарында беҙҙең төбәк ауылдарында ҡыҙыл ғәскәрҙәр ҡалмай, аҡтар каширинсыларҙы ҡыҫырыҡлап сығарып, большевиктарҙың хакимлығын, ошо хакимлыҡты тормошҡа ашырыусы төп ҡорал — совет власын бөтөрәләр.

23 июндә Верхнеуральскийҙа ҡыҙыл командирҙар ултырыш үткәрә. Берләшкән көстәрҙең командующийы итеп Иван Каширин һайлана. Башҡорт ауылдарын урап үтеп, казак станицалары аша төньяҡҡа хәрәкәт итеп, Уйское, Кундравы аша Силәбе—Златоуст фронтында һуғышыусы ҡыҙыл ғәскәрҙәргә коридор ярырға тигән ҡарарға киләләр. Каширинсылар ҡыйратылыуҙарҙан һуң ныҡ хәлһеҙләнгәнлектән, Верхнеуральскийҙы һаҡларға ҡалдырыла. Ә поход ойошторов Троицкиҙан килгән Николай Томиндың 1300 кешенән торған партизандар отрядына йөкмәтелә.

Томинсылар бойороҡто үтәп, Петропавловка, Ҡыйҙыш ауылдарын һуғышып ала. 2 июль көнө Троицк партизан отряды, бынан 2—3 аҙна элек каширинсылар булдыра алмағанды, йәғни Уйский станицаһын алыуға өлгәшә. Уйский станицаһы өсөн һуғыш бик ҡаты була, ҡыҙыл партизандар бер нисә атака яһағандан һуң ғына станица улар ҡулына күсә. 2 июль көнөндәге бәрелештәр ҡаты була. Һөжүмде дауам итеп, ҡыҙыл ғәскәрҙәр Сухтелинская станицаһына бәреп инәләр. Аҡ ғәскәрҙең ҡаршылығы ла көндән-көн көсәйә. Кундравы станицаһында 1-се һәм 2-се казак полктары төҙөлөп, Уйский станицаһы районында һуғышыусы аҡтарға ярҙамға ебәрелә, һөҙөмтәлә, һөжүм итеүсе ҡыҙыл ғәскәрҙәр оборонаға күсеп, сигенергә мәжбүр булалар. Уйский станицаһы бер нисә тапҡыр ҡулдан-ҡулға күсә, аҡтарҙың ҡыҫымы көсәйгәндән-көсәйә.

1-се казак полкы, томинсыларҙы ҡыҫырыҡлап, Ахун ауылына инә, 2-се казак полкы Асыуҙы ауылы эргәһендә ҡыҙылдарҙың ҙур отрядын тар-мар итә, күп әсир һәм ҡорал баҫып ала. Һөжүмде дауам иттереп, был 2 полк (ике колонна) Карагайская станицаһы казактарынан төҙөлгән 3-сө казак полкы ҡыуып етә. Ошо 3 полктың берләшкән көстәре Үрләде станицаһына һөжүм итәләр. Аҡ казак яуының ҡаты ҡыҫымы аҫтында ҡыҙыл ғәскәрҙәр Верхнеуральскийға ҡарай сигенә. Троицк яғынан Верхнеуральск яғына тағы 1 колонна аҡ казак ғәскәре һәм Анненков отряды килә.

Ҡала эргәһендә ҡаты бәрелештәр була. Еңеүҙән дәртләнгән аҡ казак полктары бер туҡтауһыҙ атакаға баралар, һуғыш ҡала эсенә күсә. Бер туҡтауһыҙ еңелеүҙәрҙән, күп юғалтыуҙарҙан ҡыҙылдарҙың мораль һәм хәрби рухы бик ныҡ ҡаҡшай. Аҡ казактар ҡалаға инә. Ҡыҙылдар тәртипһеҙ рәүештә Белорет тарафына сигенә. Иван Каширин бар

булған көстәрҙе туплап контрһөжүмгә күсә һәм ҡаланы кире ҡайтарып ала, әммә уны оҙаҡ ҡулында тота алмай. Верхнеуральскийға аҡ казактарҙың көслө төркөмө бәреп инә һәм каширинсыларҙы ҡаланан ҡыуып сығара. Был ваҡиға 1918 йылдың 7 июлендә була. Ылауҙар, ғәскәрҙәр Ҡаҙаҡҡол ауылы аша үтеп, Урал тауҙарына артыла.

Верхнеуральскийҙы ҡалдырған ҡыҙыл ғәскәрҙәр 8 июль көнө Белоретҡа инәләр. Уларҙың артынан аҡ казак полктары эҙәрлекләп килә. Каширинға ҡыҙылдарҙың терәк пунктына әйләндерелгән Белорет ҡалаһын һаҡлап алып ҡалыу, аҡ казактарҙың баҫып инеүенә юл ҡуймау өсөн бөтәһен дә эшләргә тура килә. Иң тәүҙә ҡала халҡының ышанысын яулау бурысы килеп баҫа. Ни өсөн тигәндә, Белоретта большевик Точисский урынлаштырған деспотия һәм тиранияға каширинсыларҙың иҫтәре китә, асыуҙарының сиге булмай. Белоретта большевиктар урынлаштырған «тәртиптәр» батша Рәсәйе заманындағынан күпкә ҡатыраҡ һәм түҙеп торғоһоҙ була. Бер ғәйепһеҙгә атыуҙар, мөлкәтте конфискациялау Белоретта ғәҙәти хәлгә әйләндерелгән була.

Точисский, ҡалала сикләнмәгән власҡа эйә булған түрә булараҡ, Каширидың үҙенә бер һүҙһеҙ буйһоноуын талап итә — ҡыҙыл ғәскәрҙәр менән үҙе идара итергә теләй. Асыуҙары ҡабарған казактар тәүҙә Точисский менән һөйләшеп, килешергә тырышып ҡарайҙар, әммә сама тойғоһон юғалтҡан диктатор менән һөйләшеү бер һөҙөмтә лә бирмәй. Был тартҡылаш Белорет большевиктарының башлығы Точисскийҙың каширинсылар тарафынан атып үлтерелеүе менән тамамлана. 10 июлдә Белорет ҡалаһы байрам төҫөн ала: урамдарҙа йыр-моң ағыла, халыҡ тантана итә, халыҡ ҡыуаныстан казактарҙы ҡулда ғына йөрөтөр сиккә етә. Ҡала халҡының ҡыуанысы шул тиклем була, хатта ҡалаға яҡын уҡ килеп еткән аҡ казак полктарына ла иғтибар итмәй. Эш Точисскийҙы атып үлтереү менән генә сикләнмәй — ҡалалағы ҡалған большевиктар ҙа ҡулға алына, төрмәгә ябып өлгөрөлмәгән 2 большевикты ҡала халҡы өҙгөләп ташлай — большевиктарға ҡарата халыҡтың нәфрәте шулай көслө була. Ә Точисскийҙың кәүҙәһен тәүҙә сүплеккә ырғыталар, ләкин был ғына бик аҙ күренә, — уның мәйете өҫтөнә дегет ҡойоп, ут төртәләр. Белореттан шул көндә үк ян-яҡҡа «Точисскийҙың бандаһын ҡыйратыу тураһында» хәбәр иткән телеграммалар ебәрелә. Шулай итеп, бындағы большевистик идаралыҡ йәшәүҙән туҡтай .[2]

Ошо айҡанлы укыусылар иғтибарын Точисскийҙың йорт-музейының тышына ҡуйылған мемориаль таҡтаға йүнәлтке килә. Унда түбәндәге һүҙҙәр бар: «В этом доме в ночь с 17 на 18 июня от вражеской пули эсера-белогвардейца погиб первый руководитель белорецких коммунистов Павел Варфоломеевич Точисский». Быны, әлбиттә, коммунистик идеология хөкөм һөргән дәүерҙә тарихты боҙоп күрһәтеү, йәғни күрәләтә фальсификация яһау өлгөһө тип баһаларға кәрәк. Шуға күрә беҙгә үҙ тарихыбыҙға ҡарата яңы, объектив ҡараш булдырыу зарур.

Белоретта большевиктарҙың хакимлығын бөтөрөп, Каширин ҡала халҡының ышанысын яулай, ҡыҙыл казактарҙы эшселәрҙең һәм дөйөм алғанда бөтөн ҡала халҡының яклаусыһы һәм һаҡлаусыһы итеп таныта. Һөҙөмтәлә, Верхнеуральскийҙан туҡмап сығарылған каширинсы-

лар Белорет эшселәренең яҡлауын таба һәм уларға аҡ казактарҙың, уларға ярҙамға ебәрелгән генерал Ханжиндың «тештәре үтмәй».

16 июль көнө Белоретта яңы тантана: Ырымбур яғынан Николай Каширин һәм В. Блюхер отрядтары килеп етә. Шул уҡ көндә, бөтә отрядтарҙың вәкилдәре ҡатнашлығында, киңәйтелгән кәңәшмә уҙғарыла. Унда яңы Баш командующий итеп Николай Каширин һайлана. Уның урынбаҫары итеп Блюхер күрһәтелә.

Ә фронт был ваҡытта Волга йылғаһына ҡарай тәгәрәй. Ырымбур, Өфө, Силәбе — аҡтар ҡулында. Шуға күрә Ҡыҙыл Армияның төп көстәренә барып ҡушылыу алғы планға сыға. 18-се июлдә Белоретта тупланған ҡыҙыл ғәскәрҙәр (8000 яугир) Ҡыҙыл Армияның төп көстәренә ҡушылыу өсөн поход башлай. Верхнеуральск һәм артабан казак станицалары аша (Уйский, Кундравы) барып, Екатеринбург тирәһендә фронт тотҡан төп көстәргә ҡушылыу. Был пландың авторҙары Иван һәм Николай Кашириндар була.

Томин етәкселегендәге ғәскәри төркөм Ҡаҙаҡҡол ауылы эргәһендә аҡтарҙың ҡаты ҡаршылығына осрай. Өс көн дауам иткән (18, 19, 20 июль) алыштан һуң ғына, Ҡаҙаҡҡол ҡыҙылдар ҡулына күсә. Троицк отрядынан өс йүнәлештә: 1) Муса ауылы; 2) Сораман-Наурыз;
3) Ҡобағош ауылы, — разведка ебәрелә.

Верхнеуральск төркөмө (Иван Каширин) Аһылай, Рәхмәт, Абҙаҡ ауылдары йүнәлешендә һуғыш хәрәкәттәре алып бара.

Оло юлдан Верхнеуральскийға ҡарап һөжүм итеүсе Троицк отрядына бигерәк ауырға тура килә, сөнки аҡтар туҡтауһыҙ контратакаға күтәрелә. Ҡаҙаҡҡол ауылы тирәһендә аҡтарҙың иң яҡшы көстәре тупланған булған: Анненков отряды (500 ҡылыс һәм штык, 2 туп), офицер ротаһы, артиллерия батареяһы. Томинсылар ҙа бик сая һуғышалар. Һөҙөмтәлә, 20 июль, иртәнсәк улар Ҡаҙаҡҡол ауылынан көнбайышта һәм төньяҡ-көнсығышта, бик ҡулай позиция биләйҙәр. Ә Разин полкы сотнялары алға табан хәрәкәт итеп, Муса һәм Сораман ауылдары эргәһендә дошман кавалерияһы менән бәрелешкә инәләр. Разинсыларҙың бер сотняһы, пехота ярҙамында Сораман ауылы эргәһендәге ҡалҡыулыҡта нығына, дошмандың ике рота пехотаһының һәм ике кавалерия сотняһының атакаларын кире ҡаға. 21 июль көнө Томин, Сораман янындағы отрядты көсәйтеп, дошманға хәл иткес удар яһай һәм аҡтарҙы сигенергә мәжбүр итә.

Һуғышҡа яңы көстәр индерелә: 21 июлдә Ҡаҙаҡҡол ауылына Белореттан Урал отряды килә (командиры — Блюхер). 22 июлдә Баймаҡ отряды өҫтәлә. Был ике отряд Троицк отрядының позицияларын биләй. Томинсыларға яңы бурыс ҡуйыла: төньяҡ-көнсығыш йүнәлешендә, Учалы ауылына ҡарай һөжүм йәйелдерергә. Ошо планды тормошҡа ашырып, 22 июль көнө томинсылар Наурыҙҙы ала. Ҡолош, Иҫтамғол ауылдары йүнәлешендә разведка ебәрелә. Шулай итеп, томинсылар төп көстәрҙең һул флангыһын уңышлы ҡаплап, алға баралар.

Блюхерсыларға: «Вятский хуторын алып, 22 июлдә Верхнеуральск ҡалаһын дошмандан азат итергә!» — тигән бойороҡ еткерелә. Әммә аҡтарҙың ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтеүе арҡаһында, был фарман үтәлмәй.

Вятский хуторы менән Өлкән Боғаҙаҡ эргәһендә ҡаты бәрелештәр була, улар бер нисә тапҡыр ҡулдан-ҡулға күсә.

Троицк отрядының разведкаһы ла ҙур юғалтыуҙарға осрай. Разин полкының 3-сө сотняһының взводы Сәфәр ауылын үтеп киткәс, аҡ казактарға тап була һәм тулыһынса ҡыйратыла, уларҙың бер нисә яугиры ғына иҫән ҡала.

25—26 июлдә Верхнеуральск өсөн барған алыш шул тиклем киҫкенләшә, хатта һәр ҡалҡыулыҡ, һәр артылыш күп ҡан ҡойоп яулап алына.

28 июль көнө ғәскәрҙәр Ҡайынлы тауға атакаға бара. Ҡыҙыл партизандарҙы атакаға баш командующий Николай Каширин үҙе күтәрә. Тау алына, әммә командующийҙың аяғы яралана, шул сәбәпле дөйөм командалыҡ итеү Иван Каширинға күсә. Томинсылар 28 июлдә, күп юғалтыуҙар кисереп, икенсе тапҡырға Наурыҙҙы ала. 29 июль көнө төнгө атака менән Аҡтүбә (Извоз) тауы алына. Ҡалаға юл асыҡ! Верхнеуральскийҙа торған башҡорт ротаһы (командиры Муса Мортазин), бер ярым сотня аҡ казак, ҡаланы ҡалдырып сигенергә мәжбүр була. Ҡыҙылдарҙың разведкаһы ҡалаға инә, әммә төп көстәр урындарында ҡала. Сөнки артабан да һуғышып алға барыуҙың, һөжүмде дауам иттереүҙең мәғәнәһе ҡалмай: Екатеринбург 25 июль көнө аҡтар ҡулына күсте, тигән хәбәр килә.

Ике аҙнаға һуҙылған был алыш Ҡыҙыл Армияның төп көстәренә барып ҡушылырға тигән төп маҡсатҡа ирештермәй. Поход маршрутында билдәләнгән тәүге ҡала — Верхнеуральск алына, әммә ул да ҙур юғалтыуҙар аша ғына мөмкин була: 150 яугир ҡорбан була, тағы ла 150-һен дошман әсир итә, 350 кеше яралана. Һөҙөмтәлә, 1 август көнө ҡыҙыл ғәскәр кире Белоретҡа борола.

Белоретҡа ҡайтҡас, командирҙар яңынан кәңәшмәгә йыйыла. Верхнеурал походында ҡаты яраланған Николай Каширин планының тормошҡа ашмауы, ғәскәрҙә Кашириндарҙың абруйының ныҡ түбән төшөүенә килтерә. Кәңәшмәлә ҡатнашыусы Блюхер үҙенең планын тәҡдим итә: Стәрлетамаҡ йүнәлешендә хәрәкәт итеп, ҙур ҡалаларға инмәйенсә, тау-урмандар аша барып, Көңгөр тирәһендә төп көстәргә ҡушылырға. План ҡабул ителә, ә Блюхер яңы баш командующий итеп һайлана.

Партизан армияһының аҡтар тылынан рейды («Блюхер рейды») 1918 йылдың 5 августында башлана. 12 мең ҡыҙыл партизан, бер нисә мең ҡарт-ҡоро, бала-саға, бисә-сәсә ҡатнаша был тиңе булмаған походта. Партизандарҙың 40 проценты, йәғни сама менән 5 меңе типтәр, мишәр, татар, башҡорт була. Мәҫәлән, Илсе, Сәфәр егеттәре Константин Денисовтың ротаһында 4-се взводты тәшкил итәләр. Был взвод һуғышсылары Көңгөр эргәһендә колчаксылар менән алышта тулыһынса тиерлек һәләк була.

Блюхер рейды Асҡын районында 14 сентябрь көнө Ҡыҙыл Армияның төп көстәренә ҡушылыу менән тамамлана[3]. Ҡыҙыл Армияға ҡушылғандан һуң партизан армияһына 4-се Урал дивизияһы тигән исем бирелә. 1918 йылдың ноябренән ул икенсе исем менән йөрөтөлә — 30-сы уҡсы дивизия. Дивизия Уралдан Иркутскийға тиклем данлы юл үтә һәм «Иркутская» тигән почетлы исемгә лайыҡ була.

1920 йылдың ноябрендә дивизия Чонгар нығытмаларын (Ҡырым) штурмлай. М. В. Фрунзе 30-сы уҡлы дивизияны «боевая жемчужина Красной Армии» тип атаған.

Мәғлүмәт өсөн: Н. Д. Каширин (1888—1938) — элекке офицер, званиеһы — подъесаул. 1 донъя һуғышында ҡатнашып, 6 орден алған батыр. Граждандар һуғышындағы батырлыҡтары өсөн 2 Ҡыҙыл Байраҡ ордены, Почетлы революцион ҡорал менән бүләкләнгән. 2-се ранг командармы дәрәжәһендә, 1937 йылда репрессияланған.

## Беҙҙең төбәк башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең II этабында (1918 йылдың июне — 1919 йылдың феврале).

Силәбе ҡалаһы ҡара табын ырыуы ерендә һалынған. Элек-электән Силәбенең үҙендә лә, тирә-яғында ла күп кенә башҡорттар йәшәгән һәм йәшәй. 1918 йылдың ҡышында большевиктар тарафынан ҡыйратылған Башҡорт автономияһы 1918 йәйендә нәҡ ошонда — Силәбе ҡалаһында тергеҙелә. Силәбе ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа булһа ла автономиялы Башҡортостандың баш ҡалаһына әйләнә.

1918 йылдың 25 майында чехословактар фетнә күтәреп, Силәбе ҡалаһын баҫып ала һәм совет власын (большевиктарҙың хакимлығын) бөтөрә. 29 майҙа ҡалаға Зәки Вәлиди килә, чехословактарҙың штаб-квартираһында була, һөҙөмтәлә Башҡорт автономияһын аяҡҡа баҫтырыу тураһында ике яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйыла[4]. 7 июнь көнө Силәбелә Башҡорт милли хөкүмәте эшен башлай. Башҡорт автономияһы «Бәләкәй Башҡортостан» сиктәрендә (106 волость, 13 кантон) тормошҡа ашырыла. 1918 йылдың июнендә Башҡорт хөкүмәтен һамар хөкүмәте (Комуч) таный, июль айында Себер хөкүмәте менән дә килешеүгә ҡул ҡуйыла. Әлбиттә, был килешеүҙәрҙең төп пункты — большевиктарға ҡаршы бергәләп көрәшеү, Рәсәйҙә большевистик диктатураны ҡолатыу, яңы федератив демократик Рәсәй төҙөү була. Башҡорт автономияһын ҡайтанан ойоштороуҙа чехословактарҙың да, Комучтың да, Себер хөкүмәтенең дә, бигерәк тә 1918 йылдың йәй айҙарында ярҙамы ҙур була. Ошо ярҙам һәм теләктәшлек арҡаһында 1919 йылдың яҙында Ленин хөкүмәте Башҡорт автономияһын танырға мәжбүр була.

Хөкүмәтебеҙ үҙенең иң беренсе аҙымын милли армия төҙөүҙән башлай. Хөкүмәт етәкселәре иғлан ителгән автономияңды яҡларлыҡ хәрби көсөң булмаһа, һинең менән бер кем дә иҫәпләшеп тормаясағын яҡшы аңлай.

Ошо зарурлыҡтан сығып, 1918 йылдың 13 июнендә Башҡорт милли армияһына мобилизация үткәреү тураһында фарман иғлан ителә. Призыв йәшендәге башҡорттарҙың 91 проценты, ә Тамъян-Ҡатай кантоны буйынса 100 проценты милли ғәскәребеҙҙә хеҙмәт итергә теләүен белдерә. 6 уҡсы, 2 кавалерия, 1 запас уҡсы полктар (бөтәһе 6000 яугир) ойошторола, ҡоралландырыла һәм өйрәтелә. Бынан тыш, 3 мең 500 башҡорт егете 12 ирекле отряд составында хеҙмәт итә. Был отрядтар ҡыҙыл партизандарға ҡаршы һуғышыр, урындағы халыҡты йәберзоломдан яҡлар өсөн ойошторола. 1918 йылдың 7 июлендә төҙөлгән документҡа иғтибар итәйек. Унда шундай юлдар бар: «Ҡыҙыл гвардия

бандалары тау башҡорттарын талай, игенен тартып ала, мөлкәтен яндыра, күпләп халыҡты ата», — тиелә. Ҡыҙылдарҙы Башҡортостандан ҡыуып сығарғас, ирекле отрядтар милиция отрядтары итеп үҙгәртеп ҡорола.

Тамъян-Ҡатай кантонында, йәғни беҙҙең төбәктә, милли армиябыҙҙың тәүге ғәскәри берәмеге булған 1-се атлы башҡорт полкы ойоштороло (1918 йылдың июнендә). Ойоштороусылары Әмир Ҡарамышев менән Муса Мортазин була. Полк был ваҡытта большевиктарҙан азат ителгән Троицк һәм Верхнеуральск ҡалаларында тора. 1918 йылдың июлендә Муса Мортазин полкты Туңғатар волосына алып килә, ә август башында ул Белоретҡа күсә.

Июнь айында ойоштороған тәүге полктарыбыҙ 1918 йылдың 1 июлендә Турғояҡ станцияһы янында ҡыҙылдарҙың ҙур хәрби формированиеһын тар-мар итә.

3 июлдә 3. Вәлиди йөк машинаһында Миәстән Белорет яғына ҡарай китә. Шығай ауылынан ғәскәр менән Силәбегә әйләнеп ҡайта. Юл ыңғайында ул Иманғол ауылында туҡтап китә. «Бик күркәм осрашыу ойоштороҙолар. Осрашыуға күрше ауылдарҙан, шул уҡ Ахундан да кешеләр килде», — тип билдәләп үтә үҙенең «Хәтирәләр»ендә 3. Вәлиди. Ахун ауылына инмәүҙәрен һәм быныҡ сәбәбен дә аңлата. «Ахун татарҙары Башҡортостан мөхтәриәте яҡлы түгелдәр, Верхнеуральск (ҡыҙылдар) яғын тоттолар», — ти ул. Һәм шунда уҡ бик мөһим һығымта яһай: «Учалы типтәрҙәренең һәм Сыбаркүл башҡорт казактарының беҙгә ҡушылыуы бөтөн көнсығыш Башҡортостанды ике аҙнала ҡулға алырға мөмкинлек бирҙе», — тип билдәләй Зәки Вәлиди.

Зәки Вәлиди халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә булған. «Силәбегә кире килеп, 2—3 көн үткәс, Туңғатар башҡорттарынан вәкилдәр килде», — тип яҙа ул.

Башҡорт хөкүмәте Силәбенән кире Ырымбурға күсеп барып, Каруанһарайға килеп урынлашҡас, 1-се атлы полк та сентябрь айында Ырымбурға күсерелә, уға хөкүмәтебеҙҙе һаҡлау бурысы йөкмәтелә.

1918 йылдың октябрендә Башҡорт хөкүмәте 7 кешенән тора (1 урын урыҫ вәкиле өсөн вакант итеп тотолған). Башҡорт хөкүмәте йөҙөндәге Башҡорт автономияһы көндән-көн нығынып, сәйәси аренала абруйлы көскә әүерелә бара. Башҡорт ғәскәре үҙенең ойошҡанлығы, хөкүмәтенә һәм милләтенә бирелгәнлеге, батырлығы менән аҡ ғәскәрҙәрҙән дә, ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙән дә ныҡ айырылып тора. Ул большевиктарға дошман булған көстәрҙе, беренсе сиратта Өфө Директорияһын борсолоуға һала. Шуның асыҡ миҫалы булып 1918 йылдың 19 октябрендә приказ рәүешендә ебәрелгән (Башҡорт хөкүмәтенә адресланған) телеграмма тора. Ул фарман нигеҙендә Башҡорт корпусы тарҡатыла, башҡорт полктары фронттың төрлө урындарына ебәрелә. Шулай итеп, милли армияны формалаштырыу ғәмәлдә тамамланмай ҡала.

1918 йылдың 21 ноябрендә Колчактың Башҡорт хөкүмәтен ҡыуып таратыу тураһындағы приказы сыға. Декабрь башында 1-се атлы полк, Башҡорт хөкүмәтен һаҡлап, Ырымбурҙан Баймаҡҡа күсенә.

1919 йылдың 16 ғинуарына Башҡорт хөкүмәте бөтә башҡорт полктарын бер ергә йыйып ала. Мөнәсәбәттәр ҡырҡыулаша —

Башҡорт хөкүмәтенең аҡ хөкүмәттәр менән союзы ла оҙаҡҡа бармай. Бөйөк державасылыҡ шовинизмын алға һөргән урыҫ сәйәсмәндәре һәм хәрбиҙәре Башҡорт автономияһын, әлбиттә, ҡабул итмәй — улар «Берҙәм һәм бүленмәҫ Рәсәй» тураһында ҡайғырта.

1918 йылдың октябрендә-ноябрендә аҡ хөкүмәттәр тарафынан Башҡорт автономияһына ҡарата ҡылынған яуызлыҡтар халҡыбыҙ тарихындағы ҙур фажиғәнең башы була. Был ваҡиғалар башҡорт хөкүмәтенең ҡыҙылдар яғына сығып, Үҙәк менән автономия хаҡында килешеүен тиҙләтә. Тарих күҙлегенән ҡарағанда, 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сығыу Башҡорт хөкүмәтенә үҙен һаҡлап ҡалыу мөмкинлеген бирһә лә, был аҙым халҡыбыҙға ла, милли ғәскәребеҙгә лә еңеллек килтермәй. Киреһенсә, ҡыҙылдар тарафынан башҡорт халҡына ҡарата аяуһыҙ террорҙы көсәйтә генә, сөнки халҡыбыҙ таянысҡыҙ (ғәскәрһеҙ) тороп ҡала. Совет власы яғына сығыу, асылда, ҡот осҡос алданыу ине, тик ул быны бер йыл үткәс, 1920 йылдың яҙында ғына аңланы. Бөйөк державасылыҡ шовинизмы большевиктарҙа аҡ генералдар һәм аҡ хөкүмәт етәкселегенә ҡарағанда ла көслөрәк ине, ләкин улар быны оҫта йәшерә белделәр. Мәкер, хәйлә, икейөҙлөлөк, ҡанһыҙлыҡ — большевистик етәкселәрҙең арсеналындағы төп ҡоралдар булдылар, әммә ләкин Зәки Вәлиди һәм башҡа етәкселәребеҙ был сифаттарҙы бик һуңлап ҡына фашлай алдылар.

1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте барлыҡ ғәскәре менән ҡыҙылдар яғына сыға. Һөйләшеүҙәр ваҡытында Башҡорт ғәскәренең ҡоралын үҙендә ҡалдырыу һәм үҙ ғәскәри берәмектәрен һаҡлау гарантияһы бирелһә лә, аҙаҡтан быларҙың береһе лә үтәлмәй. Киреһенсә, Башҡорт ғәскәре ҡоралһыҙландырылып тарҡатыла, һалдаттарыбыҙ һәм командирҙарыбыҙ, хәрби тотҡонға әйләндерелә. Башҡорт хәрбиҙәрен аяуһыҙ рәүештә туҡмайҙар, мәсхәрәләйҙәр, яланаяҡ, яланғас көйө урыҫ ауылдары аша ҡыуалар (февраль айында) һәр бер ауылда урыҫ ирҙәре, ҡатындары, бала-сағалары уларға ташлана, туҡмай, ат тиҙәге менән бәргесләй Һ.6., h.б. Саҡ ҡына ризаһыҙлыҡ белдергәндәрҙе, өҫ кейемен, йә булмаһа аяҡ кейемен сисеп бирергә теләмәгәндәрҙе, күпләп (йөҙәрләп) атҡандар. Зәки Вәлидиҙең законлы протесына: «Был әле башы ғына, башҡорттарҙың ысын күрәсәге алда», — тигән белдереү яһала.

Иң яманы шул: был әшәкелек һәм ысын мәғәнәһендәге йыртҡыслыҡ бөтөн башҡорт халҡына ҡарата алып барылған: ауылдар таланған, ҡатын-ҡыҙҙар мәсхәрә ителгән, ир-егеттәр (бигерәк тә үҫмерҙәр) атылған. Ҡыш уртаһы булыуға ҡарамаҫтан бик күп башҡорт ауылдары үртәлеп, көлгә әйләндерелгән. Урыҫ ауылдарында, заводтарҙа йәшәгән башҡорт ғаиләләре милли сығышы өсөн эҙәрлекләнгән, үлемгә дусар ителгән. Башҡорт милицияһында хеҙмәт иткән, власть органдарында (волость, кантон идаралыҡтарында) эшләгән башҡорт интеллигенцияһын кәүҙәләндергән шәхестәребеҙ язалап үлтерелгән. Был ысын мәғәнәһендәге геноцид 1915 йылда төрөктәрҙең әрмәндәрҙе һуйыуынан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Айырма тик шунда: әрмәндәрҙең ул саҡтағы фажиғәһе хаҡында бөтөн донъя белә, ә 1919 йылда большевиктар тарафынан башҡорт халҡына ҡылынған геноцид хаҡында белеүселәр бик һирәк.

Был йыртҡыслыҡ һәм вәхшилек тураһында шулай ентекләп яҙыуыбыҙҙың сәбәбе: 1919 йылдың яҙғы, йәйге айҙарындағы хәлваҡиғаларҙы большевистик геноцид менән тығыҙ бәйләнештә өйрәнеү, уларға ғәҙел баһа биреү. Мәҫәлән, шундай сетерекле факттарҙың береһе — М. Мортазин полкының кире аҡтар яғына сығып, 4 ай ҙа 10 көн буйы ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышып йөрөүе.

19 февралдә Муса Мортазиндың 1-се атлы полкына ҡораллаһыҙландырыу тураһында бойороҡ биреклерҙе. Ләкин Муса Лут улы үҙенең полкын хәрби берәмек булараҡ һаҡлап алып ҡалыуға өлгәшә. Был еңелдән булмай, сөнки ҡалған бөтә башҡорт полктары ла ҡораллаһыҙландырыла, төрлө дивизияларға таратыла. Ә 1-се атлы полк аҡтарға ҡаршы үҙаллы фронт тота. Мортазинсылар үҙҙәрен аямай, аҡ ғәскәрҙәрҙе ҡыҫырыҡлай, бер-бер артлы бер нисә еңеүгә өлгәшә. Әлбиттә, башҡорт халҡына шул тиклем ҡайғы-хәсрәт килтереп, уны ҡан илатҡан ҡыҙылдар яғында һуғышып йөрөү Муса Лут улынан, башҡа командирҙарҙан һалҡын ҡанлылыҡ һәм дипломатик оҫталыҡты аҙ талап итмәгән. 36 көн бергә һуғышҡандан һуң ҡыҙылдарҙың йәлләдлеге менән даны сыҡҡан Смоленск полкы 1-се атлы полкты ҡораллаһыҙландырырға тотона. Башҡорт яугирҙары ярҙам һорап Стәрлетамаҡҡа ун кешелек делегация оҙаталар, әммә юлда улар смоленсылар тарафынан әсир ителә һәм атып үлтерелә. Ҡыҙылдарҙың был аҙымын, әлбиттә, хәрби наҙанлыҡ һәм бандитлыҡ тип кенә баһалап була. Муса Мортазин смоленсы-башкиҫәрҙәрҙең үҙҙәрен ҡораллаһыҙландырырға бойороҡ бирә. Был операция 7 апрелдән 8-нә ҡараған төндә бик оҫта башҡарыла, һәм шунда уҡ был турала Муса Лут улы 20-се Пенза дивизияһының штабына хәбәр итә. Үҙенең совет власына тоғролоҡ һаҡлауын белдерергә лә онотмай. Ләкин, дивизия командованиеһы, Муса Лут улы ебәргән делегацияны ҡулға алып, атырға, тигән бойороҡ сығара. Бынан тыш, ҡыҙыл ғәскәрҙәргә Муса Мортазиндың полкын тар-мар итергә, тигән фарман бирелә. Шулай ҙа 1-се атлы полк ике ут араһында ҡалған көйөнсә, 5 көн буйына аҡтарға ҡаршы фронт тотоуын дауам итә. Әммә ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең көслө һөжүмгә күсеүе арҡаһында, 13 апрель көнө Муса Мортазиндың 1-се атлы полкы кире аҡтар яғына сыға.

Полктың артабан яҙмышы түбәндәгесә: 15—16 апрелдә полк Белоретҡа килеп етә. Ай ярымға яҡын Белоретта торғандан һуң полк Стәрлетамаҡҡа күсерелә, унда ярты ай строевой әҙерлек үтеп, бригада итеп үҙгәртеп ҡорола. Башҡорт кавалерия бригадаһы тигән исем бирелеп, командиры булып Муса Мортазин тәғәйенләнә. Бригада 2 полктан тора, составында 4000 яугир була, әлегә һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнашмай, 16 июндән Аҡиҙел буйында һаҡта була. 10 июлдә бригада Янурус-Екатеринославка-Маҡар-Нөгөш-Баҡый-Ҡаҡы-Хәмит-Яуымбәт-Йәлембәт маршруты буйынса сигенә башлай.

1919 йылдың 23 августа Бриены поселогынан алыҫ түгел ерҙә Муса Мортазиндың Башҡорт кавалерия бригадаһы Михаил Фрунзеның ныҡлы гарантияларын алғандан һуң, ҡыҙылдар яғына сыға. Фрунзе `һүҙен боҙорға, башҡорт һалдаттарын артабан мыҫҡыл итергә, йәберләргә был юлы бер кем дә батырсылыҡ итмәй, һөҙөмтәлә, 24 август көнө үк башҡорттар аҡтарға ҡаршы һуғыш хәрәкәттәренә йәлеп

ителә. 26 августа Башҡорт кавбригадаһы Бриены поселогын азат итә, күп тә үтмәй Севастополь поселогын ала. Бынан һуң, Муса Мортазиндың бригадаһы Ҡарғалыға (Ырымбур) күсерелә. Ләкин Ҡарғалыға килеп урынлашыуға 3 көн дә үтмәй, бригада генерал Толстовтың аҡ казактарына ҡаршы походҡа йәлеп ителә. 2000 яугир составында Мортазин бригадаһы юлға сыға, 2 октябрҙә Филиповка ауылында була. 4 октябрҙә Аҡбулаҡ яулап алына. 12 октябрь көнө Нефринка янында ҙур еңеү, 25 октябрь Чунгай ауылы алына, 30 октябрь бригада Джамбейтыға инә. Декабрь аҙаҡтарында ғына, яугирҙарҙың 60 процентын юғалтып, бригада Ҡарғалыға әйләнеп ҡайтып, тағы ла Ырымбур эргәһендә урынлаша — Башҡортостанға ҡайтарылмай. Ул ғына түгел, бригада етәкселегенең һәр аҙымы күҙәтеү аҫтына алына. Атлы бригада, алда өмөт ителгәнсә, Башҡортостан хөкүмәтенең таянысы була алмай. Киреһенсә, сит-ят мәнфәғәт өсөн һуғышып, меңәрләгән ир-егеттәребеҙ йәндәрен ҡорбан итте һәм яу яландарында ятып ҡалды. Ләкин ул заманда, башҡорттарҙың һуғыштағы батырлыҡтарын данлаған большевистик пропаганданың ысын йөҙө менән маҡсатын аңлау мөмкин түгел ине. Беҙ әсе дөрөҫлөктө бары тик 80-се йылдарҙың икенсе яртыһында — 90-сы йылдар башында, колониаль бығауҙар бер ни тиклем ҡаҡшағас ҡына бөтөн тулылығында аңлай башланыҡ.

## ҠАНЛЫ ТРАГЕДИЯ.

1919 йылдың йәйендә беҙҙең төбәк яңынан һуғыш хәрәкәттәренең уртаһында ҡалыу сәбәпле сигенеүсе аҡ ғәскәрҙәр ауылдарыбыҙға килеп тула. Халыҡты талау, көсләү, аҙыҡ-түлек таптырыу башлана. Эшкә яраҡлы ир-ат, командирҙарҙың талабын үтәп, үҙ аттары менән сигенгән хәрбиҙәрҙе, уларҙың ҡорал-ярағын тейәп, аҡтар бойорған яҡҡа алып китә, йәки обоз хеҙмәтен үтәй. Ылау менән киткән кешеләрҙең күбеһе йортона кире әйләнеп ҡайтмай, ҡалғандары иһә иҫән ҡалғандары өсөн аллаға рәхмәттәр уҡып, өйөнә ҡайтып йығыла. Был афәткә аҡтар үҙҙәре менән ҡыуып алып киткән меңәрләгән баш йылҡы малын, һыйыр, һарыҡты ла өҫтәһең, халҡыбыҙға ябырылған был ҡазаға иҫ китерлек.

Ярай ҙа аҡтар ауылдарыбыҙҙы һуғышһыҙ ғына ҡалдырып китһә. Ләкин бит күп осраҡта ауылдар эргәһендә, хатта уларҙың эсендә, аяуһыҙ алыштар булған. Унда, моғайын, тыныс халыҡтың да ҡаны әҙ ҡойолмағандыр. Әммә тарихи фактттар шуны иҫбатлай: халҡыбыҙға аҡтар күрһәткән йәбер-золом ҡыҙылдар тарафынан ҡылынған яуызлыҡтар менән сығыштырғанда күпкә әҙерәк булған. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡыҙылдар башҡорт халҡын зар илатҡан, бер ғәйепһеҙ кешеләрҙе ҡырған, ауылдарҙы яндырыуҙан да тартынмаған.

Әхләки күҙлектән ҡарағанда, XX быуаттағы ҡыҙыл йәлләдтәр, XVIII быуатта башҡорт ихтилалдарын йыртҡыстарса баҫтырған башҡиҫәрҙәрҙән бер ҙә өҫтөн булмағандар. Ғөмүмән, Ҡыҙыл Армия халҡыбыҙҙың ҡотон алып, ярлы халыҡты бөлгөнлөккә, хәйерселеккә төшөргән, астан ҡырылыуға дусар иткән. Шуның өсөн дә совет власы, йәғни ҡанлы большевистик диктатура, яңынан аяҡҡа баҫтырылғас, Ҡыҙыл Армияға иғлан ителгән мобилизациянан башҡорт ир-егеттәре

күпләп (шулай уҡ башҡа милләт вәкилдәре лә) ҡасып ҡалған, төбәгебеҙҙә дезертирлыҡ тигән күренеш барлыҡҡа килгән һәм ул массовый төҫ алған. Элек хәрби хеҙмәткә атлығып торған башҡорттарҙың большевиктарға хеҙмәт итергә теләмәүе үҙе үк күп нәмәләр тураһында һөйләй.

Ғөмүмән, совет власы, Ленин хөкүмәте, аңлы рәүештә башҡорт халҡы менән иҫәпләшмәү сәйәсәтен алып барғандыр, тигән фекер тыуа. Беренсе дәлил: Башҡорт хөкүмәте күпме генә мөрәжәғәт итмәһен, астан интеккән башҡорттарға бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтелмәй. Башҡортостан ерендә һуғыш тамамланып, республика етәкселегенә Башревком килгәс тә әле башҡорт халҡының ғазабы кәмемәй — террор, репрессиялар, аслыҡ элеккесә дауам итә. «Аслыҡ 1919 йылдың көҙөндә бигерәк ҡурҡыныс төҫ алған. Халыҡ тотош өй эсе, тотош ауылы менән үлгән», — тип әсенеп яҙҙы башҡорт халҡының тарихын тикшереүсе Әкрәм Бейеш үҙенең китабында.

Икенсенән, нәҡ XVIII быуаттағы кеүек башҡорт иле яңынан (!) «ныҡытылған райондар» менән ҡамап алынды. Бына уларҙың иң эреләре: Ырымбур, Орск, Верхнеуральск, Троицк. Гражданд ар һуғышының иң ҡыҙған сағында, фронтта ғәскәрҙең иң кәрәк ваҡытында ла был ныҡытылған ҡәлғәләрҙә әллә күпме полк, бригада урынлаштырылды, башҡорттоң саҡ ҡына ҡуҙғалышын да баҫтырырға улар һәр саҡ әҙер торҙо.

1919 йылдың авгусында урындарҙа яңы совет аппараты барлыҡҡа килә. 22 августа Белорет ҡалаһында (Тамъян-Ҡатай кантонының үҙәге) өс кешенән торған (рәйесе Кәрим Иҙелғужин) ревком ойошторола. 15 сентябрҙә кантревком рәйесе вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Кәрим Иҙелғужин етәкселегендә беренсе ултырыш үткәрелә. Әммә шул уҡ көндә, башҡорт кешеһенең кантон етәксеһе итеп тәғәйенләнеүенә риза булмаған Белорет ҡалаһы большевиктары, Башревкомдан власть башына урыҫ кешеһен ҡуйыуҙы талап итәләр. Башревком, принципһыҙлыҡ күрһәтеп, кантревком рәйесе итеп башҡорт халҡының буласаҡ палачы Поленовты тәғәйенләй. Бары тик 14 ноябрҙә генә кантонда власть башына ике яҡты ла ҡәнәғәтләндергән кандидатура — Ш. Дауытов килә. Күпмелер ваҡыт үткәс, волость үҙәктәрендә сходтар булып үтә, волревкомдар барлыҡҡа килтерелә. Беҙҙең төбәктә, волостар һаны буйынса, 8 волревком төҙөлә. Совет власы беҙҙең төбәктә иң тәүҙә Күбәләк-Тиләү волосында урынлаша. Бында Мортазиндарҙың (яңы ғына Польша фронтынан ҡайтып төшкән) йоғонтоһо көслө була, волревком ойоштороу эшен улар үҙ ҡулдарына ала. Әхмәҙи Мортазин волревкомдың тәүге рәйесе була.

Типтәр-Учалы волосында тәүге волревком рәйесе итеп Илсе ауылынан большевик Ғәйнетдин Сәғитдинов тәғәйенләнә. Ағзалары итеп Ҡаһиров Латиф һәм Абдрахманов Шаймарҙан ҡуйыла.

Туңғатар волосында тәүге волревком рәйесе большевик, Ҡарт-Муйнаҡ кешеһе Йомағужа Фазылов була. 1922 йылда уны, волость башҡарма комитеты рәйесе вазифаһында, 1919 йылдан партия ағзаһы Шәһишәриф Бүләков (Кәрим ауылынан) алмаштыра. Сират ауыл советтарына етә. Уларҙа ла сходтар үткәрелеп, ауыл советтары һайлап ҡуйыла. Шулай итеп, яңы властың вертикаль һәм горизонталь струк-

туралары барлыҡҡа килтерелә. Яңы власть ойошторолоп күп тә үтмәй, уның эше юҡҡа сығарыла. Ни өсөн тигәндә, унда ришүәтселек һәм ябай халыҡтан көслөк менән, ҡурҡытып аҡса, мал алыу күренеше сәскә ата. Ябай халыҡ өсөн ғәҙеллек, яҡлау эҙләп совет органдарына мөрәжәғәт итеүҙең мәғәнәһе, файҙаһы ҡалмай, сөнки бик күптәрҙең ришүәт бирерлек мөмкинселеге булмай. 14 октябрҙә Стәрлетамаҡтан Тамъян-Ҡатай кантоны исеменә килгән циркулярҙа һүҙ тап шул хаҡта бара. Был документты Башҡорт хөкүмәтенең ябай халыҡты яҡларға тырышыуы тип ҡарарға кәрәк. Ләкин, кантон етәкселегенең 99 проценты урыҫтан, еврейҙән һәм татарҙан торғанлыҡтан, Башревкомдың ниндәй генә дәһшәтле күрһәтмәләре булмаһын, уларҙың үтәлмәйәсәге көн кеүек асыҡ ине. Шунлыҡтан, 1919—1920 йылдарҙа беҙҙең кантонда ришүәтселек һәм көсләп, ҡурҡытып аҡса, мал, байлыҡ таптырған өсөн (ә ундай факттар тулып ятҡан) бер кемде лә Ревтрибунал хөкөмөнә тапшырмайҙар. Ошондай, «көслөнөкө замана» тигән дәүерҙә, бөтөн ерҙә законһыҙлыҡ хөкөм һөргән ваҡытта, Стәрлетамаҡтан

3. Вәлиди ҡултамғаһы менән килгән икенсе документ та иғтибарһыҙ ҡалдырыла. Дөрөҫөн әйткәндә, ул телеграммалағы 1 ноябргә тиклем кантондағы дезертирлыҡ күренешен бөтөрөргә, тигән талапты тормошҡа ашырыу мөмкин дә булмаған.

1919 йылдың декабрь урталарында, кантонда хәрби комиссар ярҙамсыһы булып эшләгән Поленовты үрләтеп, Стәрлегә саҡыртып алалар. Ошо уңай менән Белореттан башҡалаға телеграмма һуғыла, унда шундай юлдар бар: «...Поленов ... алыштырғыһыҙ партия хеҙмәткәре һәм уның китеүе Белорет ҡалаһындағы партия эшенә кире йоғонто яһаясаҡ». Тарихи документтарҙан күренеүенсә, Поленов башҡорт халҡының палачы, каратель һәм бәдбәхет булған, ә уны Белорет коммунистары ана нисек күккә күтәргән! Ғөмүмән, ул заманда ғы икейөҙлөлөккә, ялғанға иҫеңе китер! «Упҡын ситендә» исемле тарихи очеркында район тарихын күптән өйрәнеүсе журналист Рәүеф Насыров былай тип яҙҙы: «В. Поленовтың ҡыланыштарын, мәҫәлән, Туңғатар волосында берәү ҡабатланы. Ул — И. Селиванов. Уның «Кәләс» ҡушаматы халыҡ хәтерендә бөгөнгә тиклем уйылып ҡалған. Дөрөҫ, Вознесенка ауылынан сыҡҡан чекист А. В. Улатов уның хаҡында: «Кәләс»тән дә тоғро революционер, большевик булманы», — тип иҫбатларға тырышһа ла, был кешенең эш алымдары ҡот осҡос була. Кәләс биленә револьвер, гранаталар тағып, совет власы файҙаһына тип, кешеләрҙең һуңғы атын тартып алып, урыҫ байҙарын да, башҡорт муллаларын да тәҙрә аша, йә иһә ҡапҡа төбөнә саҡырып сығарып атып йөрөй».

Башревком Стәрлегә килеп урынлашып та өлгөрмәй, Ырымбур губревкомы башҡорт автономияһының хас дошманы Ғәли Шәмиғоловты (мишәр) Башревкомда коммунистар фракцияһының етәксеһе итеп тәғәйенләп, Стәрлегә оҙата. Шәмиғолов суверенлы Башҡортостанда Ырымбурҙан үҙе менән алып килгән инструкцияларға ярашлы, автономияға ҡаршы емергес эшен башлап ебәрә, маҡсаты — Башревкомды башҡорттарҙан таҙартыу була. Республикала коммунист башҡорттар бармаҡ менән һанарлыҡ була, сөнки уларҙың милли характерына әүерелгән әҙәплелек һәм бер ҡатлылыҡ башҡорттарҙың коммунистар

партияһына инеүенә кәртә була. Шәмиғолов һәм уның тирәһендә оялаған большевистик өйөр республика күләмендә лә, кантондар күләмендә лә власҡа үрмәләй, Мәскәүгә ошаҡ өҫтөнән ошаҡ яуҙыра, нормаль эшләүгә ирек бирмәй. Тап ошо ваҡытта Стәрлетамаҡта партияның өлкә комитеты ойошторола. Ниҙә «өлкә»? Ниҙә «республика» түгел? Күренеүенсә, коммунистарҙың ҡаты власына таянып республикабыҙҙың статусын ябай бер өлкә хәленә төшөрөү курсы тап ошо көндәрҙә башланған. Кантон ревкомдарының да эше бик көслө ҡыҫымға, контролгә алына һәм ошо маҡсаттан сығып партияның кантон комитеттары ойошторола, уларҙың идараһына башҡорт халҡын үҙһенмәгән, урыҫ, татар коммунистары тәғәйенләнә. Ошондай уҡ комитет шәмиғоловсылар тарафынан 1919 йылдың көҙөндә Белоретта ла ойошторола.

Башҡортостандың суверенитеты көндән-көн сикләнә, башҡорт халҡын талауға Мәскәү үҙенең фатихаһын бирә. 1919 йылдың 15 сентябрендә Башҡорт республикаһының аҙыҡ-түлек наркомы итеп Мәскәү А. М. Дудникты тәғәйенләй, сит милләт кешеһе һәм коммунист булараҡ, урындағы халыҡҡа йәлләү белмәҫ, тигән фекерҙән сығып эш итә Ленин хөкүмәте. Бынан тыш, ВЦИК Өфөгә 2 вәкилен (асылда жандармын) ебәрә, һөҙөмтәлә, Башҡортостан 1919—1920 йылдарҙа иген тапшырыу буйынса Рәсәй Федерацияһында беренсе урынға сыға. Был «энтузиазм»дың башлыса малсылыҡ менән шөғөлләнгән республикала булыуы ғына ғәжәпләндерә. Бәләкәй Башҡортостандан 25070 тонна иген, 19057 баш һыйыр малы, 82457 һарыҡ, кәҙә оҙатыла. Халыҡтан талап алынған иген, мал күпләп ситкә оҙатыла. Ә башҡорт халҡы үҙе астан ҡырыла, бары тик 1918—19 йылдарҙа ғына ауылдарыбыҙҙа халыҡ 20—50 процентҡа кәмей.

Башҡорттарға ярҙам итеү өсөн Мәскәү хөкүмәте «Башкирпомощь» тигән ойошма төҙөй. Әммә уның башында тик урыҫтар ултырған, кантондарҙағы (шул иҫәптән Тамъян-Ҡатайҙа ла) хеҙмәткәрҙәр башлыса урыҫ милләтенән булған. Шул сәбәпле, асығыусы халыҡҡа тәғәйенләнгән әҙме-күпме ярҙам ныҡлы хужалыҡ алып барыусы, сағыштырмаса хәлле урыҫ волостарына таратылған, һөҙөмтәлә, астан ҡырылған башҡорттоң хәле һис тә яҡшырмаған. «Башкирпомощь» үҙенең эшмәкәрлеген 1920 йылдың ғинуарында башлай һәм сентябрь айында Лениндың күрһәтмәһе буйынса туҡтата. Владимир Ильич 1920 йылда Башҡортостанда игендең уңмағанын да, башҡорт волостарының восстание күтәргәнен дә белә, әммә астан ҡырылған башҡорт халҡына ихлас ярҙам итеү уның уйында ла булмай.

1920 йылдың беренсе яртыһында Үҙәктең Башҡортостанға яһалған ҡыҫымы көсәйә, Башҡорт автономияһы эҙмә-эҙлекле бөтөрөлөүгә алып барыла, иң күренекле һәм абруйлы башҡорт етәкселәре (Йомағолов, Вәлиди һ.б.) халҡынан айырылып Мәскәүҙә күҙәтеү аҫтында йәшәргә мәжбүр ителә. Муса Мортазиндың Башҡорт кавалерия бригадаһы ашығыс рәүештә алыҫҡа — Польша фронтындағы һуғышҡа оҙатыла. Башҡортостанда Мәскәү тарафынан асыҡтан-асыҡ дәүләт түңкәрелеше (перевороты) әҙерләнә (Мәскәү вәкилдәре һәм республикалағы, күрше губернияларҙағы урыҫ, татар большевиктары «5-се колоннаны» тәшкил итә).

Башҡорт автономиялы совет социалистик республикаһын төҙөү тураһында Килешеүгә ҡул ҡуйғандан һуң 1 йыл үткәс, 1920 йылдың 19 майында ВЦИК (Калинин) һәм СНК (Ленин), бергәләшеп «Автономиялы Башҡортостан совет республикаһының дәүләт ҡоролошо тураһында» тигән ҡарар ҡабул итә. Ул Башҡортостанды ҡәҙимге бер урыҫ губернияһы хәленә төшөрөүҙе күҙ уңында тота. Был документты Кремль хужаларының 1919 йылдағы Килешеүҙе аяҡ аҫтына һалып тапауы, тип аңларға кәрәк. Башҡортостан автономияһының тик исеме генә тороп ҡала.

1920 йылдың 16 июнендә Башревкомда һәм башҡа юғары урындарҙа эшләгән башҡорт эшмәкәрҙәре, протест йөҙөнән эш ташлай һәм таралыша. Башҡорт халҡын үҙһенмәүселәргә шул ғына кәрәк була ла инде: 23 июндә татар большевигы Ф. Мансырев рәйеслегендә, тик урыҫ һәм татарҙан ғына торған яңы Башревком ойоштороло. Тик ябай халыҡ яңы власты ҡабул итмәй, уны таныуҙан баш тарта. Әммә был ғына яңы Башревкомды эшенән туҡтата алмай — буйһонмаған, фармандарҙы үтәмәгән өсөн ҡулға алыуҙар, атыуҙар ул заманда киң ҡулланыла.

Был ваҡытта 1-се Бөтә Башҡортостан Совет съезына әҙерлек бара. Кантондарҙа съездар уҙғарыла. 25—28 июндә ошондай съезд Тамъян-Ҡатай кантонында ла булып үтә. 150 депутат ҡатнашлығындағы был съезд бик көсөргәнешле шарттарҙа эшләй. Доклад менән Тамъян-Ҡатай кантонының РКП (б) секретары Заверцев сығыш яһай, трибунаға Стәрлетамаҡтан килгән вәкил Войцехович күтәрелә. Залда шул саҡ көслө тауыш күтәрелә, Зәки Вәлидиҙе, Харис Йомаҡоловты Башҡортостанға кире ҡайтарығыҙ, тигән талаптар яңғырай. Залда көсөргәнеш арта, хатта депутаттарҙың бер өлөшө съезды ташлап сыға. Ләкин, өсөнсө көндә, 27 июндә, барлыҡ делегаттар ҙа урындарында була. Тамъян-Ҡатай кантоны кантревкомы председателе Муллайән Халиков Башревком ағзаларының үҙ постарынан китеүе тураһында сираттан тыш доклад яһай, һуңынан съезд яңы Башревкомды таныу тураһында ҡарар ҡабул итә. 28 июнь көнө делегаттар кантон башҡарма комитетына ағзалар һайлай. Бына улар:

1) Халиков Муллайән
2) Пирожников Алексей
3) Козлов Иван
4) Иҙелғужин Кәрим
5) Хәлилов Мостафа
6) Бобров Федор
7) Маврин Степан
8) Усманов Шәриф
9) Дауытов Шәһиәхмәт
10) Рәсүлев Ғабдулла
11) Недоспасов Николай
12) Жигулев Кәрим
13) Сызранкин Федор
14) Латыпов Ниғәмәтйән
15) Губин Николай
16) Чертихин Николай.

Күреүегеҙсә, урыҫтар ябай күпселекте тәшкил итә. Ә бит Тамъян-Ҡатай кантоны — башлыса башҡорттар йәшәгән урын. Бөтөн Башҡорт съезына делегаттар итеп түбәндәгеләр һайлана.

1) Халиков Муллайән
2) Бикман Роберт
3) Усманов
8) Войцехович
9) Дауытов Шәһиәхмәт
10) Лобов Семен

4) Хажин Нуретдин
5) Богданов
6) Козлов Иван
7) Пирожников Алексей
11) Хәлилов Мостафа
12) Латыпов Ниғәмәтйән
13) Иҙелғужин Кәрим
14) Фамилияһы танырлыҡ түгел[5]

1920 йылдың 25 июлендә Стәрлелә I Бөтә Башҡортостан совет съезды эшен башлай. Съезд тик коммунистарҙан ғына торғанлыҡтан, уның эшендә бер генә башҡорт та ҡатнашмай. Хатта һайланғандары ла килмәй, сөнки бер өлөшө ҡулға алынған, икенселәре — ҡасҡан була. Съезд БашЦИК һәм БашСНК һайлай. Шәмиғолов ошо ике юғары органға ла рәйес итеп һайлана, был органдар тик коммунистарҙан ғына торғанлыҡтан, унда бер башҡорт та булмай.

Шулай итеп, Башҡорт республикаһында, составында исмаһам бер генә башҡорт та булмаған, юғары хакимиәт органдары төҙөлә. Власть башына башҡорт халҡының хас дошманы Шәмиғолов етәкселегендәге төркөм үрләй. Уларҙың «эшмәкәрлеге» һөҙөмтәһендә, Салауат һәм башҡа батырҙарыбыҙҙың ҡандары тамған еүеш, ҡараңғы зиндандар тотҡондар менән шыплап тултырыла, уларҙың үҙҙәрен генә түгел, хатта исем-заттарын юҡ итеү өсөн ҡот осҡос ҡаты саралар күрелә. 1920 йылдың 29 июлендә Зәки Вәлиди, Мәскәүҙән мәңгегә ваз кисеп[6], Әзербайжанға юл ала. Уны Әзербайжандан Төркөстан ҡомдары аша Урта Азияға яҡташыбыҙ, күренекле дәүләт эшмәкәре Талха Рәсүлев (Зәкиҙең ҡайнағаһы) оҙата бара. Зәки Вәлиди менән, Талха Рәсүлевтан башҡа, Башҡортостанды тағы ла 14 күренекле башҡорт эшмәкәре ташлап китә. Тыуған яҡтарын ҡалдырып киткәндә, улар маҡсаттарын йәшермәйҙәр: империалистик һәм бөйөк державасылыҡ сәйәсәтенең вариҫы булған совет власына, уның төп көсөн тәшкил иткән большевиктарға ҡаршы һуғыш асыу. 1923 йылдың 23 февралендә Зәки Вәлиди, тыуған тупрағы менән мәңгелеккә хушлашып, сит илгә китә[7]. Талха Рәсүлев һәм башҡалар Ҡаҙағстанда тороп ҡалалар һәм 30-сы йылдарҙа ҡулға алынып, юҡ ителәләр. 1920 йылдың сентябрендә Башҡортостанда ихтилал ҡуба, беҙҙең төбәк тә унан ситтә ҡалмай. Аслыҡ, йәбер-золом, талау һөҙөмтәһендә үлем сигенә еткерелгән халыҡ һуңғы сара — ҡоралға тотона. Партизан хәрәкәте көндән-көн көсәйә. Тамъян-Ҡатай кантоны рәйесенең приказы менән 1920 йылдың 1 августынан кантон территорияһында махсус режим индерелә. 12 сентябрҙән алып, кантонда гражданлыҡ власы бөтөрөлә, кантон башҡарма комитеты таратыла, 3 кешенән торған (Дауытов — кантон башҡарма комитетынан, Алексеев — РКП(б)-ның кантон комитетынан һәм Поддубенский-Көньяҡ хәрби бүлексә штабынан, 27-се бригаданан) ваҡытлы ревком ойошторола. Бөтөн булған волость һәм ауыл башҡарма комитеттары, шулай уҡ таратылып, улар урынына кантревком тәғәйенләгән кешеләрҙән ревкомдар булдырыла. Кантонда хәрби хәл индерелә.

Был ваҡытта баш күтәреүселәр Яңы Байрамғол, Ураҙ, Учалы, Поляковка, Вознесенка ауылдарын баҫып, урындағы советтарҙы туҙҙыралар. Башлыса аҙыҡ-түлек пункттарына һөжүм итә улар. Сәбәбе еңел аңлашыла: асыҡҡан халыҡҡа иң беренсе сиратта икмәк кәрәк. Ә Уча-

лы, Поляковка Иген пунктларының һәр береһендә был вақытта 5000—6000 бот иген тупланған була.

Беҙҙең төбәктә халықты Малай Муйнаҡ ауылының ярлы кешеһе, һуғыштан унтер-офицер званиеһында ҡайтҡан Фәтҡулла Мәғәсүмов күтәрә. Уның ҡул аҫтындағы баш күтәреүселәр отрядтары Учалы—Белорет юлын үҙ ҡулдарында тота, кантон үҙәгенә оҙатылған аҙыҡ-түлек ылауҙарына, мал көтөүҙәренә һөжүм итеп, кире ҡайтарып ала һәм мохтаж халыҡҡа өләшеп бирә. Улар коммунистарҙы эҙәрлекләй, бигерәк тә урыҫтарға ҡарата халыҡтың асыуы яман була, восстание ниндәйҙер кимәлдә урыҫтарға ҡаршы йүнәлтелгән була.

Кантревком ихтилалды баҫтырыуға күп көс һала, урыҫ эшселәренән ҡораллы отрядтар ойоштора. Польша фронтынан ялға ҡайтҡан Муса Мортазин да ихтилалды баҫтырыуға йәлеп ителә, ул тиҙ арала башҡорттарҙан ҡыҙыл отряд ойоштора (уның төп өлөшөн 27 кеше — Польша фронтынан ҡайтҡандар тәшкил итә). Муса Мортазиндың ихтилалды баҫтырыуҙа ҡатнашыуға ризалыҡ биреүендә һәм ҡыҙыл каратель отрядын етәкләүендә тәрән мәғәнә бар. Муса Лут улы ситтә тороп ҡалған хәлдә лә, ихтилал барыбер баҫтырылыр ине. Ләкин, был эшкә урыҫ командирҙары, регуляр Ҡыҙыл Армия частары тотонһа, башҡорт ҡаны йылға булып ағыр ине, яндырылған башҡорт ауылдарының иҫәбе булмаҫ ине. Муса Мортазин күберәк агитация алып барыу юлы менән төбәкте тынысландырыуға өлгәшә, ул тик һирәк осраҡта ғына ҡорал ҡуллана.

24 сентябрҙә Ҡотой ауылы эргәһендә Мортазин отряды башҡорт һәм казак отрядтары менән бәрелешә. Ҡаты һуғыштан һуң баш күтәреүселәр ҙур юғалтыуҙар менән сигенә; баш күтәргән башҡорттарҙың бер өлөшө ҡыҙылдар яғына сыға.

Баймаҡ яғында башҡорттарҙы ихтилалға Хажиәхмәт Унасов күтәрә. Ул «Башҡортостан — башҡорттарға!» — тигән лозунг аҫтында көрәшә. Ф. Мәғәсүмов үҙенең баш күтәреүселәре менән Х. Унасовҡа барып ҡушыла алмағас, кантондың төньяҡ волостарына сигенә һәм 4 волость буйынса мобилизация иғлан итә. Тиҙ арала ул 3 меңгә тиклем кеше туплай. Мәғәсүмовтың «Азатлыҡ армияһы»на элекке аҡ офицерҙар Выдрин менән Луконин етәкселегендәге казактар отряды килеп ҡушыла. Сентябрь аҙағында Мәғәсүмов һәм Выдрин Златоусҡа уңышлы сапҡын яһай. Кире боролоп ҡайтҡанда, Веселовка ауылы янында ҡаты бәрелеш була, баш күтәреүселәр ҙур юғалтыуҙарға дусар була. Мәғәсүмов отрядты тауҙарға алып китергә мәжбүр була. Октябрь айының урталарында өс яҡтан ҡамауға алынған Ф. Мәғәсүмов отряды ҡыйратыла. Ошо һуғыш вақытында тәүге ҡар яуа, ҡасып ҡотолорға теләгән баш күтәреүселәрҙең эҙҙәренән барып, ҡыҙылдар байтаҡ ҡына баш күтәреүсе башҡортто атып үлтерә.

Беҙҙең төбәкте «Башҡортостан республикаһы өсөн, ләкин — коммунистарһыҙ!» лозунгыһы аҫтында ихтилалға күтәргән арҙаҡлы шәхесебеҙ Ф. Мәғәсүмов чекистар ҡулына эләгә. Аҙағыраҡ, 1921 йылдың ғинуарында, һаман да баш эймәгән Хажиәхмәт Унасовты ихтилалды туҡтатырға өгөтләп, чекистар оҙатыуында уның янына Ф. Мәғәсүмов та бара. Ҡыҙылдарға баш һалғас, уҡытырға алып китеү һылтауы

менән, Хажиәхмәт Унасовты юлда сапҡылап китәләр, Ф. Мәғәсүмов та атып үлтерелә.

Башҡорт булып ҡалырға тырышҡан өсөн «бандит» исеме алған, ҡәһәрләнгән шәхестәребеҙгә (Х. Унасов, Ф. Мәғәсүмов һ.б.), уларҙың эшмәкәрлегенә тарих күҙлегенән сығып ғәҙел баһа бирергә күптән ваҡыт. Сөнки «бандит» ҡушаматы уларға урыҫтар, большевиктар тарафынан бирелгән. Тимәк, беҙ большевистик диктатура менән килешә алмаған, уға ҡаршы йәнен-тәнен аямай көрәшкән ир-егеттәребеҙгә ҡарата ғәҙел булмағанбыҙ — сит-ят кешеләр таҡҡан кәмһетеүле ҡушаматтарҙың асылына төшөнмәйенсә уларға ҡарата механик рәүештә ҡабатлағанбыҙ. Уйлап ҡараһаң, уларҙың эшмәкәрлеге атаман Махноныҡынан һис тә айырылмай. Айырма шунда: атаман Махно бөгөн — халыҡ геройы, ә беҙҙекеләр һаман хурланған көйө ҡала бирә.

1920 йылғы башҡорт күтәрелеше бары тик декабрь аҙағында ғына, ике яҡ та рәсми килешеүгә ҡул ҡуйғас ҡына, тамамлана. Шәмиғолов Мәскәүгә саҡыртып алынып, башҡорт эшмәкәрҙәренә Стәрлегә ҡайтып, етәксе постарҙы биләргә рөхсәт ителә. Ихтилал бушҡа булмай — ул өлөшләтә үҙ маҡсатына ирешә, тиергә була. Ә күпме ҡорбан килтерергә тура килә бының өсөн? Рәсми мәғлүмәттәр буйынса 10000, ә рәсми булмаған мәғлүмәттәр буйынса 25000—30000 башҡорттоң ғүмере өҙөлә, шуларҙың байтағы беҙҙең төбәк халҡы. Башҡортостан йөмһүриәте өсөн йәнен-тәнен аямай, ас-яланғас көйө ҡулына ҡорал алып көрәшкә күтәрелгән батырҙарыбыҙҙы ла, уларға эйәргән ир-аҙаматтарыбыҙҙы ла оноторға хаҡыбыҙ юҡтыр.

1921 йылда республикала аслыҡ ҡоторона, бигерәк тә башҡорттар унан яфа сигә. Ныҡлы игенселек хужалығы алып барған урыҫтар һәм башҡа күскенселәр генә аслыҡҡа артыҡ бирешмәй. 1921 йылдың октябрендә Тамъян-Ҡатай кантонының аҙыҡ-түлек комитеты тарафынан төҙөлгән отчетында былай тиелә: «1920 һәм 1921 йыл өсөн игенгә, фуражҡа, малға, майға, йоморттҡаға һәм сырьеға булған разверстка волостар буйынса тулыһы менән йыйып алынды..., Ауыл һәм волость башҡарма комитеттары был эшкә бик пассив ҡараны, ә халыҡ үтә дошман ҡарашта булды».

1921 йылдың май айында Башҡортостанда, бигерәк тә Көньяҡ Уралда, тимәк беҙҙең төбәктә лә яңы милли хәрәкәт тоҡана. Уның маҡсаты — колонизаторҙарға ҡаршы көрәш була. Талап шул уҡ ҡала: «Элекке башҡорт эшмәкәрҙәрен власҡа ҡайтарырға!» Ихтилал урыҫ ауылдарына һөжүм итеү (уларҙың күбеһе башҡорттан талап алынған ерҙәргә урынлашҡанын онотмайыҡ), уларҙың мөлкәтен талау формаһын ала. Урыҫтар ауылдарын ҡалдырып ян-яҡҡа ҡаса башлай. Ихтилал үҙәге был юлы ла Баймаҡ-Хәйбулла яғында була, ә уның башында Ғ. Амантаев һәм Мәғәсүмов тора. Уларҙың ҡарамағында 300 һыбайлынан торған 3 отряд була. Байтаҡ урыҫ хуторҙары, ауылдары юҡ ителә; урыҫ күскенселәре башҡортто йәберләүҙең нимәгә килтергәнен үҙ елкәләрендә татый.

Был ихтилал да аяуһыҙ рәүештә баҫтырыла. 3000 башҡорт үлтерелә. Әммә баш күтәреүҙәр бәләкәйерәк масштабта 1922 йылда ла дауам итә.

1921 йылда беҙҙең кантондың төп өлөшөндә ихтилал тоҡана. Баш күтәреүселәр аҙыҡ-түлек разверстка һын йыйыусыларға ҡарата аяу белмәй. Поляковка волосында 2 продармеец һәм иген пункты мөдире үлтерелә. Учалы волосынан бер көтөү малды Белорет ҡалаһына оҙатып барған агент үлтерелә, ә 300 баш һарыҡ халыҡҡа кире ҡайтарып бирелә. Каратель отряды (30 продармеец, военкомдың 15 ҡыҙыл армеецы, 15 канчека ҡыҙыл армеецы) ихтилал барған төбәккә оҙатыла. Отряд йылдам хәрәкәт итеп, баш күтәреүселәрҙе тарата, ғәйеплеләрҙе күпләп ата һәм Мулдаҡай, Туңғатар, Вознесенка, Поляковка волостарынан разверстканы тулы күләмендә түләтеүгә өлгәшә.

Бынан тыш, беҙҙең төбәккә ҡыҙыл армеецтар отряды башында коллегия ағзаһы Л. Козлов ебәрелә. Шулай итеп, репрессив саралар ярҙамында властар беҙҙең төбәкте «тынысландырыуға» өлгәшә.

ГПУ хеҙмәткәре Рябов 1923 йылдың мартында Өфөгә түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: «Халыҡ тулыһынса тиерлек һалымдар менән риза түгел. Ҡараңғы төбәктәрҙә халыҡ Совет власы менән ризаһыҙлығын белдерә, мәҫәлән, башҡорт халҡы араһында иҫке Башҡорт хөкүмәтенең Англия һәм Франция менән союзға инеп власты кире аласағы һәм совет власы һалған һалымдарҙан ҡотҡарасағы тураһында хәбәр йөрөй».

Бынан тыш эскелектең киң йәйелеүе, хатта яуаплы партия хеҙмәткәрҙәренең дә эскелеккә бирелеүе тураһында информация бар. Ә бит батша Рәсәйе заманында башҡорт халҡы спиртлы эсемлектәрҙе бөтөнләй ҡулланмаған. Эскелек — халҡыбыҙға большевистик режим алып килгән афәттәрҙең береһе ул.

Халыҡтың совет власы менән ҡәнәғәтһеҙлеге, большевистик режимды бөтөрөү теләге көслө булған. Әммә яңы власть, ҡораллы көстәргә таянып, кантонда тыныслыҡ урынлаштырыу өсөн күп нәмә эшләй. Кантревком (һуңынан кантон башҡарма комитеты) ҡулы аҫтында 24286 ҡыҙыл армеец һәм милиционер, бынан тыш ГПУ-ның ҡораллы көстәре һәм 1921 йылдың 4 июнендә ойоштороған ЧОН-дың 372-се ротаһы була. (Иҫкәрмә: ЧОН — части особого назначения, тик коммунистарҙан һәм комсомолецтарҙан торған ғәскәри берәмек). Рота Белоретта урынлаша, командиры — Кекин фамилиялы кеше. 372-се ротаның составы даими хеҙмәт итеүсе 75 коммунарҙан (коммунист һәм комсомолец) һәм хәбәр алыу менән винтовкаларын алып, рота урынлашҡан ергә килергә тейеш булған кантон территорияһында йәшәгән коммунист һәм комсомолецтарҙан (1922 йылда коммунистар ғына 507 кеше) торған. Шулай итеп тәүге осорҙа һәр коммунист һәм комсомолец винтовкаһын өйөндә һаҡлаған, әммә 1923 йылдың мартында булған барлыҡ ҡоралды складта һаҡларға ҡушыла. Шул саҡта бер инцедент булып ала: Сермән ячейкаһы ҡорал тапшырыуҙан ҡәтғи рәүештә баш тарта. 1923 йылдың 20 мартында Сермән ауылына: «Ҡораллaндырырға һәм ҡулға алырға», — тигән фарман тотоп 1-се отделение командиры 10 ҡораллы коммунар менән юлға сыға.

ЧОН ҡеүәтле аппаратҡа эйә була. Ул тормошобоҙҙоң төрлө мөйөштәренә үтеп инә алған (коммунистар һәм комсомолецтар аша) ойошма була. ЧОН бик ҙур шымсылыҡ селтәрен булдыра (командиры — Мосалев), шуның менән бөтөн халыҡ йәшәгән, эшләгән урын-

дарҙы ҡаплай. Мосалевтың өҫтәленә көн һайын төрлө яҡтан унарлаған ошаҡ килеп ята. һәр бер яңылыш әйтелгән һүҙ, уй-теләк, шикле кешеләр, бәйләнештәр тураһында ауылдарҙа, ҡасабаларҙа йәшәгән коммунистар һәм комсомолецтар Мосалевҡа шунда уҡ хәбәр итеп (ошаҡ яҙып) торған. ЧОН, ГПУ ундай кешеләргә ҡарата ҡаты саралар күргән, Белорет төрмәһе һәр ваҡыт тулы булған.

1920 йылда халыҡ һанын иҫәпкә алыу Тамъян-Ҡатай кантонында 147255 кеше йәшәгәнлеген күрһәтә. Әгәр ҙә кантонда 24286 ҡыҙыл армеец һәм милиционер, бер нисә йөҙ ГПУ хеҙмәткәре һәм ҡыҙыл армеецы, шуларға 500-гә яҡын ҡораллы коммунарҙы (ЧОН) ҡушһаҡ, бөтәһе 25000 штык килеп сыға. Йәғни, һәр 5 кешегә (тыныс халыҡҡа) 1 ҡораллы һаҡсы ҡуйылған булған. Бындай мәғлүмәт совет власы, ысынлап та, штыктарға таянып ҡына урынлашҡан һәм ныҡлаған, тигән фекерҙе ныҡыта.

Шулай итеп, башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, ҡанһырап, 1922 йылда һүнә. Беҙҙең төбәк һәр ваҡыт был хәрәкәттең уртаһында ҡайнаны, колонизаторҙарға ҡаршы, автономия өсөн һәм уны һаҡлап ҡалыу өсөн көрәштә алғы сафта барҙы. Был көрәштә төбәгебеҙ меңәрләгән иң яҡшы улдарын юғалтты: берәүҙәре совет власы ныҡынһын өсөн йәнен бирһә, икенселәре (ҡорбандарҙың күпселеге) ошо режимға ҡаршы тороп, «Башҡортостан өсөн, ләкин коммунистарһыҙ!» байрағы аҫтында һәләк булды. Әлбиттә, беҙгә һуңғылары яҡын, беҙҙең симпатияларыбыҙ Башҡортостан дәүләтен, 7 быуатҡа яҡын ваҡыт үткәндән һуң аяҡҡа баҫтырыусылар яғында. Әммә был, тәүге төркөмгә ингән яҡташтарыбыҙға нәфрәт менән ҡарарға беҙгә бер ниндәй ҙә хоҡуҡ бирмәй. Граждандар һуғышы ике яҡ өсөн дә фажиғә ул, шуға ла беҙ үҙ тарихыбыҙға ҡарата дөрөҫ ҡарашта булырға тейешбеҙ.

## МУСА МОРТАЗИН[8]

Граждандар һуғышы геройы, ике* Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, беренсе ҡыҙыл башҡорт генералы, мәшһүр Муса Лут улы Мортазиндың исеме Башҡортостанға ғына түгел, бөтә Рәсәйгә киң билдәле. Уның хәрби даирәләрҙәге абруйын күҙ алдына килтерер өсөн шуны ғына әйтеү ҙә етә: бөгөнгө көнгә тиклем Мәскәү Генштабының Фрунзе исемендәге академияһында уның һуғыш тактикаһын һәм стратегияһын ныҡлап өйрәнәләр. Күренекле хәрби етәксе, дәүләт эшмәкәре булараҡ, уның исеме башҡорт халҡының хәтеренә һәм Башҡортостан тарихына алтын хәрефтәр менән яҙылған.

М. Л. Мортазин 1891 йылдың 20 декабрендә Ырымбур губернияһының Верхнеуральск өйәҙендә Күбәләк-Тиләү волосының Көсөк ауылында донъяға килә (хәҙерге Учалы районында). Үҙ заманында киң билдәле булған Байрамғол мәҙрәсәһендә белем ала. Алған белеме төплө булғандыр, тип уйларға кәрәк, ни өсөн тигәндә, 1912 йылда армия хеҙмәтенә алынғас, артиллеристлыҡҡа уҡыуға ебәрелә. Ул бөтөн

---

* Муса Мортазинды яҡындан күреп-белгән хәрбиҙәрҙең хәтирәләрендә уның өс Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүе тураһында әйтелә.

көсөн, тырышлығын һалып, артиллерия эшен өйрәнә, һөҙөмтәлә ҙур уңыштарға өлгәшә һәм кесе офицер (фейерверкер) дәрәжәһенә тиклем күтәрелә. Ошо дәрәжәлә ул беренсе герман фронтына ебәрелә һәм 1914 йылдың сентябренән 1917 йылдың майына тиклем Көнбайыш һәм Румын фронттарында һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнаша, хәрби оҫталығын тағы ла ныығыраҡ камиллаштыра, һалдаттар, бигерәк тә мосолман динен тоҡандары араһында, уның абруйы ҙур була, ә юғары командирҙар уны хөрмәт итә. Яңы Байрамғол мәҙрәсәһендә алған белемдәре уға бында ла ярҙам итә: Муса полк муллаһы вазифаһын башҡара.

1917 йылдың яҙында мосолмандарҙың беренсе Бөтә Рәсәй съезына делегаттар һайлау барышында, фронттағы мосолман һалдаттары уға ышаныс белдерәләр. Май айында Муса Лут улы делегат булараҡ, Мәскәүҙә 59 кешенән торған башҡорт фракцияһы составында съездың эшендә ҡатнаша.

1917 йылдың көҙөндә тыуған ауылына ҡайта һәм яңы власты урынлаштырыуҙа ҙур инициатива һәм әүҙемлек күрһәтә. III Бөтә Башҡорт ҡоролтайы эшендә ҡатнашып, ҙур танылыу ала. Башҡортмилли азатлыҡ хәрәкәте етәкселәре менән аралашыу уның Башҡорт дәүләтселеген тергеҙеү идеяһы менән янып йәшәүендә, ғөмүмән, артабанғы яҙмышында хәл иткес роль уйнай.

1918 йылдың башында Ҡазанда үткән Бөтә Рәсәй мосолмандарының II съезы эшендә ҡатнашҡандан һуң ул Мәскәүгә юллана, бында бер ни тиклем ваҡыт Татар-башҡорт комиссариатында эшләп ала. 1918 йылдың февраль ваҡиғалары, атап әйткәндә Башҡорт хөкүмәте ағзаларына, төҙөлөп ятҡан милли ғәскәребеҙгә ҡарата большевиктар тарафынан ҡулланылған репрессив саралар уны урап үтә. Ул Ырымбурға ҡайта, татар-башҡорт милләтле большевиктар менән союзға инеп, большевистик позицияларҙағы Башҡортостан Ваҡытлы революцион советына ағза булып инә, сикләнгән хоҡуҡлы автономия проектын тормошҡа ашырыуҙа ҡатнаша. Әммә ойошторолғанына ике ай ҙа үтмәй, был орган да большевиктар тарафынан ҡыуып таратыла. Муса Лут улы яңынан тыуған төйәгенә ҡайта, волость, һуңынан кантон милицияһын ойошторо, уларға етәкселек итә. Был ваҡытҡа инде башҡорт иленең киләсәгенә уның ҡарашы үҙгәрә: большевиктарға бағлаған өмөттәре селпәрәмә килгәс, Зәки Вәлиди һәм уның көрәштәштәренә яҡыная, сөнки ҡулға ҡорал алып, автономияны яулап алыуҙың берҙән-бер дөрөҫ юл икәнлегенә төшөнә. 1918 йылдың апрель баштарынан ул тулыһы менән башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте яғында була, һаҡмар йылғаһы башында йәшеренеп көн итеүсе Зәки Вәлиди янына ла беренсе булып ул килә. Ошо көндән башлап Муса Мортазин юлбашсыбыҙҙың ышаныслы таяныстарының береһенә әүерелә.

Зәки Вәлиди менән һөйләшеп, эште артабан нисек дауам итеү тураһында кәңәшләшкәндән һуң М. Мортазин Тамъян-Ҡатай кантоны биләмәһендә большевиктарға, советтарға ҡаршы партизандар һуғышын йәйелдереү өсөн тиҙ арала 59 ҡораллы төркөм ойошторороуға өлгәшә.

1918 йылдың май аҙағында чехтар фетнә, күтәргәс тә, Муса Лут улы тиҙ арала Күбәләк-Тиләү волосы егеттәренән Башҡорт ротаһын

ойоштора. Был чехтар ярҙамы менән тергеҙелгән Башҡорт автономияһының тәүге хәрби берәмеге була.

Күп тә үтмәй, Муса Лут улының ялҡынлы эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә, рота полк итеп үҙгәртелә, уға 1-се атлы башҡорт полкы тигән исем бирелә.

Шулай итеп, 1919 йылдың 18 февраленә тиклем (8 айҙан ашыу ваҡыт), Муса Мортазин үҙенең ҡурҡыу белмәҫ яугирҙары менән аҡтар лагерында демократик Рәсәй составындағы демократик Башҡортостан йөмһүриәтен төҙөү эшенә үҙенең бөтөн көсөн, хәрби оҫталығын һала.

1918 йылдың 18-се февраленән башлап ул 1-се Армияның 20-се дивизияһындағы 1-се башҡорт кавалерия полкы командиры. Ошо вазифала ул ҡыҙылдарҙың икейөҙлөлөгөн, уларҙың башҡортҡа ҡарата дошмансыл мөнәсәбәтен тулыһынса үҙ елкәһендә татый. Ләкин нисек кенә булмаһын, ул полкын тарҡатырға бирмәй, бар көсө менән совет власына тоғролоғон иҫбат итергә тырыша, күп ҡорбандар биреп, аҡтарҙан ҙур территорияны азат итә, тик яңынан аҡтар яғына сығырға һәм йәнә 4 ай Колчак армияһы составында һуғышырға мәжбүр була. Аҡ генералдар уның иҫ киткес хәрби һәләтен күреп, 2 атлы полктан торған Башҡорт кавалерия бригадаһын ойошторорға рөхсәт итәләр, һуғыш кәрәк-ярағы, ҡорал бүләләр. Ҡыҙылдар яғына яңынан (был юлы бөтөнләйгә) сыҡҡандан һуң, Муса Лут улына Яйыҡ буйындағы, ҡаҙаҡ далаларындағы аҡ ғәскәрҙәр менән ҡаты һуғыш хәрәкәттәре алып барырға тура килә. Әҙәм ышанмаҫлыҡ ауыр шарттарҙа уның бригадаһы еңелеүҙең нимә икәнен дә белмәйенсә, алға бара, аҡтарҙан бик ҙур ерҙе таҙарта.

*Граждандар һуғышы геройы, ике Ҡыҙыл Байраҡ Ордены кавалеры Муса Мортазин*

Ғәскәрен тулыландырып, Ырымбур эргәһендә бер аҙ ял иткәндән һуң бригада Польша фронтына, һуғыштың иң ҡатмарлы, көсөргәнешле һыҙығына — Киев эргәһенә оҙатыла. Башҡорт атлы бригадаһы командиры вазифаһында һуғышҡа ингән Муса Лут улы күп тә үтмәй армияның кавалерия төркөмө командующийы итеп тәғәйенләнә. Ошо факт үҙе генә лә Муса Мортазиндың ниндәй көслө хәрби етәксе булыуын раҫлай. Муса Лут улы менән бергә уның бригадаһында командирҙар сифатында уның тағы ла 3 яҡын туғаны һуғыша: Әхмәзитәьминәт бүлеге начальнигы, Ибраһим — полк командиры, Әбүбәкер — эскадрон командиры.

Муса Мортазиндың хәрби биографияһынан уның кешелек сифаттарын билдәләүсе бер һыҙат: поляктар тарафынан әсир ителгән ҡустыһы, полк командиры Ибраһим Мортазиндың кәүҙәһен дошман ҡулынан тартып алыр өсөн, Муса Лут улы атлылары менән Варшаваға бәреп инә һәм уның үле кәүҙәһен ҡаланан алып сығыуға өлгәшә. Дошмандар ҡулынан тартып алынған Ибраһимды Киевҡа килтереп, ҡәҙерләп, ҙур хөрмәт менән ерләйҙәр.

Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн ул исеме яҙылған алтын сәғәт, көмөш ҡылыс, 2 Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

1920 йылдың көҙөндә Муса Мортазин бер нисә тиҫтә һуғышсы менән Башҡортостанға ялға ҡайта. Бында уның абруйы, бигерәк тә башҡорт халҡы араһында, бик ҙур була. Муса Мортазиндың ябай халыҡ араһындағы ана шул абруйы 1920 йылдың йәйендә Башҡортостандың автономияһын, уның етәкселәрен яҡлап ҡыҙыл террорға ҡаршы йүнәлтелгән милли хәрәкәтте сағыштырмаса аҙ ҡан ҡойоп баҫтырырға мөмкинселек бирә.

Хәрби-диңгеҙ эштәре́ буйынса Башҡортостандың халыҡ комиссары булып эшләү дәүерендә республикабыҙҙың бойондороҡһоҙлоғон нығытыуға йүнәлтелгән бик күп идеялар, тәҡдимдәр менән сығыш яһап, шуларҙың бер өлөшөн, иҫ киткес ҡаршылыҡҡа ҡарамаҫтан, тормошҡа ашырыуға өлгәшә ул.

1921 йылдың июнендә иҫ киткес ҡатмарлы, көсөргәнешле шарттарҙа, Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе вазифаһын иңенә һалып (хәҙерге заман теле менән әйткәндә, президент булып), республиканы көрсөктән сығарыр өсөн бөтөн тырышлығын, ныҡышмалылығын, абруйын эшкә егә, ҙур ҡыйыулыҡ күрһәтеп Мәскәү алдында республика исеменән һорауҙар, талаптар ҡуя, күп кенә мәсьәләләрҙең ыңғай хәл ителеүенә өлгәшә. Уның был эшмәкәрлеге республика эсендә һәм Мәскәүҙә дошмандарының, көндәштәренең бермә-бер артыуына булышлыҡ итә, унан нисек булһа ла ҡотолоу сараһын эҙләй башлайҙар. Муса Мортазинға ҡарата ла һыналған сара ҡулланыла — ул Башҡортостандан, башҡорт халҡынан ситләштерелә, Мәскәүгә саҡыртып алына.

1922 йылдың апреленән Граждандар һуғышы геройы, Республика башлығы, ғәҙәттә йәш егеттәр уҡый торған, Юғары хәрби-педагогик мәктәпкә курсант итеп алына. Был, әлбиттә, мәшһүр шәхесебеҙҙе күрәләтә түбәнһетеү, кәмһетеү була, әммә Муса Лут улы күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, уҡый башлай.

1920 йылдан 1924 йылға тиклем М. Мортазин Советтарҙың (РСФСР) 8-се, 9-сы, 10-сы, 11-се съездарында, СССР-ҙың 1-се, 2-се съезында делегат булып ҡатнаша, 1921 —1922 йылдарҙа РСФСР ҮБК ағзаһы булып тора.

1924—1927 йылдарҙа Муса Лут улы Фрунзе исемендәге хәрби академияла уҡый, «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында» исемле китабын яҙа. Китап 1927 йылда донъя күрә.

Күп тапҡырҙар Башҡортостанға ҡайтырға тырышып ҡараһа ла, ул быға ирешә алмай. Мәскәүҙәге «почетлы һөргөн» дауам итә. Дөрөҫ, 1928 йылда уға комбриг вазифаһында Төньяҡ Кавказда 1 йыл хеҙмәт

итеп алырға тура килә. Ошонда ул 3-сө Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.

1929 йылдан алып ул яңынан Мәскәүҙә. Аттарҙы яҡшы белә тигән һылтау менән, ул Генштабтың аттар бүлегенә эшкә алына, тәүҙә инструктор, һуңғараҡ бүлек начальнигы ярҙамсыһы, бүлек начальнигы булып эшләй. Был тәғәйенләүҙәр ҙә, әлбиттә, уны кәмһетеү булып тора. 1935 йылда уның менән Граждандар һуғышында бергә йөрөгән башҡа командирҙарға «комкор», «командарм» дәрәжәләре бирелгән бер ваҡытта, Муса Лут улына ҡабаттан «комбриг» званиеһы бирелә. Әммә Муса Мортазин совет власына һаман да ышана, уға тоғролоҡ һаҡлай, бөтөн көсөн бирep Ҡыҙыл Армияны юғары әҙерлектә тотоу өсөн хәленән килгәндең бөтәһен дә эшләй, һаман ғәҙеллеккә ышана... һәм 1937 йылдың 31 майында «халыҡ дошманы» мөһөрө баҫылып, ҡулға алына һәм күп тә үтмәй, 27 сентябрҙә, атып үлтерелә.

Башҡорт халҡының иң күренекле улдарының береһенең ғүмере бына шулай фажиғәле рәүештә өҙөлә. 1956 йылда ул, бинахаҡҡа үлтерелгән тиеп, аҡлана.

## 20-се ЙЫЛДАРҘА

1920 йылдың 16—19 ноябрендә Белоретта кантон советтарының 4 көнгә һуҙылған II съезы эшләй. Беҙҙең төбәктең 8 волосынан унда 48 делегат ҡатнаша. Түбәндә уларҙың исемлеге килтерелә.[9]

1) Ахун волосынан: 1. Дауышев Хәйрулла,
2. Бакиев Кәрим,
3. Усманов Ғәббәс,
4. Вәлиев Ғәбиҙулла,
5. Хатымтаев Шаһийән.

2) Туңғатар волосынан: 6. Рустанов Закир,
7. Рустанов Хәким,
8. Төпәев Әхмәтхан,
9. Рәсүлев Мөждәбә,
10. Әхмәтов Муллағәли,
11. Волчнев Аркадий.

3) Байһаҡал волосынан: 12. Ҡотлобаев Ураҙай — Ихсандан,
13. Иргәлин Солтан — Байһаҡалдан.

4) Мулдаҡай волосынан: 14. Ильин Александр — Мулдаҡайҙан,
15. Харисов Мөхәммәт — Байрамғолдан,
16. Бүләков Шаһишәриф — Мулдаҡайҙан,
17. Имашев Мөхәммәт — Мулдаҡайҙан.

5) Поляковка волосынан: 18. Подтеребков Иван
19. Владимиров Иван.

6) Вознесенка волосынан: 20. Абрамов Андрей.

7) Типтәр-Учалы волосынан:
21. Таипов Талип — Сәфәрҙән,
22. Ғилманов Әмерхан — Ҡалҡандан,
23. Латыпов Ниғәмәт — Учалынан,

24. Камалов Хафиз — Мансурҙан,
25. Солтанов Ҡәүи — Иманғолдан,
26. Шаһиев Әхмәткәрәй — Ураҙҙан,
27. Сөләймәнов Хилажетдин — Рысайҙан,
28. Заһретдинов Заһиҙулла — Юлдаштан,
29. Яруллин Абдулла — Илтабандан,
30. Әхмәтханов Таһир — Сәфәрҙән,
31. Соболев Василий — Учалынан,
32. Заһретдинов Ғәйнетдин — Учалынан,
33. Кәримов Әхмәтвәли — Өргөндән,
34. Сөләймәнов Әмерхан — Илсенән,
35. Зарипов Таһир — Илсенән,
36. Нуриев Шаһиәхмәт — Учалынан.

8) Күбәләк-Тиләү волосынан:

37. Ишморатов Ниғәмәтйән — Сорамандан,
38. Сиражетдинов — Ҡарағужанан,
39. Ҡәләмов Ваһап — Ҡаҙаҡҡолдан,
40. Шәмсетдинов Яуымбай — Ҡаҙаҡҡолдан,
*41.* Щелков Ал.Мих. — милиция начальнигы
42. Ҡаҙаҡҡолов Хөсәйен — Ҡаҙаҡҡолдан,
43. Шәмиғолов Ғиниәт — Рәсүлдән,
44. Ҡаҙаҡҡолов Хәбибулла — Ҡаҙаҡҡолдан,
45. Асафов Мәғәфүр — Ҡаҙаҡҡолдан,
46. Мортазин Ғайса — Көсөктән,
47. Мортазин Әхмәҙи —Көсөктән,
48. Мортазин Дауыт — Көсөктән.

Съезда доклад менән кантревком рәйесе Ш. Дауытов сығыш яһай. Артабан һүҙ Муса Лут улы Мортазинға бирелә. Президиум өҫтәле артында, кантон вәкилдәренән тыш, 1920 һәм 1921 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарын аяуһыҙ баҫтырған Симонов ултыра. Доклад яһау өсөн һүҙ Өфө губревкомы вәкиле Сковцовка бирелә. Сит губерния вәкиленең Белорет ҡалаһындағы съезд трибунаһы артына баҫып доклад яһауын Башҡортостан автономияһын һанға һуҡмау, уның эске эштәренә ҡыҫылыу тип һанарға кәрәк. Сираттағы докладсы — РКП(б)-ның өлкә комитеты вәкиле, Стәрленән килгән Богданов «Башҡорт республикаһын төҙөүҙәге төп бурыстар», — тигән темаға сығыш яһай.

Съездың һуңғы эш көнөндә кантон башҡарма комитетының яңы составы һайлана, унда башҡорт, типтәр, мишәр волостары вәкилдәренә 50 процент урын бирелә. Түбәндә килтерелгән исемлек бының дөрөҫлөгөн раҫлай.

1. Дауытов Шәһиәхмәт
2. Ҡаҙаҡҡолов Хәбибулла
3. Мортазин Әхмәҙи
4. Ғәликәев Зиннәт
5. Иҫкужин Әхмәҙи
6. Ғәликәев Ғайса
7. Рәсүлев Ғабдулла
8. Вәисов
9. Бобров Федор
10. Феоктистов Иван
11. Викман Роберт
12. Сызранкин Федор
13. Козлов Михаил
14. Недоспасов Николай
15. Проскуров
16. Ильчанинов Иван

Әммә шуыһы — 17-се урын завод идараһы вәкиле өсөн вакант итеп ҡалдырыла. Был урынға барыбер урыҫ кешеһе һайланыуы һәм кантонда барыбер урыҫ өҫтөнлөгө һаҡланыуы көн кеүек асыҡ була.

## Продразверстка һәм продналог. 1921 йылғы аслыҡ һәм уның эҙемтәләре.[10]

Башревком составына Мәскәү тарафынан көслөк юлы менән тәғәйенләнгән Аҙыҡ-түлек комиссары Дудник, Лениндың талабы буйынса Башҡортостанды продразверстка селтәре менән ҡаплап, мөмкин тиклем күберәк аҙыҡ-түлекте Үҙәккә оҙатырға тырышһа ла, Зәки Вәлиди, Харис Йомаҡолов һ. б. башҡорт етәкселәренең ҡаршы тороуы арҡаһында (ас-яланғас башҡортто күпме талатырға була), Мәскәү ялсыһы артыҡ ныҡ уңышҡа өлгәшә алмай. Беҙҙең төбәктә, мәҫәлән, 1920 йылдың йәйенә тиклем айырым продотрядтарҙың халыҡты талау буйынса эшмәкәрлеген иҫкә алмағанда, продразверстка тамыр ебәрә алмай. Беҙҙең волостарыбыҙ халҡы продразверстканың ни икәнлеген республикала власҡа татар-урыҫ шовинистары килгәс кенә белә. 1920 йылда иген уңмай, әммә уның менән генә көс етмәҫлек продразверстканан ҡотола алмай. Беҙҙең төбәктә продразверстка түбәндә һанап үтелгән аҙыҡ-түлек һәм сеймал менән түләтелгән:

1. Иген (арыш, бойҙай, һоло, арпа, ҡарабойҙай);
2. Игенләтә мал аҙығы;
3. Ит һәм мал;
4. Май һәм һөт продукттары;
5. Йомортҡа;
6. Ҡош-ҡорт;
7. Йәшелсә, картуф;
8. Йөн;
9. Киндер;
10. Етен;
11. Бесән, һалам;
12. Тире (малдыҡы);
13. Сәс;
14. Балыҡ;
15. Бал һәм башҡалар.

Халыҡты асыҡтан-асыҡ талау менән (был осраҡта башҡа һүҙ ҡулланыу мөмкин дә түгел) штатында 220 кеше (ат ҡараусы менән мейес яғыусыны иҫәпләгәндә, башҡорттар 1 процент) Белорет һәм уның тирәһендәге ауылдарҙың урыҫтарынан торған Кантон Аҙыҡ-түлек комитеты (КАТК) шөғөлләнгән. Шовинизм рухы менән ағыуланған был комитет ағзалары ас-яланғас башҡортҡа ҡарата һис бер йәлләүҙе белмәгән, уның ауыр хәлен аңларға теләмәгән дә. Цифрҙарға мөрәжәғәт итәйек. Советтарҙың I һәм II кантон съездары араһында ғына (1920 йылдың июнь-ноябре) игенселек менән бик аҙ шөғөлләнгән Туңғатар волосы башҡорттарынан — 13, Мулдаҡай волосы башҡорттарынан 12 тонна бойҙай тартып алына (сағыштырыу өсөн: һәр бер ғаиләһе күп итеп иген сәскән Поляковка волосы — 12, Вознесенка во-

лосы 8 тонна бойҙай тапшыра). Бында, әлбиттә, ғәҙеллек хаҡында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Шулай итеп, КАТК иген буйынса продразверстканы үтәүгә өлгәшә, әммә халыҡ, беренсе сиратта башҡорттар, туҡланыу өсөн икмәкһеҙ, сәсеү өсөн орлоҡһоҙ ҡалдырыла.

Ит продразверсткаһы үтәлмәй ҡала: 1921 йылдың 21 мартында Стәрленән алынған телеграммаға ярашлы, «малдың ябығыуы сәбәпле», ит-мал йыйыу туҡтатып торола.

1921 йылдың яҙы яҡынлаған һайын, орлоҡ булмау сәбәпле сәсеүҙе ойошторо п, үткәреп булмаясағы тураһында волостарҙан хәүефле хәбәрҙәр килә башлай. Сәсеү кампанияһын өҙөү бик ҙур сәйәси эҙемтәләргә килтереүе һәм 1920 йылдағынан да көслөрәк халыҡ күтәрелешен тыуҙырыуы мөмкин ине. Яңы халыҡ ихтилалын булдырмау маҡсатында бурысҡа алынған орлоҡто волостарға өләшеп бирергә кәрәк, тигән ҡарарға киләләр кантонда. Барлығы 318 тонна орлоҡ таратып бирелә. Шул иҫәптән:

1. Типтәр-Учалы волосына — 120 тонна.
2. Күбәләк-Тиләү волосына — 86 тонна.
3. Туңғатар волосына — 40 тонна.
4. Ахун волосына — 32 тонна.
5. Вознесенка волосына — 16 тонна.
6. Поляковка волосына — 15 тонна.
7. Байһаҡал волосына — юҡ.

Был аптырағандың көнөнән эшләнгән сараны, «совет власының ҙур хәстәрлеге» итеп күрһәтеү өсөн большевистик пропаганда көсөн йәлләмәй, тик уны кире ҡайтарып бирергә кәрәк буласағы тураһында, әлбиттә, өндәшеп тормайҙар. Ғөмүмән, уны ярҙам тип әйтеүе лә оят, сөнки 1920 йылдың уңышын ҡырып-һепереп крәҫтиәндән тартып алыусы ла, тимәк, орлоҡһоҙ, ҡалдырыусы ла совет власының үҙенән башҡа бер кем дә түгел ине.

1921 йылдың яҙ-йәй айҙарында аслыҡ үҙен Белоретта ла ныҡ һиҙҙерә: ай һайын бушлай таратыла торған паек ныҡ ҡына кәмей. Быға артыҡ аптырарлыҡ та түгел, ни өсөн тигәндә, кантонда йәшәгән халыҡтың яртыһынан күбен кантон аҙыҡ-түлек комитеты паек менән бушлай тәьмин иткән була. Волостарҙа, ауылдарҙа йәшәүселәр генә аслыҡтан ҡырыла-ҡырыла үҙ көндәрен үҙҙәре күрә. Әммә совет власы үҙенең таянысы булған хәрбиҙәрҙе, милицияны, чиновниктар аппаратын асыҡтырмау өсөн бар көсөн һала. Түбәндә 1921 йылдың 1 ғинуарына ҡарата бушлай паек алыусыларҙың исемлеге килтерелә:

1. Хәрби частар һәм милиция — 24286 кеше.
2. Учреждениеларҙағы совет хеҙмәткәрҙәре — 4255 кеше.
3. Уларҙың ғаиләләре — 15503 кеше.
4. Ҡызыл армеецтарҙың ғаиләләре — 14577 кеше.
5. Ярлы халыҡ һәм инвалидтар — 14405 кеше.
6. Балалар йорттарына (балалар һәм уларҙы ҡараусылар) — 3270 кеше.
7. Больница (ауырыуҙар һәм персонал) — 510 кеше.
8. Төрмә — 140 кеше.

9. Инвалидтар йорто — 100 кеше.
Йәмғеһе 77046 кеше.

1921 йылдың йәйендә ошо 77046 кешенең тамағын туйҙырыу проблемаға әйләнгәс, кантон башҡарма комитеты Мәскәү рөхсәте менән 160 тонна сөйҙә Себерҙә игенгә алмаштырырға мәжбүр була. 320 тонна Себер игене Белоретҡа вагондарҙа сентябрь айында уҡ килә башлай, һөҙөмтәлә үрҙә һанап үтелгән кешеләр аслыҡ тырнағынан йолоп алып ҡалына, әммә 77046 кешенең 70—80 проценты урыҫ милләтенән булғанлығын, йәғни урыҫ халҡын айырып ҡына ҡотҡарып алып ҡалыуҙарын аңлатыуы ла, онотоуы ла бик ауыр.

1921 йылда (март) РКП(б)-ның X съезы продразверстканы продналог менән алмаштырыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Кантонда ла аҙыҡ-түлек комитетының эшендә үҙгәрештәр була: 2 әҙерләү — ҡабул итеү конторaһы асыла. Береһе Белоретта, уның ҡарамағында 4 ярҙамсы пункт була. Икенсеһе — Поляковкала һәм уның берҙән-бер ярҙамсы пункты Илселә урынлаштырыла. Ул Аллаж тигән кешенең йортонда бер бүлмәне биләй. Эргәһендә иген амбары (80 тонна һыйҙырышлы), сеймал һаҡлау өсөн келәт, май һаҡлар өсөн подвал да була. Продналогты ваҡытында һәм тулыһынса йыйып алыу өсөн кантон 5 районға бүленә. Был эштәрҙең һәммәһе лә аслыҡ киҫ ҡолас алған ваҡыттарҙа — 1921 йылдың июлендә башҡарыла.

Райондарға килгәндә, I район (үҙәге Поляковка) — 6 волосты үҙ эсенә ала: Мулдаҡай, Туңғатар, Поляковка, Вознесенка, Ахун һәм Типтәр-Учалы. Уполномоченный итеп аҙыҡ-түлек ғәскәре хеҙмәткәре Нужин тәғәйенләнә. II районға башҡа волостар менән бер рәттән Байһаҡал һәм Күбәләк-Тиләү индерелә. Милиция начальнигы ярҙамсыһы Иҫкужин был райондың уполномоченныйы була.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, ауыл советтары аша һәр ғаилә башлығына: «1921 йылдың ноябренә тиклем продналогты тапшырып бөтөргә», — тигән талап еткерелә. Талап һүҙҙә генә ҡалмаһын өсөн, продналогты түләтеүҙә өҙөклөккә юл ҡуймау маҡсатында, Ғәҙәттән тыш удар төркөм (ҒУТ) барлыҡҡа килтерелә («тройка»). Уның составы:

1) Н. А. Борисов — БҮБК һәм БАТХК-тарының ғәҙәттән тыш уполномоченныйы;

2) Л. В. Козлов — кантондың аҙыҡ-түлек комитеты рәйесе;

3) Әхмәҙи Мортазин — кантон башҡарма комитеты рәйесе.

ҒУТ большевистик тәүәккәллек һәм рәхимһеҙлек менән эшкә ихлас тотона. Кантонда ҡот осҡос аслыҡ хөкөм һөрөүе лә «тройканың» эшенә кәртә була алмай. 1921 йылдың июль-сентябрь айҙарында халыҡ ҡан илап аҙыҡ-түлек һалымын түләргә мәжбүр була.

Бары тик 1921 йылдың 19 октябрендә генә һалым ҡыҫымы бер ни тиклем еңеләйтелеп, беҙҙең төбәктең Мулдаҡай, Туңғатар, Поляковка, Вознесенка, Типтәр-Учалы, Ахун, Күбәләк-Тиләү волостары иген һәм бесән һалымынан ҡотҡарыла.

Аслыҡтың көсәйеүе 1921 йылдың 13 августа Асығыусыларға ярҙам итеү буйынса Ғәҙәттән тыш комиссияның ойоштороуына килтерә. Ярҙам бик бәләкәй була: Ҡаҙаҡҡолда 200 кешене, Учалыла 400 кешене туйындырырлыҡ ашханалар асыла. Асығыусы халыҡтың

20-нән берәүһе генә ошо хәйриә ашханаларының исемлегенә индерелә, ә ҡалған 19-ның яҙмышы бер кемде лә борсомай. Тарихсыларҙың иҫбатлауынса, ваҡытында Америҡаға йәки башҡа сит илдәргә ярҙам һорап мөрәжәғәт иткәндә, халыҡтың астан ҡырылыуына юл ҡуймаҫҡа мөмкин булыр ине, әммә большевистик Ленин хөкүмәте быны эшләмәгән. Ғөмүмән, ябай халыҡты ҡайғыртып, уның хәстәрлеге менән йәшәү Лениндың һәм башҡа большевистик етәкселәрҙең планына инмәгәндер, тигән фекергә киленә.

1922 йылдың башынан «Аслыҡ эҙемтәләрен бөтөрөү буйынса комиссия» эшен башлай. Аслыҡтың тулы картинаһын Байһаҡал волосы башҡарма комитеты тарафынан төҙөлгән отчет бирә. 1922 йылдың 1-се ғинуарына волоста ни бары 720 кеше генә тере ҡалған була. Ғинуар айында шуларҙың 30-ы аслыҡтан яҡты донъя менән хушлашһа, февралдә — 31, мартта — 24, апрелдә — 30, майҙа — 22, июндә — 33 кеше үлә. Хәлдән тайған халыҡ июлдә лә ҡырылыуын дауам итә — тағы 15 кеше вафат була. Август айында ғына аслыҡтан бер кем дә үлмәй. Шулай итеп, 1922 йылдың авгусына волоста 524 кеше генә иҫән тороп ҡала. Ошо 7 ай эсендә (ғинуар-июль) аттарҙың һаны (төп эш ҡоралы) 225-тән 88-гә тиклем кәмей, халыҡ астан үлмәҫ өсөн һуңғы атын һуйып ашарға мәжбүр була. Һыйырҙар һаны ла шул сәбәпле 207-нән 112-гә тороп ҡала.

Әлбиттә, властар асығыусы халыҡты ҡотҡарып алып ҡалыр өсөн бер ни ҙә эшләмәгән, тип раҫлай алмайбыҙ. 1922 йылдың февралендә 54 кешегә иҫәпләнгән (шул иҫәптән 43 балаға) ашхана асыла, тик ул ғына асығыусыларҙы ҡотҡарыр өсөн бик әҙ була.

Ошо урында беҙ мөһим бер иҫкәрмә эшләргә тейешбеҙ: Асығыусыларға ярҙам итеү комиссияһы ла (1921 йыл), аслыҡ эҙемтәләрен бөтөрөү комиссияһы ла (1922 йыл) ғәмәлдә урыҫтар ҡулында була (99 процент), шуға ла кантонға килгән ярҙамдың төп өлөшө, асығыуасыҡмауҙарын тикшереп тормаҫтан, урыҫ волостарына ебәрелә. Шулай уҡ был да тарихи факт".

Бары тик 1922 йылдың йәйендә генә АРА (Америка ярҙам администрацияһы), аслыҡтан интегеүселәргә тейешле ярҙамды ойоштора ала. Июль айында Байһаҡал волосында АРА ашханаһында 420 кеше, шул иҫәптән 150 бала, тамаҡ туйҙыра. Американдар теләк булғанда эште тейешле кимәлдә ойошторо булғанлығын иҫбат итә. Кантонда 1920 йылдың 1 ғинуарына 147255 кеше йәшәһә, 1922 йылдың көҙөнә ул 100000 тороп ҡала, икенсе төрлө әйткәндә, һәр өсөнсө кеше аслыҡтан үлә.

Тамъян-Ҡатай кантоны башҡорттарының төп кәсебе мал аҫырау булған, шуға күрә игенселектең юҡ дәрәжәһендә икәнлеге аңлашылалыр. Ошо айҡанлы тағы ла 1 цифрҙы килтерәбеҙ. Мал һаны кантонда 1922 йылдың йәйенә 76 процентҡа кәмегән, ләкин малды һуйып ашау ғына башҡорт халҡын ҡот осҡос аслыҡтан ҡотҡара алмаған.

Түбәндә бик характерлы документ — 1922 йылдың ғинуар башында 5000 ҡоро паекты асығыусы халыҡҡа нисек бүлеүҙәрен күрһәткән таблицаны килтерәбеҙ.

Ябай ғына иҫәпләүҙәр шуны күрһәтә: игенселек менән шөғөлләнеү тәжрибәһе булған ныҡлы хужалыҡлы Поляковка, Вознесенка, Ахун,

| Волостар | Ололарға | Балаларға | Бөтәһе |
|---|---|---|---|
| 1. Күбәләк-Тиләү | 310 | 340 | 650 |
| 2. Туңғатар | 80 | 130 | 210 |
| 3. Мулдаҡай | 90 | 110 | 200 |
| 4. Байһаҡал | 30 | 50 | 80 |
| 5. Ахун | 75 | 85 | 160 |
| 6. Типтәр-Учалы | 150 | 250 | 400 |
| 7. Вознесенка | 40 | 60 | 100 |
| 8. Поляковка | 60 | 90 | 150 |

Типтәр-Учалы волостары халҡына ла, игенселек менән әҙ шөғөлләнгән (ә Байһаҡал волосында ул бөтөнләй булмаған) башҡорт волостарына ла ҡоро паек тигеҙ, йәғни волоста йәшәгән халыҡ һанына ҡарап, пропорциональ рәүештә бүленгән. Тәү ҡарашҡа бындай бүлеү ғәҙел һымаҡ. Ә төптән уйлаһаң, ундай тигеҙләү заманына күрә ҡот осҡос енәйәткә тиң, сөнки икмәк запастары булған урыҙ, мишәр, типтәр волостары аслыҡты күпкә еңел кисерә, ә башҡорттар ауылдары менән ҡырыла. Быныҡ һөҙөмтәһе бөгөн дә асыҡ күренә: бәләкәй ауылдың ҡайһыһын алма, ул башҡорт ауылы булыр, ә ҙур ауылдар — урыҙ, мишәр, типтәрҙеке.

**Мәғариф эшенең торошо.**

1920 йылдан кантон мәғариф бүлеге мөдире булып Ғабдулла Рәсүлев эшләй. 1920 йылда кантон большевиктарға ҡаршы йүнәлтелгән милли-азатлыҡ хәрәкәте менән солғап алынғанлыҡтан, мәғариф бүлегенең эшмәкәрлеге Белорет менән генә сикләнә.

1921 йылдың яҙында кантонда барлығы 168 I баҫҡыс һәм бер II баҫҡыс башҡорт мәктәбе эшләй, 62 I баҫҡыс һәм дүрт II баҫҡыс урыҙ мәктәбе була. Уҡытыусыларға килгәндә, уларҙың күпселеге совет власын, уның сәйәсәтен ҡабул итмәй, большевиктарға дошман ҡарашта була. Уҡытыусылар революцияға тиклем үҙҙәре эйә булған привилегияларҙан мәхрүм иткән өсөн яңы власты күрә алмай. Шуға ла мәғариф бүлеге уҡытыусыларҙың яңы быуынын булдырыу өсөн күп көс һала, 1921 йылда 200 кешегә иҫәпләнгән 3 айлыҡ уҡытыусылар әҙерләү курсын асыу өсөн ҙур тырышлыҡ күрһәтә. Әммә 1921 йыл аслыҡ алып килә, ә ул үҙ сиратында күп пландарҙы ситкә ҡуйып торорға мәжбүр итә: мәктәптәр бер-бер артлы ябыла, балалар астан ҡырыла. Ошондай шарттарҙа мәғариф бүлеге беҙҙең төбәктә эшләгән 4—5 балалар йортона (Ҡалуй, Ҡалҡан, Ҡарт-Муйнаҡ, Ҡобағош, Муса) өҫтәп тағы ла 30—35 яңы балалар йортон астырыу мәшәкәте менән була, әммә аҡсаның етмәүе, матди хәлдең хөрт булыуы балалар йорттарының һанын 17-нән, ә балалар баҡсаларын 4-тән арттырырға мөмкинселек бирмәй. Асылған балалар йорттарында ла хәл яҡшынан булмай: ашау бик насар булғанлыҡтан, балалар бында ла күпләп ҡырыла.

1921 йылдың 26 октябрендә Белоретта советтарҙың III кантон съезы асыла. Съезд 5 көн эшләй һәм 30 октябрҙә генә тамамлана.

Съезд эшендә беҙҙең төбәктән 57 делегат ҡатнаша, шул иҫәптән Күбәләк-Тиләү волосынан 22, Типтәр-Учалы волосынан — 15, Туңғатар волосынан — 6, Ахун волосынан — 5, Мулдаҡай волосынан — 4, Поляковка һәм Байһаҡал волостарынан — 2-шәр, Вознесенканан — 1 делегат. Съезда өҫтөнлөк тулыһынса урыҫтар ҡулында була. Аслыҡ депутаттар нисбәтен дә үҙгәртә: съезда 108 урыҫ делегаты, 61 башҡорт, 11 типтәр, 3 татар делегаты ҡатнаша. Съезды кантон башҡарма комитеты рәйесе Козлов аса. Докладтар тик урыҫ телендә генә уҡыла. 11 докладсының тик береһе генә (Ваисов, мәғариф бүлеге мөдире) башҡорт була. Кантон башҡарма комитетының бүлек мөдирҙәре лә, 1—2 кешенән башҡаһы, урыҫ милләтле була. Съезд КБК-ның яңы составын һайлай: 15 ағзаның 8-е урыҫтарҙан тора. Советтарҙың Бөтә Башҡортостан съезына һайланған 16 делегаттың да 9-ы урыҫ була.

1922 йылдың йәйендә КБК рәйесе вазифаһына Исмәғил Солтанов (Ҡотойҙан) тәғәйенләнә.

## Коммунистарҙың һәм комсомолдарҙың эшмәкәрлеге.

Урыҫтарҙың хакимлығы бигерәк тә кантон партия комитетының эшмәкәрлегендә асыҡ күренә. 1922 йылдың 1 июненә кантонда бөтәһе 507 коммунист (кандидаттар менән бергә) булып, шуларҙың 199-ы башҡорт милләтенән була (39 процент). РКП(б) кантон комитеты 11 кешенән тороп, 6-һы урыҫ була[12].

Хәл 1923 йылда тағы ла нығыраҡ үҙгәрә: 512 коммунистың 177-һе генә башҡорт була, канткомдағы 13 кешенең 9-ы урыҫ. Шулай итеп, кантон комитеты большевистик идеология менән бергә колонизаторлыҡ сәйәсәтен үткәреүсе көслө ҡоралға әйләнә. Ә инде урыҫ большевиктарының РКП(б)-ның кантон комитетын ғына түгел, ә кантон башҡарма комитетын да ҡулдарында ныҡ тотоуы, Мәскәүгә ошо органдар аша үҙ сәйәсәтен тотороҡло үткәрергә мөмкинлек бирҙе, төбәгебеҙгә ҡот осҡос зыян килтерҙе, милләтебеҙҙең тамырҙары ҡороуына киң юлдар асты.

1924 йылдың ғинуарында партияла 535 кеше булып, улар 35 ячейка тәшкил иткән. Башҡорттарҙы властан ҡыҫырыҡлап сығарыу 1919 йылдан алыҫлаша барған һайын үҙен көслөрәк һиҙҙергән. Мәҫәлән, 1924 йылдың 1 апрелендә РКП(б)-ның кантон комитеты президиумында бөтәһе 17 кеше булып, шуларҙың 12-һе урыҫ булған, башҡорттар икәү генә (Бүләков Шаһишәриф һәм Хажин Нуретдин) була. Бында һәр төрлө комментарий артыҡ.

1924 йылда беҙҙең төбәктә 10 партия ячейкаһы иҫәпләнгән.

РКП(б)-ның волкомдарына туҡталайыҡ. 1924 йылда Учалы волкомында секретарь булып Булатов Ғилмулла (1920 йылдан партия ағзаһы), ағзалары булып Вәлиев Хәбибулла һәм Латыпов Ниғәмәттәр торған. Туңғатар волкомы ла 3 кешенән торған: Ғәфүров Низам (1920 йылдан партия ағзаһы), сәркәтип. Ағзалары: Хәҙисов Шәриф һәм Мусик Александр, эшсе, 1917 йылдан партия ағзаһы. Күбәләк-Тиләү

| Волостар | Ауылдар | Ағзалар | Канд. | Бөтәһе | Сәркәтиптәре |
|---|---|---|---|---|---|
| 1. Типтәр-Учалы | 1. Учалы | 6 | 6 | 12 | Баһапов |
| | 2. Ахун | 5 | 1 | 6 | Ясаков Әхтәм |
| 2. Туңғатар | 3. Туңғатар | 3 | 5 | 8 | Ғәфүров Низам |
| 3. Вознесенка | 4. Вознесенка | 1 | 4 | 5 | Кузьмин Василий |
| 4. Мулдакай | 5. Мулдакай | — | 4 | 4 | Имашев Әхмәт |
| 5. Күбәләк-Тиләү | 6. Ҡаҙаҡкол | 2 | 8 | 10 | Мостафин Әхмәҙи |
| | 7. Алтаяҡ | 2 | 2 | 4 | Мортазин Әбүбәкер |
| | 8. Ҡолош | 1 | 3 | 4 | Хажин Мөхәммәт |
| | 9. Сораман | — | 6 | 6 | Хәбибуллин Әхмәҙулла |
| | 10. Ишмәкәй | 2 | 2 | 4 | Шәмиғолов Ғиниәт |

волкомының секретары — Хажин Нуретдин, 1920 йылдан партия ағзаһы; Мортазин Әбүбәкер һәм Мостафин Әхмәҙи — ағзалары.

1924 йылдың йәйенә «Ленин саҡырыуынан» һуң, коммунистарҙың дөйөм һаны (кантон буйынса) 789-ға етә, шуларҙың 171-е башҡорт була (22 процент). Шулай итеп, ике йыл эсендә башҡорт коммунистарының һаны 199-ҙан 172-гә тиклем кәмене (коммунистарҙың дөйөм һаны 507-нән 789-ға тиклем артҡан бер ваҡытта). Һығымта:

1). 1922 йылда бөтә коммунистарҙың 39 проценты башҡорт милләтенән булһа, 1924 йылда улар 22 процентҡа тороп ҡала. Был, беренсенән, аслыҡтан ҡайһы милләт ныҡыраҡ зыян күргәнлеген иҫбатлаусы бер факт (дәлил) булһа, икенсенән, башҡортто властан ситләштереүгә йүнәлтелгән сәйәсәттең асыҡ сағылышы ине (етәксе вазифаһына башлыса коммунистар ғына тәғәйенләнде);

2). Башҡортостанда ла, Мәскәүҙә лә власть башында империалистик, колониаль сәйәсәт үткәргән бер үк фирҡә вәкилдәре ултырған хәлдә, башҡортҡа ҡарата яҡшы сәйәсәт көтөү файҙаһыҙ ине;

3). Империализм, шовинизм идеялары әсә һөтө менән ҡандарына һеңгән урыҫ сәйәсмәндәре (ниндәй фирҡәлә тороуҙарына ҡарамаҫтан) бер ваҡытта ла колонияларға, шул иҫәптән Башҡортостанға, азатлыҡ биреү яҡлы булмаясаҡ.

## 1921—1923 йылдарҙа ауылдарыбыҙҙа кооперация хәрәкәте.[13]

РКП(б) ның X съезы (1921, март) ҡарарҙарын тормошҡа ашырып, урындағы партия органдары ерендә кооператив хәрәкәтте нигеҙләүгә һәм үҫтереүгә тотоналар. Был эш 1921 йылдың августа, аслыҡ хөкөм һөргән осорҙа башлана һәм киң ҡолас ала. Әлбиттә, бында большевистик агитаторҙарҙың: «Совет власы артелдәргә, ауыл хужалығы кооператив товариществоларына 1922 йылғы сәсеү кампанияһын үткәреүҙә орлоҡ, эш аты, техника менән ярҙам итәсәк», — тигән белдереүе хәл иткес роль уйнай.

Беҙҙең төбәктә беренсе булып регистрация үтеүсе (29/VIII—21-се йыл) ауыл хужалығы кооператив товариществоһы — Көсөк ауылының (Күбәләк-Тиләү волосы) «Ҡыҙыл ындыр»ы. Ул 9 эшләүсене, 17 ат, 18 һыйыр, 29 һарыҡ-кәзәне берләштерә. АХКТ-һының ҡарамағында тағы ла 7 һуҡа, 12 тырма һәм 30 дисәтинә һөрөнтө ер була. Ойошторусыһы — Таһиров.

«Ҡыҙыл ындыр» өлгөһөндә тағы 3 АХКТ-һы төҙөлә: Байрамғолда (рәйесе Хәмиҙуллин), Рафиҡта (рәйесе Ғарипов) һәм Ҡолошта (рәйесе Хәлиуллин). Уларҙың һәр береһе 10-дан алып 20-гә тиклем эшләүсене, 12—25 дисәтинә һөрөнтө ер, 10-дан алып 23-кә тиклем атты берләштергән, йәғни АХКТ-ларына башлыса эшләргә, сәсергә мөмкинселеге булған халыҡ ҡына ингән.

1921 йылдың декабре — 1922 йылдың февралендә Күбәләк-Тиләү һәм Типтәр-Учалы волостарында 18 артель барлыҡҡа килә, элегерәк төҙөлгән АХКТ-лар ҙа «артель» тип исемләнә башлай.

Түбәндә уларҙың исемлеген килтерәбеҙ:

| №№ т/б | Волость | Ауыл | Артель исеме | Эшсе көсө | Рәйесе | Пай взностары суммаһы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1. | Күбәләк- | 1) Ҡаҙаҡҡол | «Ҡаҙаҡҡол» | 24 | Ғибаҙуллин | 2,8 млн.һум |
| | Тиләү | 2) Мәҫкәү | «Кәртәле» | 10 | Шакиров | 1 млн.һум |
| | | 3) Оҙонкүл | «Оҙонкүл» | 10 | Шәрипов | 1 млн.һум |
| | | 4) Көсөк | «Т имер» | 9 | Ғарипов | 0,5 млн.һум |
| | | 5) Ҡарағужа | «1-се ай» | 12 | Сиразетдинов | — |
| | | 6) Оҙонкүл | «2-се Оҙонкүл» | 15 | Ғәйнуллин | — |
| | | 7) Абдулҡасим | «Абдулҡасим» | 20 | Аллаяров | 1 млн.һум |
| | | 8) Амангилде | «Әкәрте» | 7 | Ғимранов | 0,3 млн. |
| | | 9) Әбләҙе | «2-се ай» | 10 | Фәсхетдинов | 0,5 млн. |
| | | 10) Әбләҙе | «Урал» | 10 | Фәзлетдинов | 0,5 млн.һум |
| | | 11) Әбләҙе | «Күк» | 10 | Әҙелжанов | 0,5 млн. |
| 2. | Типтәр- | 12) Илтабан | «Әрлән» | 12 | Ибраһимов | 1,2 млн. |
| | Учалы | 13) Илтабан | «Мәмәлек» | 7 | Ибраһимов | 0,7 млн. |
| | | 14) Ҡунаҡбай | «Ҡунаҡбай» | 20 | Әхмәҙиев | 3 млн. |
| | | 15) Ҡунаҡбай | «Юшалы» | 18 | Ғәлимов | 0,9 млн. |
| | | 16) Ҡунаҡбай | «Йондоҙ» | 14 | Ғабдрахманов | 1,4 млн. |
| | | 17) Ҡунаҡбай | «Бирнәк» | 14 | Ибраһимов | 2 млн. |
| | | 18) Иманғол | «Ағын» | 16 | Солтанов | 0,8 млн. |

Түбәндә тағы ла бер таблица килтерәбеҙ. Ул шуныһы менән ҡиммәтле: беҙ унда волостарыбыҙға нисә ауыл ингәнлеген, уларҙа нисә хужалыҡ булғанлығын һәм һөрөнтө ерҙәренең дөйөм майҙанын белә алабыҙ. Бынан тыш, был таблица артелдәр һанын белергә, улар тураһында башҡа мәғлүмәттәр алырға мөмкинселек бирә (1922 йылдың 1 апреленә):

| № т/б | Волость | Нисә ауыл ингән | Бөтәһе нисә хужалыҡ булған | Һөрөнтө ер (бөтәһе) | Артелдәр һаны | Уларҙа ағзалар һаны | Һөрөнтө ер (дес.) | Ат һаны |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1. | Күбәләк-Тиләү | 45 | 2424 | 9840 | 94 | 1010 | 406 | 1483 |
| 2. | Байһаҡал | 3 | 106 | 123 | 8 | 62 | 21 | 87 |
| 3. | Типтәр-Уч. | 12 | 3600 | 18586 | 138 | 1416 | 6898 | 1705 |
| 4. | Туңғатар | 15 | 952 | 15207 | 59 | 485 | 3102 | 588 |
| 5. | Мулдаҡай | 10 | 467 | 14535 | 36 | 310 | 938 | 381 |
| 6. | Ахун | 3 | 351 | 1620 | 19 | 211 | 1277 | 162 |
| 7. | Поляковка | I | 400 | 1379 | 23 | 150 | 717 | 193 |
| 8. | Вознесенка | 1 | 436 | 1691 | 24 | 211 | 852 | 381 |

1922 йылдың яҙын беҙҙең төбәк халҡы бик хәлһеҙләнеп ҡаршы ала. Һөҙөмтәлә, һөрөнтө ерҙәрҙең 26 проценты ғына сәселә. Волостар буйынса хәл түбәндәгесә:

— Күбәләк-Тиләү — 30 процент;
— Ахун — 27 процент;
— Туңғатар, Мулдаҡай, Поляковка, Вознесенка — 25 процент;
— Типтәр-Учалы волосы — 24 процент;
— Байһаҡал — 0 процент.

Сағыштырыу өсөн хәҙерге Белорет районының урыҫ ауылдарын алайыҡ — улар һөрөнтө ерҙәренең 50 процентын сәсә ала. Был Белорет районындағы урыҫ ауылдарын, күпселеген урыҫтар тәшкил иткән кантон аҙыҡ-түлек бүлеге нығыраҡ ҡайғыртҡан, тигән фекергә килтерә.

Кантон аҙыҡ-түлек бүлеге 1922 йылғы сәсеүгә волостарыбыҙға 159 тонна орлоҡ бүлә, һөҙөмтәлә 3038 ер дәүләт орлоғо менән сәселә. Бынан тыш, төбәгебеҙҙә 7184 дисәтинә ергә арыш сәселә, шуның 71 проценты (5107 дис.) дәүләт орлоғо менән.

Ауыл хужалығында кооперацияның артабанғы үҫеше түбәндәгесә була:

— 1922 йыл, 1 июль. Кантон буйынса: 1 коммуна, 13 артель, 4 АХКТ.

— 1923 йыл, 1 апрель. Кантон буйынса: коммуна — юҡ, артель — 67 (101 кеше), АХКТ — юҡ.

Йәғни, ауыл хужалығында кооператив хәрәкәтте йәйелдереү буйынса тырышлыҡ һөҙөмтә бирмәй. Улар тиҙ арала үҙҙәренән-үҙҙәре юҡҡа сығып бөтә.

1923 йылдың яҙында ла кантон аҙыҡ-түлек бүлеге крәҫтиәндәргә ярҙамға (һуңынан кире ҡайтарыу шарты менән) байтаҡ ҡына орлоҡ тарата.

1923 йылдың яҙында ярҙамға таратылған орлоҡ:

| № т/б | Волость | бойҙай т. | һоло т. | арпа т. | ҡара-бойҙай кг. | Киндер кг. | Етен кг. |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 1. | Учалы | 70 | 80 | — | 4,8 | 160 | 640 |
| 2. | Туңғатар | 14,4 | 32 | — | 1,6 | 80 | 480 |
| 3. | Мулдаҡай | 6,4 | 9,6 | — | 4,8 | 80 | 400 |
| 4. | Вознесенка | 6,4 | 11,2 | — | 4,8 | 80 | 400 |
| 5. | Поляковка | 6,4 | 11,2 | — | 4,8 | 80 | 400 |
| 6. | Байһаҡал | — | 7,5 | 0,8 | 1,6 | — | — |
| 7. | Күб.-Тил. | 25,6 | 48 | — | 7,4 | 240 | 960 |
| 8. | Ахун | 20,8 | 28,8 | — | 1,6 | 80 | 400 |

Һөҙөмтәлә, 1923 йылдың сәсеү кампанияһы ойошҡан рәүештә, уңышлы үтә.

1923 йылдың ноябрендә Белоретта советтарҙың V кантон съезы булып үтә. Кантон башҡарма комитеты рәйесе итеп Багаев һайлана, Туңғатар ВБК рәйесе Шәһишәриф Бүләков кантон ер идаралығы мөдире итеп һайлана, элекке эшен ул Хәҙисовҡа тапшырып китә.

## Кирәбе ауыл советының Тамъян-Ҡатай кантонына ҡушылыуы.[14]

1917—1922 йылдарға ҡараған материалдарҙы өйрәнгәндә бер урында ла «Кирәбе» һүҙенең осрамауы аптырата ине. Байһаҡал волосына ингән ауылдар исемлегендә Кирәбе ауылы юҡ, Туңғатар волосы ауылдары исемлегендә лә, Типтәр-Учалы волосы ауылдары исемлегендә лә ул осрамай. Кирәбе ауылы Поляковка менән Вознесенка кеүек, волостар исемлегендә лә юҡ.

Эш шунда: Тамъян-Ҡатай кантоныңы уртаһында урынлашҡан Кирәбе ауылы был йылдарҙа ауыл советы берәмегендә Златоуст өйәҙенең Миәс волосы составында булған икән, йәғни Силәбе губернияһында.

Нигәйәт, 1923 йылдың аҙағында, 14 декабрҙә, Кирәбелә Тамъян-Ҡатай кантоны вәкилдәре Шаһишәриф Бүләков һәм Шаров ҡатнашлығында ҙур сход була. Был ваҡытта Кирәбелә ауыл советы рәйесе булып П. М. Копытов эшләгән була. Сход бер тауыштан Башҡортостандың Тамъян-Ҡатай кантонына ҡушылырға тигән ҡарар ҡабул итә. Златоуст өйәҙе администрацияһы бик тырышып ҡараһа ла, ауылды кире ҡайтарып ала алмай. 15 декабрҙән алып Кирәбе ауыл советы Типтәр-Учалы волость башҡарма комитетына буйһондорола. Шулай итеп, Типтәр-Учалы волосы ерҙәре кинәйтелә, халыҡ һаны арта, ауылдарының һаны 13-кә етә.

Кирәбе ауылының ул саҡтағы хәлен башҡорт ауылдары менән сағыштырыу ҙа мөмкин түгел. Ауыл бик үҫешкән, аслыҡты ла еңел үткәргән була. Бында китапхана булған, фельдшер пункты эшләгән, яҡшы мәктәп, төрлө промыслалар юлға һалынған, бер һүҙ менән әйткәндә, халыҡтың тормош кимәле күпкә юғары булған.

**Тамъян-Ҡатай кантоны Силәбе губернияһы составында.[15]**

«Бүлгелә һәм хакимлыҡ ит!» — был принципты большевиктар бик яҡшы үҙләштерәләр һәм киң ҡулланалар, һәм һәр осраҡта ла был сәйәсәт урыҫ халҡы файҙаһына үткәрелә, төп халыҡтың ихтыяры бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Төп халыҡтан, башҡорттарҙан: «Һеҙ Силәбе губернияһы составында йәшәргә ризамы?» — тип бер кем дә һорамай. Төп халыҡтың мәнфәғәттәрен һанға һуҡмау, бөтә нәмәне метрополия күҙлегенән генә сығып хәл итеү фәндә империалистик сәйәсәт тип атала һәм беҙҙең ата-бабаларыбыҙға ошо сәйәсәттең ҡорбанына әйләнеү ҡурҡынысы янай.

1922 йылдың 17 августа Бөтә Рәсәй Үҙәк Башҡарма комитеты, Калининдың ҡултамғаһы менән, Силәбе губернияһының үтенесен ҡәнәғәтләндереп, Байһаҡал, Вознесенка, Поляковка, Туңғатар волостарын Златоуст өйәҙенә (Силәбе губернияһына) бүлеп бирә. Был башбаштаҡлыҡ халыҡты, урындағы етәкселәрҙе аптырата, уларҙың был ҡараҙы үтәүҙән баш тартыуына килтерә. Өфөгә, Мәскәүгә хаттар, мөрәжәғәттәр яуа, илселәр юлға сыға. Мәскәүҙә Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссариаты 8 сентябрҙә Тамъян-Ҡатай кантонын артабан да Башҡортостан составында ҡалдырыуға үҙенең ризалығын бирә. Башҡорттар дөрөҫлөктө ҡайҙа ғына эҙләмәйҙәр ҙә, ҡайҙа ғына мөрәжәғәт итмәйҙәр: яҙылған яҙыуҙың, йөрөлгән инстанцияларҙың иҫәбе-һаны булмай! Был мәсьәлә менән РКП(б) Үҙәк Комитеты шөғөлләнә, БРҮБҠ Президиумы ошо законды тупаҫ боҙоуға ҡат-ҡат әйләнеп ҡайта, тик барыһы ла бушҡа була. Бары тик 1922 йылдың 9 ноябрендә генә кантонды кире Башҡортостан составына ҡайтарырға тигән ҡарар ҡабул ителә. Ғәҙеллек барыбер тантана итә, империалистик сәйәсәт сигенергә мәжбүр була. 1923 йылда Ҡушаев Бөтә Союз «старостаһы» Калининды Миәс, Учалы аша Белоретҡа, унан Сермәнгә оҙатып бара (Тамъян-Ҡатай кантонын ни өсөн Силәбе губернияһына ҡушырға ярамағанлығын үҙ күҙе менән күрә Калинин).

1924 йылдың 1-се июленән ЧОН-дың 372-се Белорет ротаһы туранан-тура кантон хәрби комиссариатына буйһондорола. Ил буйынса ЧОН-дар бөтөрөлгән бер ваҡытта, 372-се Белорет ротаһы ла күп тә үтмәй, 1924 йылдың аҙағында йәшәүҙән туҡтай. Әммә ул үргән үрмәксе ауы — шымсылар селтәре бөтөрөлмәй, тулы көйөнсә ОГПУ ҡулына күсә. 1924 йылға ҡараған бер документта, Учалы ауылынан агентура мәғлүмәттәренә таянып, волость башҡарма комитеты рәйесе Латыповтың тәртибенә баһа бирелә («эсеп иҫереп урамда аунап ятҡан»).

ЧОН-дың 372-се ротаһынан тыш, Белоретта 270-се полк урынлашҡан була. Ошо полк яугирҙарына тип, оло байрамдар алдынан халыҡтан бүләктәр йыйҙырталар, уны алып барып тапшырыуҙы ойошторалар. Нимә генә тиһәң дә хәрби көс кантонда етерлек булған!

1924 йылда РКСМ-дың үҙ аллы Учалы Волкомы ойошторола, уның 2 ячейкаһы булдырыла: Ахун һәм Учалы. Йәғни, комсомол эше беҙҙең төбәктә 1924 йылдан һуң ғына йәйелдерелә. Шуға тиклем Учалы волосы ауылдарындағы комсомолдар, уларҙың эшмәкәрлеге тураһында һүҙ алып барыу өсөн һис бер нигеҙ юҡ.

## Типтәр-Учалы волосының 1925 йылдың 1-се октябренә ҡарата хәле.

Волость 15 ауылды, 8 ауыл советын берләштерә. 3128 хужалыҡтан тора, халҡы 12408 кеше тәшкил итә. Сәсеүлектәр 5122 дисәтинә ерҙе биләй (арыш — 1324 дис., бойҙай, һоло, ҡарабойҙай, арпа — 3795 дис., етен — 16 дис., киндер — 18 дис.) Халыҡтың тормош хәле һаман да насар булып ҡала бирә. Ул заманда крәҫтиәнгә натураль хужалыҡ алып барыр өсөн генә лә кәмендә 7 дис. иген сәсергә кәрәк булған. Был — минимум. Ә Учалы волосында 1 хужалыҡҡа ни бары (пар ере менән бергә) 1,6 дис. сәсеүлек тура килгән (1914 йыл менән сағыштырғанда был бер нисә тапҡырға кәм тигән һүҙ). 641 хужалыҡтың (20 процент) бер ниндәй ҙә малы булмаған, ә инде 949 хужалыҡ (30 процент) ус аяһындай ҙа ер сәсмәгән. Волоста 304 хужалыҡ (Кирәбе ауылы, башлыса) ауыл хужалығына ҡарамаған промыслалар менән шөғөлләнгән. 42 хужа һатыу итеү һәм промышленность йорттары тоткан. Волость территорияһында 23 тирмән булып, шуларҙың 13-ө — һыу, 8-е — ел һәм 2-һе пар тирмәндәре булған.

Волоста 1 баҫҡыс 10 мәктәп эшләгән, уларҙа 679 уҡыусы уҡыған; II баҫҡыс мәктәптәре 2 булып, уларҙа 294 уҡыусы белем алған, 3 китапхана, 2 клуб эшләгән.

Приискылар күп (27) булған, әммә береһе лә эшләмәгән. 4 рудник булып, 3 хромит руднигы ябылған булған, бары марганец руднигы ғына продукция биргән.

Мәсеттәр һаны 24-кә еткән, волоста 25 мулла булған, сиркәүҙәр — берәү (Кирәбелә), 1 священник булған.

Ауыл хужалығы техникаһына килгәндә, ул бик аҙ булған. Бөтә волость халҡында 22 косилка, 40 елгәргес, 3 жнейка, 2944 салғы, 436 ураҡ һәм 128 сепаратор булған.

Халыҡ ҡош-ҡортто ла бик аҙ аҫраған: 2 йортҡа бер тауыҡ, 8 йортҡа бер ҡаҙ, 250 йортҡа бер өйрәк, 70 йортҡа бер күркә тура килгән.

## Күбәләк-Тиләү волосы (1925 йылда)

Күбәләк-Тиләү волосы 42217 дисәтинә ер биләгән, шуның 14695 дисәтинәһе сәсеүгә яраҡлы булған.

Волость 49 ауылдан, 8 ауыл советынан торған.

Халыҡ һаны — 10523 кеше (2600 хужалыҡ).

Сәсеүлектәр 2504 дисәтинә ерҙе биләгән (1 хужалыҡҡа яҡынса 1 дисәтинә). Волоста бөтәһе 2816 ат, 2589 һыйыр һәм 1832 баш һарыҡ-кәҙә иҫәпләнгән.

1009 хужалыҡтың аты булмаған (39 процент). Волоста 16 һыу тирмәне булып, бик аҙы ғына эшләгән.

14 I баҫҡыс, бер II баҫҡыс мәктәп (Ҡаҙаҡҡолда) эшләгән, 2 китапхана (уҡыу йорто) булған.

1922—1924 йылдарҙа волоста кооперация ныҡ үҫеш ала алмай, 1925 йылда волость территорияһында ауыл хужалығы универсаль товариществоһының 1—2 бүлексәһе була.

1-се табл. 1925 йылдын 1 ғинуарына Типтәр-Учалы волосы.

| № т/б | Ауыл советы | Ауыл исеме | Хужалыҡ һаны | Халыҡ һаны |
|---|---|---|---|---|
| 1. | Ахун | Ахун | 409 | 1799 |
| 2. | Илтабан | Илтабан | 96 | 506 |
| | | Юлдаш | 139 | 661 |
| 3. | Ҡалҡан | Ҡалҡан | 147 | 668 |
| | | Рысай | 192 | 870 |
| 4. | Сәфәр | Сәфәр | 218 | 863 |
| | | Илсе | 248 | 930 |
| | | Мансур | 91 | 380 |
| 5. | Мулдаш | Мулдаш | 117 | 448 |
| | | Учалы | 264 | 1065 |
| | | Һәйтәк | 24 | 115 |
| 6. | | Иманғол | 145 | 650 |
| | | Ҡунаҡбай | 173 | 712 |
| 7. | Ураҙ | Ураҙ | 220 | 1019 |
| | | Ураҙ руднигы | — | — |
| 8. | Кирәбе | Кирәбе | 350 | 1721 |

**Ураҙ руднигын индереп иҫәпләгәндә, бөтәһе 16 ауыл.**

2-се табл. **Туңғатар волосы (1925 йылдың 1 ғинуарына**).

| № т/б | Ауыл советы | Ауыл исеме | Хужалыҡ һаны | Халыҡ һаны |
|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 1. | Ҡорама | Ҡорама | 98 | 404 |
| | | Кәрим | 58 | 231 |
| | | Төпәй | 42 | 197 |
| | | Балбыҡ | 50 | 216 |
| 2. | Ҡарт Муйнаҡ | Ҡарт Муйнаҡ | 72 | 272 |
| | | Туңғатар | 129 | 515 |
| | | Түләк | 30 | 135 |
| | | Малай Муйнаҡ | 49 | 174 |
| | | Абҙаҡ | 22 | 84 |
| 3 | Әпсәләм | Әпсәләм | 43 | 163 |
| | | Ҡужай | 36 | 139 |
| | | Шәрип | 40 | 152 |
| | | Аҙнаш | 40 | 136 |
| | | Т әтлембәт | 19 | 64 |
| | | Буранғол | 45 | 143 |
| 4. | Һөйөндөк | Һөйөндөк | 47 | 166 |
| | | Һөләймән | 57 | 268 |

*Таблицаның дауамы 2*

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
|---|---|---|---|---|
| | | Мулдаш | 72 | 384 |
| | | Көсөк | 53 | 244 |
| 5. | Илсеғол | Илсеғол | 52 | 151 |
| | | Мулдаҡай | 60 | 237 |
| | | Ялсығол | 37 | 135 |
| | | Байрамғол | 58 | 241 |
| 6. | Вознесенка | Вознесенка | 512 | 2212 |
| 7. | Поляковка | Поляковка | 397 | 1593 |
| 8. | Байһаҡал | Байһаҡал | 38 | 163 |
| | | Ихсан | 28 | 122 |
| | | Ҡарағужа | 27 | 120 |
| | | Мәхмүт | 47 | 171 |

Волость 8 ауыл советынан, 28 ауылдан торған, халҡы 9080 кеше тәшкил иткән.

3-сө табл. **1925 йылдың 1-се ғинуарына Күбәләк-Тиләү волосы.**

| № т/б | Ауыл советы | Ауыл исеме | Хужалыҡ һаны | Халыҡ һаны |
|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 1. | Ҡобағош | Ҡобағош | 103 | 387 |
| | | Ҡаҙаҡкол | 87 | 387 |
| | | Ҡарағужа | 92 | 288 |
| | | Оҙонкүл | 52 | 189 |
| | | Баттал | 43 | 154 |
| | | Аһылай | 41 | 161 |
| | | Аһылай хуторы | 16 | 67 |
| 2. | Алтаяҡ | Алтаяҡ | 60 | 263 |
| | | Рафиҡ | 59 | 218 |
| | | Әбләҙ | 45 | 172 |
| | | Амангилде | 33 | 135 |
| | | Ғәлиәхмәр | 59 | 284 |
| | | Бәләкәй Ҡаҙаҡкол | 24 | 104 |
| | | Көсөк | 64 | 271 |
| | | Ҡалуй | 33 | 134 |
| | | Муса | 57 | 221 |
| 3. | Сораман | Сораман | 79 | 320 |
| | | Һөйәрғол | 33 | 127 |
| | | Ҡәйепкол | 37 | 120 |
| | | Байрамғол | 98 | 414 |
| | | Ғәҙелша | 25 | 104 |

*Таблицаның дауамы 3*

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
|---|---|---|---|---|
| | | Наурыҙ | 62 | 238 |
| | | Йәһүҙә | 16 | 60 |
| | | Ташҡыя | 52 | 212 |
| | | Мәҫкәү | 89 | 325 |
| | | Мәһәҙи | ч | 163 |
| 4. | Ҡолош | Ҡолош | 64 | 335 |
| | | Ҡотой | 41 | 217 |
| | | Кәбәк | 19 | 79 |
| | | Абдулҡасим | 17 | 125 |
| | | Абдулбаҡый | 20 | 112 |
| 5. | Ишмәкәй | Ишмәкәй | 57 | 237 |
| | | Иҫтамғол | 89 | 357 |
| | | Ишкен | 52 | 112 |
| | | Баҙарғол | 38 | 125 |
| | | Рәсүл | 45 | 213 |
| | | Ҡоҙаш | 57 | 224 |

Күбәләк-Тиләү волосында урыҫ ауылдары булмаһа ла, волоста 234 урыҫ кешеһе йәшәгән. Урыҫтар иң күп йәшәгән ауылдар:

— Ҡаҙаҡҡолда — 35 кеше,
— Ҡолошта — 37 кеше,
— Ҡотойҙа — 23 кеше,
— Ишмәкәйҙә — 29 кеше,
— Иҫтамғолда — 18 кеше.

1926 йыл тыуа. Ауыл хужалығы һалымы насар йыйыла. 15 февралдән һуң ауыл хужалығы һалымын һәм орлоҡ ссудаһын ваҡытында түләмәгәндәрҙән ул көслөк юлы менән тартып алына.

Әммә бөтәһе лә насар булмаған. Шул уҡ йылдың июнендә кантон финанс бүлегендә эш ҡағыҙҙарын башҡорт телендә алып барырға ынтылыш яһала, «ике дәүләт телен (башҡорт һәм урыҫ) белмәгәндәрҙе эштән сығарырға!» — тигән тарихи документ та ҡабул ителә хатта. Әммә яҡшы башланғыс бары тик ҡағыҙҙа ғына ҡала.

Ауыл халҡының хәле еңеләйәһе урынға, йылдан-йыл ауырая ғына бара. 1928 йылдың ғинуарында ауылдың «кулак өлөшө»нә ҡаршы һөжүмде көсәйтеү тураһында һүҙ алып барыла башлай. Иген әҙерләү кампанияһы насар бара, ауыл хужалығы һалымы, орлоҡ ссудаһы, страхование түләүҙәре ҙур ауырлыҡ менән генә йыйып алына. Быларҙан тыш, хөкүмәт крәҫтиән займын индерә, ауыл халҡы ошо займды, юҡ аҡсаһын бар итеп, мотлаҡ рәүештә һатып алырға тейеш була.

1928 йылда Тамъян-Ҡатай кантонында, шул иҫәптән беҙҙең төбәктә лә, хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу осоро тамамлана. Дөйөм алғанда, 20-се йылдар башы менән сағыштырғанда, халыҡтың тормош кимәле бер ни тиклем яҡшыра төшә.

## КОЛХОЗЛАШТЫРЫУ.[16]

20-се йылдар аҙағына тормош бер ни тиклем рәтләнә. 1921 йылдан бирле үткәрелгән яңы экономик сәйәсәт үҙенең емештәрен бирә. Ауылдарыбыҙға ҡот ҡайта, йорт-ҡураларҙа мал һаны ишәйә, сәселгән иген майҙандары арта. Башҡортостан буйынса 1925—1926 йылда 12,6 млн. бот, 1926—1927 йылда — 15,3 млн. бот иген әҙерләнә. 1927—1928 йылға 18 млн. бот иген әҙерләү буйынса Мәскәүҙән күрһәтмә алына, ләкин ни бары 11 млн. бот (1 бот — 16 кг.) әҙерләнә. 1927 йылдың ноябрендә республикала икмәк кризисы башлана. 1928 йылдың ғинуарынан икмәк әҙерләүҙе тиҙләтеү өсөн репрессив саралар ҡулланыла башлай. Үҫтергән игенен арзан ғына хаҡҡа һатыуҙан баш тартыусылар судҡа бирелә: бар булған игендәре конфискациялана, аттары, һыйырҙары тартып алына, үҙҙәре төрмәгә ябыла (конфискациялаған игендең 25 проценты ярлыларға һәм батрактарға өләшеп бирелә). Хәҙерге Учалы районына ҡараған ауылдарҙан да тиҫтәнән ашыу крәҫтиән ғаиләһе (республика буйынса 2424 кеше) ошо саманан тыш ҡаты язаға дусар ителә. Төрмәләр тыңҡыслап тотҡондар менән тултырыла. Һөҙөмтәлә, 1928 йылдың йәйенә ауылдарыбыҙҙа көсөргәнешлек, киҫкен ҡәнәғәтһеҙлек, ризаһыҙлыҡ барлыҡҡа килә.

1929 йылдың 15 августа ВКП(б)-ның өлкә комитеты бюроһы ултырышында Башҡортостанда тәүге тапҡыр крәҫтиән хужалыҡтарын тотошлайы менән коллективлаштырыу мәсьәләһе ҡарала. 1929 йылдың октябренә республика буйынса крәҫтиән хужалыҡтарының 8,6 проценты колхоздарға берләштерелгән була (ярлы һәм батрак хужалыҡтары колхозға инеүселәрҙең 81 процентын тәшкил итә). Беҙҙең төбәктә колхоздар ойошторо эше әкрен бара. Мәҫәлән, Типтәр-Учалы волосында 1929 йылдың 16 декабренә 4237 крәҫтиән хужалығының ни бары 302-һе генә 14 колхозға берләшкән була, йәғни 7 процент ҡына крәҫтиән хужалыҡтары колхоздарға ингән була. Туңғатар волосында ла хәл шул уҡ: 34 колхоз иҫәпләнеп, иң ҙурҙары «Краснахты» һәм «Батрак» була (24 һәм 22 крәҫтиән хужалығы). Күбәләк-Тиләү волосында бәләкәй генә 17 колхоз ойоштороло́ған була. 1930 йылдың 1 мартына Тамъян-Ҡатай кантонында крәҫтиән хужалыҡтарының 53,1 проценты ғына колхоздарға берләштерелгән була. Был күрһәткес буйынса кантон республикала һуңғы урында тора.

1930 йылдың 8 ғинуарында Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты республика буйынса коллективлаштырыуҙы 1931 йылдың яҙына тамамлап сығыу бурысын ҡуя. Ошо маҡсатҡа өлгәшеү өсөн, 1930 йылдың февраль айынан алып, киң күләмдә репрессив саралар ҡулланыла башлай. Ғаилә башлыҡтары ҡулға алына, мөлкәте-йорто конфискациялана, хужа кеше атып үлтерелә йәки һөргөнгә оҙатыла. 1930 йылда ғына республика буйынса 8153 кеше репрессиялана. Беҙҙең район ауылдарынан да тулы булмаған иҫәпләүҙәр буйынса 53 крәҫтиән, «кулак» мөһөрө баҫылып, хөкөм ителә. Түбәндә шуларҙың исемлеге килтерелә (ҡара: 162—164-се биттәр).

Хөкөм ителгәндәрҙең күбеһе, өлкән йәштәге кешеләр булараҡ, лагерҙарҙағы ҡот осҡос шарттарҙы күтәрә алмаған һәм «лагерь тупрағына әйләнгән.

...Репрессив саралар халыҡтың ҡотон алған, һөҙөмтәлә, 1930 йылдың 20 мартына республика буйынса крәҫтиән хужалыҡтарының 97 проценты колхоздарға ингән була. Был күрһәткес буйынса республика СССР-ҙа беренсе урынға сыға. Беҙҙең төбәктә 1930 йылдың йәйенә өс волость буйынса дөйөм алғанда 80 процеттан ашыу крәҫтиән хужалыҡтары колхоздарға ингән була. Волостарыбыҙ буйынса конкрет күрһәткестәр түбәндәгесә:

— Туңғатар волосы — 100 процент;
— Күбәләк-Тиләү волосы — 74 процент;
— Учалы волосы — 65 процент.

Колхоздар ойоштороу эшендә етешһеҙлектәр, енәйәт күп була. Мәҫәлән, Туңғатар волосы башҡарма комитетының кантонға оҙатылған отчетында (18 март, 1930 йыл) түбәндәгеләр хәбәр ителә: «Волость халҡы бөтә милекте берләштереүҙе талап итә һәм был тормошҡа ашырыла». Икенсе бер документта шундай юлдар бар: «Учалы волосы ярлылары колхоздарға берләшеүгә ҡаршы». Яңы ойоштороған колхоздарға килгән кантон вәкилдәренә колхозсыларҙың: «Беҙҙән колхоз яһанылар, әммә етәкселек итеүсе юҡ, ә беҙ нәмә эшләргә икәнлеген белмәйбеҙ», — тигән зарланыуҙы һәр урында ла ишетергә тура килә. Өлкә комитетының 1 сәркәтибе Я. Б. Быкин да 1930 йылдың апрелендә яһаған сығышында: «... ауыл дөйөм фронт менән беҙгә ҡаршы бара ... ярлыһы ла, батрагы ла, урта хәллеһе лә, барыһы ла Совет власына ҡаршы торалар...»

Һығымта яһап, шуны әйтергә кәрәк: колхоздар бөтә ил буйынса, шул иҫәптән беҙҙең төбәктә лә, көслөк юлы менән барлыҡҡа килтерелгәндәр. Крәҫтиәндәр колхоз идеяһын баштан уҡ ҡабул итмәгән. Әммә репрессив саралар ҡулланып, Совет власы крәҫтиәндәрҙең ҡаршылығын һындырыуға өлгәшкән. НКВД-ның яуызлығынан ҡото алынған халыҡ колхоздарға күпләп керергә мәжбүр булған. Репрессив саралар көндән-көн көсәйтелгән, киңерәк ҡулланылған. 1931 йылдан, колхозсы менән сағыштырғанда, «яңғыҙаҡ» ауыл хужалығы һалымын 10 тапҡыр артыҡ, ә «кулак» — 100 тапҡыр күберәк түләргә мәжбүр ителгән. Шунан һуң колхозға инмәй ҡара! Эш барышында килеп тыуған ябай ғына ҡытыршылыҡ, аңлашылмаусанлыҡ та «кулактарҙың емергес эше, синфи көрәштең киҫкенләшеүе», — тип баһалана. Мәҫәлән, «1 Май» колхозында иген һуғыу ваҡытында күңел биреп эшләмәгәнлектән ватылған молотилка ла «кулактар»ға яп̆һарыла, шуларҙың емергес эшенең һөҙөмтәһе тип күрһәтелә. Илсе ауылында 2 ир-егет һуғышып китәләр: колхозға инмәгән Ғәниев һәм колхоз рәйесе. Суд ҡарары менән «кулак» Ғәниев үлем язаһына хөкөм ителә. Төпәй ауылында колхоз рәйесе Бүләков үле килеш табыла, был «эш»тә «кулактар»ға яп̆һарыла. Сәфәр ауылынан яҙылған доноста һүҙ «кулак» Ғарипов хаҡында: «Ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡотортоп, массовый контрреволюцион сығыштар яһата», — тиелгән юлдар бар был яла яғыуҙа.

Колхозлаштырыу халыҡты ҡурҡытыуға ҡоролған була. Бына бер факт. Үҙ малын һуйған 49 крәҫтиән «кулак» ярлығы тағылып, бөтә

| | | Тыуған йылы, милләте | Йәшәгән ере | Күпме срокка хөкөм ителгән |
|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 1. | Абдрахманов Кәлимулла Абдулла улы | 1898 татар | Ахун | 10 йыл |
| 2. | Абдрахманов Миңлеғәли Абдулла улы | 1903 татар | Ахун | 5 йыл |
| 3. | Абдрахманов Абдулла | 1873 | Ахун | 10 йыл |
| 4. | Эмиров Ниғәмәтйән Ҡәнәфи улы | 1855 башҡорт | Ахун | 3 йыл |
| 5. | Әхмәтшин Нурғәли Әхмәт улы | 1874 башҡорт | Т уңғатар | үлем язаһы |
| 6. | Әхмәтов Мөфтий | 1860 | Ялсығол | 5 йыл |
| 7. | Баһаев Хәйретдин Хафиз улы | 1897 башҡорт | Ялсығол | 5 йыл |
| 8. | Воронин Василий Федорович | 1894 УРЫҪ | Поляковка | 10 йыл |
| 9. | Воронин Александр Михайлович | 1898 | Поляковка | 10 йыл |
| 10. | Ворлушин Семен Терентьевич | 1899 УРЫҪ | Ҡотой | 5 йыл |
| 11. | Гаврилова Антонина Федоровна | 1864 урыҫ | Поляковка | 1 йыл |
| 12. | Ғәйфуллин Сафый | 1874 башҡорт | Мулдаш | 5 йыл |
| 13. | Ғәлләмов Закир | 1875 башҡорт | Учалы | 5 йыл |
| 14. | Гаршин Василий Федорович | 1856 урыҫ | Вознесенка | 3 йыл |
| 15. | Дуров Александр Филлипович | 1855 урыҫ | Вознесенка | 3 йыл |
| 16. | Игнатов Михаил Николаевич | 1868 урыҫ | Поляковка | 3 йыл |
| 17. | Ишкәримов Әҙһәм Ишкәрим улы | 1846 башҡорт | Оҙонкүл | 3 йыл |
| 18. | Ҡарамышев Мөхәмәтхан Әмирхан улы | 1884 башҡорт | Туңғатар | 5 йыл |
| 19. | Кәримов Хажи Кәрим улы | 1896 башҡорт | Мулдаш | 5 йыл |
| 20. | Кәримов Әхмәтвәли Кәрим улы | 1879 башҡорт | Мулдаш | 5 йыл |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
|---|---|---|---|---|
| 21. | Кисилев Сергей Егорович | 1886 урыç | Вознесенка | 10 йыл |
| 22. | Конюхов Егор Федорович | 1862 урыç | Вознесенка | 5 йыл |
| 23. | Корнеев Александр Гаврилович | 1895 урыç | Поляковка | 10 йыл |
| 24. | Корнеев Андрей Гаврилович | 1881 урыç | Поляковка | 10 йыл |
| 25. | Ҡорамшин Яппар Сәхәүетдин улы | 1860 башҡорт | Ҡорама | 10 йыл |
| 26. | Ҡорамшин Сәлимгәрәй Яппар улы | 1883 башҡорт | Ҡорама | 10 йыл |
| 27. | Лазарев Иван Васильевич | 1870 урыç | Поляковка | 5 йыл |
| 28. | Латыпов Йосоп | 1879 башҡорт | Һәйтәҡ | холоҡ төҙәтеү эштәренә ебәрелгән |
| 29. | Мәғәсүмов Баһаутдин Мәғәсүм улы | 1879 башҡорт | Юлдаш | 3 йыл |
| 30. | Морозов Алексей Потапович | 1887 урыç | Вознесенка | 5 йыл |
| 31. | Морозов Николай Павлович | 1873 урыç | Вознесенка | 5 йыл |
| 32. | Недошивин Даниил Дмитриевич | 1861 урыç | Поляковка | 3 йыл |
| 33. | Петров Федор Степанович | 1902 урыç | Вознесенка | 5 йыл |
| 34. | Поносов Александр Иванович | 1872 урыç | Поляковка | 10 йыл |
| 35. | Распономарев Михаил Илларионович | 1865 урыç | Вознесенка | 5 йыл |
| 36. | Рәстәмов Мөхәммәт Солтангәрәй улы | 1878 башҡорт | Туңғатар | үлем язаһы |
| 37. | Сәғәҙетдинов Сөнәғәт | 1863 башҡорт | Ахун | 10 йыл |
| 38. | Сәғиҙуллин Әхмәтйән | 1884 башҡорт | Рысай | 5 йыл |
| 39. | Сәғиҙуллин Фәтҡулла | 1862 башҡорт | Рысай | 5 йыл |

*Таблицаның дауамы*

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
|---|---|---|---|---|
| 40. | Сәйфетдинов Ишбулды | 1884 башҡорт | Иҫке Байрамғол | хөкөм ителгән |
| 41. | Сәлимов Мотах Хәлиҡ улы | 1894 башҡорт | Ҡорама | 10 йыл |
| 42. | Сапаев Федор Васильевич | 1895 урыҫ | Вознесенка | 10 йыл |
| 43. | Сибәғәтуллин Ғәйет | 1874 башҡорт | Иманғол | 5 йыл |
| 44. | Ураҙаев Фәйзрахман | 1880 башҡорт | Мулдаш | 10 йыл |
| 45. | Фаварисов Ғәйнулла Фаварис улы | 1863 татар | Ташбулат | 5 йыл |
| 46. | Фәтҡуллин Мәсәлим | 1885 башҡорт | Ҡунаҡбай | 1930 йылда реабилита- |
| 47. | Фәтхуллин Бикмөхәммәт | 1853 башҡорт | Ҡунаҡбай | цияланалар |
| 48. | Хөсәйенов Динислам | 1877 башҡорт | Иҫке Байрамғол | 5 йыл |
| 49. | Хөснөтдинов Хәйретдин | 1869 башҡорт | Ҡарт Муйнаҡ | 10 йыл |
| 50. | Шаһиәхмәтов Шаһимөхәммәт | 1870 башҡорт | Иҫке Байрамғол | 5 йыл |
| 51. | Шафиҡов Ғәли Шафиҡ улы | 1868 татар | Юлдаш | 10 йыл |
| 52. | Ямғуров Насырйән | 1887 башҡорт | Ахун | 5 йыл |
| 53. | Яруллин Лотфулла | 1861 башҡорт | Ҡоҙаш | 3 йыл |

мал-мөлкәте тартып алынып, йәшәгән еренән ситкә һөрөлә. Был ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә беҙҙең төбәктә фажиғәле яҙмышҡа дусар ителеүселәрҙең бер бәләкәй генә өлөшө. Ярты йыл эсендә генә беҙҙең район ауылдарынан 58-се статья ҡулланылып («террор»), 2 «кулак» атып үлтерелә, 10 «контрреволюцион эш» ҡуҙғатыла, 38 кеше, колхозлаштырыу менән бәйле, төрмәгә ултыртыла, йөҙәрләгән «кулак»ка ҡаршы «башҡа саралар ҡулланылған».

Ярлылыҡ күҙгә бәрелеп торған башҡорттар көн иткән төбәктә колхоздар ойоштороу ауылдарыбыҙҙы хәйерселек ҡосағына этәрҙе. Факттарға мөрәжәғәт итәйек: 1927 йылда ярлылар республика буйынса

34 процент тәшкил итһә, башҡорттар араһында ул 52 процент була, ә инде беҙҙең төбәктәге крәҫтиән хужалыҡтарының 60 проценты ярлылар рәтендә була. Сәфәр ауылынан Хәлиҙә апай Хәмиҙуллинаның хәтерләүенсә (һүҙ 1940 йыл тураһында): «Ауылда, ысынлап та, ярлылыҡ хөкөм һөрә. Алабутаға ҡырҙыҡ ҡушып, икмәк һымаҡ итеп бешереп ашайҙар. Өйҙәрҙең күбеһе ергә сумып бөткән. Мал-тыуар бик әҙ.

1931 —1933 йылдарҙа күптәр аслыҡтан ҡырылған. ...Коллективлаштырыу хәрәкәте ауылдарҙы нығыта алманы, киреһенсә бөлгөнлөккә төшөрҙө», — ти ул, һығымта яһап.

1931 йылда Башҡортостандан 6042 ғаилә, «кулак ғаиләһе» булараҡ, II категорияға индерелеп, Төньяҡҡа һәм Себергә һөрөлә. Шуларҙың йөҙҙән ашыуы беҙҙең райондыҡылар. Уларҙың ҡот осҡос яҙмышы әҙәбиәттә лә бер ни тиклем яҡтыртылды. III категорияға индерелгән «кулак ғаиләләре» республика буйынса 5850 ғаилә — районыбыҙ буйынса — йөҙҙән ашыу — Башҡортостан эсендәге 17 «махсус поселоктарға» һөрөлә. Райондаштарыбыҙҙың күбеһе Дыуан районындағы Кульбараш тип аталған махсус поселокка (ысынында иһә — концлагерға) оҙатыла, ҡот осҡос шарттарҙа күбеһе һәләк була, бик әҙ өлөшө генә ул тамуҡтан ҡотолоп сыға ала.

1931—32 йылдарҙа иленән һөрөлгән «кулактарҙың» тулы булмаған исемлеге:

| №№ п/п | Фамилия, исем, атаһының исеме | Тыуған йылы, милләте | Йәшәгән ере | Хөкөм ителеү срогы |
|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 1. | Биргәлин Хәмит Биргәли улы | 1887, башҡ. | Алтаяҡ | 5 йыл |
| 2. | Буланов Ефим Михайлович | 1890, урыҫ | Вознесенка | реабилит. күп тә үтмәй |
| 3. | Вәлишин Зариф Фәсхетдин улы | 1879, башҡ. | Ахун | 5 йыл |
| 4. | Ғәләүетдинов Камалетдин Ғәләүетдин улы | 1883, башҡ. | Ахун | 5 йыл |
| 5. | Йыһаншин Йыһангир Йыһанша улы | 1891, башҡ. | Баттал | тиҙҙән реабил. |
| 6. | Зәйнуллин Кәлимулла Вәли улы | 1892, башҡ. | Кәрим | 5 йыл |
| 7. | Зарипов Сөләймән Зариф улы | 1871, башҡ. | Абҙаҡ | 10 йыл |
| 8. | Исрафилов Минислам Исрафил улы | 1889, башҡ. | Мулдаҡай | 5 йыл |
| 9. | Килдеяров Лотфулла Фәтҡулла улы | 1900, башҡ. | Илсеғол | 5 йыл |
| 10. | Кулик Екатерина Александровна | 1884, урыҫ | хут. Екатерининск | 5 йыл |
| М. | Ҡотлобаев Хөсәйен | 1862, башҡ. | Ихсан | 5 йыл |
| 12. | Күсәрбаев Мөхәмәтулла Күсәрбай улы | 1859, татар | Ахун | 5 йыл |
| 13. | Латыпов Камалетдин Мөхәмәтйән улы | 1899, башҡ. | Ахун | 5 йыл |
| 14. | Мәжитов Рәхимйән Мәжит улы | 1886, татар | Ахун | 5 йыл |
| 15. | Мәжитов Ниғәмәтйән Мәжит улы | 1881, татар | Ахун | 5 йыл |
| 16. | Мөхәммәтов Вафа Мөхәммәт улы | 1861, татар | Ахун | 10 йыл |
| 17. | Мөхәмәтшин Абдулла Мөхәмәтша улы | 1881, татар | Ахун | 5 йыл |
| 18. | Ноғоманов Ҡорбанғәли Ноғман улы | 1876, татар | Ахун | 5 йыл |
| 19. | Нурғәлин Мөхәммәтрәхим | 1859, башҡ. | Байһаҡал | 5 йыл |
| 20. | Сабитов Ғәбит Сабит улы | 1880, башҡ. | Һөләймән | 5 йыл |

*Таблицаның дауамы*

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
|---|---|---|---|---|
| 21. | Сәғәҙәтов Ғүмзр Сәғәҙәт улы | 1879, башҡ. | Юлдаш | 5 йыл |
| 22. | Самсонов Павел Павлович | 1877, урыҫ | Вознесенка | 5 йыл |
| 23. | Фәйезов Маннаф Фәйез улы | 1875, башҡ. | Тәтлембәт | 10 йыл |
| 24. | Хәбибуллин Сәғит | 1860, башҡ. | Ғәҙелша | 5 йыл |
| 25. | Яҡупов Шөғәйеп | 1859, башҡ. | Ҡарағужа | 5 йыл |

Колхоздар халыҡтың ҫормошон, ысынлап та, яҡшыртҡанмы? Ауыл хужалығында яҡшы яҡҡа һынылыш булғанмы? Факттарға мөрәжәғәт итәйек. Республика буйынса уртаса иген уҡышы 1931—40 йылдарҙа гектарынан 7 ц. тәшкил итте, йәғни 1913—14 йылдар кимәлендә булды («ҡоролоҡло» 1936 йылда — 2,5 ц/га, «яҡшы» 1937 йылда — 12,6 ц/га). Һәр һыйырҙан һауылған һөт 1940 йылда уртаса 922 кг. тәшкил итте. Һыйыр малының һаны 1929 йылғы кимәленә бары тик 1962 йылда ғына етә алды. 1940 йылда республика колхоздарында бөртөклөләрҙең 40 проценты ғына тракторҙар менән сәселде, ни бары 46 процент иген комбайндар менән урып алынды, йәғни ауыл ерендә һаман да әле ауыр ҡул хеҙмәте хакимлыҡ һөрҙө, һәм, шул уҡ ваҡытта, республикала иген әҙерләү күпкә артты:

1929—30 йыл — 13,5 млн.бот

1932 йыл — 39 млн.бот (халыҡ аслыҡтан күпләп ҡырылған мәлдә)

1933 йыл — 43 млн.бот

1935 йыл — 64 млн.бот

1937 йыл — 84 млн.бот

1940 йыл — 67 млн.бот

1932 йылда паспорт системаһы индерелеү менән, крәҫтиән өсөн ҡалаға юл ябыла. 1861 йылда бер тапҡыр индерелгән крепостной ҡоллоҡто большевиктар яңынан тергеҙәләр һәм шуның менән колхозда эшләүсе арзан эш көсөнөң тотороҡлоғона өлгәшәләр. Сөнки, 1932 йылда 1 хеҙмәт көнөнә ни бары 1,8 кг иген тура килә. Эшкә һәләтле 1 кеше йылына 103 хеҙмәт көнө эшләгән икән, был йылына 185 кг иген тигән һүҙ. Ғаиләнең йыл буйына тамағын туйҙырырға был икмәк етмәй, һөҙөмтәлә бик күп халыҡ аслыҡтан һәләк була. Колхозды ташлап, ситкә, ҡалаға китер ине, колхозсыларға паспорт бирелмәү сәбәпле, был мөмкин булмай.

Райондарҙа «тройкалар» ҡоторона (ОГПУ-ның район бүлеге етәксеһе, район башҡарма комитеты рәйесе, район прокуроры). Кешеләр исемлек менән «хөкөм ителәләр» — кем үлем язаһына, кем — лагерға, кем — һөргөнгә. Беҙҙең районда ла «тройка» тарафынан бер нисә тиҫтә крәҫтиән ғаиләһенең яҙмышы хәл ителә, дөрөҫөрәге — улар туҙҙырыла, юҡ ителә.

1932 йылда «башаҡтар тураһында закон» ҡабул ителгәндән һуң, 9 ай эсендә республика буйынса 5391 кеше (беҙҙең төбәктән яҡынса 100 кеше) хөкөм ителә, шуларҙың 193-ө — атып үлтереүгә. Закон 1959 йылда ғына бөтөрөлә.

1933 йылда айырым, махсус репрессив органдар — МТС-тар һәм совхоздар эргәһендә сәйәси бүлектәр барлыҡҡа килтерелә. Сәйәси бүлек начальниктарына диктатор хоҡуҡтары бирелә. Сәйәси бүлектәрҙең эшмәкәрлеге ауылдарҙа ҡурҡып-ҡалтырап йәшәү психологияһын урынлаштырыуға йүнәлтелә, һәр ауылда уларҙың күҙе-ҡолағы, йәки йәшерен шымсылары булдырыла, 1934 йылда сәйәси бүлектәр бөтөрөлгәс, шымсылар селтәре ОГПУ ҡарамағына тапшырыла.

Бер үк ваҡытта, 1930—1935 йылдарҙағы республика күләмендә үткәрелгән «милләтселәрҙе» ҡулға алыу тулҡыны (йөҙәрләгән кеше төрмәләргә ябыла, беренсе иҫәптә милли интеллигенциябыҙ) беҙҙең районды ла урап үтмәй. Милләтебеҙ өсөн янып-көйөп йөрөгән, халыҡ араһында абруй ҡаҙана башлаған ир-егеттәребеҙҙең артабан үҫеүенә кәртә ҡуйыла.

Колхозлаштырыу яңы властарҙың дингә ҡаршы ҡотороноп һөжүм итеүе менән дә билдәләнә. Мәсеттәр ябыла, улар клуб, мәктәп итеп үҙгәртелә, ә мулла-мәзиндәр репрессиялана. Алтаяҡ ауылынан 64 йәшлек мулла Рәүилов Абдрахман Әюп улы атып үлтереүгә хөкөм ителә. Ахун ауылы муллаһы Сөнәғәт Сәғзетдинов 10 йылға лагерға ебәрелә, тотҡонлоҡта үлеп ҡала. Наурыҙҙан мулла Мөхәммәт Хәҙисов та 10 йылға ултыртыла. Ғәҙелшә һәм Мулдаш ауылдары муллалары Сәғит Хәбибуллин һәм Мөхәммәт Хәҙисов һәр ҡайһыһы 5-әр йылға хөкөм ителә. 70 йәшендә репрессияланған Ҡоҙаш ауылы муллаһы Лотфулла Яруллин ауылдаштары хәтерендә ғәҙел, яҡшы күңелле кеше булараҡ һаҡланып ҡалған. Учалы ауылы мәзине 1930 йылдың авгусында 5 йылға хөкөм ителә, Белорет төрмәһенән ҡайтҡас, күп тә үтмәй, донъя ҡуя. Юлдаш ауылынан мәзин Баһауетдин Мәғәсүмов 1930 йылда репрессиялана, шул уҡ ауылдан мулла Ғүмәр Сәғәҙәтов 2 тапҡыр ҡулға алына, бер тапҡыр ярты йыл ултырып сыҡҡандан һуң (ғәйепһеҙгә, әлбиттә), яңынан һөрөлә, был юлы үлем лагеры — Соловкиға. Дин әһелдәренә ҡаршы совет власы ҡылған яуызлыҡтар тураһындағы тулы булмаған мәғлүмәттәр бына шулар.

Шулай итеп, коллективлаштырыу (колхозлаштырыу) «кулактар»ҙы һөрөү, киләсәктә совет власына, ҡанлы Сталин режимына ҡаршы сыға алырлыҡ, халыҡты көрәшкә күтәрерлек ир-егеттәребеҙҙе изоляциялау, юҡ итеү менән йәнәшә алып барылған. 20-се йылдар аҙағында — 30-сы йылдар башында республика буйынса 61 мең крәҫтиән хужалығы репрессиялана. «Кулактар»ҙы һөрөү илебеҙ тарихында иң фажиғәле, ҡанлы биттәрҙең береһе, һуңғы йылдарҙа хөкүмәтебеҙ мәжбүри коллективлаштырыу сәйәсәтен ғәйепләне, уны енәйәт тип атаны; милектәрен экспроприациялап, тыуған ерҙәренән алыҫҡа һөрөлгән крәҫтиәндәрҙең барыһын да реабилитацияланы.

## Колхоздарҙың хәле.

Колхоздарҙың матди базаһы бик ярлы булған. 1928 йылда районыбыҙға тәүге трактор килтерелә. Был «Фордзон»ды Белореттан алып ҡайтып, Мәҫкәү ауылы комсомолецтарына (Күбәләк-Тиләү волосы) ышанып тапшыралар.

Ә хәҙер «Октябрь» колхозы (Илсе ауылы) миҫалында колхоздарыбыҙҙың һуғышҡа тиклемге хәлен күҙ алдыбыҙға баҫтырайыҡ'[7].

«Октябрь» колхозы 1930 йылдың 10 мартында ойошторола. Төп йүнәлеше игенселек була. Бөтә ере — 1931 йылдың 1 ғинуарына — 667 га, баҫыу ерҙәре — 440 га тәшкил итә. Колхоз 38 ғаиләне берләштерә (шул иҫәптән 24 ярлы, 5 батрак, 7 урта хәлле һәм 2 хәлле ғаилә). Колхозда 41 эшкә яраҡлы ир-егет, 40 ҡатын-ҡыҙ булған, йәғни колхозсыларҙың дөйөм һаны — 81 кеше. Колхоздың ат көсө менән эшләгән 4 бесән сапҡысы, 4 жатка-самосброскаһы һәм 1 триеры була. Мал һаны: 46 ат, 1 ыйыр, 1 үгеҙ, 6 һарыҡ. Кадрҙар: 1 рәйес, 1 иҫәпсе, 2 бригадир, 1 тракторист, 2 ташсы, 1 һауынсы, 1 ат ҡараусы. 1930 йылда 104 га бойҙай, 7 га арпа, 79 га һоло сәселә, бынан тыш 5 га ҡарабойҙай, 4,5 га етен сәселә, 4 га бәрәңге ултыртыла, шулай итеп бөтә сәселгән майҙан 207 га тәшкил итә. Колхоз 18199 һум доход ала,
1 хеҙмәт көнөнә 6 кг бойҙай бирелә.

1940 йылда «Октябрь» колхозы бай хужалыҡтарҙан һанала. Колхоз 276 хужалыҡты берләштерә (407 колхозсы, бөтәһе 1314 кеше).
1940 йылда уртаса иген уңышы гектарынан 7,6 ц тәшкил итә. Баҫыуҙар — 3594 га. Мал һаны: 438 ыйыр малы, 144 сусҡа, 1077 һарыҡ, 2 кәзә, 212 әтәс-тауыҡ, 427 баш ат (242 эш аты). Бынан тыш колхозда 3 автомашина, 62 ат һабаны, 11 ат бесән сапҡысы, 8 лобогрейка, 142 ағас һәм 34 тимер тырма була. Әммә бындай колхоздар районда бер нисә генә була. Колхоздарыбыҙҙың төп өлөшө артта ҡалған, ярлы хужалыҡтар иҫәбендә була.

Район һабантуйҙары тураһында бер нисә һүҙ. Учалы районындағы тәүге район һабантуйы 1931 йылда үткәрелә. Учалы районы үҙе лә бит
1930 йылда, август айында 3 волость делегаттарының (Туңғатар, Күбәләк-Тиләү, Учалы) Учалы ауылында үткән йыйылышы ҡарары менән барлыҡҡа килтерелә, үҙәге лә, бер ни тиклем бәхәсләшкәндән һуң, Учалы ауылында билдәләнә. 1937 йылға тиклем район һабантуйҙары йыл һайын үткәреп торола. 1938 йылдан ҡалып, һуғыш тамамланғансы, йәғни 1946 йылға тиклем, район һабантуйҙары үткәрелмәй.

1939 йылдың аҙағына райондағы крәҫтиән хужалыҡтарының 94,6 проценты колхоз-совхоздарға берләштерелгән була. Бөтәһе 54 колхоз,
2 МТС, 2 прииск, 2 малсылыҡ совхозы, автоколонна, 123 трактор, 58 комбайн була районыбыҙҙа.

Ауыл хужалығының матди базаһы бер ни тиклем яҡшырһа ла, илдәге дөйөм атмосфера (террор хөкөм һөргәндә), етәкселәр араһында эскелек киң тамыр йәйә[18]. «Үрнәк» колхозы рәйесе Ғәбдинов «туҡтауһыҙ эсә», Сәфәр ауыл советы рәйесе Бирғәлин «колхозға ярҙам итмәй, эсә». «Миндәк» колхозында 1 йыл эсендә 5 рәйес алмаштырылған. «Тракторсылар эсә», «Искра» колхозында «хеҙмәт дисциплинаһы юҡ». «Яйыҡ» колхозында «эш бармай, бригадир Сафин Миндияр эсеп йөрөй», Учалы МТС-ы тракторсылары «системалы рәүештә әсәләр», Наурыҙ ауыл советы рәйесе Кинйәғолов «эскелек менән шөғөлләнә». Тәтлембәт ауыл советы рәйесе Яҡупов «эсеп ятты». Илсеғол ауыл советы рәйесе Хисаметдинов «эсә, РИК президиумына ла эсеп килә». Былар 1938 йылдағы район газетаһы биттәренән, ауылдарға ебәрелгән район вәкилдәренең отчеттарынан килтерелгән өҙөктәр, шул ваҡытта аҡҡа төшкәндең бер өлөшө генә. Әммә улар 30-сы йылдар аҙағында, һуғыш башланыр алдынан халыҡ араһында

ниндәй кәйефтең өҫтөнлөк итеүен асыҡ сағылдыралар. Күңел төшөнкөлөгө, пессимизм, ҡурҡып-ҡалтырап йәшәү — шул саҡтағы тормошобоҙға хас һыҙаттар.

30 йылдарҙа алтын сәнәғәте киң үҫеш алды. Мулдаҡай, Поляковка, Ильинка прииск идаралыҡтары, Миндәк руднигы төҙөлдө. Әүеш, Шәрип, Әсфәндиәр, һарытүр алтын ятҡылыҡтары асыла. Эшкә һәләтле халыҡтың өстән бер өлөшө старателдәр хеҙмәте менән шөғөлләнде. 50-нән ашыу руда һәм һибелмә алтын ятҡылығы эшкәртелде.

Районда 64 колхоз, Байрамғол совхозы, Учалы МТС-ы ойошторолдо. Урындағы сәнәғәт үҫте.

1934 йылда үрҙә һанап үтелгән алтын ятҡылыҡтары нигеҙендә асылған 4 прииск, республикала табылған алтындың 20 процентын бирә.

Миндәк поселогында 1927 йылдан алып бегун фабрикаһы эшләй (ҡеүәте: тәүлегенә 5 тонна руданы эшкәртә). Бегун фабрикалары эшкәртеп бөтә алмаған алтынды руданан алып бөтөр өсөн Миндәк, Бөйҙө, Ильинка һәм башҡа приискылар эргәһендә циан заводтары эшләгән. 1938 йылда Миндәк руднигында руданы тулыһынса эшкәртеп бөтә алған фабрика асылыу район күләмендә ҙур ваҡиғаға әйләнә.

## РЕПРЕССИЯ ҠОРБАНДАРЫ.

1929 йылдан 1953 йылға тиклем илебеҙҙә ҡанлы Сталин режимы хакимлыҡ итте. Беҙҙең республика буйынса ғына ла был йылдарҙа 60000 кеше репрессияланды, бөгөнгө көндә шуларҙың ни бары 150-һе генә тере. Беҙҙең райондан күпме кеше репрессияланған? Был һорауға аныҡ ҡына яуап биреүе еңел түгел, сөнки Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Именлеге комитетының архивына әле бөгөн дә иркен инеп булмай, архивтың үҙ хеҙмәткәрҙәре халыҡҡа еткергән мәғлүмәттәр тулы түгел. 1994 йылдың башында район газеталары биттәрендә баҫылған репрессияға дусар ителгәндәр исемлегендә ни бары 390 кешенең исем-фамилияһы бирелгән[19]. Исемлектең тулы түгеллеген раҫлаусы бер факт: Ахун ауылынан ҡулға алынып, хөкөм ителгән кешеләр (Ахун ауылының тарих музейы директоры И. Харисовтың иҫәпләүҙәре буйынса) барыһы 71 кеше, ә БР ДИК биргән исемлектә улар — 31. Байтаҡ ҡына учалылар, башҡа райондарҙа, ҡалаларҙа эшләп, уҡып, хеҙмәт итеп йөрөгән ерҙәрендә репрессияға дусар ителгән. Дәүләт Именлеге Комитеты тарафынан төҙөлгән исемлек уларҙы бөтөнләйгә иҫәпкә алмай. Ошоларҙан сығып, ғаилә ағзаларын индермәй иҫәпләгәндә, беҙҙең райондан бөтәһе меңгә яҡын (йә иһә 900-ҙән ашыу) кеше репрессияланған тип ҙур ышаныс менән әйтә алабыҙ. Ғаилә ағзаларын да ҡушһаҡ, бер нисә мең кеше тураһында һүҙ алып барырға мөмкин.

Күпме кешенең яҙмышы һындырылған, күпме бала етем ҡалдырылған, күпме аҫыл ир-егеттәребеҙ атылған, ҡараусыһыҙ ҡалған күпме ғаилә аслыҡтан ҡырылған, нисә тотҡон лагерҙарҙа һәләк булған? Был һорауҙарға бөгөн ҡапыл ғына яуап биреүе мөмкин түгел — улар махсус тикшеренеү көтә. Тик шуныһы: илебеҙгә ҡанлы диктатураны (фа-

шизм формаһындамы, коммунизм формаһындамы) ҡабаттан кисерергә яҙмаһын ине.

Колхозлаштырыу осорондағы репрессиялар тураһында алдағы параграфта һүҙ барғайны. Әйтергә кәрәк, 1933 йылда ла бер ғәйепһеҙгә ҡулға алыуҙар, төрлө сроктарға хөкөм итеүҙәр кәмемәй. Вознесенка, Поляковка ауылдарының һәр береһенән бер ай эсендә унар кеше ҡулға алына, Ахун ауылынан 1 төн эсендә (22 март) 12 кеше, Ураҙҙан (13 март) 20 кеше алып кителә. Ниҙә ғәйепләйҙәр һуң уларҙы? Совхоз һәм колхоздарҙы юҡҡа сығарырға тырышыуҙа, Магнитогорск металлургия комбинатын шартлатырға йыйыныуҙа. Бынан тыш, уларға «Германия һәм Япония разведкаларының агенттары», — тигән яла яғыла, «халыҡ дошмандары» тигән йөрәккә шом һалғыс атама тағыла. Уларҙың барыһының да йәштәре 24 менән 60 араһында, йәғни кешенең йәшәү дәрте иң көслө осорҙары була. Әммә Сталин йәлләдтәре һәр ҡайһыһын 5—10 йылға хөкөм итеп, тормош тамырҙарын аҡтара. Шул китеүҙәренән уларҙың күбеһе ҡайтмай, бары тик 50-се йылдар уртаһында иҫән ҡалған, ләкин һаулыҡтары бик ныҡ ҡаҡшаған бер нисә кеше тыуған төйәктәренә килеп йығыла.

Репрессиялар ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла урап үтмәй. 1933 йылдың февраль-март айҙарында 4 колхозсы һәм ике хужабикә, бөтәһе 6 ҡатын-ҡыҙ (Поляковка, Вознесенка, Кирәбе ауылдарынан һәм Топорино хуторынан) ҡулға алынып хөкөм ителә. Иң олоһона — 72, иң кесеһенә 37 йәш. «Халыҡ дошманы» тигән хурлыҡлы атама, шулай итеп, улар иңенә лә төшә.

1934—1935 йылдарҙа репрессиялар кәмей төшә, әммә 1936 йылда яңы көс менән тоҡана. Дауыт Юлтыйҙың бер туған ҡустыһы Мөхәммәтҡол Юлтыевтың 2 аҙна Учалы ерендә командировкала йөрөп ҡайтыуы каратель органдарына яңы ғәйепләү эше асыу өсөн һылтау була. Йәнәһе, Мөхәммәтҡол Юлтыев Учалыға үҙе ойошторған «Ирекстан» исемле «контрреволюцион» ойошмаға яңы ағзалар йәлеп итеү өсөн барған. Ошо уйҙырмаға нигеҙләнеп, Өфөлә «Ленинсы» йәштәр гәзитендә бүлек мөдире булып эшләгән Мөхәммәт Хәйҙәров ҡулға алына. Мөхәммәт Хәйҙәров Өргөн ауылында тыуған, Учалыла МТС гәзитенең редакторы булып эшләп йөрөгән еренән Өфөгә, эшкә саҡыртып алына. 21 йәш менән барған Мөхәммәт, башҡа бик күп йәш егеттәр менән бер рәттән, Өфө төрмәһендә ултыра. Тәүҙә уға «террор» статьяһын йәбештереп маташалар, үлемгә хөкөм ителгәндәр камераһына күсерәләр, ләкин ғәйебен иҫбат итә алмайҙар. Милләтселектә ғәйепләп, 4 йылға хөкөм итәләр: хөкөм срогын ул Карлагта (Караганда лагерында) үткәрә. Мөхәммәт Хәйҙәровтың хәтерләүенсә, Өфө төрмәһендә ул Әбүс Һәйти тигән бер шағир менән бергә ултыра. Кем булған ул, Өфө төрмәһенә ҡайҙан, нисек барып эләккән?

Әбүс Һәйтиҙең ысын ҫисем-шәрифе Сабит Суфиянов. Ул 1906 йылда Учалы районының Сәфәр ауылында тыуған, 1921 йылға тиклем шунда йәшәгән. Ырымбурҙа педагогия техникумын тамамлаған. Шиғырҙар яҙған был егетте 1930 йылда яңы сыға башлаған «Ударсы» исемендәге район гәзитенә яуаплы сәркәтип итеп тәғәйенләйҙәр. Мөхәммәтҡол Юлтыев Учалыға килгән сағында уның менән осрашып, һөйләшеп китә. Өфөлә М. Юлтыев менән таныш кешеләрҙең ҡулға

алынғандарын ишеткән Әбүс Һәйти Учалыны ҡалдырып, Ҡазанға ҡаса, әммә күп тә ҡалмай, 28 июлдә ҡулға алына һәм Өфөгә килтерелә. Әбүскә бик күп ғәйеп ташлайҙар: уның ирек, азатлыҡ тойғоһо менән һуғарылған шиғырҙарынан совет власына ҡаршы йүнәлтелгән юлдар эҙләйҙәр, «милләтсе» мөһөрөн баҫалар, «халыҡ дошманы» яһап, оҙайлы срокка лагерға ебәрәләр. Бары тик 1948 йылда ғына тыуған яғына ҡайтыу бәхетенә өлгәшә ул. Мансур ауылында үҙенә өй һалып инә. Әммә 1949 йылда бер ниндәй ғәйепһеҙ көйө яңынан ҡулға алына һәм бары тик 1956 йылда ғына уға яңынан Мансурға ҡайтырға насип була. Ләкин ауыл халҡы һәм етәкселәр араһындағы «халыҡ дошманы»на ҡарата ҡырын ҡараш, кәмһетеү, йәберләү уны тыуған яғын мәңгелеккә ҡалдырып, Өфөгә сығып китергә мәжбүр итә. Унда ул мосолман зыяратында ҡәбер ҡаҙыусы булып тамаҡ аҫырарға мәжбүр була.

1936 йылда башҡорт халҡының данлыҡлы улы, күренекле шәхес, 1918—1920 йылдарҙа Мәскәүҙә Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссариатында башҡорт халҡының вәкиле булып торған Шәриф Манатов (тыуған ере — Курган өлкәһе) ҡаты сирҙән дауаланыр өсөн беҙҙең төбәккә килә. Ләкин һауыға алмай үлеп китә. Үҙенең васыяты буйынса, Көсөк ауылының (Миәс ҡалаһы эргәһендәге) зыяратында ерләнә. Репрессиянан уны үлем ҡотҡара, сөнки уға ла «эш» асылған була.

Ҡанлы 1937 йыл! Учалы ере был йылда үҙенең иң аҫыл ирегеттәрен юғалта. БР ДИК-ның архивында һаҡланған 6568 һанлы «эш» буйынса 32 Учалы кешеһе ғәйепләнеп, хөкөм ителгән. Кемдәр һуң улар? Ниндәй енәйәттә ғәйепләнгәндәр? Башта һорауҙың икенсе өлөшөнә яуап биреп ҡарайыҡ. Был баштан-аяҡ алған документта 32 кеше тарафынан Учалы районында совет власын ҡолатыу маҡсаты менән төҙөлгән 7 отряд тураһында һүҙ бара. Йәнәһе, ошо 7 отряд 100-ҙән ашыу баш күтәреүсене берләштергән, бик күп ҡорал туплаған булған...

1937 йылдың февралендә Өфөлә, 1919 йылда Тамъян-Ҡатай кантонында ревком рәйесе булып эшләп киткән Кәрим Иҙелғужин ҡулға алына. Йәй көнө сират 1919—1920 йылдарҙа шулай уҡ беҙҙең кантонда ревком рәйесе вазифаһын биләгән Шаһиәхмәт Мөхәмәтдин улы Дауытовҡа ла етә. Ҡулға алынған мәлендә ул Өфөлә Дәүләт планы рәйесе булып эшләп йөрөгән була. 1917 йылдан РКП(б) ағзалары булған ошо 2 күренекле башҡорт эшмәкәрен Башҡортостанда 3000 кешенән торған 62 баш күтәреүселәр отрядын төҙөүҙә ғәйепләйҙәр. Был уйҙырмаға ярашлы, чекистар 1124 «баш күтәреүсе»не ҡулға алып, төрмәгә яба.

Йәнәһе, ошо 62 отрядтың 7-һе Учалы районының төньяғында ойошторола. Уларҙы Муса Мортазин һәм Шаһиәхмәт Дауытовтарҙың күрһәтмәһе буйынса, Учалыға килгән, үрҙә исеме аталған Мөхәммәтҡол Юлтыев төҙөп киткән, имеш. Учалы «баш күтәреүсе»ләренең ике үҙәге булған: беренсеһе — «Төньяҡ» үҙәк (Мулдаҡай ауылы), икенсеһе — «Көньяҡ» үҙәк (Туңғатар ауылы). «Төньяҡ» үҙәктең етәксеһе итеп Мулдаҡай графир участкаһы начальнигы Шаһишәриф Бүләков күрһәтелгән. Туңғатар мәктәбе директоры Сәләх Баһаев «Көньяҡ» үҙәктең етәксеһе булған, йәнәһе. Ысынлап та, Ш. Бүләков та, С. Баһаев та районда күренекле етәкселәр була, халыҡ араһында ҙур абруй менән файҙалана, шуға ла уларҙың икеһенең

дә дуҫ-иштәре бик күп була. Бүләков һәм Баһаев ҡулға алынып, уларға әҙәм ышанмаҫлыҡ ғәйеп ташлағас, был икәүҙе күргән-белгән, улар менән аралашҡан бик күп кеше репрессиялана. Билдәле, «Туңғатар төркөмө»ндә башлыса милли интеллегенция вәкилдәре, «Мулдаҡай төркөмө»ндә — эшсе, колхозсылар ҡулға алынғандарҙың төп өлөшөн тәшкил иткәндәр.

28 июль төнөндә Мулдаҡайҙан тәүге 2 кеше ҡулға алына: старатель булып эшләгән Бикбулатов Зиннур Әсфәндиәр улы (1888 йылғы, Зәки Вәлиди ғәскәрендә полк муллаһы булып хеҙмәт иткән), һәм Усманов Шәриф Кәбир улы (1892 йылғы, Орловка ат заводы директоры). 5 август төнөндә Кәримдән старатель Төпәев Харис ҡулға алына, 27 август Мулдаҡайҙан, мәктәптә завуч булып эшләгән Әхмәтшин Ғәбделхай Әхмәтшәевич (Зәки Вәлидиҙең ҡустыһы) репрессиялана.

Ҡулға алынғандар һорау алыу өсөн Белорет төрмәһенә оҙатыла.

Сәләх Баһаевтан тыш, «Туңғатар төркөмө» баш күтәреүселәре тип хөкөм ителәләр:

1. Нурғәли Бикбулатов — Мулдаҡай тулы булмаған урта мәктәбе директоры.
2. Сабур һәм Сәлим Исхаҡовтар — Туңғатар урта мәктәбе уҡытыусылары.
3. Әхмәтхан Төпәев — Кәрим башланғыс мәктәбе уҡытыусыһы.
4. Хәким Хаджаев — Учалы урта мәктәбе директоры (Сәфәр ауылында тыуып үҫкән был кеше «татармын» тип ныҡыша, әммә «башҡорт милләтсе́леге»ндә ғәйепләнеүен алып ташлай алмай).

Шаһишәриф Бүләковтан тыш, «Мулдаҡай төркөмө»нә индерелеп, хөкөм ителеүселәр:

1. Ш. К. Усманов (ул да үҙен «татармын» тип иҫбат итергә тырышһа ла, «актив башҡорт милләтсеһе» тип ғәйепләнә.
2. Г. Ж. Ғиззәтуллин
3. Абдулла Ураҙаев
4. С. М. Хәйбуллин-Вәлиев
5. Яуымбай Моратшин (штраф ротаһы составында 1943 йылда фронтҡа әләгә һәм һәләк була).

Ҡулға алынған 32 яҡташыбыҙҙың 16-һы Белорет төрмәһендә атып үлтерелә. Түбәндә уларҙың исемлеген килтерәбеҙ.

1. Шаһишәриф Бүләков (17 декабрь) — начальник
2. Мөхәммәт Имашев (29 ноябрь) — магазин мөдире
3. Әхмәтшин Абдулхай (7 декабрь) — завуч
4. Сәләх Баһаев (29 ноябрь) — директор
5. Әхмәтхан Төпәев (17 декабрь) — уҡытыусы
6. Харис Төпәев (2 сентябрь) — старатель
7. Зиннур Бикбулатов (22 декабрь) — старатель
8. Камалетдин Бүләков (22 декабрь) — приискыла десятник
9. Ш. Әюпов
10. Мөжәүиров
11. Әсәф Мифтахов (27 ноябрь) — колхозсы
12. Хәлилов Ғиниәт (29 декабрь) — колхозсы
13. Хәлилов Миҙәт (27 ноябрь) — колхозсы
14. Хәмитов Мөһит (27 ноябрь) — колхозсы

15. Рөстәмов Закир (2 декабрь) — колхозсы
16. Сәғитов Оморҙаҡ (2 сентябрь) — колхозсы

Үлем язаһынан тороп ҡалған 16 «баш күтәреүсе», «милләтсе» Сталин лагерҙарына оҙатыла. 6568-се «эш» буйынса хөкөм ителгән учалыларҙың икәүһенә генә лагерь ғазаптарын үтеп, тыуған илдәренә әйләнеп ҡайтырға насип була. Бына улар: Нурғәли Бикбулатов һәм Ғәбдрәшит Исхаҡов.

Кәрим Иҙелғужин менән Шаһиәхмәт Дауытов 1937 йылда Өфөлә атып үлтерелә.

Районыбыҙҙың көньяғы иһә был осорҙа ҙур тырышлыҡ менән «мортазинсылар»ҙан таҙартыла. Муса Лут улы 1937 йылдың 31 майында Мәскәүҙә Генштабта эшләп йөрөгән еренән ҡулға алына. Күпме генә язаламаһындар, М. Мортазин үҙен ғәйепле тип танымаған. Ҡот осҡос язалауҙарға ҡарамаҫтан, үҙенең кешелек һәм гражданлыҡ йөҙөн һаҡлап ҡала алған, бер кемде лә һатмаған. 1937 йылдың 27 сентябрендә атып үлтерелә.

Муса Лут улы ғүмеренең ахырына тиклем революция идеалдарына тоғролоҡ һаҡлай, Совет иленә бөтә ихласлығы менән хеҙмәт итә һәм дәһшәтле 1937 йылда чекист пуляһынан һәләк була.

24 август төнөндә иң тәүҙә ҡулға алынған «мортазинсылар»: уҡытыусы Бәкер Ғәззәл улы Мортазин һәм алтын приискыһы эшсеһе Әхмәҙи Мортазин. Оҙаҡламай район үҙәгендәге «КПЗ» камералары ҡулға алынғандар менән тыңҡыслап тултырыла. Муса Лут улының тыуған ауылы Көсөктән генә бында 12 кеше килтереп ябыла, һорау алыу көнө-төнө бара. Ҡулға алынғандарҙы төрлөсә язалайҙар, туҡмайҙар. Ултырырға, ятырға мөмкинселек бирмәйҙәр.

«Тройка» приговоры менән 1937 йылдың 8 декабрендә Өфө төрмәһендә 25 мортазинсы 2—3 минут интервал менән сығарып атыла. Уларға ташланған ғәйеп: Башҡортостан биләмәһендә совет власын ҡолатыуҙы маҡсат итеп ҡуйған башҡорт милли хәрәкәтендә ҡатнашыу.

Әйтеүебеҙсә, был баштан аяҡ ялғанға ҡоролған була. Атып үлтерелгәндәр араһында Әхмәҙи, Искәндәр, Әбүбәкер Мортазиндар ҙа була. Атыусыһы: сержант Ковалевич. Ошо төркөмдә атылған ил ағаларының, милләт уҙамандарының кәүҙәләре Өфөнөң Сергеевск зыяратында, дөйөм соҡорға күмелгән.

Репрессияларға совет һәм партия хеҙмәткәрҙәре лә дусар ителә.

1934 йылда советтарҙың II съезында Учалы район советына 25 кеше һайлана, шуларҙың 3-һө күп тә үтмәй халыҡ дошмандары тип ҡулға алына: Ф. А. Лоҡманов — Ғәлиәхмәр ауылынан, колхоз рәйесе, Ф. Ғ. Йомабаев — район коммуналь хужалығы мөдире, Г. С. Йәнбәков — Поляковка ауыл советы депутаты. Әммә ДИК биргән исемлектә уларҙың береһе лә юҡ.

1936 йылдың октябрендә советтарҙың сираттан тыш съезы район советына өҫтәмә рәүештә 12 кешене һайлай. Шуларҙың 6-һы халыҡ дошманы булараҡ ҡулға алына. Бына улар:

1. Дәүләт Ғәлимов — район башҡарма комитеты рәйесе.
2. Асман Моратов — ВКП(б)-ның РК 1 секретары.

3. Сәмиғулла Нәбиуллин — ВКП(б)-ның РК II секретары.
4. Шамил Нагаев — комсомолдың РК секретары.
5. Миндияр Бакыев — ойоштороу бүлеге мөдире.
6. Хәмит Мәғәсүмов — юл бүлеге мөдире.

Ниҙә ғәйепләгәндәр һуң Ғәлимовты, Моратовты һәм Нәбиуллинды? «Байрамғол» совхозында булған сақтарында: «Көндөҙ сәсеү менән генә ҡәнәғәтләнмәҫкә, төнөн дә сәсергә!» — тигән фарман биреп киткәндәр икән. Был сәсеү сифатының түбән булыуына һәм һөҙөмтә буларақ колхоз-совхоз ҡоролошоноң ҡаҡшауына килтерер ине. Бынан тыш улар Магнитогорск элеваторынан сәсеү өсөн орлоҡто ваҡытында ташытып алмауҙа ғәйепләнә. Был ғәйепләү сәйәсәт менән бәйләнелә. Судьялар өс тапҡыр судҡа йыйылалар һәм иң һуңғыһында ғәйепләнеүселәрҙе аҡлай. Әммә уларҙы эштәрендә кире тергеҙмәйҙәр.

Район башҡарма комитеты рәйесе вазифаһына Миндияр Бакыев үрләтелә. Күп тә үтмәй уны ла ҡулға алалар. Унан Учалы районы буйынса ГПУ начальнигы Мамаев һорау ала. Пистолет менән ҡурҡытып, совет власына ҡаршы эшмәкәрлек алып барыуын таныуын талап итә.

Район гәзите редакцияһы хеҙмәткәрҙәре лә тулы составы менән тиерлек репрессиялана. Поляковка, Ильинка приискылары директорҙары Йәнбәков менән Буранғолов та кулға алына. Уларҙы ла совет власына ҡаршы ҡораллы ихтилалды әҙерләүҙә ғәйепләйҙәр, йәшереп һаҡлаған ҡоралдарын таптыралар.

Бармаҡ менән генә һанарлыҡ ауыл хужалығы белгестәренең, уҡытыусы, директорҙарҙың иң көслө, алдынғы өлөшө ҡулға алынып һәләк ителә. 8 колхоз рәйесенә лә халыҡ дошманы мөһөрө баҫыла. Ә бит ул заманда был вазифаны граждандар һуғышында ҡатнашҡан коммунист булған кешеләр генә биләгән!

Мәскәү Өфөгә, Өфө Учалыға нисә кешене ҡулға алырға, ниндәй срокка хөкөм итергә, нисәүһен атырға конкрет задание төшөргән. Бер миҫал нигеҙендә ошо фекерҙе нығытып китәбеҙ. 1938 йылда Өфөнән Дәүләкән районына Левченко тигән чекист ебәрелә. Уға 100 кешене ҡулға алыу бурысы ҡуйыла. 97 кешене төрмәгә япҡас, ул Өфөнән ҡайтырға рөхсәт һорай. Ҡулға алыныусыларҙың һаны 100 булмағанын белгәс, Өфө уға ҡайтырға рөхсәт бирмәй, заданиены үтәүҙе талап итә.

Репрессиялар артабан да дауам иткән, әммә улар баштағы массовыйлыҡ төҫөн юғалтҡан, һуғыштың тәүге көндәрендә (1941 йылдың июне-авгусы) район буйынса тиҫтәгә яҡын кеше ҡулға алына һәм төрлө срокка хөкөм ителә. Бер ғәйепһеҙгә кешеләрҙе ҡулға алыуҙар 50-се йылдар башында, Сталин үлгәндән һуң ғына туҡтатыла.

Нахаҡҡа ғәйепләнеп, лагерҙарға ябылғандарҙың, атылғандарҙың бер (бик бәләкәй) өлөшө 1956—1960-сы йылдарҙа аҡланған ине, 1989 йылда ҡалғандары ла реабилитацияланды. 1991 йылдың 6 июлендә Төпәй (Кәрим) ауылында Салауат Харис улы Төпәевтың тырышлығы менән репрессия ҡорбандарына Башҡортостанда тәүге һәйкәл ҡуйыла[20]. Гранитҡа алтын менән ошо бәләкәй генә башҡорт ауылынан юҡ ителгән 7 уҙамандың исем-фамилиялары яҙылған. Бына ул исемлек:

1) Төпәев Харис Фазлетдин улы,

2) Төпәев Әхмәтхан Фазлетдин улы,

3) Исхаҡов Сәлим Шакир улы,

4) Исхаҡов Мөбәрәк Закир улы,

5) Исхаҡов Сабур Закир улы,

6) Бүләков Шаһишәриф Хисаметдин улы,

7) Бүләков Камалетдин Шәмсетдин улы.

Бындай һәйкәлдәр районыбыҙҙың 88 ауылының һәр береһендә ҡуйылырға һәм коммунистик тоталитар диктатураға мәңгелек ғәйепләү булып, бөтә айыҡ аҡыллы кешеләргә иҫкәртеү булып торорға тейеш.

*Репрессия ҡорбандарының Башҡортостан ассоциацияһы президенты Салауат Төпәев*

## МӘҘӘНИӘТ ҺӘМ СӘНҒӘТ

Беҙҙең төбәктә 20-се һәм 30-сы йылдарҙа мәҙәниәт һәм сәнғәт ҙур үҫеш юлына баҫа. Уҡыу йорттары, клубтар һаны йылдан-йыл арта, халыҡтың белем кимәле һиҙелерлек күтәрелә. Наҙанлыҡты бөтөрөү мәктәптәрендә меңәрләгән кеше уҡырға, яҙырға өйрәнә. 20-се йылдар өсөн башлыса башланғыс мәктәптәр хас булһа, 30-сы йылдарҙа районыбыҙҙа 7 йыллыҡ (тулы булмаған урта) мәктәптәрҙең һаны ҡырҡа арта, бер нисә урта мәктәп асыла. Әйҙәгеҙ күрһәткестәргә мөрәжәғәт итәйек. 1933 йылда районда 81 мәктәп булып, шуларҙың 11-е генә 7 йыллыҡ белем биргән. Ә инде 1941 йылда районыбыҙҙа 57 башланғыс, 20 тулы булмаған урта һәм 4 урта мәктәп (Учалы, Миндәк, Поляковка, Мулдаҡай) эшләгән.

Графиканың үҙгәреп тороуы мәктәптәребеҙ эшендә ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырған. Билдәле булыуынса, 1923 йылда республикабыҙҙа ғәрәп графикаһы нигеҙендә беренсе башҡорт алфавиты төҙөлә. Әммә 7 йылдан һуң, 1930 йылда ул латинлаштырылған алфавит менән алыштырыла. Һөҙөмтәлә, дәреслектәр, уҡыу китаптарын тулыһынса алыштырып, яңыса уҡырға, яҙырға өйрәнергә тура килә. 1940 йылда кириллица нигеҙендә төҙөлгән алфавит латинлаштырылған алфавитты ҡыҫырыҡлап сығарып, балалар өсөн дә, ололар өсөн дә күп ауырлыҡтар тыуҙыра.

Район ойоштороло ғандан һуң район гәзите булдырыла, 1930 йыл аҙағынан ул өҙөклөктәр менән булһа ла сыға башлай. Исеме уның тәүҙә «Ударсы» була, һуңынан «Сталин байрағы» тип үҙгәртелә. Дөйөм алғанда, 30-сы йылдарҙа районда 4 гәзит сығып килә: «Сталин байрағы», «Шахта байрағы», «Учалы МТС»-ы һәм «Байрамғол совхозы» үҙ гәзиттәрен сығаралар.

1934 йылда Мөхәммәт Хәйҙәров (буласаҡ яҙыусы) «Шахта байрағы» гәзитендә мөхәррир булып эшләй, гәзиттә Муса Мортазин тураһында очерк сығара. 1937 йылда Өфөлә «Ленинсы» гәзитендә бүлек мөдире булып эшләп йөрөгән еренән ҡулға алынып, «халыҡ дошманы» исеме тағыла. Уны Муса Мортазиндың Граждандар һуғышында күрһәткән батырлыҡтары тураһында гәзиттә очерк баҫтырған өсөн, милләтселектә ғәйепләйҙәр. Унда ул Әбүс менән бер камерала ултыра. Үлем язаһы янай уға, әммә күп ғәйепләүҙәрҙе кире ҡаҡҡандан һуң, Караганда лагерына 4 йылға оҙатыла. Ураҙҙа ижад иткән Ғабдулла Иҙрис тигән яҙыусының да яҙмышы фажиғәле: 1937 йылда ҡулға алынып, бинахаҡҡа ғәйепләнеп, ул юҡ ителә.

Районыбыҙҙан сыҡҡан күренекле шәхес Исмәғил Солтановтың да ғүмере бик ҡыҫҡа була. 1890 йылда Ҡотой ауылында тыуған, 1918 йылда кантонда (Тамъян-Ҡатай) мәғариф эшен ойошторған, талантлы, киң белемле был шәхесебеҙ 1926 йылда БАССР халыҡ комиссарҙары рәйесенең урынбаҫары итеп тәғәйенләнә, әммә 1927 йылда донъя менән хушлаша. 1989 йылда тыуған ауылындағы мәктәпкә Исмәғил Солтанов исеме бирелә.

Ҡотойҙан сыҡҡан икенсе күренекле шәхес — Әхмәт Хәҙисов (1906 йылда тыуған) комсомолдың Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретары булып эшләп йөрөгән еренән ҡулға алына һәм 1937 йылда юҡ ителә.

1939 йылда районыбыҙҙа 3 больница, 16 медпункт, 57 ауыл клубы, 80 ҡыҙыл мөйөш халыҡты хеҙмәтләндергән. 1940 йылда Белоретта һөнәрселек училищеһы асыла, тиҫтәләгән йәш-елкенсәк шунда уҡырға, һәнәр алырға ебәрелә.

Дөйөм алғанда, 20 йыл эсендә (1920—1940) мәҙәниәт, сәнғәт әлкәһендә ҙур үҙгәрештәр була, күп уңышлыҡтарға өлгәшелә. Әммә юғалтыуҙарыбыҙ ҙа бихисап. 30-сы йылдар башында, дингә ҡаршы көслө һөжүм йәйелдерелә, мәсеттәребеҙ ябыла, боронғо китаптар, ҡиммәтле ҡулъяҙмалар вәхшиҙәрсә юҡ ителә, мәғлүмәтле, уҡымышлы кешеләребеҙ (муллалар, уҡытыусылар) күпләп ситкә һөрөлә, төрмәгә ябыла, үлтерелә. Шул заманда эҙәрлекләүҙән ҡурҡып йөҙәр йыл ҡәҙерләп һаҡланған тарихи ҡомартҡылар (шәжәрәләребеҙ, орденмиҙалдар, кейем-һалым, башҡа төр документтар) ергә күмелә, утҡа ташлана. Был инде тарихи хәтеребеҙҙе юйыу, ғәфү итмәҫлек енәйәт тип ҡаралырға тейеш.

**ИҪКӘРМӘЛӘР**

III бүлек

1. Беҙҙең төбәктә совет власының урынлашыуын яҙғанда Рәүеф Насыровтың «Дауылдарҙа тыуған армия» очерегы // Совет Башҡортостаны — 1987, 215—217-се һандар — файҙаланылды.
2. И. Плотников. Героическая эпопея Уральской партизанской армии Блюхера. — Уфа, 1986.
3. Блюхер рейды тураһында ҡара: Плотников И. Күрһәтелгән әҫәр.
4. Был турала тулыраҡ мәғлүмәт: Заки Валиди Тоган. Воспоминания. — Уфа: Китап — 1994.
5. ЦГИА РБ, ф. Р. 753, оп. 1, д. 3, 12.

6. Заки Валиди Тоган. Күрһәтелгән әҫәр.
7. Кульшарипов М. М. 3. Валидов и образование Башкирской автономной советской республики. — Уфа, 1992.
8. Муса Мортазин. Өфө: Китап, 1994; Газим Шафиков. И совесть, и жертвы эпохи. — Уфа: Башкирское книжное издательство, 1991; он же. Крючья под ребро. — Уфа; Китап, 1993.
9. ЦГИА РБ, ф.Р. 753, оп. 1, д. 25
10. ЦГИА РБ, ф.Р. 753, оп. 1, д. 16
11. ЦГИА РБ, ф.Р. 753, оп. 1, д. 11, 16, 30а
12. Мәғлүмәттәр Башҡортостан Республикаһының ижтимағи-йәмғиәт ойошмаларының Үҙәк Дәүләт архивынан (ф. 234, оп. 1, Д- 2) алынды һәм башлап фәнни әйләнешкә индерелде.
13. ЦГИА РБ, ф. 164, оп. 1, д. 321, 370, 394, 245.
14. ЦГИА РБ, ф. 753, оп. 1, д. 60
15. Образование Башкирской автономной советской социалистической республики. Сборник документов и материалов. — Уфа, 1959.
16. Давлетшин Р. А. «Великий перелом» и трагедия крестьянства Башкортостана. — Уфа: Китап. — 1993; ЦГАОО РБ, ф. 234, оп. 1, д. 305, 387.
17. ЦГИА РБ, ф. Р. 3773, оп. 1, д. 1, 5, 12
18. ЦГИА РБ, ф. Р. 992, оп. 4, д. 1; оп. 3, д. 4.
19. Учалы районынан репрессияға дусар ителгән кешеләр *И* Яйыҡ. — 1993. 8, 10, 11, 14, 15, 18, 33, 35-се һандар.
20. Салауат Төпәев. Дөрөҫлөктө пуля ла еңә алмай *И* Башҡортостан. — 1992. — 140-сы һан.

IV бүлек.

# БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ҺӘМ ХӘҘЕРГЕ ЗАМАН. УЧАЛЫ РАЙОНЫ — ФРОНТҠА.

## 1. УЧАЛЫЛАР ЯУ ҠЫРЫНДА.

*Шакирйән Мөхәмәтйәнов музейында*

Беҙҙең райондан 1941 —1945 йылдарҙа һуғышҡа бөтәһе 13437 кеше оҙатыла, шуларҙан 9785 кеше ҡорбан була (73 процент). 2300 яугирыбыҙ һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн орден-миҙалдар менән бүләкләнә, былар тере ҡалғандарҙың 63 проценты. Бер нисә яҡташыбыҙ Ленин ордены һәм Алтын Йондоҙ миҙалы менән наградланып, Советтар Союзы Геройы тигән юғары исемгә лайыҡ була. Шулар араһында Ҡунаҡбай ауылы егете, исеме бөтә донъяға билдәле Мөхәмәтйәнов Шакирйән Юныс улы (Александр Матросов исеме менән тарихҡа ингән шәхес)[1]. 1943 йылдың 27 февралендә 19 йәшлек Шакирйән дошман дзотының амбразураһын үҙ кәүҙәһе менән ҡаплап, исемен мәңгелек данға күмә. Сәфәр ауылы егете Әхмәтғәлин Хәкимйән Рәхимйән улының да исеме илебеҙ тарихына алтын

хәрефтәр менән яҙылған. Ул 1944 йылда Латвия ерендә ҡаты һуғыштарҙа ҙур ҡаһарманлыҡ яһай һәм үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Сәфәр ауылында Геройға бюст ҡуйылған, йәшәгән йортонда музей булдырылған. Ҡунаҡбай ауылындағы Шакирйән Мөхәмәтйәнов — Александр Матросов музейы ла тирә-яҡтан бик күп экскурсанттарҙы үҙенә йәлеп итә. Был ике музей ҙа хәрби-патриотик тәрбиә үҙәге һәм бер үк ваҡытта Геройҙарыбыҙҙың исемдәрен мәңгеләштереүҙең бер сараһы булып тора.

Иманғол ауылы егете Сөнәғәтуллин Жәүҙәт Ғоморҙаҡ улы ла үҙенең сая ҡаһарманлығын 1944 йылда Днепрҙы кискәндә яһаған. Һуғыштан иҫән-һау ҡайтып, бөтә ғүмерен балаларҙы тәрбиәләүгә арнаған, уҡытыусы, директор, хәрби етәксе вазифаларын биләгән, бөгөнгө көндә Учалы ҡалаһында йәшәй (хаҡлы ялда).

Хөснөтдинов Әхнәф Ғилимйән улы Учалы ауылында тыуып үҫкән, Дан ордендарының тулы кавалеры, йәғни Геройға тиң шәхес. Жәүҙәт Ғоморҙаҡ улы һымаҡ, ул да бөтә ғүмерен мәктәпкә, балалар тәрбиәләүгә, үҫеп килгән йәш быуынды хеҙмәткә әҙерләүгә арнаған күренекле шәхесебеҙ.

1996 йылдың 15-се марты: хәрби комиссариатта тантаналы рәүештә 1 дәрәжәле Дан ордены эйәһенә — Мәүлит Хилаж улы Хилажевҡа тапшырылды. Хисап буйынса был уның өсөнсө Дан ордены.

Шулай итеп, Дан орденының тулы кавалерҙарының һаны тағы бер кешегә артты.

*Советтар Союзы Геройы Хәкимйән Әхмәтғәлин*

*Советтар Союзы Геройы Жәүҙәт Сөнәғәтуллин*

*Дан ордендарының тулы кавалеры Әхнәф Хөснәтдинов*

М. Х. Хилажев 1916 йылда Мансур ауылында тыуған, шунда йәшәп шунда ҡартайған.

Төп Учалы Геройҙары — бына ошолар. Әммә тағы ла бер нисә Советтар Союзы Геройының Учалыға ҡағылышы бар: улар йә беҙҙең районда тыуып, аҙаҡ ситкә күсеп киткәндәр, йә күпмелер ваҡыт Учалы районына күсеп килеп, йәшәп, ошонан армияға (һуғышҡа) алынғандар, йә иһә һуғыштан һуң Учалыға килеп төпләнгәндәр. Шуларҙың береһе, учалыларға иң яҡыны — Александр Серебрянников. 1904 йылда Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол ауылында тыуып, ошонда 17 йыл йәшәп, һуңынан Верхнеуральскийға күсеп киткән, 1940—1942 йылдарҙа һуғышҡа алыныр алдынан һуңғы 2 йылын Белорет ҡалаһында йәшәп, ошонан фронтҡа киткән һәм бөгөнгө көндә Белорет Геройы булып һаналған ҡаһарман. Курск дуғаһындағы һуғыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн ул Советтар Союзы Геройы исеменә (үлгәндән һуң) лайыҡ була. Башҡорт телен таҙа белгән, үҙен һәр саҡ Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол ауылыныҡы тип һанаған был Геройға «беҙҙеке ул» тип әйтергә учалыларҙың тулы хоҡуғы бар.

Икенсе Советтар Союзы Геройы (үлгәндән һуң бирелгән) Михаил Ташкин, киреһенсә, 16 йәшенә тиклем Силәбе әлкәһендә йәшәп, бары 4 йыл ғына ғүмерен (1936—1940) Учалы ауылында үткәргән, ошонан армияға алынған, 1945 йылда, Еңеүгә бер нисә көн генә ҡалғас һәләк булған батырға, Учалы Геройы тип әйтеү бик үк дөрөҫ булмаҫ. Армияға ла ул һуңлап алына; 1939 йылда, үҙ тиҫтерҙәренән айырып, «кулак балаһы», «Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт итергә яраҡһыҙ», — тигән сәйәси ғәйеп ташланып, ул хәрби хеҙмәттән ситтә ҡалдырыла. Әлбиттә, был ғәйепләү бер нәмә лә аңлатмай, сөнки уның менән бергә эшләгән, комсомолда бергә иҫәптә торған иптәштәре уға бары тик ыңғай ғына баһа бирәләр.

Советтар Союзы Геройы Петр Кравконы ла, шулай уҡ, Учалы Геройҙары рәтенә ҡуя алмайбыҙ. Дөрөҫ, ул һуғыш башланғас, ғаиләһе менән эвакуацияланып, Ахун ауылына килеп урынлаша һәм 1941 йылдың августынан декабренә тиклем бында май заводы директоры булып эшләй, ошонан һуғышҡа алына, һуғышта Герой була, тере ҡала, Брянск өлкәһендә (тыуған илендә) йәшәй.

Ситтән күсеп килеп, бөгөнгө көндә Учалы ҡалаһында йәшәгән Дан ордендарының тулы кавалеры Петр Поспелов та шулай уҡ яҡташ Геройҙарыбыҙ исемлегенә индерелә алмай.

Әлбиттә, бер кем дә был Геройҙарҙың батырлығын тамсы ла шик аҫтына алырға йыйынмай, әммә «Учалы ере нисә Советтар Союзы Геройы һәм Дан ордендарының тулы кавалерын биргән һуң?» — тигән һорауға, Александр Серебрянниковты ла индереп, «алтауҙы», — тиһәк, был тарихи хәкиәткә тура килер ине.

Яҡташтарыбыҙ араһында батырҙар күп булған. Бына шуларҙың бер нисәһе:

1. Ғәниев Вәли Яуымбай улы. 1905 йылда Рысай ауылында тыуған, 1927—1954 йылдарҙа диңгеҙ офицеры сифатында Балтфлотта хеҙмәт итә, Финляндия менән һуғышта һәм Бөйөк Ватан һуғышының башынан аҙағына тиклем ҡатнаша, һуғышты полк командиры дәрәжәһендә тамамлай. 6 хәрби орден: Ленин ордены, 3 Ҡыҙыл Байраҡ, I дәрәжә Ватан һуғышы һәм Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән наградлана. Ҡаһарман яҡташыбыҙ 1984 йылда вафат була, Өфө ҡалаһында ерләнә.

2. Таһиров Зияф. Көсөк ауылыныҡы. Фин һуғышында ҡатнашып, Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ була. Бөйөк Ватан һуғышында ла дошманға аяу белмәй. Батырыбыҙҙың күкрәген, шулай уҡ, алты хәрби орден биҙәй.

3. Һуғышҡа тиклем уҡытыусы-математик булып эшләгән Малай Муйнаҡ ауылы егете Рәшит Садыҡов та күп батырлыҡтар күрһәтә. Пушканан немец самолетын атып төшөрә — «Батырлыҡ өсөн» миҙалы менән наградлана. Японияны тар-мар итеүҙә ҡатнашып, Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.

4. «Башҡортостан тарихы» дәреслегенә индерелгән Хәйрулла Ҡыҙырғәлин дә Учалыныҡы, дөрөҫөрәге Кәрим ауылыныҡы. Ленинградты обороналауҙа күп батырлыҡтар күрһәтә был данлыҡлы яҡташыбыҙ.

5. Ҡәйепҡол ауылынан рядовой Сабирйән Әхмәтов 115 яралыны ут аҫтынан алып сыҡҡан һәм Ленин ордены менән наградланған.

6. Илтабан ауылындағы Ҡазеевтар ғаиләһенән фронтҡа бер юлы 4 кеше — атаһы һәм Заһит, Мәүлит, Мулланур исемле өс улы китә. Улдары батыр командирҙар булып танылыу алалар. Оло улдары Заһит фронттан әсәһенә ошондай эстәлекле хат яҙа:

«Әсәй! Ҡыҙыл Йондоҙ орденынан һуң мине тағы ла Ватан һуғышы ордены менән наградланылар. Был ордендар немецтарға ҡаршы батырҙарса һуғышҡаным өсөн бирелде. Тыуған илем өсөн ғүмеремде лә бирермен, әсәй!»

Аҡҡужа ауылындағы Хаммасовтар ғаиләһенән һуғышҡа 5 бер туған: Сөнәғәт, Ғәлиулла, Ниғәмәт, Мәүлит, Әхтәм китә. Уларҙың бишеһе лә Ватан өсөн ғүмерҙәрен ҡорбан итәләр.

Учалы мәктәбе музейында батыр яҡташыбыҙ Мирсат Закировтың (Ул Брест крепосын обороналауҙа ҡатнашҡан һәм аҙағынаса һуғышып һәләк булған) комсомол билетының һау ҡалған бер өлөшө һаҡлана.

Француз Ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәтендә ҡатнашып, күкрәген Франция миҙалдары биҙәгән икенсе батырыбыҙ Мөждәбә Шаһиевтың исеме лә бөтә ҡала-район халҡына билдәле (Һәйтәк ауылынан).

Күп кенә райондаштарыбыҙ партизан хәрәкәтендә ҡатнашып, Еңеүгә үҙ өлөшөн индерә. Шулар иҫәбенә Рысайҙан Йомабай Әхмәт-йәновты индерергә була.

Бөйөк Ватан һуғышында, ир-егеттәрҙән тыш, беҙҙең райондан 56 ҡатын-ҡыҙ ҙа ҡатнаша. Улар үҙҙәре теләп Хәрәкәт итеүсе армияға барып ҡушылалар. Шулар араһында Мулдаҡай мәктәбе уҡытыусыһы Өммөкамал Заһитова, Поляковка мәктәбе уҡытыусыһы Полина Стариковалар ҙа була.

## 2. ТЫЛ — ФРОНТҠА![2]

Майор Х. И. Сәитовтың (Илсе ауылынан) 1942 йылда фронттан яҙған хатында түбәндәге юлдар бар: «Беҙҙең Армия ҡоторонған немец фашистары менән ҡаты һуғыштар алып бара... Шуны яҡшы аңлайбыҙ: беҙҙең уңыштарыбыҙ һеҙҙең тылдағы еңеүҙәрегеҙгә бик тығыҙ бәйләнгән!»

Эйе, учалылар фронтта ғына түгел, ә тылда ла ҡаһарманлыҡ өлгөһө күрһәтеп, Еңеүҙе яҡынайталар.

Ауыл ерендә бөтә эш ҡатын-ҡыҙҙар, ҡарттар һәм 10—16 йәшлек үҫмерҙәр ҡулына тороп ҡала. 1941 йылдың 12 августа Учалы МТС-ы 25 ҡатын-ҡыҙ тракторсыны һәм 28 ҡатын-ҡыҙ комбайнсыны уҡытып сығара. Был курстар артабан да кадрҙар әҙерләүен дауам итә. 1943 йылдың мартында, мәҫәлән, 70 ҡыҙ Учалы МТС-ы эргәһендәге курстарҙы тамамлап, механизаторлыҡ танытмаһы алып, ауылдарына ҡайталар. Яңы наборҙа 2 МТС эргәһендәге курстарға (Учалы һәм Байрамғол) тағы ла 123 ҡыҙ йәлеп ителә.

Учалы МТС-ы тракторсыһы комсомолка Ҡаһарманованың исеме бөтә районға яңғырай. 1943 йыл эш һөҙөмтәләре буйынса ул райондың иң алдынғы тракторсыһы тигән исемгә лайыҡ була.

Тылда тормош үтә ауырлаша. Ҡатын-ҡыҙ елкәһенә ҡот осҡос ауырлыҡтар төшә. Улар тракторсылар, комбайнсылар ҙа, ат ҡараусы ла, елкәһенә 20—25 кг иген йөкмәп, йәйәүләп йыраҡ араға (тиҫтәләрсә саҡрымдарға) орлоҡ игенен ташыусы ла, ғаиләне туйҙырыусы ла булып ҡала. Бынан тыш, юҡ-барға бәйләнеп, уларҙы урман ҡараусылар, колхоз рәйестәре йонсота.

Халыҡ хәтерендә һуғыш йылдары рәйестәре (бригадирҙары) ғөмүмән, ҡара хәрефтәр менән уйып яҙылған. Ауылдарҙа ир-егет юҡ, ҡулда власть һәм, әлбиттә, рәйестәр, бригадирҙар, урман ҡараусылар ни теләһә, шуны ҡыланғандар...

Колхоз-совхоздарҙа эш көнөнөң оҙонлоғо 14—16 сәғәткә етә. Ял итергә мөмкинселек булмай. Йәш балалы ҡатындар сабыйҙарының бишектәрен ҡайын ботағына элеп ҡуйып, колхоз эштәрен башҡаралар.

Ауыл халҡының ашарына икмәк, кейеренә кейеме булмай. Аслыҡ шуға барып етә: күп кеше һабаҡта ҡышлап сыҡҡан башаҡ игенен ашап, ағыуланып ҡырыла.

Халыҡ йылына бер тапҡыр — яҙ көнө генә теләгән үләнде ашап, туйып ҡала. Бер ус игенде лә үҙ белдегең менән алып ашап булмай. Ундайҙарҙы 4 июнь Указы менән язаға тарттыралар — 5 йылдан 7 йылға тиклем төрмәгә ябалар.

Өҫтәүенә, хөкүмәт ауылдағыларҙы йыл һайын төрлө һалымдар менән йонсота. Йылына 46 кг ит, 16 кг иретелгән һары май, 200 йомортҡа, 1 тире, ауыл хужалығы һалымы, заем, хәрби һалым, буйҙаҡтар һалымы түләтелә.

Бөлгән халыҡты төрмә менән ҡурҡыталар, «халыҡ дошманы» исемен тағалар, немецтарға ярҙам итеүҙә ғәйепләйҙәр. Ауыл халҡы үҙе ас-яланғас ҡалһа ла бик ҙур ҡыйынлыҡ менән төрлө һалымдарҙы түләй.

Мәктәптәрҙә уҡыу йылы 1-се октябрҙән генә башлана торған булған, уҡыу йәшендәге балалар барыһы ла уҡытыусылары менән ураҡта булғандар. Бары тик башланғыс синыф уҡыусылары ғына 1-се сентябрҙән парта артына ултырғандар. Әммә улар ҙа көн дә дәрестән һуң уҡытыусылары менән иген баҫыуҙарына башаҡ йыйырға йөрөгәндәр. Район газетаһы (26 сентябрь 1942 йыл) Сәфәр тулы булмаған урта мәктәбе тураһында мәҡәлә баҫтырып сығара. Унда түбәндәге юлдар бар: «...1—IV синыф укыусылары дәрестән һуң уҡытыусылары етәкселегендә 240 кг башаҡ йыйнанылар». 1942 йылдың 29 октябрендә баҫылған икенсе бер мәҡәләлә 5 колхоз буйынса дөйөм һандар килтерелә. Мәктәп балалары бөтәһе, ошо 5 хужалыҡ буйынса 38 ц башаҡ йыйып тапшырҙы, тиелә унда. «Авангард» колхозы балалары — 23 ц, «Ҡыҙыл партизан» — 9 ц, «Яйыҡ» — 3 ц, «Комбайн» — 2 ц, «Өргөн» — 1 ц.

Һуғыш йылдарында баҫыуҙарҙың уңдырышлылығы түбән төшөп, хеҙмәт етештереүсәнлеге нык кәмеһә лә, район хужалыҡтары, ҡырыпһепереп, «Бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә еңеү өсөн!» тип һәр йылда ла хөкүмәт заданиеларын үтәп киләләр. 1944 йылда, мәҫәлән, фронтҡа беҙҙең райондан 550 тонна ит, 1897 т һөт, 15 тонна брынза, 419 тонна бәрәңге, 19 тонна йөн һәм 500000 дана йомортҡа ебәрелә.

Фронтҡа ярҙам колхоз производствоһында эшләү менән генә сикләнмәй. Һәр кем фронтҡа хәленән килгәнсә ярҙам итергә тырыша.

1941 йылдың сентябрь башында Ахун тулы булмаған урта мәктәбе уҡыусылары 23 ҡулъяулыҡ, 17 янсыҡ, 3 төрөпкә, 2 флакон одеколон, 55 пачка махорка, 25 дәфтәр, 20 ҡәләм, 30 һабын йыйып, посылка итеп фронтҡа ебәрәләр. Был изге эшкә район мәктәптәренең барыһы ла ихлас ҡушыла. Бынан тыш, 1942 йылда «Башҡортостан истребителе» эскадрильяһын, «Учалы районы комсомолы» исемле махсус танк төҙөүгә халыҡ араһында аҡса йыйыу эше киң йәйелдерелә. Район буйынса ошо 2 маҡсатҡа бөтәһе 2,3 млн. һумдан ашыу аҡса йыйыла, шул иҫәптән Абдрахманов («Октябрь» колхозы) — 20000 һум, Әхмәтов Мостафа — 25000 һум, Шәрәфетдинов Камал — 25000 һум, Баязитова Фатима — 25000 һум һәм Бородина Н. — 15000 һум индерәләр.

Дөйөм алғанда, 1941 —1945 йылдарҙа Учалылар танк һәм самолеттар төҙөүгә 5423965 һум аҡса йыялар, 7395000 һумлыҡ заем облигацияларын һатып алалар.

1942 йыл башында Вознесенка, Учалы һәм Ҡужай оҫтаханаларында фронт өсөн саңғылар етештереү юлға һалына.

Райондың 2 мәктәбенә һуғыш йылдарында Сталиндың рәхмәт хаттары килә. Тәүгеһе 1943 йыл башында Миндәк урта мәктәбе исеменә

ебәрелә. Был юғары баһаға улар (мәктәп коллективы уҡыусылары һәм уҡытыусылары) танк һәм самолеттар төҙөүгә 16076 һум аҡса йыйып тапшырғандары өсөн лайыҡ булалар. 1944 йыл башында самолет төҙөү өсөн 8993 һум аҡса йыйып тапшырған Поляковка урта мәктәбе лә ошондай хат килеү сәбәпле оло шатлыҡ һәм ғорурлыҡ кисерә.

1943—1944 йылдарҙа немец фашистарынан азат ителгән райондарға, әлкәләргә ярҙам йөҙөнән көтөү-көтөү мал, өйөр-өйөр йылҡы оҙатыла. Был изге эштән учалылар ҙа ситтә ҡалмай. Беҙҙең район хеҙмәтсәндәренең бүләге — бер эшелон ат — Мозырь (Белоруссия) ҡалаһына алып барып тапшырыла.

Һыйыр көтөүе үҙ аяғы менән Украинаға ҡыуыла. 21 мал ҡараусы оҙатып бара был көтөүҙе: Урал тауҙарын артылып, Волга менән Донды йөҙөп сығалар һәм 9 ай тигәндә Харьков аръяғындағы бер хужалыҡҡа алып барып, малдарҙы имен-аман тапшыра. Уйлап ҡараһаң, улар Герой исеме бирерлек ҡаһарманлыҡ эшләгән! Ҡайтҡас уларға исмаһам рәхмәт әйтеүсе лә булмай, киреһенсә, юлда үлгән өс баш малдың хаҡын уларҙан түләтеп, бик каты рәнйетәләр. Бөгөнгө көндә ошо батырлыҡты яһаған өсәү әле лә иҫән. Бына улар: Фәрзәнә Юнысова-Хәмитова, Мөхәмәҙи Буранбаев, Әхмәт Закиров.

Учалы районы хужалыҡтарынан «Ҡыҙыл партизан» колхозы Бөйөк Еңеүгә индергән тос өлөшө өсөн 1985 йылда СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән I дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән наградланды. Ахун ауылы фронтҡа 805 яугирын оҙатҡан, 1000 баш ат биргән, бынан тыш һәр йыл хөкүмәт заданиеларын арттырып үтәп, аҙыҡ-түлек, сеймал ебәреп торған.

* * *

1939 йылда Юшалы күле буйында геологтар яңы бай алтын ятҡылығын аса. 1940—1941 йылдарҙа эшләп килгән Поляковка прииск идаралығына һәм Миндәк руднигына, Бәләкәй Учалы руднигы (В. И. Ленин исемендәге старатель артеле) ла өҫтәлә. Руда идаралығының 1-се начальнигы грамоталы, энергиялы белгес Виктор Семенович Гонцов, баш механигы Симаков, баш инженеры Мамаев һәм артель рәйесе Абдрахманов булалар.

Тәүҙәрәк рудникка яҡын ауылдарҙан йөрөп эшләйҙәр, күпмелер ваҡыт үткәс ҡасаба ла үҫеп сыға, рәсми исеме — Бәләкәй Учалы ҡасабаһы, ә халыҡ телендә ул «Рудник», «Эшләпә» тип йөрөтөлә башлай (хәҙерге көндә был ҡасаба «Учалы II» тип исемләнә).

Юшалы күле буйындағы ятҡылыҡты асыу һәм файҙаланыуға тапшырыу Исмәғил Мөрсәлим улы Ғариповтың, Нефед Дмитриевич Рыбаковтың, Вәли Абдрахман улы Абдрахмановтың һәм Мөхәмәтдин Ғәниевтәрҙең хеҙмәт емеше ул!

Учалы баҡыр колчедан ятҡылығын асыусылар:

1) Михаил Иванович Долгаль (1905—1987), Миндәк прииск идаралығы геологы.

2) Афанасий Иванович Демчук (1897—1983), Көньяҡ Урал экспедицияһының баш геологы.

3) Леонид Анатольевич Баженов (1908—1978), инженер-геофизик.

4) Ғарипов Исмәғил Мөрсәлим улы (1907—1993), Миндәк прииск идаралығы техник-геологы.

5) Шәфиев Хәмзә Атаулла улы (1900—1974), «Башзолото» тресының баш геологы.

«Тимер эшләпә» — яңы асылған Учалы ятҡылығына геологтар шундай исем бирә. Руда ятҡылығының Учалылағы кеүек урынлашыуы ер шарында башҡа осрамай. Иң өҫтә — эшләпә (ҡалпаҡ) формаһында окисланған тимер рудаһы ҡатламы. Уның аҫтында — 15—20 метр ҡалынлығында алтынлы руда ҡатламы. Тағы ла тәрәндәрәк III ҡатлам урынлашҡан: 30—40 метр ҡалынлығындағы, көрәк менән генә ҡаҙып алырлыҡ алтынлы ҡом юлағы. Унан да аҫтараҡ — баҡыр-колчедан сульфидтары, иң түбәнге ҡатлам — баҡыр-цинк ятҡылығы.

Һуғыш башланғанда алтынлы руданы сығарыу эше яңы ғына башланып торған була. 1 тонна руданан 475 грамға тиклем алтын алалар. Эшсе көсө етешмәй, техника — юҡ кимәлендә, бөтә эштәр ҡул көсө һәм аттар ярҙамында башҡарыла. Ир-егеттәр фронтҡа китеп бөтә, улар урынына ҡатын-ҡыҙҙар, 15—16 йәшлек үҫмерҙәр һәм пенсия йәшендәге ҡарттар баҫа. Ярҙамға дөйәләре, арбалары менән Кустанай әлкәһенән ҡаҙаҡтар килтерелә. Руданы карьерҙан брезент тоҡтарға тултырып, ике яҡлап дөйә арҡаһына аҫып, өҫкә күтәрәләр. Руда Ильинка һәм Бөйҙә амальгамация фабрикаларына оҙатыла, шунан перколяцияға ебәрелә. Хәҙерге тау-байыҡтырыу фабрикаһы урынында 1941 йылда «Ҡаҙаҡ ауылы» исемле ҡасаба барлыҡҡа килә.

1941 йылда Бәләкәй Учалы ятҡылығының перспективалы булыуын иҫәпкә алып үҙ аллы Учалы руднигы ойошторола. Уның тәүге начальнигы итеп Шиһапов Заһир Ғилметдин улы тәғәйенләнә.

1941 —1943 йылдарҙағы иң ауыр осорҙа ҡаҙаҡтарҙың ярҙамы, урындағы халыҡтың тырышлығы арҡаһында рудник аяҡҡа баҫып ҡына ҡалмай, алтын сығарыуҙа республикала алдынғыға әйләнә. Старатель артеле 2000 эшсене берләштерә (башлыса күрше ауылдарҙан). Шахта эшләй башлай. Перколяция заводы төҙөлөп эксплуатацияға тапшырыла, һөҙөмтәлә руданы байыҡтырыу күпкә еңелләшә; тиҙҙән инглиз агрегаттарын файҙаланып, тулыһынса байыҡтырыу циклы булған фабрика эшкә индерелә.

Шахтала эш шарттары бик ауыр була. Кәйлә һәм кәрәк — төп эш ҡоралдары. Ер аҫтында 8 сәғәт эшләп сыҡҡандан һуң ер өҫтөндә 2 сәғәтлек эш — траншея, соҡор ҡаҙырға кәрәк була.

Стахановсылар хәрәкәте киң йәйелдерелә. Ысын хеҙмәт геройҙары үҫеп сыға. Нормаларын 600—700 процентҡа үтәүселәр: Михаил Алексеев, Мансур Тереғолов, Әсғәт Мәхмүтдинов, Иван Сухоруков, Николай Шевченко, Бәхтиәр Мостафин, Ғәбдрәхим Әсфәндиәров, Әхсән Хажиев һәм башҡалар.

Забойға, ир-егеттәр менән бер рәттән, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа төшәләр. Шундайҙарҙың береһе — «забойсы Хөсникамал» исеме менән билдәле Сафина Хөсникамал апай (Илсе ауылынан). 4 бала әсәһе булған 30 йәшлек был ҡатын 1942 йылда «Эшләпә»гә эшкә ебәрелә (ире фронтта үлгән була). 7 йыл эшләй ул рудникта.

1943 йылдың мартында Поляковка янындағы Краснахты алтын табыу участкаһында тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына эшләгән 3 забой була.

*Алтын приискыһында*

Йәғни, ҡатындарҙың ҡулдарына кәйлә, кәрәк алып забойға төшөүе һуғыш йылдарында массовый күренеш була.

Төҫлө металлургия наркоматының Почет Китабына Бәләкәй Учалы руднигынан һуғыш йылдарында 200 кеше индерелә, шуларҙың 70 проценты ҡатын-ҡыҙ һәм йәш-елкенсәк!

Тәүге шахтерҙар һәм алдынғы эшселәр: Сәйфелмөлөк Зәитов, Мөғәллим Вәдүтов, Ленин ордены кавалерҙары: Әҙип Хәҙисов, Мансур Солтанов, Әсғәт Мәхмүтдинов һәм Әминә Кәримовалар (Әминә забойсы була).

Учалылар Оборона Фондына 1943 йылда ғына 6 млн. 700 мең һум аҡса йыйып ебәрәләр. Старателдәр артеле фронтҡа өҫтәмә рәүештә 12 кг алтын тапшыра, 120 мең һум аҡса йыя. 1943 йылдың сентябрендә емертелгән Сталинград™ аяҡҡа баҫтырырға ярҙамға тип, 4 кг алтын тапшыралар. Шул уҡ йылдың ноябрендә Учалы руднигы, Еңеү өсөн тип, тағы ла 18 кг алтын, 65 мең һум аҡса ебәрә. Ленин исемендәге старатель артеле 1944 йылда Советтар Союзында иң эре артелгә әйләнә.

1945 йылдың февралендә СССР Дәүләт Оборона Комитеты ҡарары менән Учалы руднигына күсмә Ҡыҙыл Байраҡ мәңгелеккә тапшырыла. Байраҡ бөгөнгө көндә Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Хеҙмәт Даны музейында һаҡлана.[3]

* * *

1942 йылдың йәйендә Магнитогорск металлургия комбинаты өсөн иҫ китмәле ауыр көндәр килеп тыуа. Броня ҡоросо етештереү өсөн кәрәк булған марганец рудаһы комбинатҡа килеүҙән туҡтай. Ошоға

тиклем ул Украинанан һәм Төньяҡ Кавказдан эшелондар менән килтерелгән була. Әммә немец фашистарының йәйге һөжүме арҡаһында марганец рудниктары дошман ҡулына күсә. Һуғыш йылдарында фронт өсөн танкыларҙың төп өлөшөн Урал етештерҙе, ә броня ҡоросо Магнитогорск комбинатынан алынды.

Фронт, ғөмүмән ил өсөн ауыр хәл килеп тыуҙы. Тиҙ арала яҡын-тирәнән марганец ятҡылығы табырға кәрәк ине. Магнитогорск комбинатының эшендә бер көн дә өҙөклөк булманы, сөнки яраҡлы марганец рудаһы Учалы ерендә, Баҙарғол ауылы эргәһендә табылды[3]. Йылдам темптар менән руда ятҡылығы эшкәртелә башланы. Эш барышын контролдә тоторға СССР-ҙың ауыр промышленность буйынса халыҡ комиссары Тевостян үҙе Ураҙға килде. Эвакуация менән килгән эшселәрҙән тыш, яҡын-тирә ауылдарҙың халҡы, Хеҙмәт армияһы хеҙмәткәрҙәре марганец руднигында көнө-төнө эшләне. Сталиндың бойороғо менән 250 машина Сталинград фронтынан алынып, марганец рудаһын Магнитогорск комбинатына ташыу өсөн ебәрелде. Үтә ауыр шарттарҙа: көҙгө бысраҡта, ҡышҡы буранда хәрби шоферҙар насар юлдарҙан тәүлектәр буйына йоҡламай, марганец рудаһын Магнитогорскиға ташыны. Учалы властары урындағы транспортты ла ошо эш өсөн бирҙе, һөҙөмтәлә хәрби шоферҙарҙан тыш байтаҡ ҡына яҡташтарыбыҙ ҙа ошо изге эшкә үҙҙәренең тос өлөштәрен индерҙе.

Шулай итеп, һуғыштың иң көсөргәнешле, ҡатмарлы шарттарында, фронт өсөн иң ауыр ваҡытта, броня ҡоросон етештереүҙә өҙөклөккә юл ҡуйылманы. Баҙарғол марганец ятҡылығын асыу һәм эксплуатациялау Магнитогорск металлургия комбинаты өсөн бик ҙур таяныс булды. Рудниктың эшселәре һәм етәкселәре оло батырлыҡ яһанылар. Тик еңеү еңел бирелмәне, рудникта эшләүселәрҙең байтаҡ өлөшө үҙ ғүмерҙәрен бирҙе.

## ҺУҒЫШТАН ҺУҢҒЫ ОСОРҘА. АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ ҺӘМ СӘНӘҒӘТ

Һуғыш тамамланғандан һуң тәүге 4 йыл (1946—1949) ауыл халҡы өсөн бик ауыр йылдар булды. 1941—45 йылдарҙа бик ныҡ ҡаҡшаған ауыл хужалығын ҡабаттан тергеҙеү районыбыҙ колхозсыларынан фиҙәкәр хеҙмәт, ҙур тырышлыҡ талап итте. Көнө-төнө эшләп, иген, ит-майҙы үҙҙәре етештерһәләр ҙә, ауыл эшсәндәренең йәшәү шарттары түҙеп торғоһоҙ ине: ярым ас йәшәү, йәштәрҙе күпләп «ФЗО»-ға, торф сығарыуға оҙатыу, золом системаһының ҡабаттан көсәйеүе, колхоз рәйестәренең башбаштаҡлығы, һалымдарҙың түҙгеһеҙ ауырлығы.

1950 йыл колхозсылар өсөн иҫтәлекле һәм онотолмаҫлыҡ йыл булды: иҫ киткес мул уңыш алынды. Колхозсылар һуғыштан һуң тәүге йыл хеҙмәт көндәренә иген алдылар. 1950 йылдың аҙағына колхоздар эреләтелде — 55 колхоздан 20 эре колхоз төҙөлдө. Малсылыҡ фермалары, иген складтары һәм торлаҡ йорттар төҙөй башлайҙар. Почта Өфөнән өҙлөкһөҙ рәүештә самолеттар менән килтерелә башлай. «Учалы — Миәс» маршруты асылып, унда даими рәүештә 2 йөк машинаһы йөрөй башлай, был район халҡының, командировкаларға йөрөүселәрҙең хәлен күпкә еңеләйтә. Район үҙәге Учалыла пионер лагеры

эшләй башлай. Район үҙәген, «Урал» һәм «Комбайн» колхоздарын электрлаштырыу буйынса бик күп эш башҡарыла, һөҙөмтәлә 1950 йылда «Өргөн» колхозы һәм Учалы МТС-ы колхозсылары йорттарында 1000 электр лампочкаһы ҡабына.

Баҫыу эштәрендә ҡул хеҙмәте әкренләп техника менән ҡыҫырыҡлап сығарыла. Был йүнәлештә Учалы МТС-ы күп эштәр башҡара. Хәким Мөхөтдинов, Лоҡман Закиров, Усман Закиров, Мирхәт Вәлиевтар хеҙмәт алдынғылары булараҡ, ҙур хөрмәт ҡаҙаналар. Байрамғол МТС-ы механизаторҙары И. Бүләков, А. Солтанов, Т. Низамовтар ҙа уларҙан ҡалышмай, юғары хеҙмәт күрһәткестәренә өлгәшеп, тырышып эшләйҙәр.

1950—1951 йылдарҙың ауыл хужалығы йомғаҡтары буйынса 76 хеҙмәт алдынғыһы Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәзмәһендә ҡатнашыу өсөн һайлап алына. «Совет» колхозынан ошо исемлектә Шаһивәлиева Фәһимә Ғабдрахман ҡыҙы ла була. 1950 йылда актив эше менән ул 29 га майҙандың һәр гектарынан 17,4 центнер уңыш алыуға булышлыҡ иткәне өсөн ошондай хөрмәткә лайыҡ була.

Урындағы сәнәғәт үҫтерелә. Мәҫәлән, «Октябрь» колхозында бәләкәй генә кирбес заводы булып, ул тәүлегенә 450—500 дана кирбес бирә. Бында үҙ эшенең оҫталары Мотаһар Заһиров, Фәрихә Ғилманова һәм Миҙзифа Файзыхановалар эшләйҙәр.

Ауыл хужалығы яйлап күтәрелә, аяҡҡа баҫа бара. 1952—1953 йылдарҙа Учалы районы социалистик ярышта (йылҡысылыҡты үҫтереү буйынса) РСФСР-ҙа тәүге урындарҙың береһен яулай. Бүләккә Учалы районы советы башҡарма комитетына яңы «Победа» еңел машинаһы бирелә. Был район ойоштороло ғандан алып, район башҡарма комитеты ҡарамағындағы тәүге еңел машина булды.

Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү башланғас та, Учалы районына эшкә 23 ауыл хужалығы белгесе ебәрелә. Район 49 трактор һатып ала. Белореттан үҙҙәре теләп 35 кеше сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе күтәреүгә килделәр. Өс йылда (1954—1956) 23 мең га сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәр эшкәртелде. Был мөһим эштә 20 колхоз, 1 совхоз, 3 МТС ҡатнашты. Учалы районы, һөҙөмтәлә, республикала игенде иң күп етештереүсе райондарҙың береһенә әүерелде. Хөкүмәт сиҙәм эпопеяһында ҡатнашыусыларҙың физәкәр хеҙмәтен юғары баһаланы: 74 яҡташыбыҙ ордендар (шул иҫәптән 3 кеше Ленин ордены), 2655 кеше «Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштергән өсөн» миҙалы менән бүләкләнде.

1957 йылда «Поляковский» совхозы ойоштороло (майҙаны — 565 км²). Яңы ойоштороло ған совхоз үҙ эсенә Поляковка МТС-ын һәм экономик яҡтан артта ҡалған 6 колхозды алды һәм бөтәһе 28 ауылды берләштерҙе. Әлбиттә, колхоздар совхозға берләшеүгә ҡаршы булдылар, әммә команда-административ система хакимлыҡ һөргән бер заманда колхозсыларҙың тауышын ишетеүсе булманы, уларҙың фекере бер кемде лә ҡыҙыҡһындырманы... Совхоздың тәүге директоры — Г. М. Йыһаншин, партком секретары — Г. В. Вәлиев, комсомитет секретары — М. М. Мөхәмәтшин, бүлексә управляющийҙары — Ш. Б. Баймөхәмәтов, Н. Н. Лазарев, З. Ю. Үҙбәков, И. М. Фәизов, В. В. Күсәйев, Т. У. Усманов, Т. А. Фазыловтар булдылар. 1958—1964 йылдарҙа совхозда директор булып Ә. Г. Шәрәфетдинов эшләне. Ул

эшләгән дәүерҙә совхоз ныҡ күтәрелеп ҡалды, уның даны бөтә Башҡортостанға яңғыраны. 1964—1977 йылдарҙа был вазифаны Ә. Х. Кәлимуллин биләне.

Бөгөнгө көндә «Поляковский» совхозы юҡ инде, ул 4 айырым хужалыҡҡа тарҡалды: «Ирәндек» халыҡ предприятиеһы, «Абҙаҡ» совхозы, «Илсеғол» совхозы, «Салауат» исемендәге халыҡ предприятиеһы. Әммә бер совхоз булып йәшәү осоро төпкөл ауылдар, бигерәк тә башҡорт ауылдары өсөн зыянлы булды, экономик йәһәттән дә, социаль яҡтан да, мәҙәниәт күҙлегенән дә улар бик ныҡ артта ҡалдылар, юҡсыллыҡта көн күрҙеләр. Бары тик бүленгәндән һуң ғына, был ауылдарҙың, унда йәшәгән халыҡтың хәле бер аҙ яҡшыра төштө.

1960 йылда районыбыҙҙың көньяғында урынлашҡан башҡорт ауылдары өсөн ҡара көн тыуа. 3 апрель көнө «Ленин» исемендәге колхозда колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы була. Көн тәртибендә бер мәсьәлә: «Байрамғол» совхозына ҡушылыу тураһында». Сығыш яһаусылар 2 лагерға бүленәләр: «риза» һәм «ҡаршы»ларға.

Сығыш яһаусы Хәйруллин: «Беҙҙең колхозда 7 ауыл бар, үҙен айырым совхоз итеп булмаймы?» — тип ҡабырғаһы менән ҡуя һорауҙы. Ә Иштимеров: «Беҙ колхозға кергәндә мал, иген, сбруйҙар биреп керҙек. Уларҙы ҡайтарып бирмәйһегеҙме?» — тип, райондан килгән вәкилдәргә мөрәжәғәт итә. Әммә йыйылышта өҫтөнлөк «тыңлаусан күпселек» яғында була. Ялалов, Вәлиев, Сәитхужиндар берләшеүҙе хуплап сығыш яһап, ыңғай ҡарар ҡабул ителеүгә булышлыҡ итә.

4 апрель ошондай йыйылыштар «Правда» һәм «Берлек» колхоздарында ла үткәрелә. «Берлек» колхозының йыйылышы яңы ойоштороған совхозға «Яйыҡ» исемен биреүҙе һорап, ҡарар ҡабул итә. Берләшеүгә ҡараш ике колхозда ла ыңғай була. Шулай итеп, 1960 йылда башҡорттар көн иткән төбәктә, 28 ауылды берләштергән «Байрамғол» совхозы ҡалҡып сыға. Башҡорт ауылдарын совхозлаштырыу — ул халыҡты ассимиляциялаштырыуға йүнәлтелгән, төптән уйланған аҙым була.[4]

Бөгөнгө көндә Учалы районы 4500 км$^2$ майҙанды биләй. 20 ауыл советы 86 ауылды үҙ эсенә ала. Район биләмәһендә 1989 йылдың 1 ғинуарына 32000 кеше йәшәй ине. Халыҡтың милли составы түбәндәгесә булды:

— башҡорттар — 75,4 процент,
— урыҫтар — 9,2 процент,
— мишәр, типтәр, татарҙар — 14,8 процент,
— сыуаштар — 0,1 процент,
— мариҙар — 0,1 процент,
— украиндар — 0,1 процент,
— белорустар — 0,1 процент.

Районда бөтәһе 10 колхоз, 7 совхоз; фермер хужалыҡтары һаны 169-ға етте (1990-сы йылдар баштарына тиклем районда бөтәһе 7 колхоз һәм 2 совхоз иҫәпләнде).

Район халҡының һаны һуңғы 10 йыл эсендә 13,7 процентҡа кәмене. Был төп милләт вәкилдәренең күпләп ситкә китеүе менән аңлатыла (Силәбе әлкәһенә, Себергә, Ҡаҙағстанға, Урта Азияға).

Әлегә тиклем ауылдарыбыҙ халҡын 3 тирмән (Поляковка, Ҡалҡан, Ахун) хеҙмәтләндерһә, һуңғы йылдарҙа Ураҙҙа, Сәфәрҙә, Учалы, Оҙонкүл ауылдарында яңы тирмәндәр төҙөлдө һәм төҙөлөү өҫтөндә. Май заводынан тыш, Төркиә фирмаһы менән берлектә яңы һөт эшкәртеү буйынса завод һалыныу өҫтөндә. Ҡатнаш аҙыҡ заводы әлегә тиклем хужалыҡтарҙың туҡлыҡлы мал аҙығына булған ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереп килде. Быларҙан тыш районда урман комбинаты, хужалыҡ-ара урман хужалығы, урман пункты, нефть базаһы, элеватор, күсмә механизацияланған колонна, ремонт-төҙөлөш идаралығы, ремонт-транспорт предприятиеһы кеүек башҡа күп кенә предприятиелар ҙа эшләп килә.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығы әлкәһендә фиҙәкәр хеҙмәттәре өсөн 4 райондашыбыҙ Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән почетлы исемгә лайыҡ булдылар. Бына улар:

1. Х. Ғ. Мөхөтдинов — комбайнсы, «Совет» колхозы;
2. Ғ. С. Фәтҡуллин — рәйес, «Совет» колхозы;
3. Ф. З. Шәйәхмәтов — тракторсы, «Коммунар» колхозы;
4. Я. Ш. Әхмәтйәнов — механизатор, «Оҙонгүл» халыҡ предприятиеһы.

Быларҙан тыш, «Башҡортостан» колхозының «Рысай» бригадаһы бригадиры Фәйзуллин Рәүил Кәлимулла улы II һәм III дәрәжә Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән наградланды.

* * *

4-се биш йыллыҡ заданиеларын Учалы руднигы 2,5 йылда үтәп сығып, үҙенсәлекле рекорд ҡуя. Дөйөм йыйылышта рудник коллективы: «Ҡалған ике йыл ярым эсендә тағы ла бер биш йыллыҡ заданиеһын үтәргә», — тигән йөкләмә ҡабул итә.

Һуғыштан һуңғы осорҙа Учалы руднигы махсус рәүештә төҙөлгән проект нигеҙендә үҫтерелә 1948—1949 йылдарҙа окисланған руда-ларҙы тулыһынса эшкәртә алған фабрика эксплуатацияға тапшырыла, һөҙөмтәлә алтын табыу тағы ла арта төшә. Миәс — Учалы юғары вольтлы электр тапшырыу линияһы сафҡа инә, рудниктың үҙендә һәм уның тирә-яғында бик күп объекттар төҙөлә. 1953 йылдан алып Учалы руднигында алтынлы руда бөтөү сәбәпле, алтын табыу эше туҡтатыла. Бөтә иғтибар һәм көс яңы колчедан ятҡылыҡтарын асыуға йүнәлтелә. Эҙләнеү эштәре барышында 1952 йылда Силәбе өлкәһе ерҙәрендә һоро тимер руда-ының яңы ҙур ятҡылығы асыла, уға «XIX партсъезд исемендәге ятҡылыҡ» тигән исем бирелеп, 1953 йылдан башлап ул эшкәртелә лә башлай, һоро тимер руда-ы ҡатламы аҫтында бай колчедан ятҡылығының булыуы, уның Учалы руднигынан сағыштырмаса яҡында (27 саҡрым) урынлашыуы Мәскәүҙә мөһим документҡа ҡул ҡуйыуға килтерә: СССР Министрҙар Советы Учалы тау-байыҡтырыу комбинатын төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итә һәм 1954 йылда төҙөлөп ятҡан комбинатҡа Иван Тимофеевич Савченко директор итеп тәғәйенләнә. Шулай итеп, Учалы районы тарихында мөһим ваҡиғаға әүерелгән төҙөлөш — комбинат төҙөү башлап ебәрелә.

1955 йылда төҙөлөш эштәре тағы ла нығыраҡ йәнләндерелә. 146-сы төҙөлөш тресы ойошторола. Учалы ТБК-ның төп объекттарын ошо трест эшселәре төҙөнөләр ҙә инде.

Учалы тау-байыҡтырыу комбинатын төҙөү айҡанлы комбинатты тимер юл менән тоташтырыу мәсьәләһе килеп тыуҙы. Ҡулланыусыларҙың Силәбе, Свердловск тирәһендә күберәк булыуын иҫәпкә алып, тимер юлы Миәс ҡалаһына, йәғни Транссибер магистраленә ҡарай һуҙылды. 1958 йылда Миәс — Учалы тимер юлы сафҡа инде, 1962 йылда ул Межозерный руднигына тиклем еткерелде. Тимер юлы тауар әйләнешен күпкә еңеләйтте, ул пассажирҙар өсөн дә ҙур уңайлыҡтар тыуҙырҙы.

Шул ваҡыттан бирле Учалы ТБК эшләп килә, Учалы һәм XIX партсъезд исемендәге рудниктарҙың рудаһын табыусы һәм эшкәртеүсе предприятие булараҡ, комбинат 60—80-се йылдарҙа йылдам үҫте һәм Союз күләмендә иң эре предприятиелар исемлегенә инде.

Учалы ТБК-нан руда һәм концентрат СССР-ҙың төрлө мөйөштәренә миллион тонналап оҙатылды. Уның продукцияһын сит илдәр ҙә һатып алдылар (Болгария, Румыния, Югославия, Италия, Германия, Венгрия, Вьетнам Һ.б.). Һуңғы ваҡытта, СССР таркалып, элекке союздаш республикалар менән экономик бәйләнештәр өҙөлгәс, төп ҡулланыусыларҙың күбеһенә комбинат продукцияһы оҙатылмай. Төп ҡулланыусы — Силәбе цинк заводы. Баҡыр концентраты башлыса Свердловск әлкәһенең Красноуральск заводына ебәрелә. Сит илдәрҙән яңы ҡулланыусы өҫтәлде — Финляндия.

Учалы колчеданы — ул уникаль күренеш. Унда Менделеев таблицаһындағы бөтә минералдар ҙа, шул иҫәптән алтын, көмөш тә бар. Ә инде бөгөнгө көндә баҡырға ихтыяждың ниндәй ҙур икәнлеген күҙ алдына килтерһәк, Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының перспективалы предприятие икәнен төҫмөрләүе ҡыйын булмаҫ.

Бөгөнгө көндә комбинат составында:

1) Учалы карьеры;
2) «Молодежная» карьеры;
3) Үҙйылға ер аҫты руднигы;
4) Учалы ер аҫты руднигы;
5) Юлдаш эҙбиз карьеры;
6) Байыҡтырыу фабрикаһы;
7) Бик күп ярҙамсы цехтар, участкалар.

Бөгөн комбинатта бөтәһе 7340 кеше эшләй. Хөкүмәтебеҙ Учалы таусыларының удар хеҙмәтен юғары баһаланы. Бөтәһе 300 кеше орден һәм миҙалдар менән бүләкләнгән. 2 кеше 3-әр орденға (Р. М. Нигәмәтуллин, Л. М. Ишкилдин), 2 кеше 4-әр орденға (В. В. Любушкин, М. А. Беляев) лайыҡ булған. Х биш йыллыҡ йомғаҡтары буйынса комбинат Хеҙмәт Ҡызыл Байраҡ ордены менән наградлана.

1993 йылдан дәүләт предприятиеһы булған Учалы ТБК, акционерҙар йәмғиәте «Учалы ТБК» тип атап йөрөтөлә. Генераль директоры — А. П. Хмелев.

♦* *

РСФСР Юғары Советының Президиумы 1963 йылдың 1-се февралендә Бәләкәй һәм Яңы Учалы ҡасабалары нигеҙендә Учалы ҡалаһын барлыҡҡа килтереү тураһында тарихи ҡарар ҡабул итә.[5]

1989 йылдың 1-се ғинуарына Учалы ҡалаһында 30000 кеше йәшәй ине. Халыҡтың 40,3 проценты — башҡорттар, 32,8 проценты — урыҫтар, 24 проценты — татарҙар, 0,9 проценты — украиндар, 0,4 проценты — сыуаштар, 0,3 проценты — беларустар, 0,3 проценты — немецтар, мордва һәм мариҙар — һәр береһе — 0,2 процент.

Ҡала Ҡунаҡбай ауылы ерҙәрендә төҙөлә һәм уның ерҙәре иҫәбенә үҫә, киңәйә.

Учалы ҡалаһының сәнәғәт ҡеүәтен түбәндәге предприятиелар тәшкил итәләр:

1) Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты;
2) Ҡатырға-рубероид заводы;
3) Урман машиналары төҙөү заводы;
4) Тимер-бетон изделиелар заводы;
5) Металлургия машиналар төҙөү заводы;
6) Мансур ҡырсынташ заводы.

Комбинаттан ҡала, Ҡатырға-рубероид заводы (1975 йыл сафҡа ингән) Учалы ҡалаһы тарихында, уның социаль-экономик үҫешендә ҙур урын биләй. Завод исемен үҙгәртте. Хәҙер ул «Кровля» аренда предприятиеһы тип йөрөтөлә, баҙар иҡтисадына күсеү шарттарында тоторокло эшләп килә.

Урман машиналары төҙөү заводының етештергән продукцияһы: ботаҡ ҡырҡыусы ЛП-33 машиналары һәм ЛТ-81 тейәү-ташыу машиналары һуңғы ваҡытта һорау менән ҡулланмай башланылар. Шул сәбәпле предприятие кризис хәлендә ҡалды.

Металлургия машиналарын төҙөү заводы ла баҙар иҡтисадына күсеү шарттарында килеп тыуған ауыр хәлдән сығыу юлдарын ныҡышмалы эҙләй, һөҙөмтәлә, завод үҙенең йүнәлешен үҙгәртергә мәжбүр булды. Хәҙер уның нигеҙендә яңы күн эшкәртеү заводы ҡоролоп килә.

1954 йылда Өфөнән Учалы авторотаһын ойоштороу тураһында документ килә. 21 шофер 11 «ЗИС-5» автомобиле менән яңы ойоштороған авторотаның эшен башлап ебәрә. Командирҙары Н. С. Скоропудов була. 1955 йылда авторота автохужалыҡҡа әйләндерелә, ә инде 1967 йылдан алып ул автотранспорт предприятиеһы исеме аҫтында йәшәп килә.

1963 йылда АТП ҡала эсендәге тәүге автобус маршрутын аса. Бөгөнгө көндә пассажирҙар ташыу менән предприятиеның 62 автобусы шөғөлләнә.

1990 йылда ҡалала ит комбинатына нигеҙ һалынды. 1994 йылдан ул продукцияһын бирә башланы. Киләсәктә уны киңәйтеү күҙ уңында тотола.

Учалы ҡалаһы — перспективалы ҡалалар иҫәбендә. Учалы ере ҡаҙылма байлыҡтарға иҫ киткес бай. Киләсәктә уларҙы эшкәртә башлау Учалы ҡалаһына яңы һулыш бирәсәк һәм ҡалабыҙға артабан үҫеү өсөн киң мөмкинлектәр асыласаҡ.

# МӘҘӘНИ ТОРМОШ

Мәғариф эше. Бөгөнгө көндә районда 20 урта, 11 тулы булмаған урта, 34 башланғыс мәктәп эшләй, уларҙа барыһы 5600 бала белем ала. Шулай уҡ 46 балалар баҡсаһы, бер балалар йорто, бер профтехучилище бар. Балалар уҡытыуға һәм тәрбиәләүгә бөтә ғүмерҙәрен арнап, был әлкәлә ҙур уңыштарға өлгәшкән уҡытыусылар, мәктәп етәкселәре араһында Советтар Союзы Геройы Сөнәғәтуллин Жәүҙәт Ғоморҙаҡ улы (Учалы урта мәктәбе), Дан ордендарының тулы кавалеры Хөснөтдинов Әхнәф Ғәлимйән улы (Учалы урта мәктәбе), РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусылары Ғарипова Нәғимә (Бәл. Учалы мәктәбе), Сәлихов Рәшит Теләүсура улы (Сәфәр урта мәктәбе), Смирнова Нина Александровна (Учалы урта мәктәбе), Мөрсәлимова Хәнифә Сафа ҡыҙының (Ахун урта мәктәбе), Йосопов Ғәлиулла Ғәйфулла улының (Ахун урта мәктәбе) исемдәре бөтә район халҡына билдәле.

1957 йылдан алып 29 кешегә Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән почетлы исем бирелгән. Түбәндә уларҙың исемлеген килтерәбеҙ:

1. Садыков Рәшит Ғәбйәлил улы — Малай Муйнаҡ мәктәбе;
2. Сәфәрғәлин Нияз Әхмәҙи улы — һөйөндөк мәктәбе;
3. Әхмәҙиев Азамат Ғиниәт улы — Яңы Байрамғол мәктәбе;
4. Бузыҡаев Әнүәр Зияитдин улы — Миндәк мәктәбе;
5. Ғарипова Мәүлиҙә Хәлиулла ҡыҙы — Учалы мәктәбе;
6. Бузыҡаев Үзбәк Абдрахман улы — Наурыҙ мәктәбе;
7. Исхаҡов Алмас Сәлим улы — Урал мәктәбе;
8. Хәмиҙуллина Хәлиҙә Фәсхи ҡыҙы — Сәфәр мәктәбе;
9. Лотфуллина Рәшиҙә Заһит ҡыҙы — Учалы мәктәбе;
10. Лотфуллин Кәли Лотфулла улы — Ҡалҡан мәктәбе;
11. Теләмишев Мөхәмәтғәли Фәйзрахман улы — Урал мәктәбе;
12. Каледина Тамара Николаевна — Учалы мәктәбе;
13. Усманов Ғайса Мортаза улы — Ахун мәктәбе;
14. Янбаева Ләлә Имам ҡыҙы — Иманғол мәктәбе;
15. Зарипова Мәрйәм Мираҙ ҡыҙы — Учалы мәктәбе;
16. Хөснөтдинова Разия Фәтҡулла ҡыҙы — Учалы мәктәбе;
17. Әлхәмова Сәрүәр Муллағәли ҡыҙы — Ахун мәктәбе;
18. Вилданова Маһый Рәшит ҡыҙы — Учалы мәктәбе;
19. Сөнәғәтуллин Жәүҙәт Ғоморҙаҡ улы — Учалы мәктәбе;
20. Зверева Зинаида Федоровна — Учалы мәктәбе;
21. Фомина Валентина Ивановна — Урал мәктәбе;
22. Огнев Петр Иванович — Урал мәктәбе;
23. Асҡаров Йәғәфәр Хажмөхәммәт улы — Сәфәр мәктәбе;
24. Тажетдинов Наил Фәттәх улы — Сәфәр мәктәбе;
25. Исаева Рәүилә һиҙиәт ҡыҙы — Мулдаҡай мәктәбе;
26. Латыпов Ураҙай Мөхтәр улы — УПТУ-98;
27. Ғөбәйҙуллина Елена Солтан ҡыҙы — Урал мәктәбе;
28. Ирмикимов Хәбибулла Вәлиәхмәт улы — Учалы мәктәбе;
29. Зарипов Әлим Барый улы — Илсе мәктәбе.

Район мәктәптәрендә эшләгән педагогтарҙың хеҙмәтен хөкүмәтебеҙ юғары баһалай: 14 кешегә орден, 12 кешегә миҙалдар тапшырыла, Ҡунаҡбай урта мәктәбе уҡытыусыһы Бүләкова Зөһрә Алсынбай ҡыҙы Н. К. Крупская исемле премияға лайыҡ була.

Зөмәрә Вәли ҡыҙы Хисмәтуллина бик күп йылдар Өфөләге 1 интернат-мәктәптә (Республика башҡорт гимназияһында) уңышлы эшләп, Башҡортостанда ғына түгел, ә Рәсәй күләмендә билдәле уҡытыусыға әйләнде. Республика мәктәптәре араһында беренсе урынды ныҡлы тотҡан этнография музейын булдырҙы, башҡорт еренең, иленең матурлығын, халҡыбыҙҙың героик тарихын үҫеп килгән быуынға һеңдереү өсөн хәтһеҙ эш башҡарған уҡытыусыларҙың береһе.

Һуғыштан һуңғы осорҙа район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире булып эшләүселәр араһында үҙҙәренең тырышлығы, эшлеклелеге, алдынғы ҡараштары, ойоштороу оҫталыҡтары менән Фәрит Әхмәҙи улы Мортазин, Кәрим Хөснулла улы Зарипов, Азат Кәли улы Лотфуллин, Хәбибулла Вәлиәхмәт улы Ирмикимов, Ғаян Сәхиәр улы Мөхәммәтовтар айырылып торҙолар, мәғариф системаһын үҫтереүгә тос өлөш индерҙеләр.

1960 йылдар башында Учалы ауылында профтехучилище асыла. Училищены астырыуға иң күп көс һалған кеше Коврыгин булды. Бына инде утыҙ йылдан ашыу училище ауыл хужалығы өсөн бик тә кәрәк булған механизатор кадрҙары әҙерләй.

1966 йылда, Зарипов Кәрим Хөснулла улы район мәғариф бүлеге мөдире булып эшләгән осорҙа, халыҡ мәғариф бүлектәре араһындағы социалистик ярышта Учалы халыҡ мәғариф бүлеге еңеп сыға һәм совет осоронда тәүге һәм һуңғы тапҡыр республикала беренсе урынды яулай. Учалы халыҡ мәғарифы бүлегенә Мәғариф министрлығының 2 мең һумлыҡ премияһы, Күсмә Ҡызыл Байрағы бирелә. (РСФСР Мәғариф министрлығының 1966 йылдағы 2-се һанлы приказы нигеҙендә).

Оҙаҡ йылдар Өфөлә мәғариф министры булып Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншин эшләне (Мансур ауылынан). 1990 йылдан мәғариф министрының урынбаҫары булып эшләүсе Миңлебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтов республикала башҡорт телен уҡытыу, Башҡортостан тарихы һәм географияһын, «Тормош һабаҡтары» исемле яңы фәнде мәктәптәрҙең уҡыу пландарына индереү өсөн күп эш башҡарыуы, яңы төр уҡыу йорттары асыуға ныҡ булышлыҡ итеүе менән бик күптәрҙең ихтирамын яуланы.

Илленсе-етмешенсе йылдарҙа Учалы, Ахун, Наурыҙ, Урал, Миндәк, Поляковка урта, Рысай, Яңы Байрамғол, Ураҙ һигеҙ йыллыҡ мәктәптәре бигерәк тә уңышлы эшләнеләр. 80-се йылдарҙа Ҡунаҡбай, Ураҙ, Илсе, Сәфәр мәктәптәре районыбыҙҙың иң яҡшы мәктәптәре исеменә хаҡлы рәүештә инделәр (директорҙары Ямалиев Р. Х., Мөхәммәтов Ғ. С., Буҙыҡаев Ү. А., Тажетдинов Н. Ф.)

90-сы йылдар үҙҙәре менән яңы лидерҙар алып килде. Улар: Урал, Ураҙ, Илсе урта һәм Сораман, Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол тулы булмаған урта мәктәптәре. Бөгөнгө көндә күпселек мәктәптәрҙең үҙ йөҙө бар. Урал мәктәбе, мәҫәлән, эстетик-тәрбиә биреү, Ураҙ, Ахун, Мулдаҡай, Сораман мәктәптәре ярҙамсыл хужалыҡтары, Сәфәр мәктәбе үҙенең

*Социалистик Хеҙмәт Геройы*
*Фазулла Шәйәхмәтов*

*Социалистик Хеҙмәт Геройы*
*Яҡыбай Әхмәтйәнов*

*Социалистик Хеҙмәт Геройы*
*Хәкимйән Мөхәтдинов*

*Социалистик Хеҙмәт Геройы*
*Ғәбәй Фәтхуллин*

*Социалистик Хеҙмәт Геройы Рамазан Ниғәмәтуллин*

*Педагогия фәндәре кандидаты, элекке халық мәғарифы министры Сабир Йыһаншин*

*Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы Зөмәрә Хисмәтуллина*

*Халық мәғарифы министры урынбаҫары Миңлебай Юлмәхәмәтов*

*Педагогия фәндәре кандидаты*
*Әхмәр Аҙнабаев*

*Педагогия фәндәре кандидаты*
*Туғыҙак Йәһүҙин*

*Филология фәндәре докторы*
*Ишмөхәммәт Фәләүетдинов*

*Филология фәндәре кандидаты*
*Марат Минһажетдинов*

*Геолого-минералогия фәндәре кандидаты Камил Ураҙаев*

*Техник фәндәр кандидаты Әҙһәм Шәрәфетдинов*

*Педагогия фәндәре кандидаты Баныу Дауытова*

*Филология фәндәре кандидаты Илдус Бүләков*

*Экономика фәндәре кандидаты*
*Муса Билалов*

*Химия фәндәре докторы*
*Илдус Абдрахманов*

*Химия фәндәре кандидаты*
*Рәмил Бадахшанов*

*Медицина фәндәре докторы*
*Зәкиә Тереґолова*

*Филология фәндәре кандидаты*
*Барый Әхмәтшин*

*1991—94 йылдарҙа Башҡортостандың*
*урман хужалығы министры*
*Марат Ғәбитов*

*1994 йылдан Башҡортостандың*
*урман хужалығы министры*
*Риф Ҡаҙакколов*

*Техник фәндәр кандидаты*
*Вил Ғәлиев*

*Башкортостандың элекке мәҙәниәт министры Вил Кәримов*

*«Башинформсвязь» фирмаһы акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Салауат Ғайсин*

*Яҙыусы Талха Ғиниәтуллин*

*Яҙыусы, драматург Нәжибәк Хафизов*

*Яҙыусы, драматург*
*Мөхәммәт Хәйҙәров*

*Яҙыусы Ғәзим Аллаяров*

*Шағир, яҙыусы*
*Мәүлит Ямалетдинов*

*Шағирә Гүзәл Ғәлиева*

*Шағир, публицист Вил Ғүмәров*

*Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, журналист Рәүеф Насыров*

*Башҡортостандың халыҡ артисткаһы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Нәзифә Кадирова*

*Башҡортостандың халыҡ артисткаһы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Флүрә Килдейәрова*

*Башҡортостандың халық артисткаһы, Рәсәй Федерацияһының атказанған артисткаһы Нажиә Аллаярова*

*Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, йырсы Абдулла Солтанов*

*Башҡортостандың атказанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡорт дәүләт филармонияһының баш режиссеры Иршат Сиражетдинов*

*Башҡортостандың атказанған сәнғәт эшмәкәре, композитор Салауат Низаметдинов*

*Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, композитор Абрар Ғабдрахманов*

*Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, режиссер Рафаэль Әюпов*

*Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, диктор Рәсимә Кәримова*

фольклор балалар ансамбле, Илсе урта мәктәбе — балаларға төплө белем биреү, яңы уҡыу-тәрбиә алымдары ҡулланыу буйынса районыбыҙҙа ғына түгел, ә республикала киң билдәле мәктәптәр иҫәбендә.

Һуңғы өс тиҫтә йыл эсендә мәғариф системаһының матди базаһын нығытыу буйынса күп эш башҡарылды.

Был эш К. Х. Зарипов район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире булып эшләгән осорҙа бигерәк тә уңышлы, йылдам темптарҙа башҡарылды. Мөдирҙең тырышлығы, ойоштороу оҫталығы арҡаһында «колхоздар-совхоздар» иҫәбенән тип күрһәтелеп, бер юлы 4 мәктәп: Ахун, Ҡунаҡбай, Иманғол, Урал мәктәптәре типовой биналары төҙөлдө; капитал һалымдар иҫәбенән 3 типовой мәктәп бинаһы һалынды: Сәфәр, Илсе, Комсомол мәктәптәре, Сәфәр мәктәбе эргәһендә 2 ҡатлы интернат төҙөлдө. Кәрим Хөснулла улының «Миәсзолото», «Главзолото» (Свердловск) етәкселәре менән килешеүе, уртаҡ тел таба алыуы һөҙөмтәһендә Поляковка ауылында яңы 2 ҡатлы мәктәп бинаһы ҡалҡып сыҡты. Быларҙан тыш, Һөйөндөктә, Ҡорамала, Илтабанда, Рысайҙа, Кирәбелә, Бәләкәй Ҡаҙаҡҡолда, Ғәлиәхмәрҙә, Иҫтамғолда ағастан яңы мәктәптәр һалынды. 60-сы йылдар уртаһында Учалы районының даны Рәсәй күләмендә яңғырап торҙо, учалыларҙың эш тәжрибәһен өйрәнергә беҙҙең төбәккә бик күп етәкселәр, делегациялар килде.

Был әлкәлә бөгөнгө көндә лә бик күп эш башҡарыла: Учалыла, Рысайҙа, Абзаҡта яңы мәктәп биналары һалына.

Учалы ҡалаһына килһәк, бында 8 урта, 2 башланғыс мәктәптә алты меңгә яҡын бала белем ала, уларҙа 500-ҙән артыҡ уҡытыусы эшләй.

**Районыбыҙҙан сыҡҡан күренекле ғалимдарыбыҙ.**

Учалы йәштәре һуғыштан һуңғы осорҙа ла, бөгөнгө көндә лә күпләп юғары уҡыу йорттарына инәләр, бик күптәре ғилми эш менән шөғөлләнеп, фәндәр кандидаттары, докторҙары званиеларын алып, университеттарҙа, институттарҙа эшләйҙәр. Яҡынса иҫәпләүҙәр районыбыҙҙың йөҙгә яҡын фәндәр кандидатын һәм тиҫтәгә яҡын фәндәр докторын биреүен күрһәтә.

Фән докторҙары араһында Ураҙ ауылында тыуып-үҫкән Наил Хәйбулла улы Заһиров айырым урын тота. Техник фәндәр докторы, профессор, РСФСР-ҙың атҡаҙанған фән һәм техника эшмәкәре, Красноярск ҡалаһындағы төҫлө металдар институтында уҡыта.

Ишмөхәммәт Ғилметдин улы Ғәләүетдинов — Сораман ауылынан. Башҡорт филологияһы буйынса күренекле белгес, фән докторы. Бөгөнгө көндә Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының төп ғилми сәркәтибе, Башҡорт дәүләт университеты профессоры.

Хәйрулла Мортазин Ҡаҙаҡҡол ауылында тыуып үҫкән, физика-математика фәндәре докторы. Башҡорт дәүләт университетында уҡыта.

Әҙәбиәт һәм фольклористика ғилемендә бик ҙур хеҙмәт күрһәткән, был донъянан бик иртә киткән Марат Минһажетдинов менән яҡташтары хаҡлы рәүештә ғорурлана. 1994 йылда район һәм республика

йәмәғәтселеге уның тыуыуының 60 йыллығын киң билдәләп үтте, тыуған ауылы Ҡобағошта ошо уңай менән хәтер көнө үткәрелде.

Фән кандидаттарынан яҡташтарыбыҙ араһында түбәндәгеләр айырыуса киң билдәле: филологтар Әхмәр Аҙнабаев (Ҡобағош), Барый Әхмәтшин (Ҡарағужа), Гөлфиә Даянова (Илтабан), Гөлнур Шәрипова (Ҡунаҡбай), Илдус Бүләков (Ҡаҙаҡҡол), философ Урал Вилданов (Илсе), тарихсы Рияз Мәсәлимов (Рысай), педагогия фәндәре кандидаты Туғыҙаҡ Йәһүҙин, техник фәндәр кандидаттары: Алмас Зарипов (Учалы), Салауат Харис улы Төпәев (Кәрим); Йыһаншин Сабир Шәйәхмәт улы — педагогия фәндәре кандидаты (Мансур), Шәрәфетдинов Әҙһәм Ғәни улы — техник фәндәр кандидаты (Ҡарт Муйнаҡ).

## Әҙәби тормош.

Һуғыштан һуңғы осорҙа урыҫ телендә «Зауралец» һәм башҡорт телендә «Сталин байрағы» исемле район гәзиттәре сығып килә. 1932 йылдан алып «Серп и молот» исемле район гәзите («Ураҡ һәм сүкеш» исеме аҫтында башҡортса дубляжы) сығып килде. 1991 йылдан алып Учалыла башҡорт телендә үҙ аллы «Яйыҡ» исемле гәзит сыға. Был хәл район халҡы өсөн ҡыуаныслы ваҡиға булды (мөхәррире — Рәсих Лоҡманов).

1991 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзының Учалы бүлексәһе ойошторолдо.

1993 йылдан алып Учалы телевидениеһы үҙ тапшырыуҙарын алып бара (баш редакторы — Лариса Һөйөндөкова).

Сирек быуат буйына үҙенең йөкмәткеле тапшырыуҙары менән район-ҡала халҡының төрлө яңылыҡҡа, йыр-моңға булған зауығын Учалы радиоһы ҡәнәғәтләндерә (етәксеһе — Рафаэль Айсин).

1992 йылдан Учалыла «Өлкәр» исемле альманах даими рәүештә сығып килә, йәш таланттарҙы асыуҙа, уларҙы үҫтереүҙә альманахтың тоҡҡан урыны баһалап бөтөргөһөҙ ҙур. (Ойоштороусылары — Учалы ҡала һәм район хакимиәте, Учалы Яҙыусылар ойошмаһы).

Бәрәкәтле Учалы ере Башҡортостан Яҙыусылар союзында ағза булып торған 8 яҙыусы һәм шағирҙың тыуған төйәге ул. Түбәндә уларҙың исемлеген килтерәбеҙ:

1. Талха Ғиниәтуллин (Анатолий Генатуллин) — урыҫ телендә яҙыусы прозаик, Ураҙ ауылынан;
2. Ғәзим Аллаяров. Ураҙ ауылынан сыҡҡан прозаик. 10-ға яҡын китап авторы. Хәҙерге көндә мәрхүм.
3. Нәжибәк Хафизов. Ураҙ ауылынан. Сатира һәм юмор әлкәһендә эшләне. Мәрхүм. 3 китап авторы.
4. Мөхәммәт Хәйҙәров. Өргөндән. Прозаик һәм драматург. 10-ға яҡын китап авторы.
5. Мәүлит Ямалетдинов. Аһылайҙан. Шағир һәм прозаик. 7 китап авторы.
6. Рәмзилә Хисаметдинова. Сәфәрҙән. Мәрхүмә. Шағирә, 3 китап авторы.
7. Вил Ғүмәров. Ҡобағоштан. Мәрхүм. 2 китап авторы. Публицист һәм шағир.

8. Гүзәл Ғәлиева. Иманғолдан. Шағирә, 3 китап авторы.

Учалынан сыҡҡан яҙыусы, шағирҙар исемлеге ошо 8 кешенән генә тормай: Миндәктән яҙыусы-летчик А. Сиражетдинов, фронтовик-яҙыусы Виталий Чернов, Сәфәрҙән шағирә Әлмирә Әбүзәровалар ҙа үҙҙәренең әҫәрҙәре менән халыҡ араһында киң танылыу алдылар.

Өфөлә йәшәгән Рәүеф Насыров — повесть, хикәйәләр авторы, очерксы, тыуған яғыбыҙҙың бай тарихын пропагандалаусы журналист. Ул Шакирйән Мөхәмәтйәновты халҡына, иленә ҡайтарыусы шәхестәребеҙҙең береһе.

Әлбиттә, ҡәләм тирбәтеүселәребеҙҙең исемлеге ошонда ғына туҡтап ҡалмай. Районыбыҙ, республикабыҙ халҡын үҙҙәренең очерктары, хикәйәләре, шиғырҙары, йөкмәткеле мәҡәләләре менән ҡыуандырыусылар араһында Рәсих Лоҡмановты (Көҙөй), Инсур Йәһүҙинде (Илтабан), Ишмөхәммәт Шараповты (Наурыҙ), Миңлебай Юлмөхәмәтовғы (Сәфәр), Флүзә Әхмәҙиеваны (Яңы Байрамғол, хәҙер мәрхүмә), Әхмәҙиә Шәриповты (Миндәк), Рәйҙә Мөхәмәтйәрованы (Рысай), Эдгар Вилдановты (Наурыҙ), Минзәлә Шөғәйепованы (Ураҙ), Рәмзилә Кәлимованы (Сәфәр), Фәрит Хәсәновты (Өргөн), Рәжәп Усмановты (Малай Муйнаҡ), Рафаэль Айсинды (Ҡунаҡбай), Салауат Рәсүлевты (Ҡәйепҡол) һәм башҡа бик күптәрҙе күрәбеҙ.

## Сәнғәт.

Һуғыш йылдарының ауырлыҡтарына ҡарамаҫтан, мәҙәни тормош дауам итә. 1944 йылдың октябрендә Учалы районында опера театры асыу теләге менән Өфөнән Булат Имашев Учалы ауылына (ул саҡтағы район үҙәгенә) килә. 40 көн эсендә, йәғни 1944 йылдың 28 ноябренә, Учалыла колхоз-совхоз драма театрын асыуға ирешә ул. 3—4 йыл эсендә сәхнәлә 7 ҙур спектакль ҡуйҙырта. Драма коллективының тәүге ағзалары (халыҡ телендә уларҙы «Имаш емештәре» тип атап йөрөтәләр): Әлим Усманов, Рәфиғә Хәйбуллина, Мөхәммәт Зәйнуллин, Ураҙбай Мәсәлимов, Ғариф Ғәйфуллин, Рәшит Мәхмүтов, Шәмсиә Мөбәрәкова, Әхтәм Хәйбуллин, Нурҙиҙә Шәрипова, Фатима Солтанова, Ғәни Мәхмүтов һ.б.

РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, Хеҙмәт Ҡызыл Байраҡ ордены кавалеры Б. Имашев ғәжәп талантлы актер була; 1937—39 йылдарҙа Башҡорт дәүләт академия театрында баш режиссер, опера театрының тәүге директоры, сәнғәт техникумы уҡытыусыһы, сәхнәлә беренсе булып Салауат Юлаев образын һынландырыусы һоҡландырғыс шәхес була ул.

Юҡ ғәйепте бар итеп, уны күрә алмаусылар мораттарына ирешә — һәйбәт кенә эшләп йөрөгән еренән Булат Имашев ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Төрмәнән сыҡҡас, ул Өфөнө ҡалдырып, Учалыға ҡарай юллана ла инде. Ташып барған энергияһы, үҙ эшенә бирелгәнлеге, халыҡты яратыуы Имашевҡа ҡаты һуғыш шарттарында, буш урында, гөрләп торған театр ойошторорға мөмкинселек бирә. Ниндәй ҡыйынлыҡтар килгәндә лә ебеп төшмәүе, милләтем тип, уның мәҙәни үҫеше тип янып йөрөүе уның һәләкәтенә сәбәпсе була — Учалынан Өфөгә китеп барған ерендә, вагонда үлтерелә. 38 йәшендә, халҡыбыҙҙың

арҙаҡлы шәхесе Булат Имашевтың ғүмере шулай фажиғәле рәүештә өҙөлә. Шул уҡ йылда (1948) Учалы драмтеатры ла ябыла.

Әлбиттә, Булат Имашевтың үлеме ул сәсеп ҡалдырған орлоҡтарҙың шытып сығыуын туҡтата алмай. Сәнғәткә, йыр-моңға һөйөү рухы районыбыҙ ауылдарына, һәр өйгә үтеп инә.

«Байрамғол» совхозының «Ләйсән» бейеү ансамблен кем генә белмәй икән?! Ансамблде башҡорт хореография сәнғәтенең атаһы Фәйзи Ғәскәров ойоштора. Бына өс тиҫтә йыл инде «Ләйсән» ансамбле үҙенең сағыу сығыштары менән халыҡтың рухи тормошон биҙәй, милләтебеҙгә дан артынан дан өҫтәй. Учалыларҙың бейеү оҫталығына элекке СССР тамашасылары ғына түгел, ә донъяның күп кенә илдәренең тамашасылары ла хайран ҡалдылар.

